КИТАП

БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ 6

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

# 6



# Башҡортостандың ете мөғжизәһе



«Урал батыр» эпосы

Урал юлы — бейек тау,
Урал гүре — данлы тау —
«Урал» булып ҡалған, ти.

*(«Урал батыр» эпосынан)*



Салауат Юлаев һәйкәле

*(скульпторы С. Д. Тавасиев)*

Оран һалып илгә, һай, Салауат
Мәңгелеккә әйҙәй сафтарын.

*(Рәми Ғарипов)*



Шүлгәнташ мәмерйәһе



Мәңгелек дан, Шүлгән —
Ҡасандыр һин,
Елдән һаҡлап ырыу усағын,
Бәүеткәнһең, көйләп, таш бишектә
Кешелектең сабый бер сағын.

*(Булат Рафиҡов)*



«Янғантау» шифаханаһы

Янғантауым,
          һинең ҡуйыныңда
Ил йөрәге тибә,
          ил уты.

*(Рәшит Шәкүр)*

**Форзацта Б. Хәйбуллин һүрәте, Н. Ғәлиев, Ю. Кәримов фотолары файҙаланылды**

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

# 6

**Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн уҡыу ҡулланмаһы**

ӨФӨ • 2017

Автор-төҙөүселәре:
*М. Б. Юлмөхәмәтов, М. Х. Иҙелбаев,*
*Ә. М. Сөләймәнов, З. И. Ҡазыева*

**Башҡорт әҙәбиәте :** уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы / [авт.-төҙ.: М. Б. Юлмөхәмәтов, М. Х. Иҙелбаев, Ә. М. Сөләймәнов, З. И. Ҡазыева]. — Өфө : Китап, 2017. — Һүрәттәре менән 236 бит.

Б28

ISBN 978-5-295-06797-6

**УДК 373.167.1:82**
**ББК 83.3 (2 Рос=Баш)-922**

**ТП – 2017**

**ISBN 978-5-295-06797-6**

© Юлмөхәмәтов М. Б., Иҙелбаев М. Х., Сөләймәнов Ә. М., Ҡазыева З. И., 2012
© Кәримова З. И., дизайн, 2012
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

## БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ ФЛАГЫ

Ҡәҙерле уҡыусылар! Һеҙҙең белеүегеҙсә, Башҡортостаныбыҙҙың үҙаллылығын билдәләүсе символдар бар. Улар — Дәүләт гербы, Дәүләт флагы, Дәүләт гимны. Был символдар республикаға исем биргән башҡорт халҡының үҙенсәлеген һәм традицияларын сағылдыра.

Дәүләт флагы өс төҫтә. Төҫтәр — беҙҙең шартлы билдәләр. Флагтың **күк** төҫө — республика халҡының сафлығы, изгелекле булыуы һәм яҡты хыялдарының сағылышы. **Аҡ** төҫ — халыҡтың тыныслыҡ һөйөүе, яҡты йөҙлөлөгө, үҙ-ара хеҙмәттәшлеккә ынтылып тороуы һәм яҡты киләсәккә өмөтө. **Йәшел** төҫ – азатлыҡтың үҙгәрешһеҙ, мәңге булыуы.

*Фәрзәнә* ***ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА***

### БАШҠОРТОСТАН ФЛАГЫ

Башҡортостан флагы
Тора өс төрлө төҫтән:
Күк, аҡ, йәшел, ә уртаға
Ҡурай сәскәһе төшкән.

Зәңгәр төҫө — ул халҡымдың
Уй-ниәте, сафлығы,
Аҡ төҫ — ул именлек төҫө,
Хеҙмәттәшлек, паклығы.

Ә йәшел — ул азатлыҡ,
Мәңгелек йәшәү төҫө.
Суверенлы илдә генә
Халҡым булмышы, көсө.

Ҡурай сәскәһе ете таж,
Нигеҙе — ете ырыу,
Бар милләттәр менән бергә
Бәхетле тормош ҡороу.

Республикамдың флагы
Зәңгәр күккә талпына,
Бәхет юрай, шатлыҡ теләй
Бай тарихлы халҡыма.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Башҡортостандың флагы ҡасан ҡабул ителгән?
2. Башҡортостан флагының авторҙарын әйтегеҙ.
3. Ундағы төҫтәр нимә тураһында һөйләй?
4. Ватаныбыҙ — Рәсәй Федерацияһы һәм тыуған төйәгебеҙ — Башҡортостан Республикаһы флагтарын ҡарап, һәр төҫөнә аңлатма бирегеҙ.
5. Республика флагы ниндәй осраҡтарҙа ҡулланыла?
6. Дәфтәрегеҙгә Башҡортостан флагы һүрәтен төшөрөгөҙ.



# Беренсе бүлек

## АЛТЫН ҺУҠМАҠ

*Сафуан* ***ӘЛИБАЕВ***

### МӘКТӘП ЮЛЫ

Ерҙә, күктә, диңгеҙҙәрҙә —
Был донъяла юлдар тулы.
Тик барынан яҡынраҡ,
Ҡәҙерлерәк мәктәп юлы.

Бына тағы еҙ ҡыңғырау
Иртүк сыңлап һөрән һала.
Ошо юлдан тағы атлай,
Сәскә тотоп, күпме бала.

Сәскә төҫлө яҡты ғүмер
Һәр бер әсә теләп ҡала.
Сәскәләй саф уйҙар менән
Уҡытыусы ҡаршы ала.

Был юл ҡыҫҡа, яҡын төҫлө:
Һәр тупһанан —
мәктәпкәсә,
Ләкин шунан барған ғына
Иң-иң алыҫ юлға күсә.

Ер аҫтында, ер өҫтөндә
Күпме юлдар —
                    таҫма һымаҡ,
Диңгеҙҙәрҙе ярып үтә,
Йондоҙҙарға илтә һуҡмаҡ.

Башлана һуң улар
                    ҡайҙан?
Улар башы — мәктәп юлы,
Ул — тынғыһыҙ белем юлы,
Һәр кем изге күрә уны.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Ни өсөн шағир мәктәп юлын барыһынан да ҡәҙерлерәк тип атай?

*Ярулла ВӘЛИЕВ*

## БЕРЕНСЕ КӨН

Уҡыуҙар башланыуын Исмәғил һағынып көтөп ала тиһәң, бик үк дөрөҫ булмаҫ ине. Юҡ, ул йәйге ял көндәрен күберәк ярата. Тау башына менеп, унда йәйге таңды ҡаршылауға, урман аҡланындағы йәшел үләндә аунап, төрлө-төрлө һүрәткә кереүсе аҡ болоттарҙы күҙәтеп ятыуға, эҫе көндә, ағас күләгәһенә ултырып, балыҡ ҡаптырыуға, Ағиҙелдә иңләп-буйлап һыу кереүгә ни етә?

Таң әтәстәре менән бергә һикереп тораһың да, бер телем икмәк ҡыҫтырып алып, сығып та йүгерәһең. Ысыҡлы үләндә эҙҙәреңде ҡалдырып, тау башына менеп баҫаһың. Әлегәсә, япраҡтарын шыбырлатып, һине яңғыҙ ҡайын ҡаршы ала. Күп тә үтмәй, ҡояш сыға. Бына шунда инде ул матурлыҡ! Иркә нурҙар ысыҡ тамсыларына сума. Ошо бәләкәй генә тамсыларҙа салауат күперенең бөтөн буяуҙары сағыла! Улар торған һайын үҙгәрә, яңынан-яңы төҫкә инә. Донъяңды онотаһың... Күреп туймаҫлыҡ!

Гел генә рәхәт булып тормай шул инде. Йәйге миҙгел — бер ҡолас. Үткәнен һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Һағынып көтәһеңме-юҡмы — беренсе сентябрь килеп тә етә. Мәктәпкә рәхим ит!

Бына Исмәғил беренсе булып килеп тә етте. Иртә ине әле. Кластарҙы баштан-аяҡ ҡарап сығырға ла була. Буяу һәм известь еҫе аңҡып торған бүлмәләрҙе ҡарап, оҙаҡ йөрөнө Исмәғил. Бында һәр нәмә яҡын, ҡәҙерле. Хатта еҫтәре лә тәмле кеүек.

Исмәғил тышҡа күҙ һалды. Бәләкәстәр йыйыла башлаған ине. Ҡулдарында сәскә. Ә үҙҙәре, ҡурҡынған төҫлө, ата-әсәләренә һыйыналар. Ғәжәп түгел, тәүҙә кем дә шулай тартынып ҡына килә инде.

Әкрен генә атлап, Исмәғил мәктәп ихатаһына сыҡты. Инергә ҡыймайынса, ҡапҡа артында баҫып торған бер малайҙы күрҙе.

— Уҡырға килдеңме? — тип һораны ул, малайҙың янына барып.

— Эйе, — тип яуап бирҙе малай, мыш-мыш танауын тартып.

— Уҡырға килгәс һуң, ниңә инмәйһең?

— Малайҙарҙан ҡурҡам.

— Ниңә һуң атайың йә әсәйең оҙатып килмәне?

— Өләсәйем менән генә торам мин. Ауырып ята әле ул. Ә атайым ҡалала йәшәй, әсәйем — Собханғолда кейәүҙә, — тип бөтөн серен асып бирҙе малай. Исмәғил һыҙғырып ебәрҙе. Бына нисек! Йөрәге өшөп киткәндәй булды. Ул ололарса көрһөнөп ҡуйҙы:

— Уф-ф-ф! — Әммә Исмәғил үҙе уға ҡарағанда бәхетлерәк булған икән әле...

...Исмәғил үҙенең дә бына шулай беренсе тапҡыр мәктәпкә килеүен хәтерләне. Ай-һай, нисек түҙемһеҙләнеп көттө ул ошо көндө! Аҙна буйына атаһына тынғы бирмәне.

— Йә, бөгөн барабыҙмы инде? — тип ҡаршылай ине ул һәр иртәне. Мәктәп формаһын кейеп ала ла көҙгө алдына баҫа. Килешәме, йәнәһе. Шунан китабын, дәфтәрҙәрен аҡтарырға тотона.

Исмәғилде беренсе сентябрь көндө мәктәпкә атаһы етәкләп алып килде. Ә мәктәпкә килгәс, нишләптер, малай ҡойолоп төштө. Пыр туҙып йүгереп йөрөгән малай-

ҙар төртөп йығып китерҙәр кеүек тойолдо уға. Үҙе лә һиҙмәҫтән, атаһының ҡулына нығыраҡ тотондо. Улының хәлен аңлап, Ғәзим ағай:

— Өйрәнерһең, улым, өйрәнерһең! — тип арҡаһынан һөйҙө. Йыйылып бөткәс, уҡытыусы балаларҙы, икешәр-икешәр теҙеп, класҡа алып инде.

— Хәйерле сәғәттә, улым! — тип ҡул болғап тороп ҡалды Ғәзим ағай.

Тағы ла бер бәхетле көн иҫенә төштө Исмәғилдең. Уныһы уҡыу йылы аҙағында булды. Бөгөнгөләй күҙ алдында тора әле ул көн.

Исмәғил уянғанда, әсәһе сәй әҙерләп йөрөй ине. Улының иртәләүен күреп, иркә тауыш менән:

— Етеҙләнеп киткәнһең, улым! Мин әйткәнде лә көтмәгәнһең, — тине.

Исмәғил әсәһенә һыйынды.

— Йоҡо килмәне, әсәй.

Атаһы йыуынып йөрөй ине. Таҫтамалын элде лә ул башын сайҡап ҡуйҙы:

— Эй әсәһе, әсәһе! Шуны ла аңламай тораһың. Икенсе класҡа күсә бит ул бөгөн. Бер баҫҡысҡа өҫкә үрләй. Шулай булғас, нисек йоҡлап ятһын, ти? Бөгөн минең дә йоҡом ҡасты. Улыңдың йыл буйына уҡыу нәтижәһен аңлатһындар ҙа, һин, ата була тороп, йоҡлап ят, имеш. Шулай бит, улым?

Исмәғил, бер һүҙ өндәшмәйсә, атаһын ҡосаҡлап алды ла уның итәгенә һикереп менеп ултырҙы. Әй рәхәт инде!

— Йә, улым, эшең нисек булыр икән? — тине Ғәзим ағай, сәйгә ултырғас. — Күсмәйсә ҡалмаҫһың бит, ә?

Исмәғил ҡыҙарҙы. Уның да башында: «Ысынлап та, нисек булыр икән?» — тигән уй сыуала ине. Яуап көтөп, атаһы күлөмһөрәп уға ҡарай һәм алдына килгән сынаяҡтарҙы ашыҡмай ғына бушата.

— Ҡуй әле, атаһы, беҙҙең улыбыҙ йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерә буламы һуң! — тип Ғәзизә һүҙгә ҡушылды. — Мин уҡытыусыһы менән һөйләшеп кенә торам. Үҙе лә йыш килә. «Улығыҙ яҡшы уҡый»ҙан башҡаны әйткәне булманысы.

— Яҡшы булырға тейеш тә!

Исмәғил йыйылышҡа йәнә атаһы менән етәкләшеп барҙы. Был юлы инде, ҡыйыу атлап, иптәштәре араһына кереп китте. Беренсе көндәге кеүек тартынып тороу ҡайҙа ул!

Йыйылыш башланды. Уҡытыусы балаларҙың өлгәшеүҙәре, икенсегә күсеү-күсмәүҙәре тураһында һөйләй. Бөтөн күҙҙәр уға төбәлгән. Уның ауыҙынан сыҡҡан бер генә һүҙҙе лә ишетмәйенсә ҡалмайым тигәндәй, һәр кем йотлоғоп тыңлай, үҙенең исеме сыҡҡанды түҙемһеҙлек менән көтә.

Исмәғил ҡалтыранып ҡуйҙы, ҡулдарын ыуғылап алды. Бына хәҙер... уның исеме. Тиҙ генә атаһына күҙ ташланы. Ул, гәҙәттәгесә, уҡытыусынан күҙҙәрен дә алмайынса, тыңлап ултыра.

Исмәғилдең «дүртле» һәм «бишле» билдәләре теҙелеп үтте. Уҡытыусының: «Күсә!» — тигән ҡәҙерле һүҙе ишетелде.

— Яҡшы уҡыуы өсөн,— тине уҡытыусы, — Исмәғилгә китап бүләк ителә.

Бик матур тышлы китап ине ул!

Йыйылыштан улар бик-бик күңелле ҡайттылар.

— Рәхмәт, улым! — тине атаһы, Исмәғилдең башынан һыйпап.

Исмәғил әле лә ул ҡулдарҙың йылыһын тоя кеүек...

**Һорауҙар һәм эштәр**

Беренсе тапҡыр мәктәпкә килгән көнөгөҙҙә ниндәй тойғолар кисергәнегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ.

*Яҡуп ҠОЛМОЙ*

## МӘКТӘП

Кесе йәштән йөрәккә дәрт,
Күңелгә шатлыҡ өҫтәй.
Шуға мәктәп яҡын һиңә,
Тыуып үҫкән өйөңдәй.

Һин унда беренсе тапҡыр
Дәфтәр битен асаһың.
Елкенгән ҡошсоҡтай, йыл да
Бер баҫҡысҡа баҫаһың.

Тәүге һыҙған тура һыҙыҡ
Мәңге һаҡлана иҫтә.
Барыр юл да шулай тура —
Яҡты көндәргә илтә.

Һин яҙған тәүге хәрефтән
Башлана тормош яҙың.
Шул мәктәптән үрмәләйһең
Фән тауына, юл ярып.

Мәктәбеңдә тамыр йәйә
Һүнмәҫ йәшлегең һинең.
Шунда ҡояш, шунда ал таң,
Шунда нурлана көнөң!

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Мәктәптә уҡыған йылдар ҡояшҡа, ал таңға, нурланған көнгә сағыштырыла. Ни өсөн?
2. «Шуға мәктәп яҡын һиңә, тыуып үҫкән өйөңдәй» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ? Шағирҙың ошо һүҙҙәре менән ризаһығыҙмы? Әгәр риза булмаһағыҙ, үҙ фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.

***Ризаитдин ФӘХРЕТДИН***

## МӘКТӘП

*(«Нәсихәттәр» китабынан)*

Үҙегеҙ һис бер яҡҡа ауышмай, туп-тура мөғәллимгә ҡарап, иптәштәрегеҙ менән бер тигеҙ булып, тирә-яҡҡа ҡарамай, боролмай, күңелегеҙҙән шатланып ултырығыҙ. Мәктәпкә инеп-сығып йөрөгәндә инсафлы булығыҙ.

Мәктәп эсендә булған тауыштарға ҡатнашмағыҙ, шаярыусы һәм тәрбиәһеҙ балалар менән иптәш булма-

ғыҙ. Улар менән бер урында ултырмағыҙ, үҙегеҙгә билдәләнгән урындан рөхсәтһеҙ күсмәгеҙ.

Дәрес бирелгәндә, икенсе дәрестәргә ҡарамағыҙ. Мөғәллим тарафынан бирелгән дәрескә тулыһынса күңел һалығыҙ. Һәр нәсихәтте зиһенегеҙгә урынлаштырығыҙ. Дәрес ваҡытында һөйләшмәгеҙ, башҡа нәмәгә күңелдәрегеҙҙе ебәрмәгеҙ. Бының өсөн остаздарығыҙҙан ризалыҡ алығыҙ. Ғилемегеҙҙән файҙа күрерһегеҙ.

Мөғәллим һораған ваҡытта аяҡ өҫтө тороп, ҡулдарығыҙҙы күкрәгегеҙгә ҡуйып, хөрмәт менән мөғәллимгә ҡарап тороғоҙ, һорағанын яҡшы аңлағыҙ, һуңынан белгәндәрегеҙҙе асыҡ тауыш менән яуап бирегеҙ. Иптәштәрегеҙгә бирелгән һорауға ҡыҫылмағыҙ.

### Һорауҙар һәм эштәр

1. Ризаитдин Фәхретдин үҙенең был «Мәктәп» тигән мәҡәләһен бынан бик күп йылдар элек яҙған. Унда уҡыусыларҙың үҙ-үҙҙәрен тотоу ҡағиҙәләре бөгөнгө көн тарафынан ҡуйылған тәртип ҡағиҙәләренә тап киләме? Тап килмәгән урындары булһа, сәбәптәрен аңлатып ҡарағыҙ.
2. Түбәндәге әйтемдәрҙе, мәҡәлдәрҙе уҡығыҙ һәм һәр берәһенең мәғәнәһен аңлатып ҡарағыҙ. Һеҙгә уларҙың ҡайһыһы нығыраҡ оҡшаны?
3. Үҙегеҙгә оҡшаған мәҡәл буйынса телдән хикәйә төҙөгөҙ.

* * *

Белем байлыҡтан артыҡ.

Белмәү ғәйеп түгел, белергә теләмәү ғәйеп.

Беләге йыуан берҙе йығыр, белеме йыуан меңде йығыр.

Белеме бар хур булмаҫ.

Белемле үлмәҫ, белемһеҙ көн күрмәҫ.

Ер яуын менән, кеше белем менән йәшәрер.

## Икенсе бүлек

## УЙҘЫҢ КҮРКЕ — ТЕЛ, ТЕЛДЕҢ КҮРКЕ — ҺҮҘ

### ЗӘЙНӘБ БИИШЕВА
### 1908—1996



Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев премияһы лауреаты Зәйнәб Биишева балалар өсөн күп кенә әҫәрҙәр ижад итте. «Партизан малай» хикәйәһен, «Дуҫлыҡ» пьесаһын, «Йәнле хәрефтәр» тигән шиғри әлифбаһын, әкиәттәрен, «Дуҫ булайыҡ» повесын төрлө быуын балалары яратып уҡый.

Зәйнәб Биишева төрлө жанрҙарҙа эшләне: шиғырҙар, поэмалар, драмалар, хикәйәләр, повестар ижад итте. Уның иң ҙур әҫәре – «Яҡтыға» трилогияһы. Ул «Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында» һәм «Емеш» исемле өс китаптан тора.

### БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
Эй, илһамлы, эй, хөрмәтле башҡорт теле.
Күгәреп ятҡан Уралыңдай бай, йомарт һин,

Серле ҡамыш ҡурайындай ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй йор, зирәк һин,
Эй, һөйөклө, эй, ҡәҙерле башҡорт теле.

Диңгеҙҙәргә тиңләмәйем — тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем — гүзәлһең һин,
Ҡаяларға тиңләмәйем — бөйөкһөң һин,
Эй, хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле.

Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың яугир юлын,
Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,
Эй, бәхетле, эй, ҡәҙерле башҡорт теле.

Иң, тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин бит йәшәү, бәхет үҙең,
Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле — минең телем.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Туған телдең кеше тормошондағы роле һәм уның әһәмиәте тураһында нимә әйтә алаһығыҙ?
2. Шиғырҙың тәүге өс строфаһында телдең сифатын төрлө яҡлап асҡан юлдарға иғтибар итегеҙ. Шул юлдарҙы тасуири итеп уҡып күрһәтегеҙ.
3. Рәми Ғариповтың «Туған тел» шиғыры менән сағыштырығыҙ, айырмалы үҙенсәлектәрен табығыҙ.
4. «Башҡорт теле» шиғырына композитор Айрат Ҡобағошов музыка яҙған. Шул йырҙы йырларға өйрәнегеҙ.

*Ҡәҙим АРАЛБАЙ*

## БАШҠОРТ ҠОРОЛТАЙЫНА

Сәсәндәр ораны донъяны ураһын,
Ҡурайҙар тупланыу көйҙәрен уйнаһын,
Ҡоролтай турында бар ғаләм тыңлаһын,
Башҡортта азатлыҡ тойғоһо уянһын!

Ҡоролтай — ҡоро дау, лаф ороу булмаһын,
Конгресс — ҡаңғырыш, ҡан ҡойош булмаһын.
Башҡортта боронғо олпатлыҡ уянһын,
Ғорурлыҡ,үҙаллыҡ тойғоһо тулаһын!

Был быуат ҡояшы байыуға барғанда,
Низағтар хәл итеш атышҡа ҡалғанда,
Күп милләт яҙмышын ҡулына алғанда,
Башҡортом ымһынып ҡалмаҫ ул ялғанға.

Ҡоролтай — гел байрам, уйын-йыр түгел дә,
Тормоштар шәплектән уйнаҡлау түгел дә;
Был йыйын — иреккә һыуһаған күңелдәр,
Ул — халҡым өмөтө сыраҡһыҙ төнөндә.

Ут йотҡан, яу кискән, бөлөнгән башҡортом,
Тарҡалған күстәрҙе туплаған Баш ҡортом.
Ҡоролтай саҡыра: ҡайтып бер баш ор, тип,
Ҡурсалар атайсал — Уралың, баш йортоң.

Сәсәндәр ораны донъяны ураһын,
Ҡурайҙар тупланыу көйҙәрен уйнаһын,
Ҡоролтай саң ҡаға — бар ғаләм тыңлаһын,
Башҡортта берҙәмлек тойғоһо уянһын!

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙа ниндәй ваҡиға тураһында һөйләнелә?
2. Ҡоролтайҙар тураһында һеҙ нимә беләһегеҙ?
3. Беренсе башҡорт Ҡоролтайы ҡасан һәм ҡайҙа булған? «Башҡортостан тарихы» фәне буйынса өйрәнгәнегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ.
4. Ҡоролтайҙа ниндәй мәсьәләләр ҡарала?
5. Нисә башҡорт Ҡоролтайын беләһегеҙ?

***Рауил БИКБАЕВ***

## ХАЛҠЫМА ХАТ

*(Поэманан өҙөк)*

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.

Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарға яҙмаған.
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған.

Нисәнсе ҡат даулап азатлығын
Урал да ғына тигән баш йортта,
Батшалыҡтың тәхетен дер һелкетеп,
Күтәрелгән тағы башҡорттар.

Ҡыйралһа ла ирҙәр,
Тамыры ҡалған
Ирек өсөн ташҡан кәр, сәмдең,
Батырҙарҙы палач дарға аҫҡан,
Яугирҙарҙың киҫкән ҡолаҡтарын,
Телен киҫкән күпме сәсәндең.

Башҡорт илен тотош утҡа солғап,
Тәфтиләүҙәр ниҙәр ҡылмаған.
Тик, батшалар телен киҫкәндә лә,
Башҡортом бит телһеҙ булмаған!

...Телле көйө телһеҙ башҡорттар бар,
Әсә телен белмәй үҫкәндәр...
Бармы ерҙә үҙ ҡулдары менән
Сабыйының телен киҫкәндәр?

Телен ҡырҡҡан саҡта батырҙарҙың
Алҡымына ҡандар тулғанда,
Уйлауы ла хатта ҡурҡыныс бит —
Көткәндәрме үҫер тиеп бер саҡ
Телле көйө телһеҙ уғландар?

Туғанынан яҙған — ярты йәтим,
Туған теленән яҙған — мең йәтим,
Телде йоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Туған тел хаҡында һөйләгәндә ни өсөн шағир башҡорт халҡы тарихына туҡтала?
2. А. С. Пушкин күргән «телһеҙ башҡорт» тураһында нимә беләһегеҙ?
3. Тел ҡырҡып яҙалау менән телле көйө телһеҙ ҡалдырыу сәйәсәте араһында ниндәй айырма бар?

* * *

Теле барҙың — иле бар,
Иле барҙың — көнө бар,
Көнө барҙың — ҡәҙере бар.

Телен һаҡлаған — илен һаҡлар.

Атай һүҙе — аҡылдың үҙе.

Күҙ етмәҫ ергә һүҙ етер.

Сәсән барҙа телеңде тый.

Әйткән һүҙ — атҡан уҡ.

Тел — күңел көҙгөһө, йән аҙығы.



# Өсөнсө бүлек

## ИЛ ҠЕҮӘТЕ — ИКМӘКТӘ

*Гөлфиә ЮНЫСОВА*

### ЕР УЛЫНА

Яңы бешеп сыҡҡан икмәкме ни,
Боҫрап ята баҫыу алдында,
Ашыҡтыра күктән яҙғы ҡояш,
Һуңлама, тип, ҡайнар сағында.

Ҡайырып та киҫкән икмәк һымаҡ,
Тәүге бураҙналар теленә.
Изге ергә туҡ бөртөктәр менән
Өмөт орлоҡтары күмелә.

Күп тә үтмәҫ, йәшел шатлыҡ булып
Шытым ҡаплар баҫыу-ҡырҙарҙы.
Тик күҙәтмә, бураҙналар кеүек
Маңлайыңда артыр һырҙарҙы.

Йоҡо күрмәй атыр таңдарыңды
Иҫәпләмә алдан, юрама.
...Ярмаланып торған бураҙнанан
Бешкән икмәк еҫе тарала.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙы матур итеп тасуири уҡығыҙ.
2. Гөлфиә Юнысова ни өсөн үҙенең был шиғырын «Ер улына» тип атаған, уйлап ҡарағыҙ.

3. Шағирә образлылыҡ тыуҙырыу өсөн ниндәй сағыштырыуҙар ҡуллана, уҡып күрһәтегеҙ.
4. Иген үҫтереүселәргә һеҙ үҙегеҙҙең рәхмәт һүҙҙәрегеҙҙе ниндәй шиғри юлдар менән белдерер инегеҙ?

*Динис БУЛӘКОВ*

## ҠАРА ИКМӘК

Бригадир Әнүр ағай район үҙәгенән сығыу менән күк айғырҙы үҙ яйына ебәрҙе лә, иртәнән алып төшкә ҡәҙәр колхоз йомоштарын теүәлләп йөрөй торғас, ауырая төшкән олпат кәүҙәһен яҙып ебәреп, кырандастың уң яҡ тирәсенә башын һалды. Көн кисләп килә ине инде. Ҡояш өҙлөкһөҙ ҡыҙҙырыуға ҡарамаҫтан, әленән-әле иҫеп ҡуйыусы еләҫ ел, күренмәҫ ҡулдары менән иркәләп, маңлай тирен ҡатырҙы. Һауала буҙ турғайҙар уйнаны. Бармаҡ башы дәүмәлендәге йәшел күгәүен ат ҡабырғаһына ҡунырға теләп өҙлөкһөҙ безелдәне, тик тегеһе ялбыр ҡойроғоноң шырт ҡылдарын шыйлатып һелтәнеп алғас, йәнә ҡотороноп ситкә ташланды. Юл ситендә сиңерткәләр, скрипкаларын көйләй-көйләй, йыр һуҙҙылар.

Ағиҙел аша һалынған таш күпергә етәрәк, бригадир ҡапыл дилбегәһен тартты.

— Тпр-ру-у-у!.. Һәй, дөлдөл, түҙмәҫ йән, туҡта әле, кемде күрәм мин!..

Уғаса булмай, ыҡсым ғына сумаҙан тотоп алған, ҡуян ҡойроғондай ғына сәс өлтөгөн ҡуҙҙәренә төшөрөп, йылмайып баҫып тороусы ун өс-ун дүрт йәштәр самаһындағы малай күрешергә тип ҡулын да һуҙҙы.

— Һаумыһығыҙ, Әнүр ағай!

— Һай, был ҡартлыҡты әйтәм, ҡарап торҙом-торҙом да танымаҫҡа иттем тәүҙә. Хәтер аҡһаңҡырай хәҙер. Тәки төҫмөрләнем, һин теге түбән ос комбайнер Усмандың улы түгелме һуң?

— Шул, шул, Тәлғәт бит.

— Һе, ҡара һин уны... Тпру-у!.. Йәштәр үҫә, беҙ сүгәбеҙ. Ҡасан ғына әле шыйыҡ тал сыбығын ат итеп



атланып, туҙан туҙҙырып йөрөүсе бала инең. Йә инде, ҡаланан ҡайтып киләһеңме?

— Шулай ине лә, Әнүәр ағай, автобус ниңәлер бик оҙаҡланы бит әле.

Бригадир, көрәктәй яҫы усын маңлайына күтәреп, ҡояшҡа ҡарап алды.

— Әләйһәң, әйҙә, ултыр. Ун саҡрым араны һә тигәнсе елеп үтер ҙә ҡуйырбыҙ.

Тәлғәт кырандастан урын алды. Күк айғыр ҡуҙғалып, тәгәрмәстәр тигеҙ генә келтерләй башлағас, бүленеп ҡалған әңгәмә дауам ителде.

— Мин былай атта йөрөүҙе артығыраҡ күрәм, мырҙа, оҙон юл үҙ иркеңдә була, исмаһам. Унан һуң, машина тигәнең ғәләмәт тиҙ йөрөшлө нәмә, кәрәкле уйҙарыңды ла уйлап өлгөрә алмайһың, тәртәңдең ошо таш күпергә килеп терәлеүен һиҙмәй ҙә ҡалаһың. Хәҙер заманы икенсе, сейле-бешле уй менән районға килергә ярамай. Хөкүмәт юғары аңлы, талапсан. Шулай булғас, беҙҙең дә инде, ваҡытынан алда исемлектән

һыҙып ташламағайҙары, тип тырышҡан эш. Партия сәйәсәтен бик тә аңлайбыҙ, мырҙа, халыҡ тип, көн-төн яна ул. Рабфактың тәүге баҫҡысын тамамлаған кеше әле мин үҙем дә. Бына һин, Тәлғәт мырҙа, һәй, хәтерeңә төкөрәйемде, ҡалала интернат тигән институтта уҡыйһың шикелле, яңылышмаһам.

Малай һүҙсән бригадирҙың һорораҡ төҫ ятҡан хәйләкәр күҙҙәрендә осҡонсоҡтар уйнауын күрмәй ине, буғай, уны төҙәтергә ашыҡты. Күңелләнеп китте:

— Институт түгел ул, Әнүр ағай, урта мәктәп. Хөкүмәт ашата, кейендерә, шуға интернат тип йөрөтәләр.

— Һе, ғәжәп икән! Нисәнсе баҫҡысында уҡыйһың инде хәҙер?

— Һигеҙенсе класҡа күстем быйыл.

Юлсылар араһында бер аҙға һүҙ бөтөп торҙо. Ат, бышҡыра-бышҡыра атлауға күсеп, тау үрләй ине. Ҡалҡыулыҡтың түбәһенә күтәрелеү менән тирә-яҡ, аяҡ төбөндәгеләй, бөтөнләй яҡында ғына йәйелеп ятты. Офоҡ ситендә йәшеллеккә күмелгән Яҡтыкүл ауылы ҡояш нуры аҫтында ереле-ваҡлы өйҙәренең ҡалай түбәләрен йылтыратып ебәрҙе. Берләм юл йәнә йыландай бормаланып түбәнгә табан төштө лә баҫыуҙар араһында юғалып ҡалды. Инде һәр бере ҡарыштан да ашыу туҡ башаҡтар баштарын сайҡап, кырандаста ултырыусы кешеләргә тартылдылар. Әнүр ағай һоҡланыуынан шуларҙың береһен һабағы-ние менән өҙөп алмайынса булдыра алманы. Кинәнеп, арыш һабағының оҙонлоғон ҡоласы менән үлсәне. Башын сайҡап ҡуйҙы ла башаҡты юғары күтәрҙе.

— Уңыш буласаҡ быйыл, мырҙа, уңыш. Күрәһеңме, алтын башаҡты әйтәм, күҙ ҡамаштыра! Йәнә ике аҙнанан урырға төшкәндә лә ярай. Был бит ябай халыҡ өсөн үҙе ҙур шатлыҡ. Әйе, әйе, оло һөйөнөс. Теге, кемде әйтәм, мәшһүр Ленинды, кешенең бәхете лә башаҡта, тигән ул. Бик хаҡ һүҙ, белеп әйткән, мин үҙем дә ошо фекерҙә.

Тәлғәт ҡапыл ғына хәбәр ҡапсығы сиселеп китеүсе бригадирҙың хикәйәһен, тылсымлы йыр ишеткәндәгеләй, йотлоғоп тыңлай ине. Үҙе лә һиҙмәҫтән тырпайы-

шып тороусы мыйыҡтары менән бармаҡтарҙы ҡытыҡлаусы арыш башағын усына һалды.

— Әнүр ағай, — тине ул, тулҡынланып, — мин... бына ошо башаҡ арҡаһында йән дуҫ күреп йөрөгән бер малай менән асыуланыштым бит әле.

Бригадир, көтөлмәгән яңылыҡты ишетеп, бөтә кәүҙәһе менән боролоп уҡ ултырҙы. Аңламай ҡалғанын һиҙҙермәҫкә тырышып, башын сайҡап ҡуйҙы.

— Китсәле, шулай уҡмы ни?!.

— Эйе! Бер класта уҡыныҡ өс йыл буйы, койкаларыбыҙ ҙа һәр саҡ йәнәш торҙо. Ә быйыл килеп... хәйер, нимәһен һөйләп тораһың инде уның.

— Һөйлә, һөйлә, Тәлғәт мырҙа, күңелеңдә таш булып ҡалмаһын, башланған һүҙ — утланған ҡуҙ... — тип тартҡылашҡан булды тегеһе, — күп булһа, берәй ҙур урында эшләүсе бәндәнең улылыр әле, һине, ауыл малайын, рәнйетергә уйлағас.

— Юҡ та, ул... мине рәнйетмәне, үҙем ҡыуып ебәрҙем янымдан. Атаһы тимер юлсы, бик һәйбәт кеше, һәр саҡ күстәнәстәр килтерә торғайны.

— Шулай булһа ла ҡыуҙыңмы?

— Ҡыуҙым. Хәҙер үҙе лә икенсе бүлмәлә йәшәй.

— Хәтәр икән. Нимә өсөн генә йәмһеҙләшкән булдығыҙ инде?

— Нишләп нимә өсөн генә булһын, ти, магазиндағы булкалар алма кеүек ағаста үҫә, тип уйлай ул.

— Ә-ә-ә... — шунда ғына Әнүр ағай, эштең айышына төшөнөп, көрһөнөп ҡуйҙы.

— Ағаста үҫә, ти икән... күргәне булмағандыр, аңлатырға кәрәк ине...

Ниңәлер йөҙө уйсанланып ҡалды, ҡаштары йыйырылды, әле генә күңелле йылмайған күҙҙәре лә һүнеп ҡалды. Дилбегәһен һелккеләп, йәшел бесәндә ҡырын ятҡан килеш уйланып килде. Тәлғәт, ниңә һөйләнем инде был күңелһеҙ хәбәрҙе, тип бошоноп та ҡуйҙы хатта. Ләкин, ауыҙҙан сыҡҡан — ҡош булып осҡан, тигәнде хәтерләп, юл ситен күҙәтә башланы.

Ергә ятып тиерлек үҫкән ҡуш ҡайынлы тәрән соҡорға еткәс, Әнүр ағай тағы йәнләнде. Сылтырап ҡына ағып ятыусы шишмә янында туҡтап, атының ауыҙлы-

ғын һалдырҙы ла үҙе ҡуш ҡайынға ыңғайланы. Әллә күпме баҫып торғас ҡына аҡһай-аҡһай кире килде. Күк айғырҙың муйынынан һөйөп, кырандасҡа ултырҙы. Ҡуҙғалдылар.

— Ошо сылтыр шишмә соҡорона етһәм, уң аяғым тубыҡтан өҫтә һыҙлай башлай, — тип Тәлғәткә ҡарамай ғына һөйләй башланы. — Ултырып ҡалған ҡурғаш киҫәге тынғылыҡ бирмәй, күрәһең.

— Бөйөк Ватан һуғышында яраланғанһығыҙҙыр инде, — тип күрәҙәлек ҡылды күршеһе. Ләкин тегеһе ҡулын һелтәне.

— Юҡ, мырҙа, ошо аяҡ арҡаһында ҡатнаша алманым. Фронт өсөн икмәк үҫтерергә генә яҙҙы миңә. Күптәр яу ҡырында ятып ҡалдылар бит, шуға үҙемде ғәйепле һиҙәм. Йөрәк әрней. Бына мин һиңә, рабфактың тәүге баҫҡысын тамамланым, тип әйтеп ысҡындырғайным. Дөрөҫ түгел ул, мырҙа, уҡырға тура килмәне. Һинең, һеҙҙең быуындың яҡты киләсәгенә, белем алыуығыҙға көнләшеп, ологайып барған көндә алдашып ҡуйҙым, ахыры. Хәйер, рабфакка уҡырға инеүен индем, тик дауам итергә тура килмәне. Тормош ауыр, йылдар ҡараңғы ине ул колхоз төҙөп йөрөгән саҡтарҙа. Бөтә ерҙә йотлоҡ хөкөм һөрҙө, хәҙерге картуф менән ҡара икмәк алтындан да ҡиммәтлерәк ине. Ҡара икмәк!.. Унын ҡәҙерен белергә кәрәк, мырҙа. Бер телемен гәүһәр ташы киҫәге итеп түш кеҫәһенә һалып йөрөтөргә кәрәк. Эйе... бик асыға башлағас, уҡыуҙы ташлап, йәйәүләп ауылға ҡайтып киттем. Балтырған өйрәһе менән туйғансы хушланғас, әсәй бешергән өшәләрҙе, аҙналыҡ өлөштө тоҡсайға һалып артмаҡлап, кискә табан юлға сыҡтым. Һис кенә лә ташлайһы килмәй ине шул уҡыуҙы. Сабата заманы!.. Һинеке кеүек ботинкалар ҡайҙа инде ул саҡ, төшкә лә ингәне булманы. Иң ҙур байлығым — мәрхүм өләсәйҙән ҡалған осло башлы үзбәк калушы ине. Шуны ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, ялан аяҡ атланым. Ләкин... бына ошо ҡушҡайындан ары китә алманым шул. Кулак ҡалдыҡтары, Сылтыр шишмәнән һыу эскәндә, баяғы ҡайын артында боҫоп ятып, һунарсы һыҙмаһынан аттылар. Яҡтылыҡҡа ынтылыусыларҙы яратманылар улар.

Тәлғәт ҡапыл ғына тертләп ҡуйҙы. Артта тороп ҡалыусы Сылтыр шишмәгә боролоп ҡараны. Әнүр ағай, уң аяғын ыуғылап, дауам итте.

— Үлмәнем, нисек тә терелеп киттем. Бына күр инде, әле булһа йөрөп ятам. Тик тубыҡ һөйәгенә ҡаҙалған ҡурғаш киҫәге генә... Хәйер, үкенмәйем, үҙҙәрен дөмөктөрҙөк, исмаһам. Бынамын тигән тормош төҙөп ебәрҙек...

Тәлғәт әллә күпме тынлыҡты боҙорға ҡурҡып килде.

— Бына шулай булғас, үҙең фекер йөрөт инде, — тип атын юрттырҙы бригадир. — Дуҫың тураһында әйтәм мин... Хәйер, йәштәр бик үҙгәрҙе инде, ҡалаға китеү сараһын ғына эҙләйҙәр улар. Кем ошо яландарға, диңгеҙ тулҡынындай бәүелеп ятыусы баҫыуҙарға хужа булыр һуң? Аҡһаҡ Әнүр күпкә бармаҫ бит, бригадир эшен дә бик ауырлыҡ менән башҡарам. Ғүмер үтә... Һин дә бына, Тәлғәт мырҙа, теге тимерлек ҡаршыһында тороусы Эптерәй малайылай тороп ҡалырһыңмы икән? Биш йыл үтте инде, Ғүмәрҙәрен күргәнем юҡ. Ҡалала төпләнгәндер инде? Буранлы ҡыш сығып, утын яраһы юҡ, һыу үҙе аға... Рәхәт шул.

Тәлғәт йылмайырға итеп ауыҙын ғына асҡас, Әнүр ағай, ҡапыл үҙгәреп китеп, уның бөйөрөнә төрттө. Йәһәт кенә күк айғырҙы юлдан ситкәрәк тартты.

— Т-с-с-с! Матур итеп ултыр, ҡалай йүнһеҙ бәндәләр икән, тип уйлай күрмәһен. Ҡаршыға яңы агроном килә, — тип бышылдап өлгөрҙө үҙе. — Бик уҡымышлы кеше, тиҙәр, көнө-төнө ҡырҙан ҡайтып кермәй икән. Үҙен яҡындан күргән юҡ ине әле.

Сөгөлдөр баҫыуында соҡсоноп йөрөүсе эшләпәле йәш кеше, башын күтәреп, уларға сәләм бирҙе. Ләкин нимәнәндер өркөп китеүсе аты ҡолағын ҡайсылап ситкә ташланғас, тороп йүгерҙе.

— Ғүмәр аға-ай, сөгөлдөрҙәр үҫә-әме?! — тип ҡысҡырҙы Тәлғәт. Тегеһе, йылмайып, һыҙғанған беләктәрен юғары күтәрҙе.

Әнүр ағай ишетмәй ҡалды, ахырыһы.

— Кем тинең исемен, мырҙа? — тип төпсөндө.

Йөҙө ҡояшта янған малай ҡысҡырып, баҫыуҙарҙы яңғыратып көлөп ебәрҙе.

— Тимерлеккә ҡаршы Әптерәй ағай малайы ла инде, институт тамамлап ҡайтҡан.

— Ә-ә?!

— Ағай, туҡтат әле атыңды. — Бригадир аңына килеп өлгөргәнсе, Тәлғәт ергә һикереп тә төштө.

— Ҡайҙа бараһың, мырҙа, әле бер саҡрымдан артыҡ бар бит.

— Рәхмәт, Әнүр ағай, агрономда йомошом бар ине. Атайыма ярҙамсы булып эшләргә ине быйыл йәй.

— Һе... — Бригадир бер аҙ елкәһен ҡашып торҙо, икеләнде, унан һуң күңелләнеп китеп башын сайҡаны. Һорғолт күҙҙәрендә осҡонсоҡтар уйнаны.

— Һм-м-м, үҙең беләһең инде, улай булғас... — Йөҙө лә, болоттан әрселгән күк йөҙөндәй, яҡтырғандан-яҡтырҙы. — Рәхмәт, мырҙа, ҡара икмәктең тәмен белеүең өсөн рәхмәт. Һе, диуана... әйҙә, на-а-а!..

Күңеле йомшарған Әнүр ағай ситкә боролдо һәм дилбегәһен тартты. Күк айғыр уйнаҡлап берләм юлдан юрттырып китте. Келтер-келтер итеп әйләнеүсе тәгәрмәстәр аҫтынан саң-туҙан ғына борҡоп күтәрелеп ҡалды.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Хикәйәне тулыһынса уҡып сығығыҙ. Яҙыусы уҡыусыларға нимә әйтергә теләй?
2. Тәлғәт уҡыған мәктәбендә иптәшенә ни өсөн асыуланған?
3. Бөгөн дә ҡала шарттарында үҫкән ҡайһы бер балалар икмәкте йәки булканы ағаста үҫә, тип уйлайҙар, ни өсөн шулай тип уйлауҙарын әйтеп ҡарағыҙ.
4. «Ҡара икмәк!.. Уның ҡәҙерен белергә кәрәк, мырҙа» тигән юлдарҙы аңлатып бирегеҙ.
5. Әнүр ағай белем алыу, уҡыу тураһында ниндәй фекерҙәр әйтә? Һеҙ шулар менән килешәһегеҙме? Фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.

## ХИКӘЙӘЛӘҮ ТУРАҺЫНДА

Хикәйәләү тураһында һүҙ йөрөтөү өсөн, иң алда һынландырыу тигән һүҙҙең мәғәнәһен аңларға кәрәк. Әҙәби әҫәрҙә тормош күренештәрен уҡыусының күҙ алдына баҫтырырлыҡ итеп биреү, ысынбарлыҡтың

художестволы образын тыуҙырыу ысулы һ ы н л а н д ы р ы у тип атала. Уның тасуирлау, һүрәтләү, хикәйәләү кеүек төрҙәре бар. Т а с у и р л а у — геройҙарҙың, күренештәрҙең үҙенсәлекле сифаттарын, билдәләрен теҙеп биреү. Һ ү р ә т л ә ү — тормош ваҡиғаларын авторҙың үҙ уй-фекерҙәре һәм хис-тойғолары аша биреү. Ә х и к ә й ә л ә ү — ваҡиғаларҙы, эш-хәрәкәттәрҙе эҙмә-эҙлекле итеп һөйләп биреү. Нәфис әҫәрҙә оҙаҡ-ҡа һуҙып һөйләү кәрәкмәй, ә бәләкәй генә күләмдә лә ҙур йөкмәтке бирергә ынтылыш, икенсе төрлө әйткәндә, «хикәйәләүҙең тығыҙлығы» булырға тейеш. Әҫәрҙә хәл-ваҡиғалар һәм кешеләрҙең эш-хәрәкәте тураһында һөйләүсене х и к ә й ә л ә ү с е, тиҙәр. Ул әҫәр менән уҡыусы араһында тора, уларҙы үҙ-ара тоташтырыусы булып сығыш яһай. Хикәйәләү автор исеменән (өсөнсө затта) йәки әҫәрҙең берәй геройы исеменән (беренсе затта) алып барыла. Ҡайһы бер осраҡта автор исеменән, әммә берәй герой күҙлегенән дә алып барылырға мөмкин. Динис Бүләковтың «Ҡара икмәк» хикәйәһендә хикәйәләү автор исеменән бирелә.

*Фәниә* ***ЧАНЫШЕВА***

**ИКМӘК ЕҪЕ**

Ел туҙғыта һары япраҡтарҙы,
Әңер мәле шаулы ҡалала;
Йәнде кинәндереп, тирә-йүнгә
Йылы икмәк еҫе тарала.
Әсәһенә ниҙер һөйләп килә
Тере сәскә кеүек ҡыҙ бала.
Көҙгө баҡса.
Йылы икмәк еҫе...
Алыҫ бала сағым һынлана.

...Тәҙрә аша бөтөн ҡояш кергән,
Кеше һайын ҡояш!
Төшөмдә,
Ошо ергә еткәс, бүлдерҙеләр:
— Уян, әсәй әпәй бешерҙе!

Һәр кем сабыр көтә үҙ нәүбәтен,
Олатайым боҙа тынлыкты:
— Һиңә, — ти ул, — ниндәй телем кәрәк,
Бер ҡуллыҡмы,
ике ҡуллыҡмы?

— Ике ҡуллыҡ, — тибеҙ, — ике ҡуллыҡ!
Ҡайһыбыҙҙың ауыҙ бешмәне.
Нәфселегә телем шундай йоҡа —
Һыңар ҡулда һынып төшмәле.

...Мин мәктәптән ҡайтам.
Беҙҙә ҡунаҡ!
Бесән һалып, атын туғарған.
Әсәйемдең йөҙө ҡояш кеүек —
Мейес алдында янып ҡыҙарған.
Яңы ғына алған, ҡайнар килеш
Күкрәгенә терәп киҫкәндә
Шатланғандыр, уйлап: «Ярай әле
Әпәйҙең бар сағы өҫтәлдә».

Икмәк беҙгә һәр саҡ танһыҡ булды,
Өйрәттеләр һабаҡ биреп тә.
Ашъяулыҡҡа төрөп һаҡланды ул
Үрелеп буй етмәҫ бейектә.

Күҙгә баҡса. Йылы икмәк еҫе...
Алыҫ бала сағым һынлана.
Өҫтәлдәрҙә икмәк өҙөлмәһен —
Имен була күрһен донъялар!

Ейәндәрҙең эшсән ҡулы менән
Тулҡынланһын иген диңгеҙе,
Дары еҫе түгел, икмәк еҫе —
Һәр саҡ кинәндерһен ер йөҙөн.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шағирәнең икмәк тураһындағы уйҙары илебеҙҙәге ауыр йылдарға килеп ҡағылыуы ҡайһы юлдарҙа сағыла?
2. «Икмәктән оло ризыҡ юҡ» тигәнде нисек аңлайһығыҙ?

## ӘНҮР ВАХИТОВ

## 1932—1984



Әнүр Хисмәт улы Вахитов Ғафури районы Туғай ауылында тыуған. Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай. Оҙаҡ йылдар Өфөлә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй.

Әнүр Вахитов – күренекле ғалим һәм яҙыусы. Хәҙерге заман башҡорт прозаһы тураһында байтаҡ ҡына ғилми хеҙмәттәр яҙҙы, тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы. Ул хикәйәләр һәм хикәйәттәр оҫтаһы ла ине. «Салауат күпере», «Ҡайын суҡтары», «Шәжәрә», «Яҡты күңел», «Сейәлетүбә» исемле йыйынтыҡтарына ингән әҫәрҙәре яҙыусының халыҡ ижадын бик һәйбәт белеүе, уның традицияларын әҙәбиәттә оҫта файҙаланыуы тураһында һөйләй.

### ӨС БӨРТӨК БОЙҘАЙ

Ҡаты һуғыштан бик ныҡ яраланып ҡайтып төштөм. Яранан бигерәк, йөрәк һыҙлай, эс боша. Ауылда бер ир йораты юҡ. Ҡайтыу менән колхоз идараһы миңә, ярҙам итеп, өс бот бойҙай бирҙе. Мин бит әле эштең асылын ул ҡәҙәре асыҡ белмәйем. Барҙым. Ат ҡараусы Мөхәмәтулла бабай үҙе, ярҙамлашып, үлсәшеп, арбаға һалышып йөрөнө. Келәт ишеге төбөндә ике малай тора ине. Кем малайҙары икәнен дә танырлыҡ түгел, ябыҡтар, йонсоғандар. Малайҙар гәрәбәләй күренгән ҡыҙғылт һары бойҙайға әллә нәмәгә ҡараған кеүек ҡарайҙар. Аңлатып биреүе ҡыйын, шундай илаһи бер ҙурлау бар ине уларҙың күҙендә. Бына Мөхәмәтулла бабай тоҡто күтәрҙе лә арбаға алып китте. Малайҙар ҡапыл уның артынан ташланды. Баҡһаң, тоҡтоң ҡабырғаһында бәләкәй генә тишектән берәмтекләп кенә бойҙай ҡойола. Малайҙар келәт алдындағы тапанды туҙанына түгелгән шул бойҙай бөртөктәренә ташланған-

дар икән. Минең эстә ниҙер өҙөлгәндәй булды, күҙ алдарым ҡараңғыланды. Мин, аяҡтарым ауыртыуын да онотоп, арбаға ташландым һәм пилоткама тултырып бойҙай һалдым.

— Мә, туғаным, ҡыҙҙырып ашағыҙ...

Бер кем бер нәмә өндәшмәне. Малайҙарҙың өйҙәренә йүгереүен ҡарап торған һәр кемдең күңелендә әллә ниндәй буран, дауыл ҡупҡайны.

Ошо мәл минең күңелемдә мәңге онотолмаçлыҡ булып уйылып ҡалды. Ошонан һуң мин икмәктең — был бөйөк һәм изге нәмәнең — ҡәҙерен аңлағандай булдым. Икмәк — кешенең аҙығы ғына түгел, ә ғорурлығы, бөйөклөгө, байлығы ул. Икмәк — кешене кеше иткән, уға тәбиғәт алдындағы көсөн, аҡылын байраҡ иткән нәмә ул. Икмәк — тормош ул. Бына мин нәмәгә төшөнгәндәй булдым. Ә беҙ бит уны асыҡҡанда ғына иçкә төшөрәбеҙ, ҡәҙерләй белмәйбеҙ, иç киткес ғәмһеҙлек күрһәтәбеҙ. Әлеге бер пилотка бойҙай ваҡиғаһынан һуң мин, аяҡтар юçыҡ йөрөргә эшкинмәһә лә, Әфҡәт менән Әхәтте генә түгел (ул малайҙар ошо Әхәт менән Әфҡәт булып сыҡты), бөтә ауылды, бөтә тирә-яҡ кешеләрен, бөтә донъяны туйҙырырҙай булып эшкә егелдем. Ауылдаштарым мине бригадир итеп ҡуйҙылар. Бригадирҙың хәле билдәле бит инде: өй беренсә йөрөйһөң. Кем нисек йәшәй, ҡалай тын ала, кемдә ниндәй шатлыҡ бар ҙа, кем ниндәй ҡайғыға тарыған? Һуғыштың иң ҡыҙыу саҡтары. Ауыр хәбәрҙәр йыш килә. Бындай саҡта, уртыңды сәйнәй-сәйнәй, тол ҡалған ҡатынға йылы һүҙ әйтәһең, етем балаларының башынан һыйпайһың. Шундай көндәрҙең береһендә әлеге Әхәттәргә барып керҙем. Өйҙәге ауыр тынлыҡ мине шунда уҡ шом эсенә алып инде. Малайҙар түрбашта ултыра. Алдарында ҡатыҡ. Тик береһе лә ҡатыҡҡа ынтылмай. Ниндәйҙер бер һағайыу менән әсәләренә ҡарап шаҡ ҡатҡандар. Йөҙҙәрендә әйтеп бөтөргөһөҙ һағыш, һорау, ғазап бар ине. Кескенә ошо ике бала йөҙөнә донъя үҙенең аяуһыҙ ҡаты ҡанаты менән ҡағылған. Мин кергәс, элеккесә шатланыу, ығы-зығы түгел, ҡуҙғалыусы ла булманы. Мин оло яҡта өçтәл янында баш әйеп ултырған Мөзәйәнә

еңгә янына барҙым. Уның ауыр ҙур ҡулдары дәфтәр битендәй генә ҡағыҙ өҫтөндә ята ине.

— Икенсе тапҡыр бит инде, ышанмаҫлыҡ та түгел, — тип ҡуйҙы ниндәйҙер ят тауыш менән Мөзәйәнә еңгә.

— Мөзәйәнә еңгә, — тинем мин, тауышыма яғымлылыҡ, ышаныс бирергә тырышып, — икенселәй килгәс, бигерәк тә ышанырға ярамай.

Мөзәйәнә еңгә минең һүҙҙәрҙе ишетмәне лә, буғай, тағы үҙенекен ҡабатланы.

— Икенсе тапҡыр...

Мин тиҙ генә малайҙарҙы сығарып ебәрҙем. Шуны ғына көткән кеүек, Мөзәйәнә еңгәнең башы өҫтәлгә һалынып төштө, ярһыулы тауыш тағы әлеге һүҙҙәрҙе ҡабатланы:

— Икенсе тапҡыр...

Уның ҡарайып ҡатҡан ҙур шараҡ ҡул бармаҡтары әлеге дәфтәр битендәй генә ҡағыҙҙы тырнап бөгәрләнеләр ҙә ике усҡа йомдолар:

— Икенсе тапҡыр... Ҡайғыһы яңыра торһон тигәндәй, икенсе тапҡыр...

Мин ни эшләргә белмәй, әле егерме ете йәшендә генә көйө сикәләре салланған ошо ике бала әсәһе — тол ҡатындың сәстәрен һыйпап йыуатырға маташтым. Бер аҙҙан ул тынысланғандай булды. Ҡулын яҙҙы. Теге ҡағыҙҙы һыпырғыланы. Йөҙөнә ғәйепле кешеләрҙә генә була торған зәғиф кенә йылмайыу ятты. Ҡағыҙҙы иплэп бөкләне лә, карауатҡа баҫып, өрлөккә ҡыҫтырҙы.

— Малайҙарым белмәһен...

О, ниндәй ғәжәп һин, әсә йөрәге!

Мин урамға сыҡтым.

Әхәт менән Әфкәт соланса баҫҡысының аҫҡы таҡтаһына ултырғандар ҙа аҡрын ғына һөйләшәләр. Ишек тауышына улар күтәрелеп ҡаранылар. Йөҙҙәрендә сабый ғына көйө тормоштоң ығы-зығыһын ғына түгел, ҡайғы-һағышын да етерлек күрергә өйрәнгән ҙур ҡара күҙҙәрендә мең төрлө һорау, борсоулы ҡайғыртыу, кем өсөндөр аҙарыныу ярылып ята ине. Мин, уларға ҡарап, яҡты йөҙ менән йылмайырға һәм килешергә тырышып күҙ ҡыҫтым. Әфкәттең ҡалынсараҡ ирене тартылып алды ла йәйелеп китте. Йөҙөнә нур ҡалҡты. Сабый

йылмайыуы минең һағыш тулы күңелемә шифа булып инде. Мин үҙем дә һиҙмәҫтән ихлас итеп тағы ла йылмайҙым. Был юлы Әхәт тә йәнләнде.

— Зиннур ағай, әйҙә бер нәмәкәй ҡарарға.

Әфҡәт мине етәкләп тә алды. Беҙ баҡсаға индек. Кишер, сөгөлдөр, һуған түтәлдәре араһынан үтеп, кәртә буйындағы ҙур ғына түтәлгә килдек. Ул ваҡ ҡына сыбыҡ менән йәнә кәртәләп алынған. Күрәм: баҡсала малайҙарҙың иң ҡәҙерләгәне ошо түтәл икән. Ә түтәлдә ҡалаҡ буйындай ҡурпы һымаҡ йәм-йәшел булып ниҙер тулҡынып ултыра. Малайҙарға ҡарайым. Йөҙҙәре көләс, шаттар.

— Беҙҙең бойҙай күп буласаҡ, — ти Әфҡәт.

— Бойҙай?!

— Эйе. Теге бер пилотка бойҙайҙың яртыһын сәстек.

Минең күҙ алдыма тағы ла бер бойҙай тулы тоҡ килә. Тишек ҡабырғаһынан берәмтекләп кенә гәрәбә ҡойола. Ике сабый тупраҡ араһынан сүпләй уларҙы...

Көҙ килде. Колхозда эш күп. Игендең арыу уҡ өлөшө һабаҡта ултыра, картуф ята. Ошондай көндәрҙең береһендә Мөзәйәнә еңгә эшкә сыҡманы. Ҡояш түбәнәйгәйне инде. Мин, был йә иртәгә лә сыҡмай ҡалыр тип, Мөзәйәнә еңгәләргә килдем. Инһәм, Әфҡәт, бәләкәйерәк биҙрәләр менән көйәнтәләп, тызрайып картуф ташый.

— Әсәйең ҡайҙа?

— Баҡсала.

Баҡсаға индем. Мөзәйәнә еңгә картуф ҡаҙый ине. Күңелһеҙ генә иҫәнләште был.

Ҡулынан көрәген алдым да картуфын ҡаҙырға тотондом. Тырышып, баш күтәрмәй ҡаҙам. Мөзәйәнә еңгә йүгерек ҡулдары менән картуфтарҙы бер ергә өйә бара. Күп тә үтмәне, бышлығып, ахылдап төштөм. Минең хәлемде күргән Мөзәйәнә еңгә көрәгемде алды ла:

— Өй беренсә кергән һайын былай эшләшеп йөрөһәң, кәкрәйеп тә ятырһың, — тине. Үҙе көйәнтәләп өйгә картуф алып инеп китте. Мин дә эйәрҙем. Мөзәйәнә еңгә биҙрәләрен бушатты ла түргә уҙҙы.

— Тамағың ҡатманымы? Башың ауыртыуы баҫыла төштөмө инде? — тип йомшаҡ ҡына өндәште ул.

— Кем ул, әллә Әхәт ауырып киттеме?

— Эйе, әллә һары булған инде...

Мин Әхәт янына килдем.

Әхәттең йөҙө янып бара. Күҙҙәре ҙур асылған, ниңәлер рәнйеүле ҡарай.

— Бойҙай беҙҙең үҫмәне бит. Гел башағы буш, — тип һөйләнеп ҡуйҙы Әфҡәт, — Әхәт шуға ауырыны ла китте.

Миңә уңайһыҙ булып китте. Ни эшләргә белмәй, мин баҡсаға сығып керҙем. Ысынлап та, баҫыу бойҙайынан бер айға тиерлек һуңлап сәселгән түтәл бойҙайы буйға үҫеп еткән, әммә оҙон яҫмаҡ башаҡтарында бер генә орлоғо ла юҡ ине. Мин, уның һайын борсолоп, һәр башаҡты тотоп ҡарарға керештем.

— Бик көткәйне шул бойҙайын. Баш ҡоҫа башлағас, түбәһе күккә тейеп йөрөгәйне, — тип һөйләнде ҡайһы аралалыр минең арттан килеп еткән Мөзәйәнә еңгә.

Мине бойҙайҙың өлгөрмәүе түгел, ә уны баланың аяҡтан йығылырлыҡ ауыр кисереүе таң ҡалдырҙы.

— Борсолма, Мөзәйәнә еңгә, һауығыр улың. Һауығыр... Кем белә, бәлки, атаҡлы игенсе булып китер әле ул.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Бригадир ағай ни өсөн балаларға бойҙай бирә?
2. Мөзәйәнә еңгәләрҙең ғаиләһе ниндәй ҡайғы кисерә?
3. Әхәт ниндәй сәбәптән ауырып китә?
4. Икмәк һәм уның ҡәҙере тураһында әңгәмә үткәрегеҙ.

## ХИКӘЙӘ ТУРАҺЫНДА

Тормошта ҡыҫҡа ваҡыт эсендә булып үткән бер генә ваҡиға алынып, уның нимә менән башланып, нисек тамамланғанын бөтөн килеш күрһәткән әҙәби әҫәр х и к ә й ә тип атала. Хикәйәлә ҡатнашыусы персонаждар күп булмай, уларҙың тормошо тураһында ентекле, оҙон итеп һөйләнелмәҫкә лә мөмкин. Мәҫәлән, Әнүр Вахитовтың «Өс бөртөк бойҙай» хикәйәһе һуғыш ваҡытында Әхәт менән Әфҡәт исемле малайҙарҙың аслыҡтан интегеүҙәре, бригадир биргән бер пилотка бойҙайҙы үҫтереп, уңыш алырға тырышыуҙары ваҡиғаһына нигеҙләнә.

* * *

## Башҡортостандың халыҡ шағирҙары

Мәжит Ғафури (1923)
Рәшит Ниғмәти (1959)
Мостай Кәрим (1963)
Сәйфи Ҡудаш (1964)
Рәми Ғарипов (1992)
Назар Нәжми (1994)
Рауил Бикбаев (1994)
Әнғәм Атнабаев (1997)
Тимер Йосопов (2003)
Марат Кәримов (2003)
Александр Филиппов (2004)
Абдулхаҡ Игебаев (2010)
Ҡәҙим Аралбаев (2011)

## Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары

Зәйнәб Биишева (1990)
Ноғман Мусин (2001)
Әхиәр Хәкимов (2001)
Нәжиб Асанбаев (2007)
Ғайса Хөсәйенов (2008)
Талха Ғиниәтуллин (2011)
Суфиян Поварисов (2011)



## Дүртенсе бүлек

### ХАЛЫҠ ҺҮҘЕН ТАШЛАМА

Кешеләр борон-борондан уҡ тамаҡ туйҙырыу, өҫ бөтәйтеү, ғаилә ҡороу, йорт-йыһаз тураһында ҡайғыртыу менән генә сикләнмәгән. Тирә-йүндең матурлығына һоҡлана ла белгән, шул матурлыҡты үҙенсә ишәйткән дә. Торор торлағын, кейер кейемен, эйәр-өпсөнөн, уҡ-һаҙағын, ҡылыс-хәнйәрен, ҡашығаяғын, солоҡҡа менер кирәмен, бүтән донъя кәрәген ҡулға ҡулай, тоторға уңай, күреүгә күркәм итеп эшләргә тырышҡан: һырларын һырлаған, ҡайырын ҡайыған, тәңкәләрен тәңкәләгән, суҡларын суҡлаған, биҙәкләрен биҙәкләгән. Ана шулай халыҡтың биҙәү сәнғәте барлыҡҡа килгән.

Беҙҙең бик боронғо бабаларыбыҙ ҡош-ҡорттоң хәрәкәтен, ҡыланышын ҡабатларға яратҡан. Берәй кәсепкә тотонор алдынан шул кәсеп талап иткән хәрәкәттәрҙе ҡабатлар булған. Тәүтормош һунарсылары, мәҫәлән, һунар йәнлегенең һынын һүрәтләп, шуны таш менән сәпләгән, уҡ менән атҡан, һөңгө менән «йәрәхәтләгән». «Йәнлек»те «яралаған» хәлдә, ҡыуаныстан һикерәнләгән. Шуның кеүек хәрәкәттәрҙән халыҡтың бейеү сәнғәте яралған.

Бейеү сәнғәте булып китер ҡыланыштар, эште күмәкләшеп башҡарыу ритмлы ауаздар менән оҙатылған. Шул ауаздар халыҡтың музыка сәнғәтен тыуҙырған.

Тимәк, халыҡ ижады күп яҡлы һәм күп тармаҡлы. Һеҙҙең белеүегеҙсә, әкиәт менән эпостар (ҡобайырҙар) ҙа, йыр менән бәйеттәр ҙә, мәҡәл менән йомаҡтар ҙа халыҡ ижадына инә. Биҙәү, бейеү, музыка сәнғәтенән

айырып, уларҙы халыҡтың һүҙ сәнғәте йәки ауыҙ-тел ижады тиҙәр. Халыҡтың һүҙ сәнғәтен фольклор тип йөрөтөү ғәҙәте лә бар. Башҡортсаға әйләндерһәң, был инглиз һүҙе «халыҡ аҡылы», «халыҡ ғилеме», сәсән әйткән «боронғонан аманат»ҡа тап килер булған.

Халҡымды хөрмәт итәм тигән һәр кемгә туған фольклорҙы белеү фарыз[1] булған. Быны яҙылмаған закон — йола законы талап иткән. Уны сәсән шулай тип аңлатҡан:

Белгәнемде әйтмәһәм,
Йортҡа әшкәр итмәһәм,[2]
Илдең күңеле ҡалыр, тим,
Илдең хәтере ҡалыр, тим...

Йәғни һәр кем үҙе белгәнде, үҙенә тиклемге быуындар ижад иткән, уға килтереп еткергән ауыҙ-тел әҫәрҙәрен киләһе быуындарға, ә улары үҙҙәренең һуңғыларына, «әшкәр итә» барырға, «боронғонан аманат»ҡа тоғро булырға бурыслы. Был бурыс, ҡәҙерле уҡыусылар, һеҙҙең өҫкә лә төшә.

Уға итһәгеҙ хыянат,
Һеҙгә булыр яманат...

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Халыҡ ижады ниндәй төрҙәргә бүленә? Улар нисек барлыҡҡа килгән?
2. Башҡорт фольклорында ниндәй жанрҙар бар? Бер-береһенән улар ни яғы менән айырыла?
3. Башҡорт халҡының, ауыҙ-тел әҫәрҙәре файҙаланылған ниндәй әҙәби әҫәрҙәр, спектаклдәр, кинофильмдар, теле-радиотапшырыуҙарҙы беләһегеҙ?
4. Ололарҙан, тиңдәштәрегеҙҙән ишеткән фольклор әҫәрҙәре хаҡында һөйләгеҙ.
5. Түбәндәге тапҡыр һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатығыҙ. Уларҙы файҙаланып, бәйләнешле текст төҙөп ҡарағыҙ: *балтаһыҙ урманға барыу; күҙ йомоп ынтылыу; яныу; ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарыу; балтаһы һыуға төштө.*

---

[1] *Фарыз* — мотлаҡ үтәлергә тейеш эш, бурыс.
[2] *Йортҡа әшкәр итмәһәм* — «илгә (халыҡҡа) еткермәһәм» мәғәнәһендә.

## УРАЛ БАТЫР

### I

Борон-борон заманда, Уралтау менән Ағиҙел дә, Яйыҡ менән Һаҡмар ҙа юҡ саҡта, шыр урман эсендә йәшәгән, ти, бер бабай менән бер әбей. Байтаҡ ғүмер иткәс, Шүлгән менән Урал тигән ике улын етем ҡалдырып, әбей үлеп киткән. Беренән-бере теремек, беренән-бере шуҡ ике малайҙы бабай үҙе генә ҡарап үҫтергән. Ул үҙе шәп һунарсы булған. Йәйен дә, ҡышын да көндәр буйы һунарҙа йөрөгән. Айыу тиһәң — айыуҙы, бүре тиһәң — бүрене, арыҫлан тиһәң — арыҫланды тере көйө тотоп алып ҡайтыуҙы бабай уйын шайы[1] ла күрмәгән, ти, — ул шулай көслө булған. Ни өсөн тиһәң, бабай һунарға гел бер генә ҡалаҡ януар ҡаны эсеп китә икән. Шул ҡанды эсеп алдымы — уға ана шул йыртҡыстың көсө өҫтәлер булған. Өй көтөп ҡалған Шүлгән менән Уралға турһыҡтағы[2] ҡанды ауыҙ иттермәгән, гел генә: «Бәләкәйһегеҙ әле, кейек ауларға йәшегеҙ етмәгән; минән күрмәксе, турһыҡтағы ҡанды ауыҙлайһы булмағыҙ, һәләк булырһығыҙ», — тип киҫәтә торған булған. Ни өсөн тиһәң, йола буйынса йыртҡыс кейекте үҙ ҡулы менән үлтергән кешегә генә уның ҡанын татып ҡарарға яраған.

Аталары һунарҙа саҡта берҙән-бер көндө Шүлгән менән Урал янына бик һылыу ҡатын килеп ингән. Ингән дә:

— Атайығыҙ менән бергә һунарға йөрөмәй ни! Ниңә өйҙә ултыраһығыҙ? — тип һораған, ти. Шүлгән менән Урал:

— Йөрөр инек тә, атай беҙҙе алып бармай шул, йәшегеҙ етмәгән әле тип, өйҙә ҡалдыра, — тигәндәр икән, теге ҡатын:

— Өйҙә ултырып, йәш еткереп булалыр шул! — тип көлгән, ти.

— Нимә эшләп ҡарайыҡ һуң?

— Анау турһыҡтағы ҡанды эсергә кәрәк, — тигән, ти, теге ҡатын. — Шуны бер генә ҡалаҡ эсеп алдыңмы —

---

[1] *Шайы* — һымаҡ.
[2] *Турһыҡ* — тиренән эшләнгән һауыт.

бер көн эсендә үк ир еткән егеткә әйләнәһең, арыҫландай көслө булаһың.

Шүлгән менән Урал:

— Атайыбыҙ ҡан һалынған турһыҡ янына яҡын барырға ла ҡушманы. Эсһәгеҙ — һәләк булаһығыҙ, тине. Беҙ атай һүҙенән сыҡмайбыҙ, — тигәндәр, ти.

Шунан теге ҡатын:

— Бәләкәйһегеҙ шул әле. Атайығыҙ ни тиһә, шуға ышанаһығыҙ, — тигән, ти. — Был ҡанды эсһәгеҙ, һеҙгә арыҫлан көсө инәсәк тә, егет булып етәсәкһегеҙ. Унан инде рәхәтләнеп һунарға йөрөй башлаясаҡһығыҙ. Атайығыҙға өй һаҡлап ултырырға тура киләсәк, ул бына шуны яҡшы белә. Шуға ла турһыҡтағы ҡанды үҙе генә эсә, һеҙгә ауыҙ ҙа иттермәй. Ихтыяр үҙегеҙҙә, әйттем — бөттөм, бөттөм дә киттем, — тип, теге һылыу ҡатын юҡ булған.

Шул ҡатындың әйткәненә ышанып, Шүлгән ҡанды тәмләп ҡарамаҡсы булды, ти. Урал, атаһының һүҙенән сыҡмай, турһыҡҡа яҡын да барманы, ти.

Шүлгән турһыҡты алды, ти. Турһыҡ ауыҙын асты, бер ҡалаҡ ҡан ҡапты, ти. Ә ҡан шундай татлы, ти. Ҡанды ҡабып йотоуы булды — айыуға әүерелде, ти. Шул саҡ ҡатын йәнә килде, ти. Инә килеп, Уралға:

— Бына күрҙеңме, туғаның ни эшләне! — тип һыны ҡатып көлдө, ти. — Хәҙер мин уны бүре итәм, — тип әйтте, ти.

Ҡатын айыуҙың маңлайына бер сирткәйне — бүрегә әйләнде, ти, тағы бер сирткәйне — арыҫлан булды, ти. Шунан теге ҡатын арыҫланға атланып алды ла саптырып сыҡты ла китте, ти. Ҡатын тигәнебеҙ юха[1] һылыу булған икән. Ҡатын ҡиәфәтенә ингән ана шул юханың хәйләһе арҡаһында Шүлгән үҙенең кешелеген ғүмергә юғалтып, кейек булып ҡалған; бер ҡараһаң — айыу, икенсе ҡараһаң — бүре, арыҫлан булып йөрөгән-йөрөгән дә бер күлгә батып үлгән, ти.

---

[1] *Юха* — борон башҡорттарҙа шундай ышаныу булған: йәнәһе, йылан, йөҙ йыл йәшәһә — аждаһаға, ә биш йөҙ, мең йылдан һуң юхаға әүерелә. Аждаһа күлдә, һаҙлыҡта йәшәй, мал-тыуарҙы, кешене тыны менән тартып ала ла йота, тип уйлағандар. Юханы төрлө ҡиәфәткә инә алыусы яуыз зат, әүермән зат тип күҙ алдына килтергәндәр.

**Һораузар һәм эштәр**

1. Беренсе бүлеккә исем бирегеҙ.
2. Урал менән Шүлгәндең атаһы нимә менән кәсеп иткән? Уның кәсебе уңышлы булыуының серен аңлатығыҙ.
3. Ата һүҙен тотоу-тотмауҙарынан сығып, Урал менән Шүлгәнде ҡылыҡһырлағыҙ[1].

## II

Ата һүҙен йыҡмаған Урал тиңдәше юҡ батыр егет булып үҫеп еткән. Атаһы кеүек, һунарға йөрөй башлаған. Шул мәлдә генә тирә-яҡты үлем ҡурҡынысы солғаған: күлдәр, йылғалар ҡороған, үләндәр ҡыуарған, ағас япраҡтары һарғайып бөткән. Һауа тынсыуланған. Тын алырлыҡ та булмаған. Әҙәмдәр, йәнлектәр ҙә күпләп ҡырылған. Донъяны ҡыҙырып, бөтә тереклекте ҡоротоп йөрөгән Әжәлгә[2] ҡаршы бер кем дә дауа таба алмаған.

Урал батыр үлем сәсеүсе Әжәлдең үҙен тотоп үлтереп булмаймы икән, тип уйлана башлаған, ти. Был уйын атаһына ла әйткән. Атаһының һелтәгәндә йәшен уттары сығара торған алмас ҡылысы булған.

— Был ҡылыс — олатайыңдан ҡалған ҡомартҡы, — тип әйтеп, уны Уралға биргән, — бының менән бөтә нәмәне ҡыйратып була, тик Әжәлде генә үлтереп булмай. Шулай ҙа ал, кәрәге тейер, — тигән. — Ҡайҙалыр, бик алыҫта, Тереһыу тигән бер шишмә ағып ята икән. Ана шул Тереһыуҙың бер тамсыһы ла үлеп ятҡанды терелтә, ауырып йығылғанды аяғына баҫтыра, ә Әжәлде еңә, ти. Әжәлдән ҡотолоу өсөн, башҡа әмәл юҡ, — тигән, ти.

Атаһы биргән ҡылысты биленә тағып, Урал башы һуҡҡан яҡҡа сығып китте, ти. Эй китте, эй китте, ти, был, бара торғас, ете юл сатына килеп етте, ти. Шунда уға аҡ һаҡаллы бер ҡарт осраны, ти:

---

[1] *Ҡылыҡһырлау* — характеристика биреү.
[2] *Әжәл* — үлем.

— Әссәләмәғәләйкүм![1] — тине, ти, Урал үҙе башлап.

— Вәғәләйкүмәссәләм![2] Олоно ололоҡлауыңа рәхмәт! Юлдарың уң булһын, балам: кәңәш кәрәкһә, кәңәш бирәйем, ярҙам һораһаң, ярҙам итәйем.

— Бабай, Тереһыуға ҡайһы юл менән барырға?

Бабай ете юлдың береһен күрһәткән.

— Бынан алыҫмы? Нисә көнлөк юл?

— Унығын инде, балам, әйтә алмайым. Ҡырҡ йыл буйы мин ошо ерҙә һәр уҙғынсыға Тереһыу юлын күрһәтеп торам, иллә-мәгәр ошо ғүмер эсендә унан әйләнеп ҡайтҡан кешене күргән юҡ әле, — тигән, ти. Бабай йәнә шулай тип өҫтәп ҡуйған, ти: — Бара торғас, йылҡы өйөрө осрар. Өйөр башы Аҡбуҙат булыр. Булдыра алһаң, шуны тотоп мен, улым.

Урал батыр, бабай менән хушлашып-аманлашып, Тереһыу юлы менән китеп барҙы, ти. Китә торғас, теге бабай әйткән йылҡы өйөрөнә барып сыҡты, ти. Ҡараһа, йылҡы өйөрө араһында:

Башы йүгән күрмәгән,
Һыртына эйәр теймәгән,
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған,
Ҡарсыға түш, тар бөйөр,
Еңел текә тояҡлы,
Ҡыйғас ҡамыш ҡолаҡлы,
Айғыр бүре күҙендәй,
Күҙ бәбәген сылатыр,
Елһә, ҡоштай елпенеп,
Артында саң уйнатыр...

Аҡбуҙат тора ине, ти. Урал Аҡбуҙатҡа иҫе китеп ҡарап торҙо-торҙо ла әкрен генә янына барҙы, ти. Аҡбуҙат бер боролоп ҡараны ла ятһырамай-нитмәй тик торҙо, ти. Шунан Урал йәһәт кенә Аҡбуҙаттың башына суҡлы йүгән кейҙереп, һыртына көмөш эйәр һалған да һикереп менеп тә ултырған. Аҡбуҙат унда ла тик торған. Саптырып китмәксе генә булғайны, Уралды

---

[1] Әссәләмәғәләйкүм! *(ғәрәп һүҙе)* — сәләмләү һүҙе. Ул һүҙмәһүҙ «һеҙгә именлек, һаулыҡ-сәләмәтлек!» тигәнде анлата.

[2] Вәғәләйкүмәссәләм! *(ғәрәп һүҙе)* — сәләм биреүсене сәләмләү һүҙе — «Үҙегеҙгә лә именлек!» тигән һүҙ.



сөйҙө лә ебәрҙе, ти. Шул тиклем бейеккә сөйөп ебәрҙе, ти, кем, тегеләй, батыр атылып төшөп, биленә тиклем ергә батты, ти. Тырышып-тырмашып батҡан еренән сыҡты ла, ти, Урал яңынан Аҡбуҙатҡа атланды, ти. Аҡбуҙат йәнә сойорғотоп ебәрҙе, ти. Был юлы ергә төшкәс, Урал тубыҡтан батты, ти. Тағы тырышып-тырмашып сыға һалды ла йәнә атланды, ти, Аҡбуҙатҡа. Атланды ла талпан һымаҡ йәбеште, ти. Аҡбуҙат арт һанын да сойорғотто, үрәпсеп үрә торҙо, ти — күпме генә тырышмаһын, был юлы Уралды осорта алманы, ти. Шунан баш тартҡан яҡҡа елдереп сығып китте, ти.

Эй бара, ти, Урал, эй бара, ти. Йәйрәп ятҡан ялан-дарҙы, күккә ашҡан тауҙарҙы, убып алыр упҡындарҙы үтте, ти. Бер ҡара урмандың уртаһына еткәс, Аҡбуҙат туҡтаны, ти. Ни булды икән тип, Урал ергә һикереп төштө, ти. Шул ваҡыт Аҡбуҙат, телгә килеп:

— Беҙ хәҙер Терәһыу юлын быуып ятыусы туғыҙ башлы дейеү бәрейе янына килеп еттек. Һиңә уның менән алышырға тура килер. Ялымдан өс бөртөк ҡы-

лымды алып ҡал. Кәрәк булһам, шуларҙы өтөрһөң — мин килеп тә етермен, — тип әйтте, ти.

Урал Аҡбуҙаттың өс бөртөк ҡылын өҙөп алды, ти — Аҡбуҙат шунда уҡ юҡ та булды, ти.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Бүлекте исемләгеҙ.
2. Урал батырҙы борсоған уйҙар хаҡында уйланығыҙ. Уның мәғәнәһен асыҡлағыҙ.
3. Быуын-быуын күсә килгән алмас ҡылыстың Урал батырға ҡалыуына ниндәй мәғәнә һалынған?
4. Аҡ һаҡаллы ҡарт үҙенә таныш булмаған Уралға нимә менән һәм ни өсөн ярҙам итә?
5. Аҡбуҙатты тасуирлағыҙ.
6. Аҡбуҙатты тотоп менеү эпизодында һеҙ Урал батырҙың ниндәй һыҙаттарын белдегеҙ?

## III

— Ни эшләргә, ҡайҙа барырға?

Шулай аптырап торғанда, Урал бик һылыу бер ҡыҙ уҙып барғанын күреп ҡалды, ти. Ул ауыр тоҡ йөкмәгән ине, ти. Урал, ҡыҙҙы туҡтатып:

— Эй, һылыу, ҡайҙа китеп бараһың? Тоғоңда нимә ул? Бик һәлмәк күренә, — тип һораны, ти.

Шунан ҡыҙ илай-илай үҙ ҡайғыһын һөйләп бирҙе, ти. Ҡарағаш исемле был ҡыҙҙы күптән түгел генә дейеү, урлап алып килеп, үҙенә ҡол иткән. Ул, туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһы уйнаһын өсөн, йылға буйынан иртәнән кискә саҡлы ҡырсынташ ташый икән. Урал, ҡыҙҙы йәлләп:

— Ҡана, һылыу, тоғоңдо үҙем күтәрәйем, — тигәйне, Ҡарағаш:

— Юҡ, юҡ, егет, минең менән бергә бараһы булма, һиҙеп ҡалһа, дейеү башыңа етер! — тип әйтте, ти.

Әммә Урал үҙенекен итеп, таш тултырылған тоҡто туғыҙ башлы дейеүҙең туғыҙ балаһы йыйылышып торған урынға хәтле күтәреп алып барҙы, ти. Урал ташты ергә ҡуйыуы булды — дейеү балаларының таш атышып уйнап китеүҙәре булды, ти. Улар атышҡан арала,

эргәләгe бер ҡарама ботағына Урал ат башы хәтле бер ташты аҫып ҡуйҙы ла үҙе боҫа-боҫа туғыҙ башлы дейеү йәшәгән мәмерйә ауыҙына үтте, ти.

Дейеү балаларының уйындары оҙаҡҡа барманы — таштары төрлө яҡҡа атылып, юғалышып бөттө, ти. Шунан улар оҙон бау менән ҡарамаға аҫып ҡуйылған ҙур ташты күреп ҡалдылар, ти. Шунда йүгерештеләр, ти. Мәрәкә күреп, береһе ташты атындырып ебәргәйне, таш, кире килеп, тегене һуғып йыҡты, ти. Дейеү малайы тора килеп, асыу менән йәнә осорта һуҡҡайны, таш уның башын иҙә һуҡты ла ҡуйҙы, ти. Башы ярылған туғанының үсен алмаҡ булып, ташты дейеүҙең икенсе малайы һуғып ебәргәйне — уныһы ла, башы ярылып, йән бирҙе, ти. Дейеү балаларының туғыҙы ла бына шулай береһе артынан береһе ҡырыла торһон, беҙ дейеүҙең үҙенә киләйек.

Урал батыр эҙләп барған мәмерйә бейек тауҙы юл киҫеп үткән ерҙә генә ине, ти. Туғыҙ башлы дейеү ҡараңғы мәмерйәнең ауыҙында ғына ята ине, ти. Тирә-йүне әҙәм һөйәктәре менән тулы ине, ти. Урал батыр алыҫтан уҡ:

— Эй, дейеү, юл бир, мин Тереһыуға китеп барам! — тип һөрәнләне, ти.

Быға дейеүҙең бер ҙә иҫе китмәне, ти, юлға арҡыры төшкән көйө ята бирҙе, ти. Урал батыр йәнә:

— Юл бир! — тип ҡысҡырғайны, дейеү, асыуы килеп, тыны менән үҙенә тартып ала башланы, ти. Урал батыр уның эргәһенә килеп баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды, ти. Шулай ҙа ҡаушап ҡалманы:

— Алыш бармы, көрәш бармы? — тине, ти.

Дейеү, ҡыйыу егеттәрҙе бик күп күреп тә, быгаса һис тә еңелмәгәнлектән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Минең өсөн барыбер. Нисек үлергә теләһәң, шулай булһын, — тип яуап ҡайтарҙы, ти.

Шунан былар тау һыртының иң ҡалҡыу еренә менеп баҫтылар ҙа тирләп-бешеп көрәшә башланылар, ти. Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр, ти. Көрәшә торғас, төш ауып, көн кискә һарҡты, ти. Бына бер заман дейеү Уралды күтәреп алып тороп ырғытты, ти. Урал биле-нән ергә батты, ти. Дейеү уны тартып сығарҙы — көрәш

йәнә башланды, ти. Дейеү Уралды йәнә атып бәрҙе, ти. Был юлы инде Урал муйынынан ергә батты, ти. Дейеү уны ике ҡолағынан тартып сығарҙы, ти.

Көрәш яңынан башланды, ти. Эй көрәшәләр, эй көрәшәләр, ти, былар, көрәшә торғас, кис булып, эңер төшә башланы, ти. Бына бер заман әллә кем булып ирәйеп йөрөгән дейеүҙе Урал, елтерәтеп күтәреп алып тороп, быраҡтырып ебәрҙе, ти — теге мәлғүн биленән ергә батты, ти. Батҡан еренән Урал тартып сығарҙы, ти, көрәш йәнә башланды, ти. Урал дейеүҙе тағы элеп алды, тағы һелкеп һалды, ти. Был юлы дейеү муйындарынан ергә батып, туғыҙ башы туғыҙ яҡҡа һерәйеп тороп ҡалды, ти. Туғыҙ башты берәм-берәм ҡолаҡтарынан тартҡылап, Урал дейеүҙе тартып сығарҙы, ти, — көрәш өр-яңынан ҡыҙып китте, ти. Дейеү алан-йолан ҡаранырға ла өлгөрмәне — Урал уны ҡапыл элеп алды, ти, туғыҙ башын туғыҙ яҡҡа борғолап, йән асыуы менән тағы атып бәрҙе, ти, дейеү ергә һеңде лә ҡуйҙы, ти. Яуыз дейеүҙең башына ҡиәмәт[1] килеүе шул булды, ти.

Ҡарағаш, бисара егеттең һөйәктәрен йыйып алып, күмеп ҡуяйымсы тип, тау башына менһә, Уралды һаусәләмәт көйө күреп, шатлығынан илап ебәрҙе, ти. Дейеү күренмәгәс, ғәжәпкә ҡалып:

— Дейеү ҡайҙа китте һуң? — тип һораны, ти.

Урал батыр:

— Мин уны ергә һеңдерә һуҡтым, — тип әйтеп тә өлгөрмәне, улар баҫып торған урындан өс-дүрт аҙым ғына ситтәрәк бөркөлөп-бөркөлөп төтөн күтәрелеп сыҡты, төтөн артынса ялҡын сыға башланы, ти.

Быны күреп, Ҡарағаштың:

— Был ни хәл? — тип һорауына, Урал батыр:

— Мин ошо урында дейеүҙе ергә һеңдерә һуҡҡайным. Ер был хәшәрәттең емтеген үҙенең ҡуйынына алыуҙан ерәнде, буғай. Шуғалыр, моғайын, янып, төтөнө сығып ята, — тип яуап бирҙе, ти.

Был тау ошо яныуынан туҡтамаҫ булды, ти. Шул көндән алып уны Янғантау тип йөрөтә башланылар, ти.

---

[1] *Ҡиәмәт* — заман ахыры (бында «әжәл» мәғәнәһендә).

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Ҡарағаш менән осрашҡанда, Урал батырҙың ниндәй һыҙаты асыла?
2. Урал батыр дейеү балаларына ниндәй хәйлә ҡора һәм ни өсөн?
3. Нисек уйлайһығыҙ: ни өсөн көрәш ваҡытында ергә батҡан Уралды дейеү, ә дейеү батһа, уны Урал тартып сығара?
4. Янғантауҙың барлыҡҡа килеүен халыҡ нисек аңлата? Үҙегеҙҙең яҡтарҙағы ер-һыу атамаларының килеп сығышын һорашығыҙ, яҙып алығыҙ. Шул атама һәм аңлатмаларҙың ни өсөн һаҡланыуын аңлатығыҙ.

## IV

Дейеүҙең башына еткәс, Урал батыр Янғантау булыр тау башында оҙаҡ торманы, ти. Кеҫәһенән теге өс бөртөк ҡылды алды ла өтөп ебәрҙе, ти. Өтөүе булды — Аҡбуҙаттың тып итеп ҡаршыға килеп баҫыуы булды, ти. Шунан Урал батыр Ҡарағашты менгәштереп алды ла Тереһыу юлы менән осортоп сығып китеп тә барҙы, ти.

Эй баралар, ти, эй баралар, ти. Йәйрәп ятҡан яландарҙы, күккә ашҡан тауҙарҙы, убып алыр упҡындарҙы, алҡынып аҡҡан даръяларҙы осоп үттеләр, ти. Бара торғас, Аҡбуҙат йәнә туҡтаны, ти. Туҡтаны ла, телгә килеп:

— Беҙ хәҙер Тереһыуға яҡынлаштыҡ. Мәгәр[1] уның юлын ун ике башлы дейеү быуып ята. Һиңә уның менән алышырға тура килер. Ялымдан өс бөртөк ҡылымды алып ҡал. Кәрәк булһам, шуларҙы өтөрһөң — мин килеп тә етермен, — тип әйтте, ти.

Урал Аҡбуҙаттың өс бөртөк ҡылын өҙөп тә алды — аты шунда уҡ юҡ булды, ти. Шунан Урал Ҡарағашҡа:

— Һин ошо ерҙә мине көтөп тор. Дейеүҙең башына еткәс, килеп алырмын. Бына һиңә ҡурайымды ҡалдырам. Юлым уңһа, ҡурай осонан һөт тамыр, уңмаһа, ҡан тамыр, — тип, дейеү менән алышырға китте, ти.

[1] *Мәгәр* — ләкин, әммә.

Бына алда Тереһыу сылтырап ағып ята, ти. Шишмә бейек тау аҫтынан ғына ағып сыға ла шунда уҡ әллә ҡайҙа, ер аҫтына инеп китә икән, ти. Йәне сыҡҡанға йән биреүсе, ауырыу йыҡҡанды аяҡҡа баҫтырыусы Тереһыу тирәһе өйөм-өйөм, тырым-тырағай ятҡан әҙәм һөйәктәре менән тулған ине, ти. Был шишмәне, бер тамсы һыуын да бирмәйенсә, ун ике башлы ҡарт дейеү һаҡлап ята икән, ти. Урал батыр күҙ күреме ерҙән үк:

— Эй, дейеү, юл бир, мин Тереһыу алырға килдем! — тип һөрәнләне, ти.

Дейеү, бер ҙә ыжламайынса, Тереһыу алдында ҡуҙғалмай ята бирҙе, ти. Урал батыр йәнә: «Юл бир!» — тип ҡысҡырғайны, дейеү, асыуы килеп, Уралды тыны менән үҙенә тартып ала башланы, ти.

Урал батыр дейеү ҡаршыһына килеп баҫҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды, ти. Шунда ла ҡаушап ҡалманы:

— Алыш бармы, көрәш бармы? — тине, ти.

Дейеү, былдай егеттәрҙе байтаҡ күреп тә, бығаса һис еңелмәгәнлектән, бер ҙә иҫе китмәй генә:

— Минең өсөн барыбер. Нисек үлергә теләһәң, шулай булһын, — тип яуап ҡайтарҙы, ти. Урал батыр:

— Ярай, улай булһа, — тип, билендәге алмас ҡылысын һурып алып, уңлы-һуллы сатрашлап һелтәгәйне, тирә-яҡҡа йәшен уттары сәсрәп китте, ти. Дейеүҙең күҙҙәре, шунан сағылып, асалаҡ-йомалаҡ булып торҙо, ти.

Урал:

— Ярай, улай булһа, — тип йәнә бер тапҡыр әйтте лә ҡылысы менән дейеүҙе тураҡлай башланы, ти. Һелтәгән һайын дейеүҙең бер башы ҡыйылып торҙо, ти.

Был ваҡытта Ҡарағаш ҡулындағы ҡурай осонан һөт тамды, ти. Ҡарағаш быны күреп бик һөйөндө, ти. Әммә күп тә үтмәне, дейеүҙең яман үкереүен ишетеп, тирә-яҡтағы вағыраҡ дейеүҙәр, аждаһалар уға ярҙамға килде, ти. Урал батыр уларына ла бирешмәне, ти, аяҡтарын кирә баҫып, башы болотҡа тейерҙәй булып, йәшен ялтлатып, алмас ҡылысын уңлы-һуллы һелтәй торҙо — һонолған берен ҡыя торҙо, ти.

Бына бер заман, дейеүҙе лә, аждаһаларҙы ла ҡыйратып бөттөм тигәндә генә, Урал батырҙың өҫтөнә һан-

һыҙ күп ен-пәрейҙәр көтөүе ябырылды, ти, тын да алдырмай егетте бөрөп алып бара башланы, ти.

Был ваҡытта баяғы ҡурайҙың башынан ҡан тамып-тамып ҡуйҙы, ти. Быны күреп Ҡарағаш бик ныҡ борсолдо, ти. Шунан ул ниҙелер хәтеренә төшөргәндәй торҙо ла, ҡурайҙа ишетер ҡолаҡҡа яғымһыҙ әллә ниндәй бер бейеү көйө тарта башланы, ти. Теге ен-бәрейҙәргә шул ғына кәрәк икән: Уралды яңғыҙ ҡалдырып, ҡурай тауышы ишетелгән яҡҡа йүгерештеләр ҙә, шунда барып, тыйыла алмайынса, бейергә керешеп тә киттеләр, ти. Баҡһаң, был уларҙың бейеү көйө булған икән, ти. Шул форсаттан файҙаланып, Урал батыр ун ике башлы дейеүҙең генә түгел, унын ярҙамсыларының да башына етте, ти.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. IV бүлекте һеҙ нисек исемләр инегеҙ?
2. Урал батырҙың ун ике башлы дейеү һәм уның ярҙамсылары менән алышын тасуирлағыҙ.
3. Ҡарағаш һылыу Уралға ярҙам кәрәк икәнен нисек белә һәм уға нисек ярҙам итә?

## V

Урал батыр: «Ен-пәрейҙәр донъяһын ҡыйратып, Тереһыу шишмәһен дейеү ҡулынан ҡотҡарҙым, хәҙер инде уның тереклек һыуы кешеләргә булыр», — тип шатланып, шишмә эргәһенә килһә, унда бер тамсы ла һыу юҡ ине, ти. Ни өсөн тиһәң, был һуғышта иҫән ҡалған дейеү пәрейҙәре, әҙәм затына ҡалмаһын тип, Тереһыуҙы эсеп ҡоротҡандар икән. Урал батыр шишмә янында күпме генә ултырмаһын, бер тамсы ла һыу сыҡманы, ти.

Урал батыр быға бик көйөндө, ти. Шулай ҙа уның дейеүҙәрҙе, аждаһа-йыландарҙы пыран-заран килтереп ҡырып ташлауы файҙаһыҙ булманы: бөтә тирә-яҡҡа йән керҙе, үләндәр, ағастар йәшәрҙе, ҡоштар һайраштылар, кешеләр йөҙөндә шатлыҡ балҡыны, ти.

Урал батыр, үҙенең Аҡбуҙатына менеп, алдына Ҡарағашты ултыртып алды ла Тереһыуҙы ташлап китеп тә барҙы, ти. Был урында Урал тураҡлаған дейеү пәрейҙәре, аждаһа-йыландар кәүҙәһенән ҙур бер тау өйөлөп ҡалды, ти. Ана шул тауҙы халыҡ телендә Яман-тау тип йөрөтә башланылар, ти.

Урал менән Ҡарағаш, ирле-ҡатынлы булып, донъя көтә башланылар, ти. Уларҙың өс улы булды, ти: өлкәне — Иҙел, уртансыһы — Яйыҡ, кинйә улдары — Һаҡмар.

Хәҙер инде был тирәгә Әжәл һирәк килә торған булып китте, ти. Ни өсөн тиһәң, ул бәһлеүән Урал батырҙан, уның йәшен уты сығара торған ҡылысынан шөрләй ине, ти. Бына шул арҡала халыҡ бик ишәйеп китте, ти. Шул тиклем күбәйҙе, хатта эсер һыу ҙа етмәй башланы, ти. Урал батыр, был ауыр хәлде күреп, берҙән-бер көндө ҡылысын ҡынынан тартып алды ла баш өҫтөндә өс тапҡыр һелтәп, ергә сапты, ти. Сапты ла:

— Бына ошо ерҙә ҙур һыуҙың башы булыр! — тип әйтте, ти. Үҙе шунда уҡ өлкән улы Иҙелде саҡырып килтереп: — Бар, улым, аяғың тартҡан яҡҡа сығып кит тә халыҡ араһында йөрө, иллә-мәгәр, берәй ҙур ағым һыуға барып етмәйенсә, артыңа әйләнеп ҡарайһы булма! — тип әйтте, ти.

Атаһы һымаҡ ҙур кәүҙәле Иҙел, аяғының тәрән эҙен ҡалдыра-ҡалдыра, төшлөккә[1] ҡарай сығып китте, ти. Атаһы уның артынан күҙ йәштәрен мөлдөрәтеп ҡарап ҡалды, ти. Сөнки ул Иҙелдең кире әйләнеп ҡайтмаясағын белеп тора ине, ти.

Эй бара, ти, Иҙел, эй бара, ти, туҡтап хәл йыйыуҙы ла белмәй, ти. Бара торғас, уңға ҡайырылып китте, шунан төньяҡҡа йүнәлде, ти. Эй китте, ти, Иҙел, эй китте, ай китте, йыл үтте, ти, шунан ул көнбайышҡа юл тотто, ти. Бара торғас, ҡамышы ҡама менән тулған ҙур бер йылғаға килеп етте, ти. Шунан, Иҙел артына әйләнеп ҡараһа, уның эҙенән киң йылға булып ап-аҡ һыу урғылып ағып килеп, ошо ҡамалы йылғаға ҡоя башланы, ти.

---

[1] *Төшлөк* — көньяҡ.

Йәмле Ағиҙел йылғаһы ана шулай барлыҡҡа килде, ти.

Иҙел батыр оҙон юлға сығып киткән көндө Урал ҡалған ике улын да шундай уҡ шарт менән илгә сығарып ебәрҙе, ти. Ләкин улар ағаларына ҡарағанда ҡыйыуһыҙыраҡ, түҙемһеҙерәк булғандар, ти: Иҙел батыр һымаҡ, бер үҙҙәренең генә ауырлыҡтар менән тулы оҙон юлды үтергә йөрәктәре етмәне, ти. Һаҡмар үҙенең тыуып үҫкән еренән алыҫлаша башлағас, яманһыулап китеп: «Ни эшләп әле мин әллә ниндәй ят ерҙәрҙә япаңғыҙым ҡыҙырып йөрөйөм? Яйыҡ ағайыма барайым да ҡушылайым, бергә йөрөүе еңел дә, күңелле лә булыр», — тип, Яйыҡҡа барып ҡушылды, ти.

Ҡайһылай ғына булмаһын, халыҡ Иҙелгә генә түгел, Яйыҡ менән Һаҡмарға ла бөткөһөҙ рәхмәт уҡыны, шундай данлы улдар үҫтергәне өсөн, Урал батырға оҙон ғүмер теләне, ти.

Ләкин йөҙ ҙә бер йәшкә еткән Урал батырҙың ғүмере күп ҡалмағайны: уның, ҡартайып, хәлһеҙләнә башлауын күптән көтөп йөрөгән Әжәл яҡынлашҡайны инде, ти. Бына хәҙер Урал батыр хәл эсендә ята. Уның янында, изгелекле батырыбыҙҙан айырылабыҙ инде, тип ҡайғырышып, бөтә халыҡ йыйылған, ти. Шул ваҡыт әле генә әллә ҡайҙан ҡайтып төшкән ир уртаһы бер кеше, йыйылған халыҡты икегә айырып үтте лә, үлем түшәгендә ятҡан Урал батырға ҡарап:

— Эй батырҙың батыры Урал атлы атабыҙ, һин түшәккә ятҡан көндө үк мин, халыҡ үтенеүе буйынса, теге заман ен-пәрейҙәр эсеп бөтөрөп киткән Тереһыуға барғайным. Ул ҡоромаған булған икән: унда ете көн, ете төн ултырып, һуңғы тамсыларынан бына бер мөгөҙ тереклек һыуы йыйып алып ҡайттым. Шуны халыҡ исеменән һиңә тапшырам. Ҡәҙерле атабыҙ, һин шул һыуҙы эсеп ебәр ҙә, үлемдең ни икәнен дә белмәйенсә, халҡың бәхетенән мәңге йәшә! — тип мөгөҙҙө түшәктә ятҡан Урал батырға һондо, ти.

— Тамсыһын да ҡалдырмай эс, Урал батыр! — тип үтенде, ти, халыҡ та.

Урал батыр әкрен генә тороп аяғына баҫты, Тереһыуҙың һуңғы тамсылары һалынған мөгөҙҙө уң ҡулы менән

алды, шунан халыҡҡа баш эйеп, рәхмәтен белдерҙе лә мөгөҙҙәге һыуҙы уртланы, ти. Ләкин һыуҙың бер тамсыһын да йотманы, бер алдына, бер артына әйләнеп, бер уңға, бер һулға ҡарап, бөтә тарафҡа ла бөркөп сыҡты, ти.

Шунан:

— Мин — бер кеше, һеҙ — күп кеше; мин түгел, ерһыу үлемһеҙ булһын; быуынға быуын бәйләнһен, әҙәм заты ишәйһен, бар тереклек йәшәһен. Минең үлемһеҙлегем шул булыр, — тине, ти.

Урал батыр шулай тип әйтеп бөтөрөүгә, тирә-яҡҡа йәм инде, йән инде, ти: аяҡ аҫты сиҙәмләнде, ағастар йәшелләнде, төрлө еләк-емеш өлгөрҙө, гөлдәр сәскә атты, аҫыл ҡоштар һайрай башланы; сылтырап шишмәләр аҡты, ҡуйы ҡамышлы күлдәр барлыҡҡа килде, шул күлдәрҙә, Ағиҙелгә, Яйыҡҡа, Һаҡмарға килеп ҡушылған яңы йылғаларҙа аҡҡоштар ҡаңғылдашып йөҙөргә, баш осонда аҡсарлаҡтар сырылдашып осорға тотондо, ти.

Кешенең бына шул йәмле донъяла йәшәгәндән йәшәгеһе килде, ти. Шунда тыуһан йәшлек бер сәсән, халыҡ алдына сығып, ҡалҡыуыраҡ ергә баҫып алды ла былай тип һамаҡланы, ти:

Ай, тыуған ер, тыуған ер,
Олатайҙар торған ер,
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған тыуған ер.
Туғайҙары түшәктәй,
Талы, муйылы ҡурсаҡтай,
Балтырғаны беләктәй,
Һарынаһы силәктәй,
Сәскәләре мең төҫлө,
Иҫертерлек хуш еҫле,
Йәйрәп ятҡан еребеҙ!
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп еребеҙ;
Алырын аңдып йөрөгән
Бүреһе күп еребеҙ;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп еребеҙ;
Ыҫпай баҫып йөрөгән

Төлкөһө күп еребеҙ;
Балығы аттай тулаған,
Ҡамаһы ҡуйҙай һулаған,
Һыуы ярына һыймаған
Йылғаһы күп еребеҙ!
Ай, тыуған ер, тыуған ер,
Олатайҙар торған ер,
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер!

Ҡарт сәсән ана шулай үҙе йәшәгән ерҙең байлығына, матурлығына һоҡланып ҡобайыр әйтте, ти. Халыҡ ҡыуанысына ҡыуанып, Урал батыр шул мәлдә донъя ҡуйҙы, ти.

Халыҡ Урал батырҙы бик ҙурлап, хөрмәтләп, ҡалҡыу ергә күмде, ти. Һәр кем уның ҡәбере өҫтөнә бер ус тупраҡ һалып сыҡты, ти. Был йола быуын-быуын туҡтаманы, ти. Көн үтте, йыл үтте, ти. Урал батырҙың ҡәберенән кеше өҙөлмәҫ булды, ти. Уның ҡәберенә услап һала торғас, шул тиклем күп тупраҡ өйөлдө, ҡәбер өҫтөндә хатта бик ҙур тау барлыҡҡа килде, ти.

Ана шул тауға халыҡ Урал тигән исем биргән, ти. Унда Урал батырҙың һөйәктәре әле лә һаҡлана икән: Урал тауынан сыға торған бөткөһөҙ күп алтын-көмөш, төрлө-төрлө аҫыл таштар тигәнебеҙ ана шул Урал батырҙың һөйәктәре икән ул.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Ни өсөн Урал, башҡаны түгел, Ҡарағашты иш итә?
2. Урал батырҙың үҙ улдарын ҡайтмаҫ юлға оҙатыуының, Тереһыуҙы ауыҙ итеүҙән баш тартып, тирә-яҡҡа бөркөүенең мәғәнәһен аңлатығыҙ.
3. Туҡһан йәшлек сәсәндең ҡобайырын иғтибар менән уҡып сығығыҙ: тыуған ер матур, тыуған ер ғәзиз тигән идея унда нисек асыла?
4. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: әкиәт ни өсөн «Урал батыр» тип аталған? Урал батыр кемдәрҙең бәхетле йәшәүе өсөн көрәшә? Әкиәттең төп идеяһын нисек билдәләргә булыр?

5. Әкиәттән Башҡортостан тәбиғәтенә хас билдәләрҙе табығыҙ. Урал тауы Урал батыр ҡәберенән хасил булған, тип аңлатыуҙын мәғәнәһе хаҡында уйланығыҙ.
6. Тыуған ер, тәбиғәт һәм кеше яҙмышы бәйләнеше хаҡында әңгәмәләшегеҙ.

## БАТЫРҘАР ТУРАҺЫНДА ӘКИӘТТӘР

Әкиәттәрҙең ни икәнен һеҙ бәләкәй сағығыҙҙан уҡ беләһегеҙ. Башҡорт халыҡ әкиәттәре араһында хайуандар тураһындағы, тылсымлы, тормош-көнкүреш әкиәттәре тигән төркөмдәр барлығы ла билдәле һеҙгә. Бишенсе класта һеҙ өйрәнгән «Алпамыша», «Ҡамыр батыр», әле танышҡан «Урал батыр», «Аҡъял батыр» ишеләрен батырҙар тураһындағы әкиәттәр тип йөрөтәләр.

Электән таныш әкиәттәрҙе иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле. Әкиәт геройы маҡтансыҡ ағайҙары барған йыйында ҡатнашырға теләй. Ләкин уның ҡарар төҫө лә, һыны ла, аты, туны ла юҡ. Бындай саҡта ул нимә эшләй? Кеҫәһенән ҡыл сығара ла шуны өтә йә һыҙғырта — һә тигәнсе алдында бынамын тигән толпар пәйҙә була. Таҙ (геройҙы ағайҙары, ғәҙәттә, шулай тип кәмһетәләр), толпарҙың кәңәшен тотоп, уның бер ҡолағынан үтеп, икенсеһенән сығыуы була — ҡарап туйғыһыҙ затлы кейемле, һомғол кәүҙәле харап матур баһадирға әүерелә лә ҡуя. Шул тылсымлы толпар ярҙамында ул маҡтансыҡ ағайҙарының, халыҡ әйтмешләй, танауына сиртә: бәйгелә батша ҡыҙының бүләген бары ул ғына ала. Аҙаҡ батша кейәүе булып китә.

Йәки шундай картинаны хәтерләгеҙ. Егет ел етмәҫ етеҙ Ерәнсәйендә елеп килә — артынса йә мәскәй, йә ялмауыҙ, йә дейеү етеп килә. Инде еттем, инде тоттом тигәндә, егет тарағын һелтәп ебәрә — урман пәйҙә була ла теге яуыздың юлын быуа. Уны ярып үтһә, ҡайраҡ ырғыта — ҡая ҡалҡа, көҙгө һелтәй — күл яһала... Бик ҡыйын хәлгә ҡалғанда, хәүефкә тарығанда, герой бына шулай тылсым ярҙамында еңеп сыҡһа, ундай әкиәттәрҙе тылсымлы әкиәттәр, тиҙәр.

Батырҙар тураһындағы әкиәттәр ҙә асылда тылсымлы әкиәттәр төрөнә ҡарай. Әммә уларҙан күп яҡтары менән айырыла. Уларҙың геройы, тылсымға ҡарағанда, үҙенең беләк көсөнә таяна. Уның иҫ киткес батыр булып китеүе донъяға килеүенән үк билдәле. Ул мөғжизә ярҙамында тыуа. «Ҡамыр батыр» әкиәтендә, мәҫәлән, батыр булыр ир бала ҡамырҙан ярала. Мөғжизә менән донъяға килгән баланың үҫеүе лә мөғжизә: ул ай үҫәһен — көн үҫә, йыл үҫәһен — ай үҫә, егет булып та етә. Унан инде көсөн дә һынарға (ил күрергә, эш эҙләргә, ҡыйырһытылғандарҙы ҡурсаларға) юлға сыға. «Урал батыр» әкиәтенең геройы Әжәлде тотоп үлтерергә була, «Аҡъял батыр» әкиәтенеке ил күреп, аҡыл алырға теләй. Ә Ҡамыр батырҙы, белеүегеҙсә, илде бөлдөрөп торған дейеү батшаны юҡ итеү маҡсаты юлға саҡыра.

Көндәлек тормошта беҙ һәр ваҡыт арттырып һөйләргә яратабыҙ. Эшләйһе эш мөһим дә, ауыр ҙа булһа: «Алда тауҙай эш тора», — тигән булабыҙ; берәйһе ҡыуанһа: «Башы күккә тейҙе», — тибеҙ. Батырҙар тураһындағы әкиәттәргә быңдай ҡабартыуҙар айырыуса тәбиғи. Улар хатта был жанрҙы жанр иткән мөһим билдәләрҙән иҫәпләнә. Ҡамыр батыр өй ҙурлығы ташты, бер ни шайы күрмәй, һыңар ҡулы менән генә күтәрә. Урал иһә айырыуса ҡеүәтле батыр итеп күрһәтелә: башы болотҡа тейә яҙып тора. Шуға кәүҙәләренән Ямантау хасил булырлыҡ дейеүҙәрҙе еңеүенә ғәжәпләнмәйһең.

Батырҙар тураһындағы әкиәт геройы таһыллы юлдаштарға юлыға. Улар ҙа, төп герой кеүек, саманан тыш арттырып һынландырыла. Урман батыр — урманды, Тау батыр тауҙы күсереп ултырта ала. Ҡайһы саҡта төп геройҙың ҡеүәте хаҡында уны юлдаштарына сағыштырыу юлы менән әйтелергә лә мөмкин. Аҡъял батырҙың буй-һыны, беләк көсө хаҡында, мәҫәлән, өҙөп кенә әйтелмәй. Әммә ул тау тиклем тауҙы, урман хәтле урманды япа-яңғыҙы күсерерлек батырҙарҙы һыңар бармағы менән генә элеп алырлыҡ үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш иргәйелде еңә. Шунан Аҡъял батырҙың да сикһеҙ бәһлеүән булыуы тураһында төшөнсә алабыҙ ҙа ҡуябыҙ.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ:** кешенең йәки әйберҙең тышҡы сифаттарын, һәләтен ҡабартып, ғәҙәттән тыш арттырып һүрәтләүҙе г и п е р б о л а  а л ы м ы, тиҙәр.

Батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙә төп герой үҙенә йөкмәтелгән бурысты, ғәҙәттә, юлдаштары менән бүлешеп атҡара: йүгерешергә булһа — Йүгерек батыр, уҡ атыусы кәрәккәндә, Уғатыр батыр эшкә тотона һ. б.

Ә бына Аҡъял батырҙың юлдаштары ышаныслыраҡ булып сыға, ҡушылған эште ул теләгәнсә үтәй алмайҙар, етмәһә, алдашалар ҙа, хыянаттан да сирҡанмайҙар. Бындай осраҡта әкиәттең төп геройына бөтә эште үҙ өҫтөнә алырға тура килә. Аҡъял батыр, мәҫәлән, үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт менән дә үҙе алыша, уҡ атыу бәйгеһендә лә, бил һынашҡанда ла үҙе ҡатнаша, һәм һәр саҡ еңеп сыға. Юлдашһыҙ булғанда ла, әкиәт батыры бөтә бурыстарҙы үҙе атҡара. Урал батыр — ана шундай геройҙарҙың береһе. Туғыҙ башлы дейеүгә лә, ун ике башлыһына ла, уларға ярҙамға килгән яуыз заттарға ла бер үҙе ҡаршы тора.

Иҫ киткес көслө батырҙар, батырҙар тураһындағы әкиәттәрҙең геройы ла, уның юлдаштары ла, көстәре менән маһайып, көсө еткәнде түбәләп йөрөмәй. Көсһөҙҙәрҙе, ҡыйырһытылғандарҙы ҡурсалай.

Халыҡ әкиәт батырын ер өҫтөндә генә йөрөтмәй. Ер аҫтына ла төшөрә, күккә лә күтәрә. Ҡайҙа юлыҡмаһын, ни ҡыланмаһын, әкиәт батыры һәр саҡ ғәҙеллек өсөн көрәшеүсе булып хәтерҙә ҡала.

Аңлашылыуынса, әкиәттәрҙә даими рәүештә ҡабатланып килгән уртаҡ алымдар йыш осрай. Әкиәттән әкиәткә күсеп йөрөгән уртаҡ билдәләр араһында эпитеттар ҙа бар.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ:** төрлө әҫәрҙәрҙә бер төрлө ҡабатланып килгән эпитеттарҙы д а и м и  э п и т е т т а р тип йөрөтәләр. Әкиәттәргә хас даими эпитеттарға миҫалдар: *тере һыу, үле һыу; ете ҡабып, бер йотор ялмауыҙ; алтын балыҡ, алтын ашыҡ; суйын һарай; энә буйы юл; үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш; алмас ҡылыс; аяҡ тартҡан яҡ; баш һуҡҡан яҡ; ҡарсыға түш — тар бөйөр һ. б.*

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Тылсымлы әкиәттән батырҙар тураһындағы әкиәт ниндәй билдәләре менән айырыла?
2. Дәрестә өйрәнгән һәм үҙ аллы уҡыған, ололарҙан ишеткән әкиәттәрҙән даими эпитеттар, гиперболалар табығыҙ, уларҙың ни өсөн ҡулланылыуын әйтегеҙ.
3. Мәктәптә әкиәт кисәһе үткәрегеҙ: а) әкиәт жанрҙары хаҡында ҡыҫҡа хәбәрләмәләр әҙерләгеҙ; б) ололарҙан үҙегеҙ яҙып алған әкиәттәрҙән альбом төҙөгөҙ; в) класта өйрәнгән әкиәттәргә иллюстрациялар яһағыҙ, шуларҙан күргәҙмә ойоштороғоҙ; г) берәй әкиәт сюжетын сәхнәләштерегеҙ.

## ҠАРИҘЕЛ

Борон заманда ҡалын урман эсендә, бер йылғаның башында, йәшәгән, ти, бер батыр. Үҙ ғүмерендә күпте күргән, күп йөрөгән, яу сапҡан булған, ти. Һуңғы тапҡыр яуға барған сағында, батырлыҡ күрһәткәне өсөн, был егетте батша үҙе янына саҡыртып алған да әйткән, ти:

— Егет, илде һин һаҡлап алып ҡалдың. Бының өсөн һиңә бүләк бирәм. Рәхмәт. Йәнең ни теләй, минән шуны һора.

— Яҡшы һүҙеңә рәхмәт, — тип әйтте, ти, егет. — Миңә байлыҡ кәрәкмәй, һин, батшам, миңә ике төрлө нәмә бирһәң, шул еткән.

— Рәхим ит, улым, — тип әйтте, ти, батша, — ни теләһәң, шуны бирергә ризамын.

— Батша хәҙрәттәре, һин миңә, беренсеһе, — тип әйтте, ти, егет, — мөмкин булһа, ер, ирек бир. Мин шул ергә китәйем дә үлгәнсе иректә йәшәйем.

— Ярай, — тип әйтте, ти, батша, — уйлап ҡарарбыҙ. Икенсе үтенесең ни?

— Икенсе үтенесем — ат. Миңә һин, батшам, алтын һарайыңдағы Ҡара айғырыңды бир. Ситтә йәшәгәндә, миңә иптәш булыр.

Батша уйға ҡалды, ти, сөнки был егеттең ике үтенесе лә ауыр ине, ти.

— Әйткән һүҙ — атҡан уҡ, батшам, үҙеңдең һүҙеңде иҫеңә төшөр...

Шунан батша:

— Ҡара айғырға селтәрле йүгән кейҙерегеҙ, һыртына көмөш эйәр һалығыҙ. Батырҙар батыры яугирыма тотто-

роғоҙ! — тип әмер бирҙе лә, — һин иректе, егет! — тип ҡулына «фәлән ер ошо егеттеке булыр» тигән ярлыҡ[1] тотторҙо, ти.

Батыр егет, батша биргән Ҡара айғырҙы менеп, осҡан ҡоштай елеп, тыуған иленә, Урал тауҙарына, үҙенә бирелгән биләмәләргә, ҡайтып төштө, ти.

Ҡара айғырға һоҡланмаған кеше ҡалманы, ти. Бик ямандар көнләшә башланылар, ти. Дуҫ бар, дошман бар, айғырға ҡул һалырға теләүселәр ҙә ишетелә башланы, ти. Шунан был батыр уйлай: «Минең иркем бар, менергә айғырым бар. Ни эшләп әле мин бында ятам?» Китте, ти, был сығып, йөрөнө, ти, ил гиҙеп, шунан бер тау итәгенә барып урынлашты, ти. Тауҙы умырып өң яһаны ла шунда йәшәй башланы, ти.

Ул арала инде Ҡара айғырҙың даны бар донъяға таралып өлгөрҙө, ти. Уны күрер өсөн сапҡындар төрлө-төрлө илдәрҙән килеп торҙо, ти. Әллә ҡайһы илдәрҙән әллә ниндәй батшалар, айғыр өсөн әллә күпме бүләктәр бирмәк булып, әллә нисәмә кеше ебәрҙе, ти. Иректе батырға иректе көндәр бөттө, ти: һис тынғы таба алмай, аптырауға ҡалды, ти. Шундай саҡта айғыр, телгә килеп, былай тип әйтте, ти:

— Эй, егетем, йоҡлап ятма, әйҙә китәйек. Беҙ икәү юлда булһаҡ, берәү ҙә тота алмаҫ, мине һинән ала алмаҫ.

— Юҡ, — тип әйтте ти, егет, — мин һине, айғырҡайым, былай ҙа бирмәм. Бына ошо ҡая таш эсенә йәшерермен.

Ул, ҡаяны тумырып, айғырға мәмерйә-һарай өңөп, ауыҙын көс еткеһеҙ ҙур таш менән ябып, бикләп тә ҡуйҙы, ти. Теге айғырға ҡыҙығыусылар бөтә ерҙе аҡтарып киләләр. Юҡ, таба алмайҙар, ти.

Ҡара айғыр таш һарайҙа яҡтыға зарыға, болон, ҡырҙарға, сылтырап аҡҡан шишмәләргә зарыға. Шунан ул моңло итеп бер кешнәп ебәрә. Әллә ҡайҙарға киткән, ти, уның тауышы. Шуны ишетеп ҡалып, йылғыр сапҡындар килеп тә еткәндәр, ти... Аңдып тороп, теге батырҙы тотоп алғандар, шунан айғыр ятҡан урынды

---

[1] *Ярлыҡ* — танытма.

табып, өң ауыҙындағы ташты ҡутара башлағандар. Эште һиҙеп ҡалған ҡара айғыр мәмерйә асылғанды көтөп кенә торған да, ти, баҫҡан ерен уя тибеп, алға атылған — шул ерҙән урғылып, шишмә килеп сыҡҡан. Айғыр урмандар, тауҙар аша, әле уңға, әле һулға ялтана-ялтана, саба ла саба икән. Артҡы тояҡтары уя типкән ерҙән урғылып сыҡҡан һыу ҙа унан ҡалышмай, ти: уңға ҡайырылһа — уңға, һулға тартылһа — һулға борола-борола, эҙ яҙҙырмай, эйәреп килә, ти. Ағиҙел буйҙарына барып сыҡҡас ҡына, Ҡара айғырҙан күҙ яҙлыҡтырған, ти. Айғырҙың ҡайҙа китеп, ҡайҙа юғалыуын ишетеүсе лә, күреүсе лә булмаған. Ә уның артынан килгән шишмә ҙур йылғаға әүерелеп, Ағиҙелде юлдаш иткән, ти.

Бына шулай барлыҡҡа килгән, ти, Ҡариҙел йылғаһы.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Батыр егет ни өсөн батшанан байлыҡ түгел, ә ирек, ер һәм ат һораған? Ошо теләктә башҡорт халҡының ниндәй хыялы, ынтылыштары һәм үҙенсәлеге сағылған?
2. Яттарҙың көнләшеүе, эйәһенән тартып алырға тырышыуы Ҡара айғырҙың ниндәй сифаттары тураһында һөйләй?
3. Атҡа ундай сифаттар биреүҙең ниндәй әһәмиәте бар?
4. Ҡариҙелдең халыҡ тормошонда уйнаған ролен иҫәпкә алығыҙ. Шунан сығып, уның донъяға килеүе, бормаланып ағыуы ни өсөн Ҡара айғырға бәйләп аңлатылыуы хаҡындағы фекерҙе дөрөҫләгеҙ, әңгәмәләшегеҙ.

## ЛЕГЕНДА ТУРАҺЫНДА

Әле генә һеҙ уҡыған «Ҡариҙел» тигән халыҡ әҫәре әкиәтте хәтерләтә: «борон заманда» тип башлана, уйҙырмаға таяна, ел еткермәҫ ат образы ла бар. Әммә ул әкиәт түгел. Әкиәттән айырмалы рәүештә, унда ваҡиға билдәле географик урында бара. Уйҙырмаға ҡоролһа ла, тормошта булған хәл һымаҡ хикәйәләнә. Әҫәр аңлатмалылыҡҡа ҡоролған — Ҡариҙелдең барлыҡҡа килеүен аңлата; геройҙың бәхетһеҙ яҙмышы һүрәтләнә.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ:** ысынбарлыҡта ҡасандыр булған йәки уйҙырма ваҡиғаларҙы ла булған хәл итеп тасуирлаған һәм аңлатмалылыҡҡа ҡоролған халыҡ хикәйәһен легенда тип йөрөтәләр.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Тыуған яғығыҙҙа таралған легендаларҙы яҙып алығыҙ.
2. Үҙегеҙ белгән легендаларҙы һәм «Ҡариҙел»де күҙ уңында тотоп, был жанрҙың әкиәттәрҙән айырмаһын билдәләгеҙ.

## БӘЙЕТТӘР

Бәйеттәр башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында иң йәш жанр иҫәпләнә. Уның барлыҡҡа килеүендә мәҙрәсәләр ҙур роль уйнаған. Шәкерттәр үҙҙәренең ҡуйын дәфтәренә ғибрәтле хәл-ваҡиғаларҙы тасуирлаған шиғри хикәйәләр яҙып, шуны өйҙән өйгә йөрөп, көйләй-көйләй һөйләп хәйер-саҙаҡа йыйыр булған.

Бәйет жанрының үҫеүенә уҡымышлы һалдаттар ҙа ҙур өлөш индергән. Улар һуғыш, әсирлек фажиғәләрен тасуирлап, көйлө хаттар яҙыр булған. Илдә уларҙы күмәкләп уҡығандар, отоп алып, башҡаларға таратҡандар.

Бәйеттәрҙең яҙыу мәҙәниәте менән бәйле булыуы, ғәҙәттә, уларҙың үҙҙәрендә үк әйтелә.

Яҙа-яҙа тамам итәм,
Инде бөттө һүҙҙәрем...

*(«Рус-япон һуғышы бәйете»)*

Быны яҙҙым таш казарма эсендә
Сәғәт дүрттә шаршамбы көн кисендә...

*(«Мөхәмәтсәлим бәйете»)*

Бәйеттәге ошондай һүҙҙәр һәм ваҡиғаның «мин» исеменән тасуирланыуы был жанрға ҡараған әҫәрҙәрҙең авторлы булыуын, шәхси ижад емеше булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Тап шуға күрә лә, бәйеттәр йыш ҡына сығарыусыһының исеме менән йөрөтөлә («Ғиниәт Кейекбаев бәйете», «Сәлмән Нуриев бәйете», «Йөҙөмбай

бәйете» һ. б.) йә иң аҙаҡтан авторы, хатта уның адресы ла әйтеп ҡуйыла.

Беҙ һуғышҡан ерҙәрҙә
Әҙәм үтмәҫлек урман.
Был бәйетте яҙыусы
Ҡыҙыл армеец Ҡорбан.

*(«Ҡорбан Әхмәтшин бәйете»)*

Илем — Теләш, Әхмәтғәли бәнем атым,
Ғәйеп итмәң, тиеп ниңә ҡуйған атын.
Үҙең яҙған яҙыуға ҡул ҡуймаһаң,
Мәҙәниҙә[1] ҡабул булмай яҙған хатың.

*(«Әхмәтғәли бәйете»)*

Авторлыҡ билдәләре булыуына ҡарамаҫтан, бәйеттәр фольклор жанры булып ҡала. Сөнки, берҙән, уларҙы сығарыусылар үҙҙәренә тиклемге бәйетселәр традицияһына эйәрә, икенсенән, халыҡ иғтибарына лайыҡ булырҙай һәр яңы бәйет телдән телгә, ҡулдан ҡулға (яҙма рәүештә) күсә, үҙгәрә бара.

Килтерелгән миҫалдар бәйеттәрҙең традицион тамамланышлы булыуы тураһында һөйләй. Улар йыш ҡына ҡалыплашҡан юлдар менән дә башлана.

Бисмиллаһи вә биллаһи,
Етте ҡорбан ғәйете,
Беҙ әйтәйек, һеҙ тыңлағыҙ,
Балҡан һуғышы бәйете...

Ә инде бәйеттең төп өлөшө ваҡиғаны эҙмә-эҙ тасуирлап хикәйәләүҙән тора.

Теҙмә телмәргә нигеҙләнеүе бәйеттәрҙе йырға яҡынайтһа ла, әле әйтелгән билдәләре уларҙы айыра.

Борон бәйеттәр күберәк фажиғәле хәлдәргә бағышланған. Хәҙер иһә патриотик темалы, сатирик, юмористик бәйеттәр ҙә осрай. Бынан тыш, күп бәйеттәрҙең

[1] *Мәҙәниҙә* — мәҙәниәткә эйә булған кешеләр араһында.

борон-борондан тарихи йөкмәткеле булыуын да билдәләргә кәрәк.

Телгә алынған билдәләренән аңлашылыуынса, бәйеттәр — реалистик әҫәрҙәр. Әммә ғибрәтлелек йә сатира маҡсатында улар фантастика алымдарын файҙаланырға мөмкин.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Бәйет жанрының тыуыуы нимә менән бәйләнгән?
2. Бәйеттәргә ниндәй билдәләр хас?
3. Ололарҙан бәйеттәр яҙып алығыҙ. Уларҙың төп үҙенсәлеген, әһәмиәтен билдәләгеҙ.

## ГЕРМАН ҺУҒЫШЫ БӘЙЕТТӘРЕ

### Йөҙө ҡара Николай

Тарих мең дә туғыҙ йөҙ ҙә
Ун дүртенсе йылында.
Герман менән һуғыш сыҡты
Ураҡ өҫтө мәлендә.

Һалдат итеп алдылар,
Өҫкә шинель һалдылар;
Бай-бетсәнең малайҙары
Өйҙә тороп ҡалдылар.

Тау башында тимер бүкән,
Типкеләмә, Николай,
Бер мин әйткән бәйет түгел,
Үпкәләмә, Николай.

Германдарҙың туптары
Онтап ташлай ҙур ташты;
Беҙ ҙә былай йөрөмәҫ инек,
Һин ашамаһаң башты.

Машинала килгән саҡта,
Ашаманыҡ аштарҙы,

Һин, Николай, йөҙөң ҡара,
Ашағанға баштарҙы...

Позицияға[1] барған саҡта,
Башлыҡ алдан китәлер;
Йөҙө ҡара Николай,
Башты һәләк итәлер.

## Һуғышҡа кергәс

Машинала килеп төштөк,
Варшау[2] тигән ҡалаға;
Уҡығандар доға ҡылһын[3]
Беҙ бәхетһеҙ балаға.

Унан киттек Архангелгә,
Көндәр әйләнде төнгә;
Окоптарҙа ятҡан саҡта,
Әжәл көтәбеҙ көн дә...

## Һуғыштан сыҡҡас

...Делегаттар һайланыҡ
Һуғышты бөтөрөргә,
Улар Рәсәйгә ҡайтып,
Беҙгә мир килтерергә.

Делегаттарҙы йыйып,
Рәсәйгә оҙатҡандар;
Рәсәйгә ҡайтып еткәс,
Барын тотоп япҡандар.
Ун һигеҙ һалдат китһә лә,
Бары икәүһе ҡайтты.
Рәсәй хәлдәрен улар
Беҙгә аңлатып әйтте.

---

[1] *Позиция* — һуғыштың алғы һыҙығы.
[2] *Варшау* — Варшава.
[3] *Доға ҡылыу* — бында изге теләктә булыу мәғәнәһендә бирелгән.

Улар ҡайтҡас, беҙ ҙә инде
Быш-быш һөйләшә башланыҡ;
Булған сохариҙар бөттө,
Үлгән ҡуян ашаныҡ.

Йыйылып һөйләшмәгеҙ, тип,
Ҡайһыбыҙҙы аттылар;
Һалдаттарҙың ҡайһы берен
Казематҡа яптылар.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Бәйеттә «герман һуғышы» тураһында һүҙ барыуы ниндәй юлдарҙа һәм нисек әйтеп бирелгән?
2. Һалдаттарҙың батшаға мөнәсәбәте нисек сағылған? Ни өсөн бәйетсе һалдат Николай батшаны битәрләй?
3. Бәйеттә һалдат яҙмышының ниндәй дәүерҙәре хикәйәләнә? Бәйетсе уҡыусыла (тыңлаусыла) ниндәй тойғо тыуыуына иҫәп тота?
4. Бәйеттә хәҙер көндәлек телмәрҙә һирәк ҡулланылыусан йә бөтөнләй төшөп ҡалған, шулай уҡ сит телдәрҙән килеп ингән һүҙҙәр бар. Шуларҙы табығыҙ.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ:** 1. Хәҙерге һөйләү теленән төшөп ҡалған йә бик һирәк ҡулланыла торған һүҙҙәрҙе а р х а и з м тиҙәр. Әле һеҙ уҡыған бәйеттә *пушка, әжәл* (үлем), *доға ҡылыу* (изге теләктә ҡалыу) шуға миҫал. 2. Берәй төшөнсәне биреү өсөн, халыҡ, үҙ һүҙе етмәһә, сит тел һүҙен ҡабул итә. «Герман һуғышы бәйеттәре»ндәге *позиция, окоп, взвод* шундай һүҙҙәр рәтенә инә. Бынан тыш, телмәргә йәнлелек индереү өсөн, халыҡтың үҙ телендә булған һүҙҙәр урынына ла сит ил һүҙҙәре ҡулланыла. Уларҙы в а р в а р и з м д а р тиҙәр. Мәҫәлән: *долой, давай мир*. 3. Билдәле бер төбәктә йәшәүселәр телендә генә ҡулланылыусы һүҙҙәрҙе д и а л е к т и з м д а р тиҙәр. Бәйеттәге *бүкән* (ултырғыс), «Аҡъял батыр» әкиәтендәге *ҡылжайманы* (иҫе китмәне) һүҙҙәре — диалектизм.

## ДОН ДАЛАЛАРЫНДА[1]

Бирге яҡтан иҫкән елдәр
Арғы яҡҡа иҫерме?
Иҫкән елдәр сәләмемде
Иләмә алып китерме?

Ҡыҙыл армеец Яҡупов
Башҡортостан иленән;
Яҙам ошо бәйетемде,
Яраланғас билемдән.

Иҫән булһам, Тыуған илгә
Бер әйләнеп ҡайтырмын,
Беҙҙең баштан үткәндәрҙе
Телем менән әйтермен.

Ғәзиз балаҡайҙарымды
Ҡыҫып-ҡыҫып һөйөрмөн,
Үҙебеҙҙең күргәндәрҙе
Бәйнә-бәйнә һөйләрмен...

— По вагонам! — ҡысҡырҙылар
Башҡорт балаларына,
Май башында килеп төштөк
Ефрим ҡалаларына.

Һандуғастар һайрай ине
Ул ерҙең урманында,
Фашистарҙы ҡырып һалдыҡ
Шул ауыл урамында.

Олым буйы матур икән,
Арыш етеп килгәндә;
Күп немецтар башына еттек,
Беҙгә ҡаршы килгәндә.

— Башҡорт атлылары, алға! —
Тип команда бирелде.

---

[1] 1942 йылда һуғыш ҡырында Али Карнайға килеп юлыҡҡан һалдат яҙмаларынан.

— Әйҙә, егет, ҡыу дошманды,
Ҡотҡар Тыуған иленде!

Көн барҙыҡ беҙ, төнөн барҙыҡ,
Дошманды плен алдыҡ.
Бирелмәгәндәрен ҡырып,
Юлдарға түшәп һалдыҡ.

Күп егеттәр был һуғышта
Ранен булып киттеләр,
Тыуған ил өсөн егеттәр
Үҙен ҡорбан иттеләр.

Барыбыҙ бер ғаилә булып,
Күгәрсендәй гөрләшеп,
Йәшәнек беҙ — батыр дуҫтар,
Күмәкләшеп, берләшеп.

Фронтты өҙөп, дошмандың
Артынан төшөп алдыҡ;
Осраған һәр бер ерҙә
Дошманды ҡырып һалдыҡ.

Пушкаларҙан да аттыҡ беҙ,
ПТР-ҙан[1] да аттыҡ беҙ.
Ҡаршы килгән танкыларҙы
Селпәрәмә ваттыҡ беҙ.

Ҡаты торҙоҡ беҙ, боецтар,
Бер кем артҡа сикмәне,
Үлһә үлде беҙҙең кеше —
Урынын ташлап китмәне.

Комэскадрон Ибраһимов
Беҙгә команда бирҙе:
— Эскадрон[2], атакаға! — тип,
Яңғыратып бар ерҙе.

---

[1] *ПТР* — танкыға ҡаршы көрәштә ҡулланыла торған ҡорал.
[2] *Эскадрон* — кавалериялағы төркөм. Ул 2—4 взводтан тора.

Күп тапҡырҙар атакаға
Алып барҙы ул беҙҙе.
Өс тапҡыр яраланһа ла,
Ҡалдырманы ул беҙҙе.

Беҙҙең йөрәктә ҡайнайҙыр
Уттай асыу дошманға,
Үс алайыҡ дошмандарҙан,
Үтәп халыҡ ҡушҡанды.

Һыуға төшһә, батмайҙар,
Утҡа төшһә, янмайҙар,
Атһа, яҙа атмайҙар,
Бурысты үтәмәй ҡайтмайҙар.

Стәрлелә ҡарбуз үҫә,
Алма үҫә Бөрөлә.
Янғантауҙан ҡараһаң,
Беҙҙең Өфө күренә.

Урал тауының йәмен,
Иҙел һыуының тәмен,
Сылтырап шишмә ағыуын,
Кисен ҡояш байыуын;

Халҡыбыҙҙың азатлығын,
Гүзәл тормош ҡороуын,
Беҙҙең йәшәү гөлдәргә тиң
Сәскә атып тороуын, —

Барыһын яҡлап, егеттәр
Атакаға ташландыҡ;
Ошо ерҙә беҙ дошманды
Сигендерә башланыҡ.

Алты дошман һалдаты
Ҡыуаҡлыҡтан сыҡтылар.
Алтыһы ла миңә ҡарап,
Автоматтан аттылар.

Бик һағынған саҡтарҙа
Тулған айға ҡарағыҙ,
Тыуған илдең ирке өсөн
Атакаға барабыҙ.

Беҙҙең йәмле илебеҙҙе
Дошман күҙе күрмәһен.
Беҙҙең гүзәл еребеҙҙе
Дошман тапап йөрөмәһен!

Дошмандар хәҙер аҡтыҡ көсөн
Йыйып ҡаршылыҡ итә.
Беҙҙең урамда ла, дуҫтар,
Байрам көндәре етә.

Эй туғандар, боецтар,
Хуш, иҫән-һау булығыҙ,
Еңеүҙәргә алып сыҡһын
Бара торған юлығыҙ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. «Дон далаларында» әҫәрендә бәйет жанрына хас ниндәй билдәләр бар?
2. Бәйеттәге мәғлүмәттәр буйынса бәйетсенең яу юлын тасуирлап ҡарағыҙ.
3. Ҡыҙыл армеец Яҡупов яу ҡырындағы совет яугирын нисек тасуирлай?
4. Фронт дуҫлығы әҫәрҙә нисегерәк асыла?
5. 16-сы Башҡорт атлы гвардия дивизияһы хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ:** яңы барлыҡҡа килгән күренештәр яңы һүҙҙәр тыуҙыра. Шуларҙы н е о л о г и з м д а р, тиҙәр. Һеҙ өйрәнгән бәйеттәрҙә неологизмдар иҫәбенә *ҡыҙыл армеец, автомат, «катюша»* һүҙҙәре инә.

## ТАҠМАҠТАР ТУРАҺЫНДА

Т а ҡ м а ҡ — халыҡ ижадының ин киң таралған жанрҙарының береһе. Уны яңғыҙ ҙа, күмәкләп тә башҡарып була. Таҡмаҡтар, ғәҙәттә, 6—8, 7—8, 8—7 үлсәменә ҡоролоп, бейеү ритмына тура килеп тора.

Башҡорт фольклорында исемһеҙ һәм исемле таҡмаҡтар бар.

### Исемһеҙ таҡмаҡтар

Исемһеҙ таҡмаҡтар төрлө көйгә башҡарыла.

Бейе, бейе, бейе әле,
Бейегәнең юҡ әле.
Бейегәнең булмаһа ла,
Матур бейейһең әле.

Ал беҙҙең клуб эсе,
Гөл беҙҙең клуб эсе.
Уйнайыҡ та, көләйек тә,
Ҡалмаһын үкенесе.

Баҫыр ул, баҫыр ул,
Баҫыр өсөн килгән ул.
Уйнап-көлөп күңелдәрен
Асыр өсөн килгән ул.

Комбайн тигән машина
Ура, һуға, елгәрә.
Ҡыҙыл ғәскәр фашистарҙың
Көлөн күккә осора.

### Исемле таҡмаҡтар

Башҡорт фольклорында үҙ көйҙәре булған «Мөғлифә», «Зарифа», «Ҡарабай», «Хәтирә» һ. б. исемле бейеү таҡмаҡтары бар. Ундайҙарҙың ҡайһы берҙәре билдәле бер тәртиптә бейеүҙе эсенә алған йәштәр уйындарын оҙатып килә («Ҡоҙа», «Аҡ стакан биле нәҙек», «Золотой ритайым» һ. б.).

## ЕГЕТТӘР

Йыйылғандар егеттәр,
Бары ла һөлөк кеүектәр.
Алдылар ҡулға ҡорал,
Киттеләр яуға былар.

Гармунсы ла бар бында,
Бейеүсе лә бар бында.
Ҡурайсы ла бар бында,
Кем генә юҡ һуң бында?

Егет уйнай, егет көлә,
Егет бутҡа бешерә,
Егет бойға[1] алып бара,
Кисен мунса төшөрә.

Ҡайһы ауылдан икәнде
Һин һорама, мин әйтмәм.
Барыбер бер республика,
Бер төбәктән, бер яҡтан.

Их, егеттәр, егеттәр,
Бары ла ыласын кеүектәр,
Күңелләнеп алайыҡсы,
Ҡороп китте електәр.

Өфөнән дә бар егет,
Шишмәнән дә бар егет.
Бары ла йөрөй һалдатса,
Һоро шинелде кейеп.

Баймаҡтан да бар егет,
Таймаҫтан да бар егет,
Икеһе лә ҡурайсы,
Икеһе лә һунарсы.
Көн дә «ҡуян» атмаһалар,
Күңелдәре булмайсы.

---

[1] *Бой* — алыш, һуғыш.

Бөрйәндән дә бар егет,
Өргөндән дә бар егет.
Бөрйәндеке алдыра —
Йырлап таңға ҡалдыра.
Өргөндөкө лә ҡалышмай —
Көн дә пуля яуҙыра.

Арбаштан да бар егет,
Ҡаҙмаштан да бар егет,
Тачанка менән киләләр,
Пар тимер күк ат егеп.

Маҡарҙан да бар егет,
Матрайҙан да бар егет,
Аръяҡта йөрөп ҡайттылар,
Фашистан кәбән өйөп!

Ҡарандан да бар егет,
Шарандан да бар егет.
Шаяндар ҙа, батырҙар ҙа,
Йөрөмәйҙәр башты эйеп.

Балтастан да бар әле,
Ҡалтастан да бар әле,
Ике орден алды инде
Балтас егете Шағәле.

Һаҡмарҙан да бар егет,
Аҡъярҙан да бар егет.
Икәүләп йөрөп ҡайттылар,
Дошман елкәһен төйөп.

Абдулла ла бар бында,
Хөснулла ла бар бында.
Самолет атып төшөргән
Хәтмулла ла бар бында.

Хәтмуллаһы Хәтмулла ла,
Ул һуң ҡайһы яҡ була?
Кейәү яһар инем үҙен,
Әгәр мирный саҡ булһа.

Сибайҙан бар Буранбай,
Күҙәйҙән бар Теүәлбай.
Теүәлбайҙың эше теүәл,
Буранбайҙыҡы гүзәл.

Бөтәһе лә шәп атлы,
Бөтәһе лә йүгәнле,
Бөтәһе лә ир-егет,
Бик күбеһе миҙаллы.

Егеттәрҙе һанап сыҡтым,
Үҙем белгәндәренән,
Инде һөйләһен ҡалғандар
Белгән-күргәндәренән.

Ай, егеттәр, егеттәр,
Урта бармаҡ кеүектәр.
Арыҫландай һуғышалар,
Уҫал беҙҙең егеттәр.

Егеттәре, егеттәре,
Арыҫлан кеүектәре,
Бер ерҙә лә мах бирмәйҙәр
Беҙҙең ил егеттәре.

Инде етте, һөйләмәйем,
Һүҙем бөттө, малайҙар.
Һеҙҙә лә бар ҙа баһа
Орден таҡҡан ағайҙар.

Егет уйнай, егет йырлай,
Егет бутҡа бешерә.
Дошман ҡаршыһына барып,
Егет атын эсерә.

Мылтыҡ, ҡылыс таҡҡандар,
Өҙәңгегә баҫҡандар.
Аттары йылдам саба,
Әкрен баҫып күп ала.

Ҡадиров та бар бында,
Хәбиров та бар бында,
Шакиров та бар бында,
Закиров та бар бында.

Майор Әлибай ҙа бар,
Сержант Яныбай ҙа бар.
Подполковник Күсимов,
Адъютанты Мөхсинов...

Төрлө яҡтан килгәндәр...
Бары ла батыр, уңғандар;
Яҡшы атҡа менгәндәр,
Кавалерист булғандар.

Егеттәр күп, иптәштәр,
Бары ла парҙан кейгәндәр,
Фашистарҙы күп ҡырҙылар
Беҙҙең илдән килгәндәр.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. «Егеттәр» таҡмағын ниндәй үҙенсәлек бер әҫәр итеп ойоштора?
2. Унда Башҡортостан егеттәрендә яҡшылыҡ, туғанлыҡ хисенең бирелешен асыҡлағыҙ.
3. Әҫәрҙәге ҡаһарманлыҡ, оптимизм рухы хаҡында әңгәмәләшегеҙ.
4. Үҙегеҙ йәшәгән төбәк һәм яҡташығыҙ телгә алынһа, халыҡтан улар тураһында өҫтәлмә мәғлүмәттәр эҙләгеҙ. Таҡмаҡ сығарып ҡарағыҙ.
5. Яу һәм хеҙмәт ветерандарынан иҫтәлектәр яҙып алығыҙ.



# Бишенсе бүлек

**УҠЫТЫУСЫ! ОШО ИСЕМДӘН ДӘ ЮҒАРЫРАҠ НИНДӘЙ ИСЕМ БАР?!**

## КӘТИБӘ КИНЙӘБУЛАТОВА
## 1920—2012



Кәтибә Кинйәбулатова Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Мәүлит ауылында тыуған. Өфөлә Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлай. «Әҙәби Башҡортостан» (хәҙерге «Ағиҙел»), «Башҡортостан ҡыҙы» журналдарында эшләй.

Кәтибә Кинйәбулатова балалар өсөн бик күп шиғырҙар яҙа.

### УҠЫТЫУСЫМ!

Һоҡланалар ҡарап ҙур йорттарға,
Кемдәр генә һала быны, тип,
Түбәләре йондоҙҙарға тейгән,
Алтын икән кеше ҡулы, тип.

Һоҡланалар доктор иптәшкә лә:
Әжәлде лә ситкә ҡыуа, тип.
Һоҡланалар йыһан гиҙеүсегә,
Ниндәй батыр заттар тыуа, тип.

Уҡытыусым!
Ә һин, ни өсөндөр,
Күтәрәһең тыныс барыһын.
Кисереүҙәр, болоҡһоуҙар ҡайҙа?
Һин уларҙы ҡайҙа итәһең?

Түҙемлегең, ах(ы)ры, ҡая кеүек,
Ә күңелең тулы нур ғына.
Ябайһың да, бөйөкһөң дә үҙең,
Һиңә тиңме маҡтау, йыр ғына?

Булһа әгәр әжәл дарыуҙары...
Уҡытыусым!
Һин бирәһең
белем асҡысын.
Ил батыры булған улыңа ла,
Һин ҡуйҙыңмы йыһан баҫҡысын?!

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙа уҡытыусының бөйөклөгө тураһында ниндәй юлдар бәйән итә?
2. Үҙегеҙҙең иң яратҡан уҡытыусығыҙға уҡытыусылар көнө уңайы менән ҡотлау телеграммаһының тексын яҙып ҡарағыҙ.

*Лира* ***ЯҠШЫБАЕВА***

## УҠЫТЫУСЫ — УЛ БЕЛЕМ БИРЕҮСЕ ЛӘ, ИКЕНСЕ ӘСӘЙ ҘӘ...

Аҡъюловтар ғаиләһе ошо Йәшмәтау ҡасабаһына күсергә мәжбүр булды. Ғәҙилә Илһамовнаның киткәнен уҡыусылар, бөтә ауыл халҡы ауыр кисерҙе. Ғилмиә фажиғәһе Ғәҙиләнең күңеленән әле лә юйылманы. Саҡ ҡына берәй нәмә ишеттеме, иҫенә килеп төшә, хәтерендә ҡыҙ баланы ҡыҙғаныу хисе яңыра. Йыйы сыҡҡан һайын ата-әсәләргә, коллегаларына әйтеп тора:

— Ҡыҙ бала — наҙлы сәскә. Шул сәскәгә бысраҡ итегең менән бер генә баҫ, ул башын ҡалҡыта алмаҫ, шиңә, ҡорой...

Һөйләгәндәрен йотлоғоп тыңлаған Фәриҙәгә Ғәҙилә тағы бер нисә ғибрәтле тарих һөйләне.

...Садиҡа исемле уҡыусыһын хәтерләне. Был ҡыҙҙы боҙоҡ, эскесе әсәһе тырнағынан ҡотолдороп, балалар йортона урынлаштырҙы. Ҡыҙыҡай мединститут бөтөрҙө. Хәҙер Йәшмәтауҙа маҡтаулы күҙ врачы.

— Ысынлапмы? — тип һүҙгә ҡушылды Фәриҙә. — Садиҡа Иҙрисова, күренекле врач, һеҙҙең уҡыусығыҙмы?

— Тормош юлымда һеҙ осрамаған булһағыҙ, белмәйем, ни эшләр инем? — ти ул осрашҡан һайын, үҙ әсәһеләй яҡын күреп, ҡосаҡлап ала мине.

— Шулайҙыр, — тине уҡыусы уҡытыусыһы менән ғорурланып.

Һөнәре арҡаһында төрлө яҙмышлы балалар менән осрашырға тура килә уҡытыусыға. Иҫләһәң, уйлаһаң, уйылып китерлек. Ана, Мәрзиә тигән бер сибәр ҡатындың ҡыҙы менән күпме мәшәҡәтләнде?

Әсәлек бурысын һанламаған Мәрзиә, бер коммерсант менән сит илгә сығып китте. Атаһы ошо ҡайғыны күтәрә алмай фажиғәле үлде. Лилиә тигән ҡыҙы үкһеҙ етем ҡалды. Ҡайҙа барырға, ни эшләргә белмәгән баланы йәлләп, Ғәҙилә уны үҙ тәрбиәһенә алды. Тик ике йыл үткәс кенә, ҡыҙыҡай туғыҙынсыла уҡып йөрөгәндә, ни сәбәп менәндер олатаһы менән өләсәһе килеп, Лилиәне үҙҙәренә алып ҡайтты. Сибәр әсәнең һаман балаһында эше лә юҡ, тинеләр.

Ғәҙилә ошо хәлдәрҙе һөйләп үткәс, йомғаҡлап ҡуйғандай итеп:

— Үҙ балаһын аямаған шундай ҡаты бәғерле ата-әсәләр гел осрап тора. Көслө ихтыярлы булһаң, кәңәшләшеп эшләһәң, ауырлыҡтарҙы еңергә мөмкин булыр.

Уҡытыусы һөйләгәндәрҙе күңеленә яҡын алып тыңлаған Фәриҙә лә һығымта яһаны.

— Ниңә кешеләр үҙ балаларын эт, бесәйҙәр кеүек яратмай икән? Улар бер ваҡытта ла үҙ балаһын рәнйетмәй ҙәһә?!

Ҡыҙыҡай үҙҙәренең өс балалы бесәйенең мәҙәктәрен дә көлә-көлә һөйләп алды. «Беҙҙең бесәй — вәт, исмаһам, әсәй!» тигән хикәйә лә яҙған икән. Ирәбе генә ултырған

ҡыҙҙың ҡапыл кәйефе үҙгәрҙе, эске кисерештәре йөҙөнә сыҡты.

— Ғәҙилә Илһамовна, һеҙ үҙ себештәрен үҙе суҡып талап үлтергән тауыҡтарҙы күргәнегеҙ бармы? — тип һораны.

— Тауыҡтарҙы — юҡ, ата ҡаҙҙарҙы — бар. — Уҡытыусы ҡыҙға аптыраулы ҡараны.

— Улайһа, былтыр өләсәйемдәрҙә күргән бер хәлде һөйләйем әле.

Ҡыҙҙың үҙе өсөн мөһим булған нәмә тураһында һөйләргә йыйынғанын аңлап, уҡытыусы тыңларға әҙерләнде.

— Өләсәйемдең ҡара тауығы себеш сығарҙы. Ялан кәртәгә ебәрҙек тегеләрҙе. Ниңәлер матурҡайҙарҙың башы ҡанап үлә лә ҡуя, үлә лә ҡуя. Өләсәйем миңә, ҡарауылла әле, ниңә улайта икән, тине. Күҙәтеп йөрөйөм. Ҡараһам, ҡара тауыҡ үҙ себештәренең башын аяуһыҙ суҡый. Береһенең башы лыс ҡан булды. Күп тә үтмәне — йән бирҙе. Өләсәйемә һөйләнем. «Күпме йәшәп, ундай хәлде ишеткән-күргән булманы. Аңғармағанһыңдыр, йә ҡарға, йә һайыҫҡан булғандыр», — тигән булды. Аҙаҡ үҙе күргәс кенә ышанды. Шулайтып, сыбыҡ тотоп ҡурҡытып торһаҡ та, өс-дүрт көндә туғыҙ себештең йәнен берәм-берәм алып, яңғыҙ ҡалды ғәзраил тауыҡ. Өләсәйем, ыстағәфирулла, гонаһ шомлоғо, тип, тауыҡты салдыртып эткә ырғытты.

Фәриҙә ошоларҙы һөйләгәндә, нервылары ҡаҡшаған кешеләй, дер-дер ҡалтыранды.

— Әсәйемде... өләсәйемдең ана шул ҡара тауығына оҡшатып ҡуям.

Ҡыҙҙың үҙ әсәһен ҡанһыҙ тауыҡҡа тиңләүе ҡот осҡос ине. Уҡыусыһын ныҡ йәлләгән Ғәҙилә, уны ҡосаҡлап йыуатырға теләне, сәстәренән һыйпаны, сикәләренән аҡҡан күҙ йәштәрен һөрттө. Кәңәш биреп:

— Ҡуйсы, ҡәҙерлем, әсә күңеле һәр саҡ балала. Мәктәп кисәһендә күңел асты, тип әсәйеңә үпкәләмә. Бергәләп йыйылғанда уйын-көлкө булыр инде ул. Иптәштәреңдең хәбәренә лә ышанып барма. Ғөмүмән, юҡ-барҙы күңелеңә яҡын алма, — тине.

Эйе, Фәриҙәнең һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар. Быны белә Ғәҙилә. Бишенсе йыл рәттән класс етәксеһе ул. Шул

ваҡыт эсендә, исмаһам, бер килеп ҡыҙының уҡыуы, тәртибе менән ҡыҙыҡһынманы. Ҡыҙының хикәйәләре газеталарҙа баҫылғыланы. «Рәхмәт, ҡыҙымды яҙышырға өйрәттегеҙ», тимәне, һөйләшеүҙән дә, осрашыуҙан да ҡаса кеүек. Шулай ҙа, педагог булараҡ, уның әсә менән ҡыҙ араһына башкөллө инергә хаҡы юҡ. Бөгөн дә ҡыҙҙың:

— Моғайын, минең әсәйем дә, Лилиәнеке кеүек, беҙҙе ташлап китергә уйлай, — тиеүенә лә ҡушылманы.

— Терпе үҙ балаһын йомшағым, аппағым тип ярата, имеш. Һәр әсә балаһы өсөн өҙгөләнә. Юҡты һис уйлама, Фәриҙә, — тип өгөт-нәсихәт бирҙе.

Сабый сағынан әсәһенә хәтере ҡалып, күңелендә рәнйеү һаҡлаған ҡыҙыҡай үҙ һүҙен бирмәне:

— Әсәйемде белеп бөтмәйһегеҙ, — тине. Башына әле генә килгән уйҙан йөҙө сепрәктәй ағарҙы. — Ғәрләнеп үҙемде берәй нәмә эшләтһәм, сәбәбен йәшерер өсөн, һеҙгә ябырылыр ине. Ғилмиәнең атаһынан арттырыр.

Инде уҡытыусыһының ҡото осто. Ҡыҙҙың күҙҙәренә төбәлеп ҡараны.

— Ни һөйләйһең, Фәриҙә?

— Әле мин шуны аңланым. Ҡурҡмағыҙ, һеҙҙе беләкүрә ҡыйын хәлгә ҡалдырмам, һүҙ бирәм.

Уҡытыусы еңел һуланы. Ҡыҙҙы, көсләшеп булһа ла, өйөнә алып ҡайтыуы өсөн сикһеҙ шатланды.

— Ышанам һиңә, Фәриҙә! — тип йәнә күҙҙәренә тура ҡараны. — Элекке уйҙарыңды бөгөндән башыңдан сығарып ырғыт. Ишеттеңме, Фәриҙә?

Әсәле-ҡыҙлы кеүек, уҡытыусы менән уҡыусы йәнәш торған тахтаға урындар һалып ятҡас та йоҡлап китмәйенсә, оҙаҡ гәпләште. Фәриҙә күңелендәге серҙәрен берәм-берәм теҙҙе лә теҙҙе, әйтерһең, сарсап килгән юлсы саф һыулы шишмәгә юлыҡты.

— Китаптарҙа, дәрестәрҙә әсәләрҙе яратырға, хөрмәтләргә өйрәтәләр. Шул саҡтарҙа миңә эй ҡыйын! Әсәйем үҙе биҙҙереп бөткәс, ни эшләйем?!

— Ниңә улай һуң, Фәриҙә?

Ғәҙилә Илһамовнаның, ысынлап та, был хәлгә аптырауының сиге юҡ.

— Өләсәйем һөйләгәйне, — тине Фәриҙә оло серҙе асып, — өләсәйемдең дә уға йәне көйә. Холоҡһоҙ, — ти. —

Барған ирен әҙәмгә һанамай кәмләп-хурлай торғас, эскесегә әйләндерҙе, — ти. — Әсәйем мине табырға теләмәгән, имеш. Ул көйһә, миңә: «Ник тыуҙың?» — ти! «Атайың менән икегеҙ генә мине бәхетһеҙ иттегеҙ», ти, «Албаҫты» тигәненә лә өйрәнеп бөткәнмен.

Ғәҙилә Илһамовна, ныҡ аптыраһа ла, хәйлә-ялғанды белмәгән ҡыҙға ышанмай булдыра алманы.

— Бына нисек икән? — тип кенә әйтә алды. Ә ярһыған Фәриҙә, ауыр тойғоларын бүҫкәрткеһе килепме, тыйыла алмай һөйләне лә һөйләне.

— Мин был донъяға үҙем теләп тыумағанмын даһа? Ниндәй ғәйебем бар? Берәүгә лә кәрәгем булмағас, ниңә тыуҙырғандар мине?! Үҙе ғүмер биргән йән эйәһенә ниңә шул тиклем мәрхәмәтһеҙ икән әсәйем?

— Фәриҙә, балаҡай, — тип бүлдерҙе уны уҡытыусы. — Һин донъяға үҙ өлөшөң, үҙ яҙмышың менән яралғанһың. Һине Хоҙай Тәғәлә үҙе яралтҡан. Кеше донъяға бәхет өсөн тыуа. Берәүҙең дә ҡояшын башҡа берәү ҡаплай ҙа, һүндерә лә алмай, һинең ҡояшың үҙең менән. Бәхетең үҙ ҡулыңда. Аңла шуны, йәме?!

Бер аҙ үҙ алдына уйланып тын ғына ятҡас, Фәриҙәнең йоҡламағанлығын белгән уҡытыусы дауам итте:

— Бына бөгөнгө кисерештәреңде ҡағыҙға төшөрөп ҡара әле. Еңел булып китер, үҙең күрерһең.

Ғәҙилә һәр һүҙен бала күңеленә һеңдерергә теләп, ғәҙәтенсә туҡтай-туҡтай, яйлап, төшөндөрөп һөйләне.

— Яҙғандарыңды йыйып бар. Баҫтыр, тимәйем. Әлегә яҙ ҙа һал да ҡуй. Аҙаҡ, яҙыусы булып китһәң, кәрәге тейә ул.

— Әлегә ҡулыма ҡәләм ала алмайым. Сикһеҙ ауыр миңә. Күңелем төшөнкө. Әсәйемдең өтөп әрләүенән биҙрәгәнмен. Йәшәүҙең мәғәнәһен тапмайым.

— Ана шул ауыр саҡта яҙырға кәрәк шул. Йән ғазаптарынан, күңел тетрәнеүҙән яҙылған әҫәр күптәр күңеленә юл табыусан.

Был йәһәттән уҡытыусы менән килешәме, юҡмы, әммә икәүләп ошолай һөйләшеү ҡыҙға сикһеҙ рәхәт ине. Улар тағы байтаҡ йоҡламай һөйләшеп ятты. Ғәҙилә Илһамовна үҙ тормошо, балалары хаҡында һөйләп алды.

— Эргәңдә һине аңлаған кешеңдең булыуы ниндәй ҙур бәхет! Ниңә әсәйем дә Ғәҙилә Илһамовна кеүек түгел икән? Ошондай хис-тойғолар менән Фәриҙә йоҡоға талды. Төшөндә гел сәскәле туғайҙа йөрөнө һәм сылтырап аҡҡан шишмәләрҙе буйланы.

* * *

8 Март байрамынан һуң да, бер ни булмағандай, Йәшмәтауҙың иң ҙур урта мәктәбендә уҡыу-уҡытыу эше ҡәҙимгесә дауам итте. Мәктәптең бер уҡыусыһы менән фажиғә була яҙғанын бары бер генә кеше — Ғәҙилә Илһамовна Аҡъюлова ғына белде. Тик уҡытыусы, ҡыҙыҡай ипкә килгәндәй булғас, хәлде халыҡҡа яңғыратманы. Орҡоя ла ҡыҙының әрнеүле хистәрен, үҙен үҙе юҡ итер сиккә етеүен һиҙмәне, ахырыһы. Шуғамылыр, кәйефе арыулана төшкән балаһын уҡытыусы өйөндә йоҡлағаны өсөн эттән алып эткә һалып әрләне.

— Минең яманатымды һатырға ҡырсынып йөрөйһөңмө? Берәй ул-был ишетеп ҡалһам, ҡара уны, албаҫты, яҡшылыҡ көтмә! — тип аҙарынды.

Бынан һуң меҫкен бала йәнә йәшәүҙән төңөлөп, мәктәптә лә, урамда ла берәү менән ләм-мим һөйләшмәҫ булып, кире үҙ ҡабырсағына бикләнде. Хатта класта үҙенә иғтибар итмәһендәр өсөн, иң артҡы партаға күсеп ултырҙы.

Бөтә нәмәнән дә этлек эҙләгән Орҡояға ҡыҙының әйтмәй-нитмәй ситтә йоҡлап ҡайтыуы етә ҡалды. Бысраҡ телле ҡатын, төймәнән дөйә яһап, осраған берәүгә ғәйбәт һатты. Ҡыҙының уҡытыусыға серен һөйләүен һиҙенгән ҡатын:

— Ғәҙилә Илһамовна ҡыҙымды боҙа. Миңә ҡаршы ҡоторта, ғаиләне бутай, инде ни эшләргә? — тигән булды килештереп. Хәстәрлекле әсә, тиерһең. Белмәгәндәр, әлбиттә, ышанды, бәғзеләр шикләнде. Ҡыҙы менән үҙе араһындағы күптәнге насар мөнәсәбәтте уҡытыусыға япһарып, кеше алдында яманатлы итеп ҡалдырырға уйлауын һиҙенгәндәр ҙә байтаҡ ине.

Бер көндө дәрестән һуң коридорҙа ҡыҙының Ғәҙилә Илһамовна менән һөйләшеп тороуын күреп, Орҡояның талағы тамам ташты. «Тағы һайрашалар, серҙәштәр», — тип уйланы. Ни тураһында һүҙ барғанын да белергә кәрәк тапмай, мыҫҡыллы ҡарап, «уҡытыусы абруйы» тигәнде лә онотоп, Ғәҙиләгә ябырылды.

— Ул һеҙгә теге Лилиә кеүек етем быҙау түгел, етәкләп алып ҡайтып, эйәләштереп аҫрарға. Уның өйө, ата-әсәһе бар. Ваабще, һеҙ минең ҡыҙҙан алыҫыраҡ йөрөгөҙ, юғиһә, юғиһә... беләһегеҙме, мин, мин... — Ул әйтер һүҙен әйтеп бөтөрә алмайынса ыҫылданы. «Мәктәптән ҡыуҙыртырмын», — тип әйтергә самалағайны, телен тыйып ҡалды. Сөнки был күпте күргән тура һүҙле ҡатын эргәһендә итәк-еңендә йыйыбыраҡ йөрөргә кәрәклекте аңғартҡайнылар. Шуға Ғәҙилә Илһамовнаның:

— Орҡоя, ниңә ул тиклем тупаҫ һөйләшәһең? Әйҙә, аңлашайыҡ әле, — тиеүенә ҡарамаҫтан, ҡырҡа боролоп китеп барҙы. Үҙенең урынһыҙ хәбәр әйтеп ҡуйыуынан ҡурҡты, ахырыһы.

— Тороп торোғоҙ әле, тыңлағыҙсы тәүҙә, — тип артынан атлаған уҡытыусыны үсекләргә теләгәндәй, осло дағалы туфлийы менән тыҡ-тыҡ баҫып, китеп тә барҙы.

Теге көндө мәктәп ашханаһында ни ҡыланғаныңды онотҡанһың икән, тип уйланы рәнйегән уҡытыусы. Үҙ-үҙен юҡ итер сиккә еткән ҡыҙыңды алып ҡайтып йыуатҡан өсөн рәхмәтең шулмы, мөртәт?! Балаңа бары изгелек теләгән уҡытыусыны шулай битәрләргә нисек телең бара?

Фәриҙә хаҡлы. Балаһын ҡайғыртҡан әсәнең ҡылығына оҡшамаған был. Орҡояла өмөт тә, кешелек тә күренмәй. Фәриҙәне һис бер күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Юғиһә, Ғилмиә яҙмышы ҡабатланыр. Шундай ҡәтғи ҡарарға килде Ғәҙилә. Ишектән сыҡҡан ерҙә уны йөҙө буҙарған, ағарынған Фәриҙә көтөп тора ине. Әсәһе өсөн ер булып оялған ҡыҙ:

— Ғәҙилә Илһамовна, ғәфү итегеҙ, — тине илай яҙып. — Минең арҡала һүҙ ишетергә тура килә һеҙгә. Әсәйем һеҙҙе мине яҡын күргән өсөн яратмай. Хәленән килһә, минән ҡояшты ҡаплап ҡуйыр ине.

— Ҡояшты ҡаплай алмаҫ, — тине әле генә ишеткән хәбәрҙе башына һыйҙыра алмаған уҡытыусы. — Әйтәм

бит, һәр кешенең бәхет ҡояшы үҙе менән. Берәүҙең бәхетен берәү урлай ҙа, тартып та ала алмай. Бына күрербеҙ: үҫкәс һинән дә бәхетлеһе булмаҫ.

Уҡытыусы, ғәҙәтенсә, Фәриҙәне яурынынан ҡосаҡланы, арҡаһынан һөйөп алды.

— Бирешмә! Онотма, беҙ бергә! Ныҡ бул! — тип оҙатып ҡалды.

Фәриҙә күңелһеҙ генә ҡайтып инде. Сисенергә лә өлгөрмәне, әсәһе төпсөнә башланы:

— Йә, был юлы нимә тип ҡотортто инә төлкө? Әсәйең насар, уны тыңлама, беҙгә килеп тор, тимәйме? Булыр унан. Изге күңелле булып ҡылана. Әҙәп, тәрбиә, тип башты ҡатыра. Ҡыҙ бала яҙмышы өсөн борсола була, йәнәһе, ҡыҙ баланы ҡыҙғана, имеш. Имеш, ҡыҙ балаларҙы айырым мәктәптә уҡытыу концепцияһын төҙөй. Тормоштан артта ҡалған, бәҫәргән булмаһа, шулайтып әҙәм көлдөрөп йөрөр инеме? Алйыған уҡытыусыңды күберәк тыңла, бер аҙҙан иҫәүәнгә әйләнгәнеңде белмәй ҙә ҡалырһың!

Тағы әллә ниҙәр ләпелдәргә йыйынған бисәһен нисектер бөгөн айныҡ ҡайтҡан ире туҡтатты.

— Етер һиңә, Орҡоя, әрем тел! Ағыуыңды сәсмә! Күрмәйһеңме ни, уҡытыусы ҡыҙың өсөн тырышып тора. Рәхмәт, тиң! — тине. — Ләстит һатҡансы, ашарға ултыртыр инең.

— Был аҡыллы баш ҡайҙан килгән? Әллә бөгөн рюмка тәтемәнеме? — Орҡоя тәүҙә яһилланһа ла, тиҙҙән ире алдында телен тыйҙы.

Ә уҡытыусы менән булышыуын туҡтатырға уйламаны ла. Ингән-сыҡҡанға, үҙенең дуҫ-иштәре менән һөйләшкәндә лә бер яйын сығарып, Ғәҙилә Илһамовнаның исемен мотлаҡ ҡыҫтырҙы.

Ә Фәриҙә иһә тағы ла нығыраҡ эсенә йомолдо. Өйҙә көн күрһәтмәүе етмәй, инде берҙән-бер күҙ терәп торған кешеһенә, ҡәҙерле уҡытыусыһына ҡаҙала әсәһе. Шул әсе телдең һүҙенә ҡарап, уҡытыусыһы үҙенән биҙеп ҡуймаһын тип тә ҡурҡа Фәриҙә. Әсәһенең әшәке телен тейҙермәҫ өсөн Ғәҙилә Илһамовна менән ваҡытлыса осрашмаҫҡа, һөйләшмәҫкә тигән фекергә килде ҡыҙыҡай. Класташтары менән дә аралашмаҫ булды, тамам бойоҡто.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Хикәйәне уҡып сығығыҙ, унда нимә тураһында һүҙ бара?
2. Икенсе абзацтағы кинәйәле һөйләмде нисек аңлайһығыҙ?
3. Уҡытыусы Ғәҙилә Илһам ҡыҙына характеристика бирегеҙ.
4. «Бәхетең үҙ ҡулыңда» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
5. Орҡояның усал, әсе телле булыуы ниҙән килә? Ул бәхетлеме?
6. Һеҙҙең мәктәптә Ғәҙилә Илһам ҡыҙы кеүек уҡытыусылар бармы? Булһа, шуларҙың берәүһе хаҡында бәләкәй хикәйә яҙып килегеҙ.

*Рауил ШАММАС*

## УҠЫТЫУСЫҒА

Һәр көн иртән тәҙрә ҡаршыһынан
Ашыға-ашыға атлап үтәһең.
Һин беләһең унда,
Класыңда,
Нисәмә күҙ һағынып көткәнен.

Әйтерһең дә, тырыш ҡарлуғас һин,
Ем илтәһең балаларыңа.
Һәр баланың өйҙә әсәһе бар,
Ә һин — уртаҡ әсә барыһына.

Барыһы йоҡлай.
Ә һин ултыраһың
Тик дәфтәрҙәр менән серләшеп,
Алдыңдағы китаптарың менән
Ысын кәңәшсеңдәй һөйләшеп.

Лампа яна.
Төнгө ике етә.
Һин һиҙмәйһең уны,
                    һиҙмәйһең;
Өйрәнәһең һаман,
Китаптарҙан
Ынйы бөртөктәрен эҙләйһең.

Күңелең һинең, гүйә, гүзәл баҡса,
Унда үҫә белем гөлдәре.
Гөлгә биҙәк,
Көслө ҡанат биреп,
Юлға сығармайһың кемдәрҙе!

Уҡытыусы!
Ошо исемдән дә
Юғарыраҡ ниндәй исем бар?!
Күңелем тулы һиңә рәхмәтем бар,
Йырҙа әйтеп бөтмәҫ хисем бар.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙы матур итеп тасуири уҡығыҙ.
2. Автор уҡытыусы образын нисек һүрәтләй? Үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләп ҡарағыҙ.
3. Уҡытыусы образын биреү өсөн шағир ниндәй сағыштырыуҙар ҡулланған? Шул юлдарҙы табып, уҡып күрһәтегеҙ.

*Фәрит* ***ИҪӘНҒОЛОВ***

## УҠЫТЫУСЫ ҒҮМӘРОВ

Гөрләп торған ҙур ҡалала үткән ғүмер артта ҡалды. Ғүмәров Тәлғәт үҙе нығ күнеккән ошо тормоштан яңы ғына айырылды әле. Ләкин улар инде алыҫ үткәндәр булып тойола. Унда кире ҡайтыу юлдары өҙөлгән. Бары сик белмәй торған хәтер генә ҡайтып йөрөй ала. Ҡайтып, онотолоп, оҙаҡ-оҙаҡ ҡыҙырып йөрөй ҙә, бөгөнгө көнгә иҫ киткес күңелле ваҡиғалар тейәп ҡайта. Ғәжәп кеүек! Шул дүрт йыл эсендә ауыр ҙа, күңелһеҙ ҙә, ҡайғылы ла саҡтар аҙ булманы. Ә күңелгә бары иң-иң рәхәт минуттар, иң-иң шатлыҡлы хәтирәләр генә яҙылып ҡалған. Әйтерһең дә, студент тормошо тотошо менән тыңлап туйғыһыҙ ләззәтле музыканан ғына тора. Эйе, ул музыка сыңдары әле һаман Тәлғәттең ҡолаҡ төбөндә өҙлөкһөҙ яңғырай һәм, йәшлектең кире ҡайтҡыһыҙ иң гүзәл ваҡыттарын иҫкә төшөрөп, яманһыулата.

Уҡыуҙы тамамлап ҡайтҡас, Ғүмәров үҙ ауылдарында оҙаҡ торманы. Шау-шыу, ығы-зығыға үтә йомарт булған институт тормошонан һуң ҡапыл ауыл тынлығында ҡалыуҙы уның күңеле үҙһенмәне. Ҡул һелтәп, ғәмһеҙ генә ял итеп йөрөү уны тиҙ екһендерҙе. Шуға ла буласаҡ рус теле уҡытыусыһы, уҡыу башланыр ваҡытты көтөп тормай, үҙе тәғәйенләнгән Бишул мәктәбенә күсеп килде. Тиҙерәк баштан-аяҡ эшкә күмелеп, онотолорға, бергә уҡыған яҡын дуҫтарын юҡһыныуҙан һыҙланған күңелен баҫырға тырышты ул.

Ләкин бында ла уны әлеге йәне һөймәгән тынлыҡ ҡаршыланы. Бөтә уҡытыусылар ҙа тиерлек ялда. Тәлғәт бер үҙе генә директор бүлмәһендә ултыра. Уның күҙҙәре тәҙрәгә төбәлгән, ә уйҙары институттың дөйөм ятағында аҙашып йөрөй. Күҙ алдында дүрт йыл эсендә ҡан-ҡәрҙәштәй булып бөткән дуҫтарының тере һындары бер-бер артлы теҙелә башлай. Берәүҙәре — бер бүлмәлә торған иптәштәре, икенселәре — курсташтар, өсөнсөләре — былай ғына таныштар. Ләкин һәммәһе лә ҡәҙерле, һәр береһе үҙенсә һағындыра. Их, бөгөн улар янда булһасы!..

Һәм иң аҙаҡҡы булып бер нәҙекәй һын килеп баҫа Тәлғәт алдына. Һуңғы көндәрҙә танышҡан ҡыҙ кеше һыны ул. Дуҫ тип үк әйтеп тә булмай. Таныш булыуҙан уҙып, дуҫ булыуға барып етмәгәйнеләр әле улар айырылышҡан мәлдә.

Тәлғәт студенттар кисәһенә барыр алдынан магазинда галстук һайлай ине.

— Һеҙгә бынау зәңгәре бик килешер, — тип йылмайып ҡарағайны шул саҡ эргәһендә баҫып торған ят ҡыҙ. Шунан улар бер квартал самаһы һөйләшеп барҙылар. Ҡыҙ ҙа студентка булып сыҡты. Тәлғәт уны үҙҙәренең институтына кисәгә саҡырҙы. Ҡыҙ килде. Улар бергәләп бейенеләр. Шунан егет уны оҙатып ҡуйҙы. Әһәмиәтһеҙ генә һүҙҙәр һөйләшкәйнеләр.

Оҙаҡ ҡына ваҡыт Тәлғәт уның янына барырға ҡыймай йөрөнө. Ә инде тәүәккәллеге етеп уларҙың дөйөм ятағына барғас, Гәүһәрҙәр курсы имтихандарҙы бөтөрөп, таралды инде, тигәйнеләр.

Таныш ҡыҙ! Ә Ғүмәров унның адресын да, фамилияһын да белмәй ҡалды. Нисә әйтһәң дә, ҡыйыуһыҙлыҡ бәләһе инде. Бары ҡыҙҙың исеме генә егеттең хәтерендә: Гәүһәр!.. Хатта унның төҫөн дә асыҡ ҡына күҙ алдына килтерә алмай Тәлғәт. Дуҫлыҡҡа өндәп, эскерһеҙ тура ҡараусы ҙур күҙҙәр... биленән дә түбән төшөп торған ҡалын ҡара сәс толомдары... Шулар ғына Тәлғәттең иҫендә...

Шар асыҡ тәҙрәләрҙән эҫе һауа бөркөлөп инә. Тәлғәт, һағышлы уйҙарын ҡыуа-ҡыуа, ишек алдын күҙәтә.

Тиҙерәк үтһен ине беренсе сентябргә тиклем ҡалған ике ай ваҡыт! Ошо мәктәп тирәһе уҡыусыларҙың ығы-зығыһы менән, ҡырмыҫҡа иләүе шикелле, йәнләнһен ине. Ул саҡта уҡытыусыларҙан, уҡыусыларҙан яңы дуҫтар табылыр, Тәлғәттең күңелендәге бушлыҡты тултырыр ине...

Ә хәҙер ишек алды йоҡомһораған төҫлө. Унның ярты йәмен уҡыусылар үҙҙәре менән алып киткән. Тыныс. Тик мәктәп ҡоймаһын яңыртыусыларҙың балта, бысҡы тауыштары тоноҡ ҡына ишетелә. Ҡайһы берҙә мәктәп артындағы баҡсала түтәлдәргә һыу һибеүсе уҡыусы ҡыҙҙарҙың көлөшөп алыуы Ғүмәровтың ҡолағына салынып ҡала. Арыраҡ, лапаҫ аҫтында, парталарҙы ҡара лакка буяйҙар. Ана, мәктәп йыйыштырыусы апайҙар ҙур улаҡҡа онтаған аҡбур бушаталар. Улар үҙҙәре лә, халат кейгән шикелле, аҡбур саңына буялғандар. Ап-аҡ саң, төтөн һымаҡ, юғарыға борхой ҙа күҙ сағылдырғыс ҡояш нурҙарына аралашып юғала.

Шау-шыуы, ҙур йәнлелеге менән башҡаларҙан айырылып торған мәктәп ишек алды өсөн был тауыштар, был хәрәкәт бик кескәйҙер. Хатта улар мәктәп ишек алдының килешһеҙ тыныслығын көсәйтә, унның төп хужаларының бында юҡлығын нығыраҡ күрһәтә генә төшәләр.

Әле генә директор Тәлғәткә, һигеҙенсе класс етәксеһе булырһығыҙ, былтыр етенсе класс етәксеһе булған уҡытыусы уҡырға китте, тине. Йәш уҡытыусы теләп риза булды һәм шунда уҡ эштәр менән таныша ла башланы.

Ул, былтырғы етенсе класс журналын алып, үҙе тәрбиәләйәсәк уҡыусыларҙың йыллыҡ отметкаларын ҡарарға кереште. «Абдуллин Хәйернас, Ғәптерәҡипов Бикмырҙа, Ҡасимова Зәкиә...» — былары отличниктар. Йәш уҡытыусының күҙ алдына бик һөйкөмлө йөҙҙәр килеп баҫты. Улар бик тәртиплеләрҙер. Тыңлаусандарҙыр.

— Ҡасимова!.. Зәкиә!.. — Ишек алдынан ҡатын-ҡыҙ тауышы килде.

Ғүмәров тәҙрәгә ҡараны. Баҡса янында муйынына янып торған ҡыҙыл галстук таҡҡан, иҙеүе, ең остары сигеүле аҡ күлдәк кейгән, йыуан сәс толомдарын түбәһенән уратып дуғаландырып ҡуйған ун һигеҙ йәштәрҙәге ҡыҙ баҫып тора. Эйе, был өлкән пионервожатый Мөхәйәрова Нәсимә бит әле. Кисә директор таныштырғайны.

Вожатый янына ҡулына лейка тотҡан, һоро күлдәк өҫтөнән ҡара алъяпҡыс бәйләгән нәҙек оҙон буйлы ҡыҙ йүгереп килеп туҡтаны. Уның иңбашына ятҡан оҙон сәс толомдарының осона күбәләк рәүешенә килтереп һары таҫмалар тағылған.

«Отличница Ҡасимова Зәкиә ошо икән», — тип уйланы Ғүмәров.

Ғүмәров, һәр уҡыусыға туҡталып, исемлекте ҡарауын дауам итте.

«Ҡәрипов Хәйҙәр — рус теле яҙманан көҙгә һынауға ҡалған. Бына тағы берәү — Ҡаһарманов Хатип, уныһы математиканан ҡалған».

Тәлғәттең маңлайы йыйырылды. Был фамилиялар тәңгәлендә ул оҙағыраҡ туҡталды. Башҡа предметтарҙан отметкаларын ҡараны. Ҡәрипов тигәне башҡа предметтарҙан арыу барған, гел «дүрт» тиерлек, туған телдән хатта «биш». Ҡаһармановтың, киреһенсә, физкультуранан ғына — «биш», ҡалғандары «өс», етмәһә, рус теле яҙманан ҡуйылған «өс» янына кемдер йыуан осло ҡыҙыл ҡәләм менән һимеҙ һорау билдәһе ултыртҡан. Тәртибе «4»! Быныһы бигерәк тә насар.

Ғүмәров, класс журналына текәлгән килеш, маңлайын йыйырып, уйға сумды.

Уҡытыусылар бүлмәһенең ишеге тауышһыҙ ғына асылды. Унан көнгә янып ҡуңырланған йөҙлө, оҙон



ҡара сәсле баш ҡыйыуһыҙ ғына һонолдо. Йәш уҡытыуcы күтәрелеп ҡараманы. Бер аҙҙан һонолған баш юғалды. Ләкин ишек кире ябылғанда тауыш сығарҙы. Тәлғәт, һиҫкәнеп, башын күтәрҙе:

— Кем унда? Инегеҙ!

Ишек артында йомшаҡ ҡына аяҡ тауышы ишетелде.

— Мөмкинме?

Түңәрәк ҡуңыр йөҙлө ҡыҙ тупһаны ҡыйыуһыҙ ғына аша атланы ла, уңайһыҙланыуҙан түбән ҡарап, һул ҡулының һуҡ бармағына галстугының осон урарға кереште.

— Әйҙүк! Зәкиә бит әле. Түрҙән уҙ.

Уҡытыусы, ҡуҙғала төшөп, ҡыҙыҡайға урын күрһәтте. Теге яҡыныраҡ килде, ләкин ултырманы, аяғын алмаштырып баҫҡылап, һаман түбән ҡарап торҙо.

Зәкиәнең ҡыҙыллыҡ йүгергән яңағына ҡарап, Ғүмәров уның юҡҡа ғына кермәгәнен аңланы. Шулай ҙа ул туранан-тура «Ни йомош?» тигән һорауҙы бирергә ашыҡманы.

— Йә, Зәкиә, нисек ял итәһең?

— Бер көйө итәбеҙ әле...

— Баҡсала эшләйһеңме?

— Эшләйбеҙ әле...

— Улай икән... Бик ярай...

— Бына, — Зәкиә алъяпҡыс кеҫәһенән уртаға бөкләнгән бер конверт сығарҙы. — Нәсимә апайға күрһәткәйнем дә!.. Ул әйтә, Тәлғәт Хәкимовичҡа күрһәтеп ҡара, ул төплөрәк яуап бирер, ти.

Зәкиә конверт эсендәге ике бит ҡағыҙҙың береһен уңайһыҙланып ҡына уҡытыусыға һуҙҙы.

Нык ҡыйынһыныуына, оялыуына ҡарап, был хатты уның уҡытыусыға, үҙ ирке менән түгел, вожатый апаһы ҡушҡанға ғына уҡытыуын һиҙеп була ине.

Үҙенә алып килгән ҡағыҙ битен Зәкиә тиҙ генә дүрткә бөкләне лә кеҫәһенә кире тыҡты. Ғүмәров ул ҡағыҙ битенең сит-ситенә асыҡ буяуҙар менән сәскәләр үреме төшөрөлгәнен шәйләп ҡалды, ләкин күрмәмешкә һалышты.

Уҡытыусы хатты уҡый башлағас, Зәкиә тоҡанып китерҙәй булып ҡыҙарҙы. Ишеккә табанырак сигенеп, урынында тапана башланы.

Асыҡ зәңгәр ҡара менән бик тигеҙ, һоҡланғыс матур почерк менән русса яҙылғайны хат.

«Зәкиә, дуҫҡайым! Һиңә бик күп сәләм ебәрәм.

Их, Зәкиәкәйем! Белһәң ине... (ошо урында хаттың биш-алты юлы көрән ҡара менән тырышып-тырышып һыҙылған). Ә һине мин һис онота алмайым. Һине ғүмергә дуҫ итеп күрҙем. Ҡыҙҙар ҙа һине һағына.

Зәкиәкәйем! Beләһеңме, атайымды һеҙҙең колхозға председатель итеп ебәрәләр. Атайым, үҙемдең тыуған еремә эшкә ҡайтам, тип ғариза биргән. Әсәйем менән оҙаҡламай күсеп китәләр инде. Эй, дуҫҡайым! Минең ҡайғым да ҙур бит әле! Беләһеңме, ҡалала өләсәйем янында ҡалдырып китергә итәләр. Атайым да, әсәйем дә, һин бит рус мәктәбендә уҡыйһың, ә Бишулда башҡорт мәктәбе, тиҙәр. Ә минең һис тә тороп ҡалғым килмәй.

Их, Зәкиәкәйем, мине лә алып барһалар, ни тиклем шатлыҡ булыр ине. Икәүләп уҡыр инек тә һуң! Һис

айырылышмаç инек. Ә мин һине шул тиклем һағындым!

Ах, күҙ алдына килтерә алмайым, атайым менән әсәйемдән башҡа бында ни эшләрмен!

Минең бер ваҡытта ла башҡортса уҡығаным юҡ.

Әсәйем, һине ҡалдырып китәбеҙ, тигәс, өс көн инде бына, көнө-төнө башҡортса китап уҡыйым. Уҡый алам.

Минең бик барғым килә. Зәкиә, һин нисек уйлайһың: мин башҡортса уҡый алырмынмы икән? Башҡортса яҙырға өйрәнеү ауырмы? Бик ныҡышһам, алып та барыр инеләр ҙә, уҡыуға төшөнөп китә алмам тип үҙем икеләнәм. Ә мин «биш»тән дә кәмгә уҡымаçҡа һүҙ биргәнмен.

Бына шул, Зәкиә дуçҡайым, хәҙер үк хат яҙ.

Һиңә бағышлап яҙған шиғырымды ебәрәм. Берәүгә лә уҡытма, йә көлөрҙәр.

Дуçың Люциә Фәттәхова».

Ғүмәров хатты уҡып сыҡҡас та, башын күтәрмәй уйланып ултырҙы. Шунан ҡул ишараһы менән генә Зәкиәне саҡырып алып, хатты кире тотторҙо. Уңайһыҙланыуын еңгән ҡыҙыҡай, уға ҡарап, яуап көтөп торҙо. Ләкин уҡытыусы һаман өндәшмәне.

Зәкиә инде сығырға самалай башланы. Быны күреп, Ғүмәров яңағына таянған ҡулын алды ла урынынан торҙо.

— Ашыҡма, Зәкиә, ултыр, һөйләшәйек әле.

Зәкиә диван мөйөшөнә генә һыйынып ултырҙы.

Уҡытыусы, өçтәл артынан сығып, яй ғына ишеклетүрле йөрөп әйләнде лә, бер ултырғысты диванға яҡынырағ шылдырып, Зәкиә ҡаршыһына барып ултырҙы.

— Люциә менән ҡасан танышҡайнығыҙ?

— Былтыр йәй килгәйне...

— Дуçыңды бик һағындыңмы инде? — Тәлғәт ҡыҙыҡайға һынаулы ҡараны.

Зәкиә, ҡайтанан ҡыҙарынып, күҙен иҙәнгә текәне лә, һиҙелер-һиҙелмәç кенә итеп баш ҡаҡты.

— Люциәгә нимә тип яуап яҙмаҡсы булаһың инде?

— Әлләсе... кил, тип яҙһам...

— Ә һин нисек уйлайһың, ул башҡортса уҡыуға төшөнөп китә алырмы?

Зәкиә, дәртләнеп, урынынан ҡуҙғалып уҡ ҡуйҙы. Ул иркен йылмайҙы. Күҙҙәренән шатлыҡ нурҙары сәселеп китте. Ул, ихлас күңел менән, ярым ҡысҡырып:

— Ул бик шәп уҡыусы, һис шикһеҙ, башҡортса ла шәп уҡыр!..

— Кил, тип яҙ, улайһа.

Зәкиә, сығырға тип, урынынан һикереп торҙо. Ләкин уҡытыусы уны тағы туҡтатты.

— Бына һеҙҙең класта Ҡәрипов менән Ҡаһарманов тигән ике уҡыусы бар икән.

— Улар бит хәҙер беҙҙең класта түгел.

— Ни эшләп?

— Улар көҙгә ҡалдылар бит. Ҡаһарманов, уҡымайым, ти. Ҡәрипов, әллә уҡыйым, әллә юҡ, ти, мин барыбер имтихан бирә алмам, ти.

— Ә һин шуға нисек ҡарайһың?

— Әлләсе...

— Бына инде... Улар бит һинең класташтарың! «Әлләсе» була тиме ни?

Зәкиә, ни әйтергә белмәй, уҡытыусыға ҡарап торҙо. Шунан аптырағас:

— Улар — малайҙар бит... Әйткәнде тыңлай тиме ни улар.

— Ә һин уларҙың ҡабат һеҙҙең менән бер класта уҡыуын теләйһеңме?

Был юлы Зәкиә, йылмайып, әүәҫ кенә яуап бирҙе.

— Теләйем...

— Улай икән... Бик һәйбәт... Ә һин уларҙың берәйһенә имтиханға әҙерләнергә ярҙам итә алыр инеңме?

Зәкиә шунда уҡ яуап бирҙе.

— Тыңламаҫтар шул.

— Әйтәйек бына, улар тыңлаһалар, ҡайһыһына ярҙам итер инең?

— Әлләсе... — Зәкиә уйланды, ниңәлер, тағы ҡыҙарынып, түбән ҡараны, шунан тулҡынланыулы тауыш менән оялып ҡына: — мин Хатипҡа... Э-э... мин математиканы яратыңҡырайым...

— Бик шәп. Улайһа, Ҡаһарманов Хатипҡа ярҙам итерһең. Мин уның менән һөйләшермен. Тик Хатип та,

Хәйҙәр ҙә был ауылдыҡы түгел икән шул. Әллә был эште үҙҙәренең ауылынан берәй уҡыусыға ҡушайыҡмы?

— Юҡсы... — тип ҡаршы төштө Зәкиә. — Мансаҙы ни беҙгә өс километр ғына. Миңә унда барып йөрөү уйын ғына ул.

— Ярай, улайһа, килештек, — тине был һөйләшеүҙән ҡәнәғәт булған уҡытыусы Зәкиәне оҙатҡанда. — Ә һин Люциә дуҫыңа хәҙер үк хат яҙ. Килһен. Уға ла башҡорт телен үҙләштерергә ярҙам итербеҙ. Бәлки, ул да беҙгә ярҙам итер, — тип ҡалды.

Зәкиә, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, дәртләнеп китте, уның был бүлмәгә тәү килеп ингәндәге ҡыйыуһыҙлығы бөтөнләй юғалды:

— Люциәнең атаһы килеп киткән инде. «Үҙебеҙгә өй һалып бөткәнсе Мансаҙыла тороп торорбоҙ», — тип әйтә ти. Унда Люциәнең олаталары бар...

Зәкиә бик күңелләнеп сығып китте. Буш коридор уның аяҡ тауышынан гөр килеп яңғырап ҡалды.

Мәктәп алдындағы йәшелсә баҡсаһында бөгөнгө эштәр бөткәс, пионервожатый Нәсимә түтәлдәргә һыу һибеүсе ҡыҙҙарҙы оҙатты һәм биҙрәләге һыу менән көнгә янған беләктәрен йыуҙы ла ҡапҡаға табан китте.

Шунда ул баҡсаға инеп килеүсе Ғүмәровты күреп ҡалды. Улар иҫәнләште.

— Әйҙүк, Тәлғәт Хәкимович! Баҡсаны күреп сығығыҙ.

Ул ҙур әүәҫлек менән Тәлғәткә түтәлдәрҙе күрһәтә башланы.

— Бына быныһы һеҙ етәксе буласаҡ класс уҡыусыларының участкаһы.

— Бик ярай, бик һәйбәт. Уны уҡыусылар үҙҙәре ҡарайҙармы?

— Үҙҙәре... Күберәген ҡыҙҙар ҡарай. Малайҙарҙың әллә ни иҫтәре китмәй. Уларҙың күбеһе эштә лә инде... Эштә булмағандарын да йыйыу ҡыйыныраҡ. Ана Ҡәрипов Хәйҙәр менән Ҡаһарманов Хатипҡа нисәмә ҡабат әйтеп ебәрҙем инде. Баҡсала үҙҙәре дежур булған көндө лә килмәйҙәр...

Вожатыйҙың йөҙө үҙгәрҙе.

— Улар хаҡында мин дә һеҙҙең менән һөйләшәйем тигәйнем әле. Улар бит әле етенсе класс менән дә эштәрен өҙмәгәндәр икән, — тине уға Ғүмәров.

— Белмәйем инде. Мин улар менән күпме интектем... Бер ҙә генә ипкә килтерә алманым. Нимә эшләмәк кәрәк? Мәктәпкә уларҙы арҡан менән һөйрәп тә килтереп булмай бит. Хәйҙәре бер хәл инде. Уныһы ыңғайға килер. Минеңсә, — Нәсимә ҡул һелтәне, — Хатибы менән иҫәпләшеп торорға ярамаҫ. Аҙаҡ иҫенә төшөр әле.

Ғүмәров, вожатый менән килешмәгәнлеген белдереп, баш сайҡаны, ләкин өндәшмәй ҡалды.

— Хәйҙәрҙе Хатип тәьҫиренән ҡотҡарырға кәрәк, — тип дауам итте Нәсимә. — Емерергә кәрәк уларҙың «дуҫлығын». Бына шунда, бәлки, берәй нәмә эшләп булыр. Хатип — боҙоҡ малай ул. Күпме әйттем мин уға, күпме әрләнем, директорға саҡырып та ҡараным, звено сборында ла тәнҡитләнек. Ҡолағына ла элмәй. Тағы нығыраҡ шаша бара.

Йәш уҡытыусы, һис кисекмәҫтән был ике уҡыусыны күрергә кәрәк, тигән уйға килде.

— Мин уларҙы бөгөн дә саҡыртҡайным әле. Белмәйем, килмәҫтәр, — тине Нәсимә баҡсанан сығышлай.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Тәлғәт Ғүмәров уҡыуҙы тамамлап ҡайтҡас, эшкә ҡайҙа тәғәйенләнә?
2. Ни өсөн уҡытыусы, тиҙерәк беренсе сентябрь килеп етһен ине, тип теләй?
3. Тәлғәт үҙенең класы менән танышыуҙы нимәнән башлай?
4. Күҙгә һынауға ҡалған уҡыусылар тураһында һөйләгеҙ.
5. Зәкиә Ҡасимова Тәлғәт Ғүмәровҡа ниндәй хат менән инә?
6. Тәлғәт күҙгә һынауға ҡалған уҡыусыларҙың яҙмышына нисек ҡарай?



# Алтынсы бүлек

## БЕҘҘЕҢ БОРОНҒО ӘҘӘБИӘТЕБЕҘ

### ЯҘМА ҠОМАРТҠЫЛАРЫБЫҘ

Башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш тарихы мең йыллап дәүерҙе үҙ эсенә ала. Халҡыбыҙҙың Октябрь революцияһына тиклемге һүҙ сәнғәте бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙән бер аҙ айырылыбыраҡ тора. Уның ҡайһы бер үҙенсәлектәре бар. Берҙән, уҡымышлы башҡорттар яҙмала быуаттар буйы ғәрәп графикаһын (хәрефтәрен) файҙалана, әҙәби әҫәрҙәр ҙә XX быуаттың 20-се йылдарына тиклем ғәрәп яҙмаһы менән ижад ителде. Икенсенән, башҡорт әҙәбиәте үҙенең барлыҡҡа килә башлаған дәүерендә оҙаҡ ҡына ваҡыт (VI—XV быуаттарҙа) дөйөм төрки әҙәбиәте эсендә үҫте. Йәғни әҙәби ҡомартҡылар һәм уларҙың авторҙары төрки телдәрендә һөйләшкән байтаҡ халыҡтар өсөн — башҡорттар, үзбәктәр, татарҙар, төркмәндәр, ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар һәм башҡалар өсөн уртаҡ булды, әҫәрҙәр ошо халыҡтарҙың бөтәһе өсөн дә аңлашылып торған дөйөм төрки телендә яҙылды. Тап шул дәүерҙә — XII—XV быуаттарҙа — Ҡол Ғәлиҙең «Йософ ҡиссаһы», Ҡотбтың «Хөсрәү һәм Ширин», Хәрәзмиҙең «Мөхәббәт китабы», Сәйф Сараиҙың «Төрки Гөлстаны», Хөсәм Кәтибтең «Жөмжөмә Солтан» кеүек данлыҡлы әҫәрҙәре ижад ителде. Улар хәҙер бөтә донъяға билдәле. Заманында был әҫәрҙәр Урал һәм Волга буйында, Урта Азияла, Кавказда йәшәгән төрки телле халыҡтар араһында таралды, Башҡортостан ерен-

дә лә яратып уҡылды, башҡорт әҙәбиәтенең артабанғы үҫешенә улар һиҙелерлек йоғонто яһаны.

XV—XVIII быуаттарҙа башҡорт әҙәбиәте дөйөм төрки әҙәбиәтенән айырылып сығып, үҙаллылыҡҡа аяҡ баҫты. Башҡортостан ерендә тыуып үҫкән әҙиптәр үҙебеҙҙең халыҡтың тормош-көнкүреше тураһында күберәк яҙҙы, уның мәнфәғәттәрен яҡлап сыҡты. Был дәүерҙә башҡорт әҙәбиәте ике тармаҡҡа бүленде: ауыҙ-тел әҙәбиәте һәм яҙма әҙәбиәт барлыҡҡа килде.

Ауыҙ-тел әҙәбиәтен халыҡ ижады менән бутарға ярамай. Халыҡ ижады телдән коллектив рәүештә сығарылып, дөйөм халыҡтың уй-ҡараштарын сағылдыра, ә ауыҙ-тел әҙәбиәтенә ҡараған әҫәрҙәр бер генә кеше тарафынан телдән ижад ителә һәм, әлбиттә, уның ғына уй-ҡараштарын үҙ эсенә ала. Башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәте әҫәрҙәрен, нигеҙҙә, сәсәндәр сығарған.

XIV—XVIII быуаттарҙа йәшәгән Һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған, Шалғыйыз йырауҙарҙың Ҡобағош, Ерәнсә, Килдеш, Йәммәт, Ҡарас, Байыҡ Айҙар, Мәхмүт сәсәндәрҙең исемдәре билдәле. XIX быуатта — XX быуат башында йәшәгән Буранбай-Йәркәй, Ишмөхәмәт, Ғәбит сәсәндәрҙең данлы исемдәре бөтә Башҡортостанға таралған. Ә совет осоронда йәшәгән сәсән, драматург һәм ғалим Мөхәмәтша Буранғоловҡа «Башҡортостандың халыҡ сәсәне» тигән маҡтаулы исем бирелгән. Ләкин сәсәндәр сығарған шиғри әҫәрҙәрҙең бөтәһе лә беҙҙең көндәргә уларҙың үҙҙәренең авторлығы менән килеп етмәгән. Телдән телгә күсеп йөрөй торғас, күпселек тексттар халыҡ ижады менән аралашып киткән. Ә бына үрҙә телгә алынған сәсәндәрҙең ҡайһы бер әҫәрҙәре улай юғалып ҡалмаған, ижад итеүселәренең исемдәренән айырылмайынса һаҡланған.

Башҡортостанда (шулай уҡ бөтә Уралда һәм Волга буйында) типографияларҙа ғәрәп хәрефтәре менән китап баҫыу XIX быуатта ғына башлана. Ә яҙма әҙәбиәт боронғо дәүерҙән үк йәшәй килгән. Шуға күрә лә башҡорттар һәм төрки телле бүтән халыҡтар китапты типографиялар асылғанға тиклем үк ҡулдан эшләгәндәр: матур хәрефтәр менән яҙып, йыйнаҡ итеп төпләгәндәр, һәр 10—15 бит һайын әҫәрҙең авторын һәм исемен күрһәтә барғандар. Бер үк китап йөҙәрләгән данала күсереп таратылған. XVI—XVIII быуаттарҙағы

яҙма әҙәбиәт үҙенең формаһы менән дә бер аҙ айырылып торған. Был айырма бигерәк тә сәсмә әҫәрҙәрҙә (прозала) асыҡ күренгән. Ул саҡта бөгөнгө кеүек хикәйә, повесть, романдар, драматик жанрҙар булмаған. Образлы тел менән мауыҡтырғыс итеп яҙылған юл яҙмалары, шәжәрәләр, хаттар, сәйәхәтнамәләр һәм башҡа текстар бер юлы әҙәби әҫәр ролен дә үтәгән. Шиғырҙарҙың да ғәрәп, фарсы, дөйөм төрки поэзияһына борондан уҡ хас булған жанрҙары — ғәзәл, робағи, мәснәүи, ҡасида кеүектәре киңерәк таралған. Революцияға тиклем төрлө дәүерҙәрҙә дөйөм төрки һәм үҙ аллы башҡорт әҙәбиәтендә Йософ Баласағунлы, Мәхмүт Ҡашғари, Ҡол Ғәли, Һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған, Шалғыйыз, Ҡотб, Хәрәзми, Сәйф Сараи, Хөсәм Кәтиб, Мәүлә Ҡолой, Ғәбдерәхим Усман (Утыҙ Имәни), Салауат Юлаев, Батырша Әлиев, Тажетдин Ялсығолов, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һәм башҡа бик күп әҙиптәрҙең исемдәре халыҡҡа киң билдәле булған.

***Ҡол ҒӘЛИ***

## ЙОСОФТОҢ МАТУРЛЫҒЫ

*(«Йософ ҡиссаһы» әҫәренән өҙөк)*

Малик Дәғир[1] һарайында ҡалыу менән,
Йософ кереп, унда урын алыу менән,
Йөҙөн асып, пәрҙәһен һалыу менән —
Һарайҙан нур тышҡа балҡып сыға инде.

Быны күреп, мысырҙар йыйылдылар,
Каруансының һарайына ағылдылар.
Теләктәрен ул Маликка әйтә былар:
«Ҡолоғоҙҙо бер күрәйек», — тиҙәр инде.

«Ул моратҡа, — тине Малик, — ирешмәҫһегеҙ,
Һарайыма һеҙ минең һис кермәҫһегеҙ,
Ул Йософтоң гүзәллеген күрмәҫһегеҙ,
Бирмәйенсә һәр кем берәр динар инде».

[1] *Малик Дәғир* — Йософто ҡол итеп һатып алған сауҙагәр.

Риза булып, берәр динар килтерҙеләр,
Рөхсәт алып, һарай эсенә керҙеләр,
Йософ йөҙөн, ниһайәт, улар күрҙеләр —
Тик бер күргән ямалына туймаҫ инде.

Икенсе көн мысыр халҡы тағы килде,
Һәр ҡайһыһы икешәр динар алып килде,
Йософ йөҙөн күрергә тип теләк ҡылды —
Күргән бере ғәжәп хайран булыр инде.

Өсөнсө көн, дүртенсе көн, бишенсе көн, —
Арттыралар һәр көн һайын берәр алтын,
Атлығалар тик Йософто күрер өсөн,
Күргән һайын һис кем бағып туймай инде.

Шулай итеп, инде унынсы көн килде,
Һәр ҡайһыһы унар алтын ул көн бирҙе.
Оло-кесе, һәммәһе лә уны күрҙе —
Күргән бере иҫтән яҙып төшәр инде.

Ҡай берҙәре зифалығын хуш күрҙеләр,
Ҡай берҙәре холҡон, аҡылын хуп күрҙеләр,
Ҡай берҙәре рәсүллеген бик хуп белде,
Һәр бер төркөм үҙенсә юш күрер инде.

Һүрәтен хуш күргән малын фиҙа ҡыла,
Холҡон хуп күргән йәнен фиҙа ҡыла,
Егерме мең әҙәм унда шәһит була,
Рәсүллеген күргән иман килтерә инде.

### Боронғо төрки телендә ҡулланылған һүҙҙәр

**мысыр, мысырҙар** — Египет, Египет халҡы

**каруансы** — сауҙагәр

**морат** — маҡсат

**динар** — Көнсығыш илдәрендәге аҡса берәмеге

**ямал** — матурлыҡ (ямалына туймаҫ — матурлығын күреп туймаҫ)

**бағыу** — ҡарау, күреү
**рәсүллек** — пәйғәмбәрлек, изгелек
**юш** — ыңғай, тап килеү
**һүрәт** — тышҡы матурлыҡ, тышҡы ҡиәфәт
**фиҙа ҡылыу** — ҡорбан итеү
**шәһит** — ҡорбан
**иман** — иң юғары камиллыҡ

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Йософто күрер өсөн ниңә мысырҙар аҡсаны көн һайын артығыраҡ түләйҙәр?
2. Шиғырҙың төҙөлөшөнә иғтибар итегеҙ. Хәҙерге заман шиғри әҫәрҙәренән ниндәй айырма табаһығыҙ?

* * *

Атаҡлы шағир Ҡол Ғәли XII быуат аҙаҡтарында — XIII быуаттың беренсе яртыһында йәшәй. «Йософ ҡиссаһы» әҫәрен 1233 йылда тамамлай. «Йософ ҡиссаһы» — бөтә донъяға билдәле булған әҫәр. Унда Йософтоң тышҡы матурлығы менән бергә күңел сафлығына, намыҫлылығына, аҡылына, кешелеклелегенә дан йырлана, Йософ менән Зөләйханың мөхәббәте тасуирлана.

## ТАБЫН ҠӘБИЛӘҺЕНЕҢ ҠАРА ТАБЫН ЫРЫУЫ ШӘЖӘРӘҺЕ

Ҡара Табын аймағы Майҡы бейҙән таралған. Майҡы бей Сыңғыҙ хан дәүерҙәрендә Урал тауының Миәдәк тигән урынында булып, Миәс йылғаһы буйында мәҡәм иткән. Ул Сыңғыҙ ханға бүләк алып барып, уның менән юлдаш булып, Сыңғыҙ хан менән бер арбала ултырып йөрөгән. Аты Уйшын Майҡы бей, тигәндәр. Майҡы бей улы — Иләк бей, уның улы — Алча бей, уның улы — Булғаир бей, уның улы — Ҡара Табын бей. Уны Ҡара Ғәзиз тип атағандар. Ҡара Табын бей боронғо урындарын ташлап, Чулман йылғаһы буйына күскән. Уның улы Чулман бей шунда килгәс тыуған.

Чулман улы — Ҡолман, Ҡолман улы — Дөрмән, Дөрмән улы — Бей Бән, Бей Бән улы — Хоҙайғол, уның улы — Хоҙаяр, уның улы — Дәүләтьяр, уның улы — Дәүләтбай, уның улы Иҫән хан. Иҫән хан Ҡазан хандарынан булған Чуртмаҡ ханға буйһонған. Уның йорто Жирем ҡәрйәһе булған. Ул хәҙер Соҡор ауылы тип билдәле. Соҡор ауылы янындағы «Сырған күл» тигән мәшһүр урын — Иҫән хан менән Чуртмаҡ хандың мәрәйгә атышҡан урындары.

Мәрәйгә Иҫән хандың уғы тейгән. Чуртмаҡ хан шуға намыҫланып, икеһе араһында талаш булып, Чуртмаҡ хан: «Өҫтөңә ғәскәр алып киләм», — тигәс, Иҫән хан да халыҡтары менән ҡурҡып: «Ғәскәр килтермәҫ борон бының үҙен үлтерәйек», — тип, шунда Чуртмаҡ ханды үлтергәндәр. Иҫән хан һуңынан ҡазандарҙың үс алыуынан ҡурҡып, рус дәүләтенә барып буйһоноп, һуңынан мәхкүм булып ҡалғандар. Ул урын хәҙерге көндә лә «Сырған күл» тип аталып, «Иҫән хандың уғы төшкән ер» тип йөрөтәләр.

Иҫән хан улы — Бураҡ, Бураҡ улы — Кейек, Кейек улы — Шәриф, Шәриф улы — Ғабдулла, Ғабдулла улы — Сәлих, Сәлих улы — Ғәли, Ғәли Кейековтың үҙе була.

## Ер-һыу атамалары һәм төрки телендә ҡулланылған һүҙҙәр

**аймаҡ** — ырыу
**бей** — бай ҡатламдар араһындағы дәрәжә
**Миәс** — Уралдағы йылға
**мәкәм иткән** — ғүмер иткән, йәшәгән
**ат** — исем
**Чулман йылғаһы** — Кама йылғаһы
**ҡәрйә** — ауыл
**мәрәй** — сәп, мишень
**мәхкүм** — буйһонған

## ШӘЖӘРӘ ТУРАҺЫНДА

Ш ә ж ә р ә — ул ырыу тарихы. Боронғо дәүерҙә башҡорттар, бүтән халыҡтар кеүек үк, ырыу-ҡәбиләләргә бүленеп йәшәгән. Ҡәбиләләрҙең, ырыуҙарҙың исемдәре лә булған. Мәҫәлән, бөрйән, үҫәргән, ҡыпсаҡ, юрматы, табын, мең, ҡатай, ғәйнә һәм башҡалар. Башҡорттар элек-электән үҙ ырыуының тарихын яҙып ҡалдыра барған. Ошо тарих шәжәрә тип аталған.

Шәжәрәлә ырыуҙағы бөтә ир-аттың исемдәре күрһәтелгән. Был тарихта ата-бабалар йә нәҫелдәр тураһында тулы мәғлүмәт бирелгән, һәр бер башҡорт үҙенең ата-бабаларының исемдәрен ете быуынға тиклем яттан белергә тейеш булған.

Табын ҡәбиләһенең Ҡара Табын ырыуы шәжәрәһе XVII—XVIII быуаттар тирәһендә яҙылған. Ул башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылғанға тиклем Ҡазан ханлығы менән мөнәсәбәтен сағылдыра. Шәжәрәне һуңғы тапҡыр XIX быуат аҙағында Ғәли Кейеков (шағир Ғәли Соҡорой) күсергән. Шәжәрәлә иҫкә алынған Соҡор ауылы хәҙерге Тәтешле районында урынлашҡан.

Шәжәрә — ырыу тарихының йылъяҙмаһы. Башҡорттарҙа борон-борондан үҙенең ырыу шәжәрәһен яҙыу һәм уны һаҡлау йолаһы йәшәгән. Шәжәрәгә ырыуҙың ирҙәр һаны ғына индерелгән һәм шәжәрәне белеү талап ителгән. Нәҫел-ырыу тураһындағы мәғлүмәттәр ныҡлы һаҡланылған, быуындан быуынға аманат рәүешендә ҡалдырыла килгән. Үҙеңдең шәжәрәңде белеү ғәҙәте башҡорттарҙа бик оҙаҡ ваҡыт һаҡланып килгән, үҙенең нәҫелен 7 быуынға тиклем белеү ғәҙәти хәл булған, хатта ата-бабаларын 10—12 быуынға тиклем белеүселәр күп осраған.

Бөгөнгө көндә тиҫтәләгән башҡорт шәжәрәһе ташҡа баҫылған. Улар араһында йөкмәткеләренең бай һәм тарихи факттар менән нығытылғандары яғынан юрматы, бөрйән, үҫәргән, ҡыпсаҡ, меңле ырыуҙарының шәжәрәләрен билдәләргә мөмкин.

Халыҡ тарихын өйрәнеүҙә шәжәрәләрҙең әһәмиәте ҙур, ырыу тарихының нигеҙендә шәжәрә ята. Ә инде ырыу тарихы халыҡ тарихын тәшкил итә. Тимәк, башҡорт халҡының тарихын белеү өсөн, уның ырыуҙар тарихын өйрәнергә кәрәк.

*Сәйф САРАИ*

## ПАРСАЛАР

*(«Төрки Гөлстаны» әҫәренән)*

### Уҙынған шәкерт

Бер көрәшсе бәһлеүән өс йөҙ алтмыш төрлө көрәш ғилеме белер ине. Көн һайын берәр төрлө ғилем менән көрәшер ине. Шәкерттәренән бер матур улан менән күңеле бәйләнеп, уға өс йөҙ илле туғыҙ төрлө көрәш ғилемен өйрәтте. Улан шундай ғайәткә етте, был илдә ни ҡәҙәр көрәшсе булһа, барыһын еңде. Бер көн солтан хеҙмәтенә килеп, ер үбеп әйтте: «Ҡеүәттә һәм сәнғәттә мин үҙемдең остазымдан артыҡмын».

Был һүҙ солтанға хуш килмәне. «Көрәшһендәр», — тип бойорҙо ул.

Мәҡәм тәртип ҡылдылар. Дәүләт тәрәге, әмирҙәр, вәзирҙәр йыйылды. Улан, иҫерек фил кеүек, майҙанға сығып, тасуир итте: «Тимерҙән тау булһа, еренән күтәрәм». Остазы уның үҙенән артыҡ икәнен белә ине. Ул бер ғилемде унан йәшереп килде. Уны ғәмәлгә килтерҙе. Улан ҡаршылыҡ итә белмәне. Уланды күтәреп, һауанан ергә һалды. Халыҡта шау-шыу ҡупты. Солтан бойороғо — остазға бүләк, байлыҡ бирҙеләр. Ә уланды ғәйепләнеләр: «Һин үҙ остазыңа дәғүә ҡылдың. Дәғүәң мәғәнәһеҙ булды».

Улан әйтте: «Ул үҙ ҡеүәте менән еңеүсе булманы, ә көрәш тәғлимәтенең бер алымын йәшергән, шуның менән еңеүсе булды».

Остазы әйтте: «Эйе, ул алымды был көн өсөн йәшереп килдем. Аҡыллылар мәҫәле шундай: дуҫҡа шул ҡәҙәр яҡынай, әгәр дошманға әүерелһә, һиңә еңеү тапмаһын».

**гөлстан** — гөлдәр иле

**парса** — бәләкәй генә күләмле, тәрән мәғәнәле сәсмә әҫәр

**шәкерт** — уҡыусы, өйрәнеүсе

**улан** — ул, егет

**күңел бәйләнеү** — дуҫлашыу, яҡынайыу

**ғайәт** — дәрәжә, кимәл
**солтан** — ил башлығы
**остаз** — уҡытыусы
**сәнғәт** — бында: «оҫталыҡ» мәғәнәһендә
**мәҡәм тәртип ҡылдылар** — «ныҡлы тәртип менән ярышҡа әҙерләнделәр» мәғәнәһендә
**тасуир итте** — әйтте
**ғәмәлгә килтереү** — ҡулланыу
**дәғүә ҡылыу** — ҡаршы килеү

## Һәр таштан алтын-көмөш сыҡмаҫ

Бер малик улын бер ғалимға бирҙе һәм әйтте: «Быға яҡшы тәрбиә ҡыл, үҙ улдарыңа ҡылған кеүек». Ул ғалим был малик улына йылдар буйы тырышлыҡ һалды, ә улан ғилем һәм әҙәптән һис нәмә ала белмәне. Ә ғалимдың үҙенең уландары уҡымышлы, күркәм һүҙле булдылар. Малик ғалимға әйтте: «Нисек булды инде, вәғәҙәңдең киреһен эшләнең, биргән һүҙеңде еренә еткермәнең». Ул ғалим әйтте: «Эй, малик! Тәрбиәнең юлы бер булыр, әммә һәләтлелек төрлөсә бирелер».

**малик** — ил башлығы
**тәрбиә ҡылыу** — тәрбиә биреү

## Ике малай бәхәсе

Бер бай кешенең улы, атаһы ҡәбере өҫтөнә ултырып, бер фәҡир менән бәхәсләшеп, әйтә икән: «Атам ҡәберенең ташы тәрән ултыртылған, алтын менән яҙылған, һуҡмағы — күк мәрмәр, кирбестәре — фирүзә; ә һинең атаңдың гүре — бер нисә сей кирбестән, етмәһә, бер нисә ус тупраҡ өҫтөнә генә ултыртылған».

Фәҡирҙең улы, был һүҙҙе ишетеп, әйтте: «Тик ултыр, кем, һинең атаң ауыр таш аҫтынан ҡуҙғалғансы, минең атам йәннәткә кергән булыр».

**фәҡир** — ярлы
**фирүзә** — аҫыл таштың бер төрө
**гүр** — ҡәбер

## Әҙәп өйрәнеү

Лоҡман Хәкимдән һоранылар: «Әҙәпте кемдән өйрәндең?» Әйтте: «Әҙәпһеҙҙәрҙән. Уларҙың ҡылыҡтарына баҡтым — ҡайһы хәрәкәте миңә хуш килмәне, шуларҙан баш тарттым».

**Лоҡман Хәким** — легендар аҡыл эйәһе. Ҡайһы бер башҡорт шәжәрәләрендә, ҡыпсаҡ ырыуы Лоҡман Хәкимдән таралған, тип әйтелә.

**ҡылыҡтарына баҡтым** — ҡылыҡтарын күҙәттем
**хуш килеү** — оҡшау

### Һорауҙар һәм эштәр

1. Парсаларҙағы һөйләмдәрҙең төҙөлөшөнә, һүҙҙәрҙең килеү тәртибенә иғтибар итегеҙ. Хәҙерге әҙәбиәт теленән нимәһе менән айырыла?
2. Тәүге әҫәрҙә һеҙ кемде нығыраҡ оҡшаттығыҙ — шәкерттеме әллә остаздымы? Ни өсөн?
3. Икенсе әҫәрҙә ғалимдың әйткән һүҙҙәрен нисек аңлайһығыҙ? Бында кем хаҡлы — маликмы, ғалиммы?
4. «Ике малай бәхәсе» парсаһында фәҡир улының һүҙҙәренә ниндәй тәрән мәғәнә йәшеренгән? Аталарының тере саҡтағы йәшәү рәүешенә ниндәй ишара яһала, тип уйлайһығыҙ?
5. Аҙаҡҡы парсала Лоҡман Хәкимдең һүҙҙәренән ниндәй фәһем алып була?
6. Парсалар һеҙгә оҡшанымы? Уларҙың ниндәй үҙенсәлектәре һеҙҙең күңелгә хуш килде?

* * *

Сәйф Сараи XIV быуатта, 1321—1396 йылдарҙа йәшәгән. Уның «Төрки Гөлстаны» («Гөлстан бит-төрки»), «Сөһәйел вә Гөлдөрсен» әҫәрҙәре бөтә донъяға билдәле. «Төрки Гөлстаны» — бик ҙур китап. Күләме яғынан ул хәҙерге романдарға тиң. Әҫәр һигеҙ бүлектән тора. Һәр бүлек тиҫтәләгән парсаны тәшкил итә. Уларҙың бөтәһе лә ҡыҫҡа йөкмәткеле, бик тәрән мәғәнәле, һәр парса аҙағында уның фекерен ҡеүәтләп шиғырҙар урынлаштырылған. Был китапты уҡығанда, үҙеңде гөлдәр илен-

дә йөрөгәндәй хис итәһең. Әҫәр XIV быуатта йәшәгән халыҡ массаларының бөтә ҡатламдарына ла аңлайышлы ябай һәм матур телдә яҙылған. «Төрки Гөлстаны»ның берҙән-бер ҡулъяҙмаһы хәҙерге ваҡытта Голландияла Лейден университеты китапханаһында һаҡлана. Ғалимдар уны XX быуатта ғына табып алып, донъяға сығарҙылар.

* * *

**Күңеленә һал – боронғонан нәсихәт:**

1. Ямандарҙан йыраҡ итһен,
   Яҡшыларға яҡын итһен!
   Бына шулай ғүмер ит һин,
   Тирә-йүнгә даның китһен!
2. Үҙең түрҙә бул һин,
   Һүҙең — үрҙә булһын!
3. Белгәнең булһын — тәүфиҡ,
   Яманлыҡтан тәүбит[1]!
4. Намыҫың булһын алдан,
   Һүҙең булмаһын ялған!
5. Аман булһын юл башың,
   Иман булһын юлдашың!
   Иман булһа юлдашың,
   Мең дошманға бер башың
   Ҡаршы торор, бирешмәҫ,
   Һыртың ҡуйыу килешмәҫ...

[1] *Тәүбит* — тәүбә ит.



# Етенсе бүлек

## АТА-ОЛАТАЙҘАРҘЫҢ ДА ТӨЙӘГЕ

*Тимер ЙОСОПОВ*

### АЙ УРАЛЫМ, УРАЛЫМ

Урал минең төйәгем,
Һине һөйә йөрәгем.

*Салауат Юлаев*

Ете диңгеҙҙе кисеп,
Ҡайтырмын мин, Уралым,
Арҡа терәп таштарыңа,
Ятырмын мин, Уралым,
Ай Уралым, Уралым.

Ҡылдай һуҡмаҡтар үткәндә,
Изге юлдар юраның.
Рәхмәт һиңә, Уралым,
Ай Уралым, Уралым.

Баҫам хәҙер күк таштарға,
Бағам хәҙер ҡаяға.
Әллә һиндә яңынан мин
Тыуҙыммы һуң донъяға?
Ай Уралым, Уралым.

Элек тауҙар ҡайғы булһа
Ғәйәр халҡым иңендә.
...Ҡаяларҙа ҡояш балҡый,
Тауҙай бәхет илемдә,
Ай Уралым, Уралым.

Елән итеп болоттарҙы
Иңдәреңә ураның.
Әллә төпһөҙ күктәргә һин
Таяуһыңмы, Уралым,
Ай Уралым, Уралым.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғыр ниндәй әҙәби традицияларҙы дауам итә, тип уйлайһығыҙ?
2. Башҡорт әҙәбиәтендә тағы ниндәй яҙыусыларҙың ижадында был традиция киң сағыла?

***Нәжиб ИҘЕЛБАЙ***

## САЛАУАТ ТАШЫ

Күкһел Урал тауы буйында таштан ташҡа һикереп, көн битләүендә көмөш уҡа кеүек ялтырап аҡҡан йәмле Йүрүҙән йылғаһы. Йылға яры башында өс тағанда асылған биҙрә аҫтына ут яғылған. Ут янындағы йыуан ҡарағай төпһәһе өҫтөндә ултырған балыҡсы Ҡәҙерғол ҡарт ауыҙ эсенән ниҙер мөңгөрләй-мөңгөрләй балыҡ һурпаһы бешерә. Арҡаларына тоҡсайҙар аҫып, ҡулдарына таяҡ тотҡан бер тиҫтер малайҙар — пионерҙар уның янына килеп туҡтай.

Балаларҙы күреүгә, Ҡәҙерғол ҡарт урынынан тороп, яҡты йөҙ, ягымлы һүҙ менән:

— Былай һуңға ҡалып ҡайҙан ҡайтып киләһегеҙ, уландарым? — тип һорай уларҙан.

— Беҙ ошонан алыҫ түгел лагерҙа ял итәбеҙ, олатай, — тип яуап ҡайтарҙы бер малай. — Әле туристик походтан ҡайтып киләбеҙ.

— Бына әле һеҙҙе күрҙек тә хәлегеҙҙе белеп китергә булдыҡ, олатай, — тине икенсеһе.

— Ә-ә... Улай икән, — тине ҡарт, йылмайып. — Әләйһә, ултырышығыҙ, уландарым, ял итегеҙ. Балыҡ һурпаһы менән һыйлармын үҙегеҙҙе.

— Рәхмәт, олатай, беҙ әле асыҡманыҡ. Мөмкин булһа, беҙгә берәй ҡыҙыҡлы әңгәмә йәки әкиәт һөйләгеҙсе.

— Ниндәйерәген һөйләйем икән һуң һеҙгә?.. — тине ҡарт, бер аҙ уйға ҡалып.

— Беҙ бөгөн Йүрүҙән буйлап йөрөгән саҡта бик дәү бер һоро таш күрҙек. Вожатый, был — Салауат ташы, ти. Уны нилектән шулай тип атағандар, олатай?

— Халыҡ шулай атаған уны. Ә халыҡ бер ҙә юҡҡа ғына исем ҡушмай ул.

— Шул хаҡта һөйләгеҙсе беҙгә, олатай.

Ҡарт ошо урында еңелсә генә тамаҡ ҡырып алды ла йыр кеүек моңло тауыш менән һуҙыңҡырап һөйләй башланы.

— Бынан бик күп йылдар элек булған был хәл, уландарым. Баш өҫтөнә ҡар төшкәндәй, башҡорт еренә бәлә килгән саҡта, Салауат әле йәш үҫмер малай ғына булған. Шул заманда халыҡ елкәһендә йәшәп ҡорһаҡ күптергән ҡомағай баярҙар һәм сауҙагәрҙәр Урта Рәсәйҙән Уралға килеп, башҡорттарҙың ер-һыуын биләгәндәр ҙә, урмандарын ҡырҡып, ерҙәрен ҡаҙып, завод һалдырырға тотонғандар. Уларҙың мылтыҡтары ла, туптары ла булған. Өҫтәүенә, батша ла яҡлаған уларҙы. Ә башҡорттарҙың уҡ-һаҙағы менән суҡмарынан башҡа бүтән ҡоралы булмаған. Суҡмар менән тупҡа ҡаршы тороп буламы ни? Халыҡ еңелгән, иллә-мәгәр тубыҡланып ҡалмаған: йөрәктәрендә ҡомһоҙ, яһил заводсыларға ҡаты асыу һаҡлап йәшәр булған. Яланда яғылған усаҡтан көлгә күмелеп ҡалған ҡуҙҙың дауылда ялҡынланып яныуын көткән улар.

Ошо тауҙай ауыр халыҡ ҡайғыһы үҫмер Салауаттың да эсен бик ныҡ ҡайыштырған, ти. Халыҡ һәм ер-һыу яҙмышы хаҡында бик оҙаҡ уйлап йөрөгән ул.

Йәйге иртәнге тынлыҡта аҫау атына атланып тау-таш аралап йөрөгәндә Салауат үҙ ер-һыуҙарының матурлығын маҡтап һаман йырлаған да йырлаған:

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым —
Минең аҫыл төйәгем,
Һиндә тибә йөрәгем.

Бигерәк тә Салауат, Йүрүҙән йылғаһы ярындағы баяғы һеҙ күргән дәү һоро таш өҫтөндә ултырып, күҙҙәрен һыу ағышына текләп, батша-баярҙар тарафынан яман ҡыйырһытылған үҙ халҡының ай-ҡояштай яҡты киләсәге хаҡында уйланырға, хыялланырға ятаҡан. Көндәрҙән бер көндө ул, ошо таш өҫтөнә баҫып, ант иткәндәй, Йүрүҙән йылғаһына арнап йыр сығарған:

Йүрүҙән, һин минең тыуған йылғам,
Ярҙарыңда ята ваҡ таштар,
Һыуҙарыңда ҡарпый балыҡтарың,
Үҙәнеңдә үҫә ҡамыштар.
Ҡолағымды йолҡоп, телде ҡырҡып,
Танауымды өҙөп алһындар,
Күҙҙәремде соҡоп, табанымды
Телеп, тәрән яра һалһындар...
Барыбер, йылғам, һинең туғайҙарың
Шул саҡта ла гел хуш еҫ бөркөр.
Бала ла саҡтан эскән саф һыуҙарың
Һыуһаганда миңә көс бирер...

Ошо урында Салауаттың йыры ҡапыл ҡайҙандыр ишетелгән ат тояҡтары тауышынан өҙөлөп ҡалған. Йәш батыр башын ҡалҡытып ҡарауға, түбәндә, тап йылға янында, ике һыбайлы һалдатты, ә улар араһында ауыр атлап килгән алама кейемле бер тотҡондо күргән. Шулай ҙа башын түбән эймәгән киң яурынлы, баҙыҡ кәүҙәле был кешенең ялан аяҡтарынан үткер таштар өҫтөнә ҡан тамсылары тамған, ә үҙе, үтә хәлдән тайғанлыҡтан, дауылға эйелгән һылыу ҡарағайҙай сайҡала

биреп ҡуйған, иллә-мәгәр йығылмаған. Уның ҡулын артҡа ҡайырып бәйләгән арҡандың ике осон ике һыбайлы һалдат тотоп килгән, ти.

— Аһ, яуыздар, йәнә бер әҙәмдең башына етмәксе булғандар икән. Ҡотҡарырға кәрәк үҙен! — тип ҡысҡырған да Салауат, ауыр суҡмарын күтәреп, улар өҫтөнә ташланған.

Шул ерҙә бер һалдат, ҡырҡылған ҡырлы билсәндәй, эйәренән ергә ауған, ти, ә икенсеһе, башы өҫтөндә уйнаған суҡмарҙан саҡ тайшанып, тауға ҡарай олаҡҡан. Салауат атынан һикереп төшөүгә, үҙе ҡотҡарған тотҡондоң салҡатан ятыуын күреп, ҡулдарын бәйләгән арҡанды киҫеп ебәргән дә түбәтәйе менән һыу килтереп, йөҙөнә һипкән.

— Рәхмәт, батыр! — тигән инде иҫенә килгән тотҡон.

Күҙҙәре утлы күмер кеүек баҙлап янған, ҡара мыйыҡлы, көрәк һаҡаллы ят кешенең йөҙөнә текләп ҡараған да, Салауат өндәшмәй тора биргән.

— Мине ҡотҡарыуың өсөн үкенәһеңме әллә? — тип һораған Көрәкһаҡал, саҡ көләмһөрәп.

— Бүреләр үҙ-ара теш ҡайрашалар икән, унда минең ни эшем бар? — тигән Салауат, йөҙөн һытып.

Инде ҡалҡып ултырған һаҡалтай Салауатҡа ҡарап йәнә көләмһөрәгән дә:

— Күрәм, һин беҙҙе яратмайһың, ахыры, — тигән.

— Ә ниңә мин һеҙҙе яратырға тейеш? — тигән Салауат, һарыуы ҡайнап. — Һеҙ беҙҙең ерҙәребеҙҙе тартып алдығыҙ, урмандарыбыҙҙы ҡырҡтығыҙ!..

Көрәкһаҡал көс-хәлгә аяҡ үрә тороп, башын сайҡаған да, Салауатҡа бошонҡо ҡараш ташлап, аҡрын ғына тауыш менән:

— Насар күрәһең һин, батыр, күҙҙәреңде томан баҫҡан һинең... — тигән.

— Минме насар күрәм?! — тигән Салауат, ут кеүек ҡабынған үткер күҙҙәрен зәңгәр күккә текәп. Ә унда, күк йөҙөндә, бейектә күҙгә күренер-күренмәҫ нөктә кеүек, бер бөркөт осоп йөрөй икән. Шул ваҡыт Салауат, уғын йәйәһенә ҡуйып, керешен тартып ебәреүе булған, ҡанаты ҡайырылған дәү ҡош уның аяғы аҫтына килеп тә төшкән, ти.

— Ҡулдарың баҙыҡ, күҙҙәрең үткер һинең, йәш батыр, — тигән һаҡалтай, һоҡланып. — Иллә-мәгәр дөрөçлөктө күреп еткермәйһең икән әле. Үҙең яҡшылап уйлап ҡарасы: заводсыла минең кеүек ялланып эшләгән урыç мужиктары таң һарыһынан алып ҡараңғы төнгә ҡәҙәр әсе тирен түгә-түгә ыҙа сигәләр. Ә үҙҙәренең ғүмер буйы тамағы ашҡа, өçтө кейемгә туйманы. Унан үҙ башҡорттарыңа күҙ һалсы! Улар ҙа шундай уҡ хәлдә бит: берәүҙәренең, ауыҙын аçһа, үпкәһе күренергә тора, икенселәре, ебәк сапандар кейеп, майҙа, балда ғына йөҙә. Йә, берәй ғәҙеллек бармы һуң бында?

Тотҡондоң әрнеп әйткән был йөрәк һыҙлатҡыс һүҙҙәре Салауатты бик тәрән уйға ҡалдырған. Ул инде, ата-бабаларҙан ҡалған йола буйынса, оло кеше алдында ихтирам менән баш эйгән, оҙаҡ ҡына өндәшмәй торған да, ахырҙа:

— Һүҙҙәрең хаҡ кеүек һинең, оло кеше, — тип яуап ҡайтарған. — Мин уйлап ҡарармын.

— Уйла, батыр, яҡшылап уйла, — тигән һаҡалтай. — Ә мин инде хәҙер тотҡон башымды алып, алыçҡа сығып китәм.

— Туҡтасы! — тигән Салауат ашығып. — Һине ҡайҙа алып баралар ине һуң улар?

— Минеме? — тигән тотҡон. — Мине беҙҙе рәхимһеҙ иҙгән ҡарун заводсыға ҡаршы баш күтәргәнем өсөн һөргөнгә ебәрҙеләр. Бына әле һинең ярҙамыңда ҡотолоп ҡалдым. Был яҡшылығыңды ғүмерҙә онотмам, йәш батыр. Хуш!

— Шулай ҙа кем булаһың һуң? — тип һораған Салауат.

— Кем, тип әйтһәң — шул. Ашыҡма, минең хаҡта һин ишетерһең әле.

Шулай тигән дә Көрәкһаҡал, ҡулын болғай-болғай урман эсенә инеп, күҙҙән юғалған.

Ошо көндән алып Салауат был урынға элеккенән дә йышыраҡ килеп йөрөр булған. Йәмле Йүрүҙән яры буйында аты һутлы үлән утлап йөрөгән арала ул, үҙе яратҡан һоро таш өçтөнә ултырып, йөрәгенә тәрән һеңеп ҡалған баяғы Көрәкһаҡалдың мәғәнәле һүҙҙәре хаҡында оҙаҡ уйлаған да йырлап ебәргән:

Әйтсе, йылғам, Йүрүҙән,
Бер сер һорайым һинән:
— Ярлы башҡорт, ярлы урыҫ
Бер ыҙа сигә микән?
Яҙмышы ла бер микән?
Дошманы ла бер микән?

Шул ваҡыт яҡында ғына гөрөлдәгән ағым йылға, телгә килгәндәй, йырлап яуап ҡайтарған, ти, уға:

Ир төйәге — ер булыр,
Ер терәге — ир булыр.
Ирек даулаған ирҙәрҙең
Күңелдәре бер булыр...

— Ошонан һуң, балаҡайҙарым, байтаҡ йылдар үтеүгә, — тип артабан һөйләп алып киткән Ҡәҙерғол ҡарт, иркен тып алып, — Урал аръяғынан, Яйыҡ далаларынан, Бүгәсәү исемле бер аҡ батша ер йөҙөнә сыҡҡан, имеш, тигән хәбәр таралған. «Урыҫ, башҡорт, татар, сыуаш, сирмеш бер булып, бер тыу аҫтына баҫығыҙ ҙа, Эбей батшаға, түрәләргә, баярҙарға, заводсыларға ҡаршы яу асып, үҙегеҙгә ер-һыу, ирек даулағыҙ!..» — тип яҙылған уның өндәмәһендә. Шул ваҡыт инде типһә тимер өҙөрлөк, арыҫлан менән алышҡанда ас биленән алып сөйөрлөк Салауат батыр тирә-яҡҡа сабармандар ебәреп, ағай-эне, дуҫ-иштәрен, үҙе кеүек батыр егеттәрҙе йыйнаған да йырға һалып ошо һүҙҙәрен әйткән, ти:

Ағай-эне, дуҫ-иштәрем!
Иң яҡшы иптәштәрем!
Дон буйынан ҡуҙғалған,
Яҡ-яғына күҙ һалған,
Бүгәсәү тигән бер батыр, —
Йәмәлкә тигән ир-батыр,
Сал бөркөттәй саңҡылдап,
Янған үрттәй ялҡылдап,
Халыҡҡа оран ташлаған.
Ялпыға хитап ташлаған...
Һыуһыҙ ҡалған халыҡҡа
Һыуын бирәм, тигән ул.

Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа
Ерен бирәм, тигән ул.
Ҡол булып ҡалған ялпыға
Ирек бирәм, тигән ул.
Башҡорттар үҙ илендә,
Тыуып үҫкән ерендә,
Ҡош булып күккә менһендәр,
Балыҡтай һыуҙа йөҙһөндәр,
Боландай ерҙә елһендәр, —
Ана шулай тигән ул...
Бүгәсәүгә ҡушылып,
Ир-батырға ҡуш булып,
Иҙелгәнгә иш булып,
Яуға сығыр көн етте,
Ирек даулар көн етте!..
Ҡарға үтмәҫ урмандан
Ыласын үтер таң менән.
Тубыҡланып ҡалғансы,
Яуҙа үләйек дан менән!

Ошо һүҙҙәренән һуң Салауат, ҡурай тартып, яҡташтарын яуға дәртләндергән дә Бүгәсәү ғәскәренә барып ҡушылған. Шул ерҙә ул ғәскәр башлығының ҡасандыр Йүрүҙән буйында үҙе үлемдән ҡотҡарған көрәк һаҡаллы кеше булыуын күргәс, ҡапылда ни тип әйтергә лә белмәй ҡатып ҡалған, ти.

Көрәкһаҡал Салауат батырға яҡты сырай күрһәтеп, яғымлы ҡараш ташлаған да:

— Ниңә былай ҡатып ҡалдың әле, батыр? — тип һораған. — Әллә мине танымайһыңмы?

— Юҡ, таныйым, — тигән Салауат, инде ирәбеләнә төшөп.

— Ә минең батша икәнлегемә ышанаһыңмы?

— Һинең кем булыуыңда минең эшем юҡ, — тип ҡыйыу яуап ҡайтарған батыр. — Тик мин шуны беләм: йәберләнгән халыҡтарға ер-һыу, ирек даулап яуға сыҡҡан, тиҙәр һине. Шунлыҡтан үҙ башҡорттарым менән һиңә килеп ҡушылдым да инде мин.

— Улайһа, бик һәйбәт! — тигән Көрәкһаҡал, йылмайып. — Минең полковнигым булырһың.

Бик күп халыҡтарҙы күргән бында Салауат. Төрлө телдә һөйләшкән улар, иллә-мәгәр бөтәһенең дә устарында сөйәл, өҫтәрендә алама кейем булған. Шул ваҡыт кешеләрҙе, телдәре төрлө булһа ла, бер үк уй, бер үк теләк туғанлаштырыуын аңлаған ул.

Шулай итеп, көллөһө бер булып баш күтәргән халыҡтар Пугачев менән Салауат етәкселегендә бик күп заводтарҙы, ҡәлғәләрҙе алып, ундағы ярлы-ялпыны азат иткәндәр. Элек баҫып алынған ер-һыуҙарын кире үҙ хужаларына ҡайтарғандар. Бик-бик алыҫта, таш ҡалала, мәрмәр, гранит һарайҙарҙа ғиш-ғишрәт ҡылып, ал да гөл йәшәгән Әбей батшаның быны ишетеп ҡото осҡан, төн йоҡоһо ҡасҡан, ти. Иллә-мәгәр ул заманда яуызлыҡты яҡшылыҡ, ҡараңғылыҡты яҡтылыҡ еңер ваҡыт етмәгән әле, күрәһең. Айбарланып алышҡан Бүгәс батырҙың ғәскәрҙәре тар-мар ителгән, ә Салауат эҙенән төшкән батша ғәскәрҙәре көнөн дә, төнөн дә тынғылыҡ бирмәгәндәр уға. Яуҙа бер-бер артлы яҡын дуҫтарын юғалтып, үлемесле яраланған Салауат яңғыҙ ҡалғас, Йүрүҙән йылғаһы аша йөҙөп сыҡҡан да, хәлдән тайып, әлеге үҙенең яратҡан һоро ташы янында ауған. Уңда — урман, һулда — ҡая, алда — һаҙлыҡ, артта — ҡыуғын. Инде батыр ҡасып ҡайҙа барһын? Етемһерәп, башын түбән эйеп, янында баҫып торған аҡыллы аты — уң ҡанаты, ҡолаҡтарын ҡайсылап, бәлә килеүен һиҙенгән дә мөлдөрәгән күҙҙәре менән эйәһенә ҡарап, сыркырап кешнәп ебәргән, ти. Быны ишетеүгә, һиҫкәнеп китеп, көс-хәлгә аяҡ үрә торған Салауат батыр, ҡылыс тотҡаһына таянып, мөһабәт Урал тауы һырттарына күҙ һалған да, аҫыл төйәгенән, һөйгән еренән, яратҡан халҡынан айырылғыһы килмәгәндәй, моңайып йырлап ебәргән:

Ай Уралым, Уралым,
Күгәреп ятҡан Уралым!
Нурға сумған һырттарың,
Күккә ашҡан Уралым!
Һине данлап йырланым,
Һине маҡтап туйманым...

Ул ошо йөрәк өҙгөс йырын йырлап бөтөрөргә лә өлгөрмәгән, йылға аръяғындағы урман эсенән ҡыйҡыулап ҡыуғынсы һалдаттар килеп тә сыҡҡан, ти. Уларҙы башлап килгән офицер өҙәңгеһенә баҫҡан да, шатланып:

— Ана үҙе! Тотоғоҙ! — тип ҡысҡырып ебәргән, ти.

Баштан-аяҡ ҡоралланған унарлаған һыбайлы һалдат шунда уҡ шаптыр-шоптор килеп Йүрүҙән йылғаһына төшкәндәр ҙә Салауатҡа табан ябырылып килә башлағандар...

Ошо урында Ҡәҙерғол ҡарт, һөйләүҙән туҡтап, һүнеп барған утҡа ҡоро сытыр һалды ла уға өрөргә тотондо.

— Уны тотоп һөргөнгә ебәргәндәр, — тине бер малай. — Мин быны китаптан уҡыным... Ул шунда үлгән. Эйеме, олатай?

— Юҡ, улым, батырҙар үлмәйҙәр, — тине ҡарт, утҡа өрөүҙән туҡтап. — Халыҡ икенсе төрлөрәк һөйләй.

— Йә, олатай, халыҡ нимә тип һөйләй һуң? — тип һораны икенсе малай.

— Салауат һалдаттарҙың ябырылып үҙенә яҡынлап килеүен күргәс тә тәнтерәкләй-тәнтерәкләй аты янына килеп, өҙәңгеһенә тотонған икән, ҡанһырап хәлдән тайғанлыҡтан, йәнә ергә ауған. Инде йыртҡыстар тырнағынан ҡотола алмауын шунда аңлап алған да ул, аҡтыҡ һулышын алғандай, күкрәк тауышы менән һөрән һалған:

— Ау-у!.. Тыуып үҫкән ерем! Саф һыуыңды эскән Йүрүҙәнем! Ал мине ҡосағыңа! Бирмәсе шул дошмандарға! Улар ҡулында әсир булғансы, үҙ ҡылысым ҡыйһын йәнемде!

Шул һүҙе менән ул алмас ҡылысын ҡынынан һурып алыуы булған, ап-аяҙ көндә йәшен балҡытып, күк күкрәгән дә, һорғолт ҡая таш ҡап урталай ярылып, бер һыбайлы һыймалы үткәүел[1] барлыҡҡа килгән, ти. Шунда уҡ Салауаттың ҡолағына:

— Кил, батыр! Үҙеңә үҙең ҡул һалырға ашыҡма. Күкрәгемә һыйын. Мәңге йәшә шунда! — тигән тауыш ишетелгән.

[1] *Үткәүел* — тау-таш араһында кеше үтә алырлыҡ урын.

Урмандағы ағастар ҙа, болондағы үләндәр ҙә, йылғалағы ағым һыу ҙа, тирә-яҡтағы һайрар ҡоштар ҙа шул тауышты ҡабатлағандар:

— Кил, батыр!.. Кил!..

Ахырҙа, Салауат батыр, аҡтыҡ көсөн йыйып, ҡулы менән тәрән яралы күкрәген бөрә тотҡан да баяғы үткәүелгә барып ингән, ә уның артынан тоғро юлдашы, уң ҡанаты — кир аты ла эйәргән, ти. Уларҙың шунда барып инеүе булған, йәнә даһыр-доһор килеп, үткәүел ябылған да һорғолт ҡая таш элекке хәленә ҡайтҡан, ти. Бынан ҡото алынған дошман һалдаттары ҡапыл, аттарын кире бороп, йылғаға төшкәндәр икән, нәфрәтләнеп ҡоторған Йүрүҙән бөтәһен дә үҙ һыуында тонсоҡторған. Тик аттары ғына яр башына йөҙөп сыҡҡан, ти.

Шулай итеп, аҫыл төйәк — тыуған ер үҙ улын, үҙ батырын, дошман ҡулына бирмәйенсә, ҡуйынында һаҡлап алып ҡалған, ти. Шунлыҡтан халыҡ бая һеҙ күргән ҡая ташҡа «Салауат ташы» тип исем ҡушҡан да инде. Ә һуңынан халыҡ Юлай улы Салауаттың мәңге үлмәҫ батырлығын маҡтап ошондай ҡобайыр ҙа сығарған:

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яуға өндәп саҡырғанда
Тауышҡайы көр ине.
Ҡаршы килгән яуҙарға
Ҡаршы сығыр ир ине.
Һай, ир ине, ир ине,
Менгән аты кир ине.
Дошман менән алышҡанда
Ил эсендә бер ине.
Халҡы өсөн көн ине.
Дошманы өсөн төн ине,
Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яурынына уҡ тейһә,
Себен тешләй, тир ине,
Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тир ине,
Тирем сыға, тир ине!

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Салауат Юлаев тураһында нимәләр беләһегеҙ?
2. Халыҡ риүәйәттәренә таянып яҙылған был әҫәрҙең ҡайһы урындары ысынбарлыҡ менән уртаҡ йәки уға тап килмәй?

*Жәлил КЕЙЕКБАЕВ*

## УРАЛ ТУРАҺЫНДА ҠОБАЙЫР

Һай Уралы, Уралы!
Яланлы ла Уралы,
Сағыллы ла Уралы!
Урал илдә тыуыусы,
Ағиҙелдә һыулаусы.
Урал илде тапарға
Суҡмар һөйрәп апарған,
Дошмандарҙың яуҙарын
Кире ҡағып ҡайтарған,
Һай Уралы, Уралы!
Баҡырлы ла Уралы,
Тимерле лә Уралы,
Күмерле лә Уралы,
Ҡара алтынлы Уралы,
Һары алтынлы Уралы,
Игенле лә Уралы,
Сөгөнлө лә Уралы!
Битләсендә Уралдың,
Ҡосағында Уралдың,
Итәгендә Уралдың,
Ҡатлауында Уралдың,
Әлегә берәү белмәгән,
Кеше-маҙар күрмәгән
Ниндәй байлыҡ ятмайҙыр!
Һай Уралы, Уралы,
Замандың ҡарт Уралы
Үҙ ғүмере буйына
Ниҙәр генә күрмәгән!
Уралтауҙың буйында,
Ҡара урман ҡуйынында

Үлән кисеп муйындан
Кемдәр генә йөрөмәгән.
Сыңғыҙ хандар, Батыйҙар,
Туҡтамыштар, Оғатайҙар
Урал тауын аша атлап,
Ағиҙелде ашаҡлап
Ябырылған вабалай,
Суҡмарҙарын өҫтөрәп,
Күгәреп ятҡан Уралдың
Аҡландарын иҙҙереп,
Күпереп ятҡан Уралдың
Халыҡтарын биҙҙереп,
Мал-тыуар, ҡаралтыһын,
Йорт-ҡураһын туҙҙырып.
Көнкүрешен боҙҙороп,
Йөрәгенә уҡ кер(е)теп,
Өйҙәренә ут төртөп,
Емереп, үртәп киткәндәр...
Быны күреп ятыусы,
Мәсхәрәле ғазапты
Күҙ йәше менән татыусы:
Мең йәшәр Уралдың
Таштан ҡойған йөрәге
Тәненә һыймай тарһыған.
Мең йәшәгән ҡарт Урал
Йөрәгенә сыҙамай
Сал кергән башын ҡалҡытып,
Бер ажғырып, ярһыған,
Яуға саҡырып улдарын,
Һайлап биреп уларға
Йүгерек йылҡы малдарын,
Һөңгө һаплап, уҡ биреп,
Ҡылыс һәм сая туп биреп,
Дошмандарҙы ҡырырға
Изге бер яу яр иткән!
Шул яуҙарҙа нығыусы,
Дошмандарҙың эсенә
Осло һөңгө тығыусы,
Әсә — Урал, сал Урал
Батырҙарын бар иткән:
Батыршалар, Ҡаһымдар,

Ҡараһаҡал, Сәйеттәр,
Юлайҙар, Салауаттар,
Нуримандар, Шәһиттәр
Дошмандарҙың өҫтөнә
Үрәпсетеп аттарын,
Ҡулына алып ҡоралын;
Һөйгән әсә Уралын,
Дошман ала алмаҫлыҡ,
Баҙнат итә алмаҫлыҡ,
Яҡын да юлай алмаҫлыҡ
Ҡорос ҡая иткәндәр...

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Ҡобайырҙа ниндәй тарихи ваҡиғалар бирелә?
2. Жәлил Кейекбаев ҡобайырының боронғо башҡорт ҡобайырҙары идеяһына, стиленә оҡшашлығын сағыштырығыҙ.



# Һигеҙенсе бүлек

## БАТЫРҘАРҘЫ ЯУҘА КҮП КҮРҘЕК, САЛАУАТТАЙ БАТЫР ЮҠ ИКӘН...

***Салауат ЮЛАЕВ***

Ағиҙелкәй аға ҡая аралап,
Ул тирәлә һыуы һалҡындыр.
Уралымдан йыраҡ киткән һайын
Күңелемдә ут та ялҡындыр.

Уралҡайым, һайрар ҡошҡайҙарың
Тыңлаһам да, телен белмәйем.
Тәсбих әйтә микән үлгәндәргә,
Тип эсемдән генә уйлайым.

Туғайыңды сөм-сөм күлдәр уйған,
Ҡуға менән керпек ҡыйылған.
Һыуҡайҙары күктән, әллә ерҙән,
Әллә күҙ йәшенән йыйылған.

Һаҙҙарында талдар бейек үҫмәй,
Күк ҡояшын ҡая ҡаплаймы?
Әллә үҙәгенә, ысынлап та,
Ҡара ҡандар ҡатып ҡалғанмы?

Һандуғасҡайҙарың ниңә һәр саҡ
Һаҙлыҡтарға ҡунып һайраусан?
Батыр ҡанын ҡойған яуыз фарман
Шунда килгәнме әллә һарайҙан?

Ер тетрәтеп, үткер ҡылыс болғап
Батырҙарың үткән юл ҡайҙа?
Әллә уларҙың да үткер ҡылысы
Һынды микән һуғышып был яуҙа?

### ЙЫРҘАРҘАН

Ҡаралай тауҙы үтәйек,
Ботаҡтары булһа, утайыҡ.
Ҡаршы ла килгән дошмандарҙы
Уңай сыҡҡан ерҙә бутайыҡ.

Әҙернә лә йәйә һөйәк баш,
Йәшел ебәк кәрәк керешкә.
Егет тә булһаң, тәүәккәл бул,
Тәүәккәллек кәрәк һәр эштә.

Әй буйҡайында ҡуш тирәк,
Аҫыл ҡоштар ҡуна ояға.
Салауат китте, тип шатланмаң,
Минән дә батыр тыуыр донъяға.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Салауат Юлаевтың бирелгән шиғырын тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Салауат Юлаев тыуған яғының тәбиғәтен нисек һүрәтләй?
3. Ни өсөн Уралдан йыраҡыраҡ киткән һайын шағирҙың күңелендә ут та ялҡын була?
4. «Әллә уларҙың да үткер ҡылысы Һынды микән һуғышып был яуҙа?» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
5. Халыҡ «Салауат китте, тип шатланмаң, Минән дә батыр тыуыр донъяға» тип йырлаған. Салауат тураһында ниндәй йырҙар беләһегеҙ? Өйҙә һүҙҙәрен яҙып килегеҙ.

### ЮЛАЙ МЕНӘН САЛАУАТ

*(Эпостан өҙөк)*

«Атай, күп йыл серәштем,
Арҡыры төшмәй һүҙеңә.
Атай, инде юл ҡуйҙым
Үҙем төшкән юлыма.

Бөтә халҡым ут йотоп,
Ере-һыуы таланып,
Зар илашып торғанда,
Яйлап ятып тирмәмдә
Ҡаҙы, ялы иммәмен.
Илем кисһә һай йылға,
Мин дә бергә кисермен,
Илем янһа утында,
Мин дә бергә янырмын.
Илем итһә ҙур туйын,
Саҡырылған ҡунаҡтай,
Мин дә бергә туйлармын».
Атҡа менеп барыһы
Китергә тип торғанда,
Оран һалып уларға,
Ошо һүҙен һөйләгән:
— Уҙамандар,
ҡустылар!
Батшаға яу асҡан ир
Бүгәс тигән ир икән,
Ҡараһаҡал, Мәсемдәр,
Аҡай, Батырша, Килмәт,
Тағы башҡа батырҙар
Быуат-быуат яу асып,
Уралда ҡоштай һайрарға,
Һыуҙа балыҡтай йөҙөргә,
Ирек эҙләп, ҡан кисеп
Сапҡан юлдан бара икән,
Батша һөйгән байҙарҙы,
Янаралды, һанатты —
Бөтәһен дә юҡ итеп,
Ҡан илаған байғошто:
Татар, мишәр, сыуашын,
Башҡорт, урыҫ — берәүһен,
Динен, ҡанын айырмай,
Азат итә, ти, икән.
Үҙем күреп һөйләштем
Бөтә Урал буйында,
Ете ырыу эсендә
Фармандарын өләштем.

Бөтә ырыу аңланы,
Уҡ-һаҙағын ҡайраны,
Илен һөйгән берәү ҙә,
Бармайым, тип торманы.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Эпос атаҡлы сәсән Мөхәмәтша Буранғолов тарафынан Ғәбит сәсәндән яҙып алынған. Тулы килеш «Башҡорт халыҡ ижады: Эпос. Икенсе китап баҫмаһы»нан (Өфө, 1983) баҫылған.
2. Салауат Юлаевтың үҙ яҙмышын иле, халҡы яҙмышына бәйләгәнен ниндәй юлдар күрһәтә?

*Мирас ИҘЕЛБАЕВ*

## ТӨШ

*(«Юлай улы Салауат» китабынан)*

Гөлсафия ҡарсыҡ таң һарыһынан хафаланып килеп уянды. Ҡабат йоҡо алмаясағына төшөнгәс, оҙон ҡыҙыл сатин күлдәк өҫтөнән йәшкелт бәрхәт камзулын, башына ҡама бүркен кейеп, ҡайылған ситеген эләктерә һалып, ҡарағай ҡышлау өйөнән сығып, эргәләге аҡ кейеҙ тирмәгә табан атланы. Яңы ҡалҡҡан күк үлән ысығында ситек эҙҙәре ярылып ятып ҡалды. Ҙур еҙ самауырҙы тирмә алдына сығарып, шаҡмаҡ һалып тоҡандырып ебәреүгә, ҡышлау өйөнөң болдоронда Аҙналы ҡарт күренде. Бер үк мәлдә тиерлек күрше тирмәнән Юлай ҙа килеп сыҡты.

— Атаҡ-атаҡ, һүҙ беркеткән кеүек, ҡара таңдан икегеҙ ҙә нишләп килеп торҙоғоҙ тағы? — тине ҡарсыҡ, тынысһыҙлыҡ менән.

Аҙналы өндәшмәне. Юл ыңғайында кәртә яғынан ҡайыш йүгәндәрҙең береһен эләктереп алып, Һарыҡондоҙ йылғаһының Көҫкәндегә ҡойған тамағындағы туғайҙа ҡашлаҡ аҫтында утлап йөрөгән йылҡылар яғына ыңғайланы. Юлай, оҙон еңле, суҡлы яғалы аҡ күлдәге өҫтөнән иңбашына таҫтамал һалып, Көҫкәндегә йыуынырға төшөр алдынан әсәһе янына барып ураны.

— Белгән кеүек, һин дә иртәләгәнһең бит, инәй. Бик һәйбәт. Эш бар ине минең. Ана, атай ат тоткас, вулыс ерҙәрен һыбай байҡап йөрөп ҡайтам. Сәйеңде генә тиҙерәк өлгөртһәң...

Самауыр ҡайнауға, аҡ тирмә эсенә түшәлгән ашъяулыҡ тирәләп өсәү генә урын алдылар. Юлайҙың ҡатыны Көнбикә сәйгә ултырып торманы, ағас күнәк эләктереп, лапаҫ аҫтында бәйле торған унлап бейә яғына ашыҡты.

— Ярар, килен, — тип оҙатып ҡалды Гөлсафия ҡарсыҡ, — ирҙәр сәй эскәс, артыңса мин дә барып етермен.

Үҙе, көрһөнөп, түрҙә аяҡтарын бөкләп ултырған түңәрәк һаҡаллы, ҡыҙғылт тулы йөҙлө Аҙналыға ла, ашыҡ-бошоҡ сәй һемергән эре һөйәкле, ҡаҡса ҡуңыр битле, етди сырайлы улына ла тынғыһыҙ күҙ һалып алды:

— Алама төш күрҙем, — тине ҡарсыҡ, ахырҙа, — апасыҡ күктә ҡап-ҡара ике төйләгән бер юлы килеп сыҡты. Абайламай ҙа ҡалдым, ҡапыл ергә ҡушлап атылып төштөләр ҙә, ҡаҙ бәпкәләремдең береһен икеһе бергә эләктереп, алып та киттеләр. Тигенгә түгелдер инде, Хоҙайым...

Гөлсафия, иркен тын алдырырҙай һүҙ ишетергә теләп, ирҙәрҙең икеһенә лә алмаш-тилмәш ҡарап, яуап көттө. Аҙналы, бер аҙ һүҙһеҙ ултырғас, ҡул һелтәп ҡуйҙы:

— Юҡтан ҡайғы-хәсрәт эҙләмә, ҡарсыҡ. Былай ҙа илдең боланан башы сыҡҡаны юҡ. Ығы-зығы баҫылғанға ҡасан ғына. Шөкөр, исмаһам, бөгөн йорт тыныс тора.

— Минең төштәрем дөрөҫкә сыға ла ҡуя шул, атаһы.

Юлай, көлөмһөрәп, сынаяғын түңкәрҙе.

— Төш юрап ултырыу ҡайғыһы юҡ әле, инәй. Мин ҡуҙғала һалайым. Байтаҡ ерҙе урап сығырға кәрәк. — Ул, атаһына мәғәнәле ҡарап алып, баш сайҡап өҫтәне. — Шәре инеп бара аҫтыбыҙға...

Аҙналы, баллы-ҡоротло тәмле сәйенән айырылып, Юлайға яй ғына башын борҙо:

— Һаман шаяралармы шул Шағанай ҡарт балалары?

— Шулар инде. Ырыҫбай менән Ҡунаҡкилде. Шаярыу ғына тиһең. Өс көн юғалып торһаң, әллә ни ҡылырҙар.

— Ҡарасәле, улым, башҡа һыйырлыҡ эшме? Атаолатайҙар ере менән һатыу итергә маташсәле! Ниндәйҙер бер килмешәккә, Сембер куписенә.

— Юҡ, атай, беҙ иҫән саҡта, ниәттәре барып сыҡмаҫ. Нисек инде борон-борондан килгән башҡорт ерен һатып ебәрмәк кәрәк? Һарыҡ тиреһе түгел дә баһа.

Аҙналы ҡуҙғалырға йыйынған улына юл фатихаһы теләгән һымаҡ тауыш менән һөйләнде:

— Эй, улым, ишетеп-күреп тораһың. Донъяла булмаған хәл түгел. Ян-яғыңа ҡара. Ситтән берәм-берәм йыйылып, оялай башламанылармы? Был малайҙарҙы әйтәм, тас аталары икән. Заманында Шағанайҙы ырыуыбыҙ башҡорттары, дәррәү һүҙ беркетеп, ошоға рәүеш ҡылығы өсөн ыстаршиналыҡтан һөрөп сығарғайныҡ. Һе, былары һаман аталары юлын ҡыуа, тиген, ә?! Шағанайҙың түрә булып башбаштаҡланыуы былар ҡанына ла күскән шул. Аталары кеүек, арт һабаҡтарын уҡытырға кәрәк ул малайҙарҙың. Тиҙ арала! Аҙаҡ һуң булыр.

Бығаса сәй яһап, ирҙәр һүҙен өнһөҙ тыңлап ултырған Гөлсафия ҡарсыҡ та хәбәргә ҡушылды.

— Ә-әй, төшөмә шул ике малай ингәндер әле. Әйтәм бит, тура килмәй ҡалмай ул төшөм, тип.

Юлай, ишек яғына ыңғайлап, әсәһен тынысландырҙы.

— Улар ғына булһа, борсолма, инәй, ҡойроҡтарын бороргбоҙ.

— Абай бул, улым, — тип өҫтәне Аҙналы. — Аталары бик мәкерле ҡарт. Былары ла алыҫ төшмәгәндер.

— Йүгәнләрбе-еҙ! Үҙемдең генә ҡулымдан килмәһә, ырыу халҡы бар. Һис юғында — хөкөм бар, закон бар. Өфөгә барырбыҙ, Ырымбурына етербеҙ, ә ерҙе бирмәбеҙ.

Юлай сығып өлгөрә алманы, ҡышлау йорто яғынан үләндә ваҡ аҙымдар менән тып-тып йүгергән аяҡ тауыштары ишетелде лә, тығыҙ тәнле, янып торған ҡап-ҡара күҙле дүрт йәшлек малай тирмә ишегенә килеп ҡапланды.

— Ҡайҙа бараһың, атай, мине лә ал!

Малай шул арала кәртә яғында хужаһын көтөп бәйле торған атты күреп ҡалды.

— Миңә лә ат эйәрләп бир, ҡартатай. Өләсәйгә ҡунаҡҡа барғандағы кеүек, Ҡарағонанды. Атайым менән барам.

Юлай улының шырт ҡара сәсенән һыйпап алды.

— Был юлы бик алыҫҡа китәм бит, Салауат. Һин ҡартатайың менән бында ғына ҡалып тор, йәме.

— Юҡ, барам, эйәрләгеҙ атты.

— Эйәрләр, эйәрләр ҡартатайың. Тик ошо тирәлә генә йөрөштөрөрһөгөҙ. Мин алыҫҡа китәм.

— Минең алыҫҡа барғаным юҡ...

Гөлсафия ҡарсыҡ малайҙы, ҡулынан әләктерә һалып, тирмәнән сығармаҫҡа маташты.

— Салауат улым! Салауат, тим. Әйҙә, улым, сәй эс. Хәҙер, ҡашыяҡты йыуыштырып бөтәм дә, бейәләр янына барып, әсәйеңде ҡайтарам. Сәй эскәс, ул һиңә тағы ла хәрефтәр өйрәтер.

— Хәрефтәр? — Аяҡ терәп ҡаршылашырға әҙерләнгән малай ҡапыл тыңлаусанланып, йәнләнеп һораны. — Ысынмы? Эше күп бит әсәйемдең. Ваҡыты булырмы?

— Булыр, булыр. Эшенә мин ярҙамлашырмын. Ана, аулаҡҡа, ҡышлау өйөнә инеп алырһығыҙ ҙа, әйҙә уҡырһығыҙ, әйҙә яҙырһығыҙ. Атайың кисә биргән ҡағыҙың ҡалдымы әле?

— Ҡалды. Бөгөн яҙып бөтәм. Бөтһә, тағы бирәһең, атай, эйе бит?

Малайҙың иғтибары икенсе яҡҡа ауышыуҙан файҙаланып, Юлай сығып шылғайны инде. Аҙналы ҡарт та үҙ эше менән кәртә-ҡура яғына ыңғайланы. Атаһы юҡлығына Салауаттың артыҡ иҫке китмәне, «йәлп» итеп сәй янына ултыра һалды.

— Тиҙ генә эсәм дә, һин, ҡартинәй, тиҙ генә йыйыштыр ҙа, әсәйем янына бара һал, йәме?

— Хә-әҙер, улым. Мә, эс. Ашыҡма, ауыҙыңды бешереп ҡуйырһың.

Малайға был мәлдә китап-ҡағыҙҙан да өҫтөн нәмә юҡ ине. Түҙмәне, бейәләр бәйләнгән лапаҫ яғына ҡартәсәһе артынан үҙе лә эйәрҙе. Әсәһен бер генә бармағынан етәкләп, ашыҡтырып алып ҡайтты. Ҡышлау өйөндә атаһының ҡул осондағы документтар өсөн яһап

ҡуйған ағас кәштәһенең иң аҫҡы бүлкәтенән, әсәһе уҡый торған китаптар араһынан, үҙенең кисәге ҡағыҙҙарын етеҙ генә үрмәләп ала һалды ла өй түрендә буйҙан буйға һуҙылған урындыҡтағы аҫалы балаҫ өҫтөнә аяҡтарын бөкләп килеп ултырҙы.

— Йә әле, улым, ҡабат уҡып ҡарайыҡ, онотманыңмы кисәгеләрҙе?

Салауат әсәһенә ғәжәпле ҡараш ташлап алды.

— Ю-уҡ, әсәй. Нишләп онотайым. Мин ул хәрефтәрҙе таяҡ менән ергә һыҙып яҙғылап та китәм әле...

Кисә үҙе өйрәткәндәрҙе малайы «һә» тигәнсе әйтеп биргәс, Көнбикә Салауаттың арҡаһынан тупылдатып һөйөп алды.

— Ай, улымдың зирәклеге! Күҙ генә теймәһен инде.

— Әсәй, мәктәптә Нәбиулла бабай әрләй, туҡмай, ти. Мин унда бармайым, йәме?

— Һи, һиңә унда иртә бит әле. Өс-дүрт йылдан ғына барырһың. Әрләмәҫ. Ул уҡый белергә тырышмағандарҙы ғына әрләйҙер...

Көнбикә ҡулы тейгәндә көн һайын шулай улы менән бер аҙ ултырып ала. Уҡырға-яҙырға өйрәтеп кенә ҡалмай, йырҙар йырлата, таҡмаҡтар әйттерә. Үҙе улының һәр һүҙҙе йотлоғоп тыңлауын, тиҙ генә төшөнөүен күреп, кинәнеп бөтә алмай.

Лапаҫ аҫтында аҙаҡҡы бейәләрҙе һауып ҡалған Гөлсафия ҡарсыҡ та әле хайран ҡалып иҫкә алды: «Һис тә дүрт йәшлек балаға оҡшамаған был Салауат. Әсәһенең ун ай йөрөтөп табыуы шул. Йәше тулыуға, һин дә мин йүгереп йөрөр ине. Шул саҡта уҡ ҡапыл ғына теле асылды. Исмаһам, бер өндө һаҡаулап әйтмәне. Ул фиғеле, һөйләшеүе тас ололар кеүек. Үҙе ҡурҡыуҙың ни икәнен белмәй бит әле. Йә, кемдең дүрт йәшендә эйәр өҫтөндә елдереп йөрөгәне бар? Хоҙайым ғүмер генә бирә күрһен инде улыма. Ғүмерле, бәхетле генә булып үҫһен инде...»

Әсәһенең ваҡыты ысынлап та самалы шул. Бер нисә яңы хәреф өйрәтеп, һүҙҙәр яҙҙыртып ҡарағас, ҡуҙғала ла башланы.

— Хәҙергә етеп торор, балам.

— Ә йырламайбыҙмы ни, әсәй?

— Йырларбыҙ. Һуңырак тағы ла ултырып алырбыҙ. Ана, картатайың һарык һуя. Көҫкәнде буйына төшөп, эсәк арытайык, аш һалайык. Атайың асығып кайтыр.

Салауат кағыҙҙарын шарт-шорт йыйыштырырға тотона.

— Мин дә барам, әсәй, йылға буйына, һин эсәк арытканда, балык тотам. Балык күп йыйыла емгә, эйе бит?

— Барырһың, балам.

— Тик аҙак тағы яҙышырбыҙ, йәме. Мин картатай менән ат менеп йөрөп килгәс...

Көҫкәнденең һалкын ағын һыуын тубығынан кисеп, һарык эсәгенән бөрсөк-бөрсөк булып таралып аккан майға йыйылған вак сабактарҙы куш ус менән әләктерергә маташкан Салауат, капыл ниҙелер иҫенә төшөргәндәй, әсәһенә «ялт» итеп боролоп, һорай һалды.

— Ерҙе һатып буламы ни, әсәй?

Көнбикә хатта эшенән туктап, малайына бер аҙ аптырап карап торҙо.

— Кайҙан ишеттең ул һүҙҙе тағы?

— Атайым һөйләй бит. Шағанай ауылынан уҫал ағайҙар ерҙе урыҫтарға һатырға итәләр, ти. Уны бит күтәреп алып китеп булмай. Нисек һатһындар?

— Эй, улым. Күтәреп алып китеү кәрәкмәй. Һатылған ергә урыҫтар үҙҙәре килә лә хужа була.

— Йылғаға ла, балыктарына ламы?

— Йылғаға ла, балыктарына ла. Тауҙарға ла, урманға ла, ундағы кейектәренә лә...

Малай тап-таҙа һыу эсендә ем менән уйнаған төркөм-төркөм сабактарға йәлләп күҙ ташлай.

— Бөтә нәмә тотош ул хужаныкы буламы ни?

— Шулай була инде.

— Ә беҙ?.. Беҙ нишләрбеҙ балыкһыҙ?

Көнбикә моңһоу ғына кабат эшенә тотона.

— Атайыңдан һорарһың унынһын. Бына кайтһын да, үҙең ентекләп һорашырһың.

Юлай бөгөн оҙакланы. Әсә менән бала һыу буйынан кайтты, аш һалынды. Салауат, картатаһынан икеһенә ике ат эйәрләтеп, Һарыкондоҙ йылғаһы үренә һыбай йөрөп килде. Үрҙәрәк, Кылғантау арьяғындағы бөгөл туғайлығында аттарҙан төшөп, һутлы һөтлөгән, кәзә һакалы ашап алдылар. Кайтышлай, тау аша тура тар-

тып иң ҡалҡыу урынға күтәрелгәс, Салауат, Ҡарағонанды бер аҙға туҡтатып, һул ҡулы менән ағас эйәрҙең бөркөт суҡышы һымаҡ итеп эшләнгән ҡашына тотоноп, икенсеһен өлкәндәр һымаҡ күҙ өҫтөнә ҡуйып, ҡалҡына биреп офоҡтан кемделер эҙләне.

— Күренмәҫ әле атайың тиҙ генә, — тине Аҙналы ҡарт, ейәне ыңғайына туҡтап. — Бөгөнгө юлы алыҫ. Эше лә күп. Ҡунып та ҡалмаһа әле берәй ерҙә...

Майҙың йылы йомарт ҡояшы аҫтында ҡартатай менән ейән һыуһап ҡайттылар. Аттарҙы ебәреп, тирмә эсендә ҡымыҙ һемерергә керештеләр.

— Әсәй, кисәге ҡымыҙҙы һалып бир миңә, — тине Салауат, туҫтағындағы эсемлекте бер генә йотоп ҡарағас, һауытын кире һоноп. — Әсе ҡымыҙ яратам.

— Ажғырып торғанын, тиһең инде, — тип баш сайҡаны Аҙналы. — Һай-һай, ҡыҙыҡ малайһың да инде. Һалып бир, килен, кисәгеһен. Әйҙә, эсһен, яратҡас.

Ҡымыҙҙан һуң ҡартатай ошонда, тирмә эсендә серем итеп алырға йыйынды. Ә Салауат, яҡында ғына үләндә йыбыр-йыбыр һикерәнләшеп йөрөгән сәпсектәр төркөмөн күреп ҡалып, урынынан һикереп торҙо ла ҡапыл пырылдашып осҡан ҡошсоҡтар артынан елеп сығып китте.

Көн кискә ауышыуға табан, тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫтәй эшенең бер аҙ осона сыҡҡас, бейәләр һуңғы тапҡыр һауылғас, бөтә мал-тыуар барланғас, аш-һыу мәшәҡәте кәмегәс, Көнбикә тағы улына әҙ-мәҙ ваҡыт тапты. Был юлы Аҙналы ҡарт менән Гөлсафия ҡарсыҡ та ҡышлау йортона инде. Ололар барҙа Көнбикә тартынды, малайына йырҙар өйрәтмәне. Шым ғына уҡыу-һыҙыу менән булыштылар.

Берсә килен менән балаға кинәнеп, берсә тәҙрә аша офоҡҡа тынысһыҙлана биреп ҡараштырып ултырған Аҙналы, кәштәнең аҫҡы бүлкәтендә айырым теҙеп ҡуйылған ҡулъяҙма китаптарҙың бүтәндәренән ситтәрәк торған берәүһен күреп ҡалды:

— Анау ҡалынын, мин әйтәм, килен, беҙгә уҡымаңың шикелле?

Көнбикә, кәштә яғына күҙ һалыу менән, ҡайһы китап тураһында һүҙ барғанын тиҙ үк шәйләп алды.

— Ә-ә, «Йософ китабы»нмы? Уныһын уҡыманым шул әле, ҡайным. Беҙҙә юҡ ине бит ул. Бала сағымда, 8—9 йәштәрем булғандыр, атайым үҙ ҡулдары менән күсереп, төпләп биргәйне. Күрше Хәмәтнур ағай бер көн инеп: «Был ҡыҙға уны уҡыуы иртәрәк әле, ике-өс көнгә биреп тор инде, күрше», — тип, атайымдан инәлеп һорап алып торғайны, китте лә барҙы шунан ҡулдан ҡулға. Инде нисә йыл үткәс, Ләмәҙгә ана теге аҙаҡҡы барғанда, һис уйламаған ерҙән табып алып ҡайттыҡ.

— Теге Ҡөрьән сүрәһендәге Йософмо ни? — тип һүҙгә ҡушылды Гөлсафия ҡарсыҡ.

— Шул инде, шул. — Килене урынына Аҙналы аңлатып бирҙе. — Тарихын ишеткән бар ҙа ул, ә китабын күргән юҡ. Шиғыр менән яҙылған ҡалын китабы йөрөй тип, бик маҡтап һөйләйҙәр ине шул. Йософ бында бигерәк тә ҡыҙғаныс итеп яҙылған, тиҙәр. Әҙ генә йәшерәк сағым булһа, үҙем уҡыр инем дә ул. Хәҙер ни, үҙегеҙ беләһегеҙ, күҙ күренкерәмәгәс ни...

— Ҡыҙғаныс урындары ла бар. Бик бәхетле саҡтары ла яҙылған. Уҡырмын әле, ҡайным, бер ҡул тейгәндә. Ундай китаптарҙы уҡый башлаһаң, ана, Салауат та иҫе китеп тыңлай торған.

Һөйләшкән арала яҙыу-һыҙыу бер аҙға онотолоп ҡалды. Шуны һиҙепмелер, Аҙналы ҡарт Гөлсафияны алып сығырға булып китте.

— Әйҙә, ҡарсыҡ, тегендә, аҡ тирмәгә. Усағыңды ла ҡараштыра торорһоң.

Ололар сығып, әҙ-мәҙ ваҡыт үтеүгә, ҡышлау өйөндә йыр башланды. Әсә көйләп күрһәтә. Малай уның артынса моңон боҙмаҫҡа тырышып ҡабатлай:

Алыҫтарҙан ялтырап күренеп ята
Киң Уралҡайҙарҙың далаһы.
Ерен-һыуын һаҡлап яуға сыға
Киң күкрәкле башҡорт балаһы.

«Һабаҡ» менән бер аҙ ялҡый төшкәс, Салауат икенсе һүҙгә күсә:

— Ә мин беләм, әсәй, урыҫтар йылғаны, балыҡтарҙы беҙҙән ала алмай.

— Ни өсөн һуң?

— Шағанайҙағы ағайҙар, уҫал булһалар ҙа, атайымдан ҡурҡалар. Ерҙе һата алмайҙар.

— Ә быныһын ҡайҙан ишеттең тағы?

— Ҡартатайым әйтте.

Болдорҙа ҡабалан атлаған аяҡ тауыштары ишетелде лә, Гөлсафия ҡарсыҡ ишекте асып, башын тығып өндәште:

— Килен, Юлай ҡайтып килә. Васҡын яғынан бер һыбайлы күренде.

Көнбикә менән Салауат, ҡағыҙҙарын урындыҡта шул көйөнсә ҡалдырып, икеһе бер юлы ишеккә ташланды. Малай «йәлп» итеп алдараҡ сығып йүгерҙе.

Аҙналы ҡарт был мәлдә ҡапҡа яҡ ихата ҡоймаһына терәлеп, көнсығыш тарафтан күҙен алмай ине. Өй эсенән сығыусыларҙың үҙе янына яҡынлашҡанын һиҙеп, уларға әйләнеп ҡарамай ғына һөйләнде:

— Яңғыҙ түгел. Ҡунаҡ алып ҡайта, ахырыһы. Тағы бер һыбайлы эйәрткән.

Гөлсафия ҡарсыҡ керпектәрен селт-селт ҡаҡҡылап алды:

— Икенсеһен күрмәйемсе...

— Ҡартаяһың, ҡарсыҡ. Мин, китап уҡырға ярамаһам да, алыҫтан һәйбәт күрәм әле. Ана бит, артынан бер тотам ҡалмай.

Оҙон һайғауҙарҙан рәт-рәт ҡаҡҡылап эшләнгән ҡапҡа башына әллә ҡайһы арала үрмәләп менеп ултырған Салауат:

— Был беҙҙең ат түгел, ҡартатай, — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Кешеләренең кейемдәре лә ҡап-ҡара. Атайым аҡ күлдәк кейеп киткәйне лә инде.

— Аһ-аһ!.. Ысынлап та! — тип аптырашты ололар. — Ят кешеләр шул. Кемгә киләләр икән?

Һыбайлыларҙы ҡапҡа янындағыларҙың дүртеһе лә керпек ҡаҡмай күҙәтте. Тегеләре Көҫкәндене аттарын юрттырып кисеп сығып, ҡышлаҡты сабып менделәр ҙә туп-тура былар яғына табан ыңғайланылар.

Аҙналы ҡарт һаҡалын һыйпаштырғыланы, билбауын төҙәткеләне. Гөлсафия ҡарсыҡ тынысһыҙлана төштө:

— Атаҡ-атаҡ, беҙгә киләләр түгелме? Кемдәр икән тағы?

— Йә, килһендәр. Килеп еткәс, танытырҙар әле. — Һыбайлыларға бер уҡ атымы ара ҡалғас, Аҙналы ҡарт эргәләгеләренә шым ғына ишара яһаны.

Ҡәйнә менән килен өнһөҙ генә тирмәләр яғына ыңғайланы, ә Салауат һаман ҡапҡа башында ултыра бирҙе. Ҡара кейемле һыбайлылар, ысынлап та, былар янына сабып килеп туҡтаны.

— Тр-рр! Тр-рр! Здорово, бабай!

Ҡиәфәттәренә ҡарағанда, был яҡтыҡы түгелдәр. Береһе — ҡалын кәүҙәле, ерән мыйыҡлыһы өндәшмәй; икенсеһе — һонторо, оҙон ҡаҡса йөҙлөһө — башҡортсаны юрамал вата-емергән булып һөйләшә:

— Юлайка Азналин ошонда йәшәй? — Ул ҡулындағы ҡамсыһы менән ҡышлау өйөнә төртөп күрһәтте.

Аҙналы ҡарт, сама менән 25-тән уҙмаған ят әҙәм алдында үҙ бәҫен төшөрмәҫкә тырышып, тыныс ҡына яуаплай.

— Ошонда.

Салауат ғәжәпһенеп күҙәтә. Икеһенең дә кейемдәре бер төҫлө: нәҙек балаҡлы ҡара салбар, еҙ төймәле оҙонса бишмәт, эйәрҙәре икеһенең дә һорғолт күн, туры ҡашҡа аттары ла, моғайын, ҡасандыр игеҙәк ҡолондар булғандыр. Һыбайлылар үҙҙәре генә бер-береһенән айырыла. Ерән мыйыҡлыһы, күренеп тора, саҡ ҡына олораҡ. Эре генә һымаҡ үҙе. Өндәшмәүе лә шунандыр әле: мин һүҙ әрәм итеп тормайым, әйҙә, һин, йәшерәк кеше, һөйләш, тиҙер.

— Давай-ка, бында сыҡһын тогда.

Аҙналыға йәш малайҙың үҙен тотоуы оҡшаманы. Ҡоймаға һөйәлеп торған килеш урынынан ҡуҙғалмай ғына ризаһыҙлыҡ белдерҙе.

— Беҙгә килгән ҡунаҡ улай һөйләшмәй, уландар. Атығыҙҙан төшөгөҙ, иҫәнлек-һаулыҡ һорашайыҡ...

— Некогда беҙгә яйлап туҡтап торорға. Служба.

— Аш бешкән, ҡымыҙ эсеп китерһегеҙ. Йомошто юл уртаһында аяҡ өҫтө тороп йомошламайҙар.

Йәшерәгенең сырайы ла, тауышы ла әйтеп тора — башҡорт егете. Ҡымыҙҙың ни икәнен белә, әлбиттә. Күҙҙәре ялтырап китте. Әммә атынан төшмәй генә мығырланы.

— Ҡымыҙ? Бик ныҡ һыуһаттырғайны. Уныһын можно. — Үҙе ерән мыйыҡлыға боролоп ниҙер әйтте лә, күҙҙәрен мөлдөрәтеп, унан яуап көттө. Тегеһе, бер аҙ ваҡыт һуҙып, абруй һаҡлап тора биреп, риза икәнен ахырҙа ым менән белгерткәс кенә, Аҙналы ҡартҡа бойороҡ биргәндәй өндәште. — Да, можно. Тик бында килтерегеҙ. Инеп торорға ваҡыт юҡ.

Уның фиғеленән ҡарт һаман да риза түгел ине. Шулай ҙа, йөҙөнә сығармай, ҡапҡа башындағы ейәненә ишараланы:

— Бар, улым, әйт әле, ҡунаҡтарға ҡымыҙ сығарһындар.

Һыбайлыларҙы һаман донъяһын онотоп энәһенән-ебенә тиклем тикшереп ултырған Салауат, ҡартатаһының йомошон ишетеү менән, һә тигәнсә төшөп, тирмәләр яғына ҡарай сапты.

— Әсәй, ҡартәсәй! Ҡымыҙ сығарығыҙ ҡунаҡтарға!

Был һонторҙан рәт сыҡмаç тигәндәй, Аҙналы инде ерән мыйыҡлыға ҡарап өндәште:

— Шулай ҙа аттарығыҙҙан төшөр инегеҙ, уландар. Ризыҡты һанға һуҡһағыҙ.

Ерән мыйыҡлы үҙенең юлдашына һораулы ҡараны. Тегеһе ҡарттың һүҙҙәрен тәржемә итеп биргәс, тәүҙә олорағы, унан күрмәксе һонторо бер-бер артлы төшөп, аттарын етәкләгән көйө ҡартҡа яҡынайҙылар.

— Хуш, ни йомош, уландар?

— Юлайка избаламы, сыкһын.

— Өйҙә юҡ Юлай. Эш менән киткәйне, ҡайтмаған әле.

— Ҡасан ҡайта тогда?

— Юл кешеһен ҡайҙан беләһең? Көтәбеҙ.

Һонтор йәш егет хужаһына ҡарап алды. Тағы ниҙер үҙ-ара кәңәшләшкәс, ерән мыйыҡлының һүҙҙәрен Аҙналы ҡартҡа еткерҙе:

— Вот что, бабай. Беҙҙең ваҡыт юҡ көтөргә. Юлайкаға срочный важный хәбәр бар. Үҙ ҡулына тапшырырға кәрәк. Срочно табығыҙ уны. Придумайте что-нибудь.

Ҡарт был йәш башҡорт егетенең ибәтәйһеҙлегенә аптырап, баш сайҡап ҡуйҙы.

— Бына һиңә кәрәк булһа, улан, иçке ауыҙҙан яңы һүҙ! Юл кешеһен ҡайҙан эҙләп таптырмаҡсы булаһың?

Күргегеҙ килһә, сабыр итегеҙ әҙерәк. Үҙебеҙ ҙә көтөп торабыҙ. Бына-бына ҡайтып етергә тейеш.

Һонтор егет сәбәләнеп тағы ниҙер әйтергә ниәтләнгәйне, Гөлсафия ҡарсыҡ менән Көнбикә бер турһыҡ ҡымыҙ килтерҙе. Салауат та улар артынан эйәргәйне. Аҙналы юлсыларҙы аттарын ҡоймаға бәйләтеп, үҙҙәрен ҡапҡа аша ихатаға үткәрҙе. Унының ҡушыуы буйынса, ҡойма буйында яңыраҡ ҡына дәррәү морон төртөп сыҡҡан ҡуйы күк үләнгә аҡ ашъяулыҡ түшәлде.

Юлсыларға урын күрһәтелде. Тегеләр ашъяулыҡ тирәләй йомшаҡ үләнгә ултырышты. Салауат та ситтәнерәк, ҡартатаһы янынараҡ килеп һыйынды. Ағас туҫтаҡтарға ҡымыҙ һалынғас, ҡарт беренсе һауытты үҙ ҡулы менән өлкәнерәгенә, ерән мыйыҡлыһына тотторҙо, икенсеһен йәш егеткә бирҙе. Үҙенә лә бер туҫтаҡ ҡойҙортоп алды ла, Салауат менән икәүләп алмаштилмәш һемерҙеләр. Юлсыларҙың йәшерәге туҫтаҡты һуңғы тамсыһына тиклем кинәнеп түңкәреп ҡуйҙы. Аҙналы ҡарт ҡатын-ҡыҙҙарҙан тағы өҫтәп һалдыртып бирҙе. Ә өлкәнерәге һауытын яртылаш бушатты ла ҡалған ҡымыҙын ултырған урынында һә тигәнсә ситкә, күк үләнгә һирпте. Быны күреп, үҙе лә һиҙмәҫтән уҡталып ҡуйған Салауатты ҡартатаһы шым ғына яурынына ҡулын һалып туҡтатты. Эргәләгеләрҙән һис кем абайламаны ул күренеште. Шулай ҙа ҡунаҡтар ҡымыҙҙан ҡәнәғәт ҡалды. Тәндәренә тиҙ арала шифа, бәрәкәт йүгереп, йәндәренә саҡ ҡына булһа ла ҡот өҫтәлде, ахырыһы. Йәш егеттең тауышы икенсе төрлөрәк сыҡты. Ситтәрәк түҙемле генә көтөп торған ҡатын-ҡыҙҙар ашъяулыҡ менән һауыт-һабаны йыйыштырып алып киткәс, Аҙналыға руссаны ҡатыштырмайынса ғына өндәште:

— Ысынлап та, бабай, көтә алмайбыҙ бит әле.

Уларҙы билдәһеҙ ваҡытҡа көттөрөп ултыртып ҡуйыуҙан фәтүә тапмаҫына төшөнгән Аҙналы үҙ иректәренә ҡуйҙы:

— Ихтыярығыҙ, улан. Ҡайтҡас, ни тип әйтәйем һуң Юлайға?

Тегеләр тағы ла үҙ-ара һөйләшеп алдылар. Ҡапыл ғына бер төрлө ҡарарға килделәр шикелле: башҡорт егете кинәт Аҙналы ҡартҡа боролоп, һорай һалды.

— Уҡый-яҙа беләһеңме, бабай?

— Белә инем дә, күҙ күрмәйерәк китте бит әле хәҙер.

— Улайһа, тамғағыҙҙы ҡуйырға кәрәк булыр.

Ҡарт һағая төштө.

— Ҡайҙа, ни өсөн ҡуйырға һуң ул тамғаны?

Юлсыларҙың икеһе лә ҡуйындарына тығылып, берәр төргәк килтереп сығарҙы. Тағатып, ҡағыҙ-ҡәләм алдылар.

— Бына, Юлайға пакет бар. Ҡултамғаһыҙ ҡалдыра алмайбыҙ. Уның үҙ ҡулына бирһәк тә, йә туғандарына ҡалдырһаҡ та, бына ошо кенәгәгә ҡул ҡуйылырға тейеш.

Йәш егет аңлатҡан арала, Аҙналы фараз ҡылып өлгөрҙө. Был ҡағыҙ — фарманмы, указмы, ни генә булмаһын — барыбер Юлай ҡулына эләгергә тейешле. Ҡул ҡуйып алып ҡалыуҙан шик-шөбһәгә юлыҡтырырлыҡ әллә ни яҙыҡлыҡ юҡ. Әйҙә, тапшырһындар ҙа тиҙерәк тайһындар.

— Ҡултамғалыҡ ҡына ни... күрә лә ул күҙ.

Ҡәләм Аҙналы ҡулына күскәс, бығаса хәбәрҙе шым ғына ҡолағына элә тороп, һүҙ айышына төшөнә барған Салауат, йәш юлсыға осҡонло ҡара күҙҙәрен төбәп, белгертеп ҡуйҙы:

— Мин дә ҡул ҡуя беләм дә ул.

Малайҙың барлығына саҡ иғтибар итте былар. Егет, әлбиттә, ышанманы. Салауатҡа үтә тишерҙәй текләп ҡарап тора бирҙе лә шелтәле тауыш менән әйтеп ҡуйҙы:

— Үҙең ипле генә күренәһең, мырҙам, ә ололар араһында юҡты һөйләп баш ҡаңғыртаһың.

— Бала-сағамы ни мин, юҡты һөйләргә? Беләм! Ышанмаһаң, яҙып күрһәтәм!

Егет ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Аптырап ҡараған юлдашына аңлатып бирҙе. Ерән мыйыҡлы ла Салауатҡа баштан-аяҡ күҙ ташлап, йылмайып ҡуйҙы.

Эшен бөтөрөп, пакетты ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырған Аҙналы асыҡлыҡ индереүҙе кәрәк тип тапты:

— Ысынлап та белә ул. Зирәк бала. Үҙебеҙ ҙә хайран ҡалабыҙ. Ғүмер бирһен Хоҙай.

Аттарҙың теҙген остары бәйҙән сиселде.

— Ярар, бабай, беҙ киттек. Юлай ҡайтып еткәс тә, үҙ ҡулына тапшырырһың.

— Һин үҙең, улым, ҡайһы яҡтыҡы?

Юлсылар күҙ асып йомғансы аттарға атланып өлгөрҙө.

— Еҙем буйыныҡы мин, бабай. Өфө приказында эшләп йөрөйөм.

— Бирһен Хоҙай, тәүфиҡлы бул. Нәҫел-нәсәбеңә ҡыҙыллыҡ килтерергә яҙмаһын. Ярай, хуш!

Һыбайлылар килгән юлдары буйлап кире сапты. Аҙналы менән Салауат туғайҙай оло ихатаның эс яғына, тирмәләргә ҡарай ыңғайланы.

— Ҡартатай, аҡ ризыҡты ергә түгергә ярамай бит. Нишләп теге телһеҙ ағай ҡымыҙҙы түкте? — тип һораны Салауат.

Аҙналы тәүҙә көләмһөрәй биреп ҡуйҙы.

— Телһеҙ, тиһең? Һөйләшә белә лә баһа.

— Әй, әллә ни мығырлай шунда урыҫса. Барыбер аңлашылмай. Телһеҙ һымаҡ.

Ҡарт инде уйсанлана төштө.

— Дөрөҫ әйтәһең. Ризыҡты исрафларға ярамай. Әҙәпһеҙлек була.

— Теге ағай әҙәпһеҙ, эйе бит, ҡартатай?

— Бәлки, әҙәпһеҙ ҙә түгелдер. Беҙҙең тормошто белмәй ул. Ҡымыҙ ни уға, һыу ни — барыбер. Белергә лә теләмәй. Бына шуныһы ҡурҡыныс, улым...

Салауат тағы ниҙер һорашырға иткәйне, аҡ тирмәнән Көнбикә менән Гөлсафия ҡарсыҡ сыға һалып, йүгерә-атлай ирҙәргә ҡаршы ашыҡты. Килеп етеретмәҫтән, ҡарсыҡ Аҙналының ҡиәфәтен тикшереп, юлсылар менән һөйләшеүҙең асылын самаларға маташа ине. Әммә ҡарттың ғәҙәттәгесә етди, ғорур һынынан, тыныс йөҙөнән бер ни ҙә белә алмағас, түҙмәне, хәүефле тауыш менән һорай һалды:

— Йә, Хоҙай, ни йомош менән йөрөйҙәр?

— Ҡағыҙ ҡалдырып киттеләр Юлайға.

Быны ишеткәс, Көнбикә лә сабырлығын тыя алманы.

— Ниндәй хәбәр икән тағы? — тип һорағанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды.

— Әҙ киләме ни уға ҡағыҙ? Иҫегеҙ киткән икән. Барыбер үҙе ҡайтмай белә алмабыҙ. Тышына урыҫса яҙылған.

Юлай ҡояш байыуға ҡайтып инде. Йонсоған, өҫ-башын туҙан баҫҡан. Әммә үҙе шат. Аҡ күбеккә батҡан, эйәр аҫты манма һыу булған атын кәртә яғына һыуынырға ҡуйып, үҙе Көҫкәндегә төшөп йыуынып-таҙарынып, аҡ тирмәлә аш алдына күмәкләшеп өйөрөлөп ултырғас, үҙе үк хәбәрен башланы:

— Тыныс йәшәргә була, атай, хәҙергә. Арт һабаҡтарын уҡыттым. Тиҙ генә баш ҡалҡытмаясаҡтар. Өйәҙ кешеләрен дә күреп һөйләштем. Инде заводсыларҙың үҙҙәрен күрәһе ҡалды. Бесәнгә төшмәҫ элек Өфөгә барып сыҡмай булмаҫ.

Юл арыу ғына асыҡтыртҡан — яңы һуйылған һимеҙ һарыҡ итен Юлай кинәнеп ашай-ашай һөйләй. Тәүҙә уны ғына тыңланылар. Аҙналы ашыҡмағас, башҡалар өндәшмәне, хатта Салауаттың ауыҙынан да һүҙ сыҡманы. Юлай тамаҡ туйҙырып алып, ҡымыҙлы туҫтаҡҡа тотонғас ҡына атаһы уға теге ҡағыҙ тураһында белгертте. Пакет Юлайҙың ҡулына килеп эләккәс, шунда уҡ асып уҡылды. Тирмәлә тын алған тауыш та ишетелмәне, бөтәһененең ике күҙе Юлайҙа ине. Бына бер мәл уның йөҙө ҡараңғыланды, ҡуйы ҡара ҡаштары, маңлайҙа йыйырсыҡ яһап, танау өҫтөнә ҡарай йыйырылды. Ул, аҫҡы юлдарҙан кинәт өҫкә күҙ ташлап, ҡағыҙҙы ҡабат уҡый башланы.

Аҙналы һаман етди ҡиәфәт менән көттө. Тынлыҡты ахырҙа Гөлсафия боҙҙо:

— Ни һуң ул, балам?

Юлай тағы бер аҙ өнһөҙ генә уҡый бирҙе лә атаһына боролоп яуапланы:

— Йүнле хәбәр түгел. Команда йыйырға ҡушылған. Һыбайлыларҙы. Үҙебеҙҙең эйәр-өпсөн, ҡорал менән. Походҡа. Пруссактарға ҡаршы һуғышҡа барырға, тигән.

Тағы ла тирмә ҡәбер тынлығына күмелде. Йәнә беренсе башлап Гөлсафия ҡарсыҡ өндәште.

— Ай Алла! Был ниндәй бөтмәҫ яу ул! Күңелем ниҙер һиҙгәйне лә! Төшөм тап килә шул минең. Ә һеҙ ышанмаған булаһығыҙ...

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Бирелгән өҙөктө уҡып сығығыҙ, өҙөк буйынса һорауҙар төҙөгөҙ, шул һорауҙарға яуап бирегеҙ.
2. Өҙөк ни өсөн «Төш» тип исемләнгән? Гөлсафия ҡарсыҡ ниндәй төш күрә, ул үҙенең төшөн нимәгә юрай? Төш юрау тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
3. Салауатты уҡырға, яҙырға кем өйрәтә, шул урынды табып уҡығыҙ.
4. Салауат ер һатыуҙы нисек аңлай, әсәһенә ниндәй һорау бирә?
5. Гөлсафия ҡарсыҡтың төшө рәҫланамы әллә юҡмы?

## ОБРАЗ ТУРАҺЫНДА ТӨШӨНСӘ

Нәфис әҙәбиәттә яҙыусы образдар менән эш итә. Образ һүҙе аша һеҙ әҫәрҙәге геройҙарҙы, персонаждарҙы аңлап өйрәнгәнһегеҙ. Ысынлап та, «Мирас Иҙелбаевтың «Төш» әҫәрендә төп герой кем?» тип һораһаҡ, һеҙҙең күҙ алдығыҙға, мәҫәлән, Салауаттың бала сағы образы килеп баҫа. Әйе, икенсе төрлө әйткәндә, образ — ул күҙ алдына килтереү тигән һүҙ. Ләкин художестволы образ геройҙарҙан, персонаждарҙан ғына тормай. Яҙыусы тормошта үҙе күреп белгән күп нәмәләрҙе — кешеләрҙе, тәбиғәт күренештәрен, хәл-ваҡиғаларҙы, йәнле һәм йәнһеҙ әйберҙәрҙе, уларҙың үҙ-ара бәйләнешен үҙенсә күҙ алдына баҫтырып, әҫәргә индерә. Шулай булғас, уларҙың барыһы ла образ була. Һәр образға яҙыусы ниндәйҙер кинәйәле мәғәнә һала, уларҙы үҙ-ара бәйләнештә, тейешле тәртиптә бирә. Мәҫәлән, әлеге әҫәрҙә өй артында үҫкән ҡарама ботаҡтарының һынып төшөүе, Гөлсафия ҡарсыҡтың таң һарыһынан тороп сәй әҙерләүе, иртәнге ризыҡ алдында башҡаларға үҙенең төшөн һөйләүе, Салауаттың Көнбикә менән бергәләп хәрефтәр өйрәнеүе, Юлай өйҙә юҡ саҡта ике һыбайлы килеп, уға хат ҡалдырып китеүҙәре кеүек бик күп образдар — күҙ алдына килтереүҙәр бар. Әҫәр тотош ошо образдарҙың бәйләнешенән тора. Йыйып әйткәндә, нәфис әҙәбиәт образы — ысын тормоштағы конкрет кешеләрҙең, хәл-ваҡиғаларҙың, күп төрлө күренештәрҙең әҫәрҙә дөйөмләштереп күҙ алдына баҫтырылған сағылышы ул.

*Рәми ҒАРИПОВ*

## САЛАУАТ БАТЫР

*Сосланбәк Тавасиевҡа — яҡташтарым, ер-һыуым, заманым исеменән*

Сабып сығып сал быуаттар аша,
Сапсындырып суйын саптарын,
Оран һалып илгә, һай, Салауат
Мәңгелеккә әйҙәй сафтарын.
Арыҫлан ир, яугир, шағир ҡото
Айбарланған батыр һынында,
Дошмандарын айҡар йәшен ише
Ай-ҡылысы ятыр ҡынында.
Үрткә тотҡан ауылдарҙың ҡуҙы
Дөрләп яныр бөркөт күҙендә,
Йолҡоп алған башҡорттарҙың теле
Ажар сәсер сәсән һүҙендә!..
Ҡоштар осоп етмәҫ утрауҙарға —
Ҡайҙа ғына батша һөрмәһен,
Утлы тамға өтөр киң маңлайын,
Тик бөгә алмаҫ бығау-төрмәһе...
Илкәйенең хөр көндәрен даулап,
Ирек, ырыҫ, хаҡлыҡ хаҡына,
Сал быуаттар аша сапты, сапты,
Сапты һаман ғәзиз халҡына.
Йөҙөп сыҡты етмеш даръяларҙы,
Ярып сыҡты етмеш тауҙарҙы,
Ҡуй һарыҡтай турай-турай сапты
Ҡаршы сыҡҡан етмеш яуҙарҙы.
Ят тупраҡта ятып ҡалғанда ла
Аҫыл һөйәк, изге есеме,
Үҙенән дә гәйәр яугирҙарҙың
Тел осонда булды исеме.
Ҡаһым түрә утлы Париждарға
Алғасҡыла бәреп кергәндә,
Салауаттың һынын олатайҙар
Еңеү тыуы итеп күргәндәр.
Питер эшселәре башҡортома
Әләм тотторғас та ҡыҙылдан,

Ҡылысындай сыңлап Салауаттың
Пулковтарҙа ҡалды беҙҙең дан.
Ул Шәһиттәй шыуҙы, ҡаны һарҡып,
Кронштадтың боҙо өҫтөнән,
Башлап таҡты «Ҡыҙыл Байраҡ»ты ла
Күкрәгенә ғорур төҫ менән.
Ҡайҙа ғына ул ҡурайын һуҙмаҫ,
Ат һуғармаҫ ҡайһы йылғанан —
Ватан ҡушҡас, Урал бөркөттәрен
Ул Одерға илтте Волганан!..
Батыр данын йылдар юя алмай,
Ел-дауылға ул бит ҡарамай.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Шиғырҙа нимә һәм кем тураһында һөйләнелә?
3. Шиғыр һеҙҙә ниндәй тойғолар уятты?
4. Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн Рәми Ғарипов Сосланбәк Тавасиевҡа мөрәжәғәт итә?

**Телмәрҙе байытығыҙ**

*Сапсындырып, айбарланған, айҡар, үрткә, ҡуҙы, ажар, еңеү тыуы* һүҙҙәренең мәғәнәһен эҙләп табығыҙ. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген файҙаланырға мөмкин. Һәр бер һүҙ менән һөйләм уйлап яҙығыҙ.



# Туғыҙынсы бүлек

## БАШҠОРТОСТАН — ГӨЛБОСТАН...

### ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ

### 1895—1919



Башҡорт халҡының бөйөк шағиры Шәйехзада Бабич Дүртөйлө районы Әсән ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. Ул бик зирәк бала булған, бәләкәй саҡтан уҡ Туҡайҙың «Яңы Киҫекбаш», «Һыу инәһе», «Шүрәле» кеүек әҫәрҙәрен тотош яттан белгән. Бабич, ауыл мәҙрәсәһендә белем алғас, ун биш йәшенән үк ҡаҙаҡ далаларына сығып китә, балалар уҡыта, ҡаҙаҡ аҡындары менән аралаша, үҙе лә шиғырҙар яҙа башлай. 1911—1916 йылдарҙа Өфөләге «Ғалиә» мәҙрәсәһендә уҡый.

Бабич ҙур шиғыр оҫтаһы булған. Уның әҫәрҙәре ябай ҙа, мәғәнәле лә, матур ҙа. Уларҙы хәтерҙә ҡалдырыуы һәм ятлауы бик еңел. Бабич шиғырҙары һәм поэмаларында Башҡортостанға, Уралдың гүзәл тәбиғәтенә, туған халҡына тәрән һөйөү тойғоһо сағыла, шағир шулай уҡ үҙ заманының етешһеҙлектәренән әсе көлә.

Шәйехзада Бабич 1919 йылда, Граждандар һуғышы ваҡытында фажиғәле һәләк була. Егерме дүрт кенә йыл ғүмере эсендә ул илебеҙ халыҡтары әҙәбиәтендә күренекле урын алырлыҡ яҡты ижади мираҫ ҡалдырҙы.

### БАШҠОРТОСТАН

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан тапатмаҫ,
Тапаймын тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сапҡан яу
Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ.
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.
Башҡортостан – гөлбостан,
Сөмбөлостан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!
Башҡортостан баҡсаһы –
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы –
Ҡаһармандар йөрөгән ер;
Ҡаһармандар кәүҙәһен
Ҡосаҡлаған, күмгән ер;
Хәләл ҡандар шәүләһен
Күккә тәрсим ҡылған[1] ер.
Башҡортостан – гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан...

Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур;
Киләсәктә был ергә
Хоҙай үҙе ҡыҙығыр;
Фирҙәүестәр төҙөлөр,
Әлуан ниғмәт теҙелер;
Күкте ташлап, мәләктәр
Был ерҙәргә гиҙенер.
Башҡортостан – йәмбостан,
Илһамыстан, шиғырстан,

---

[1] *Тәрсим ҡылған* — һүрәтләндергән.

Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт намлы[1] арыҫлан!..

Башҡортостан йәшәһен,
Сөмбөлостан йәшәһен!
Шунда тыуып, шунда үҫкән
Арыҫландар йәшәһен!

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙың тәүге һәм икенсе дүрт юллыҡтарының мәғәнәһен аңлатып бирегеҙ.
2. Башҡортостанды һәм башҡортто күҙ алдына баҫтырыу өсөн шағирҙың ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланыуына иғтибар итегеҙ.

## ЯЛЫҠ БУРНАҠ УЛЫ

*(«Һуңғы Һартай» әҫәренән өҙөк)*

«Ҡармасан менән Сәрмәсән! Һеҙҙең нисек үлгәнегеҙҙе һөйләп тороу кәрәкмәй!

Белегеҙ: мин һеҙҙең исемегеҙҙе халыҡ хәтеренән юйылмаҫлыҡ иттем. Һеҙҙең исемегеҙ мәңгегә ҡалды. Тегендә, Аҡһыу аръяғында, Ғази мәсетенең ишек яҡтауҙарына көмөш менән яҙылған Ҡөрьән һүҙҙәре кеүек бормаланып ике йылға аға. Ул саҡта был йылғаларҙың исеме әле юҡ ине, беҙ уларҙы бер нисек тә атамай инек. Шул йылғаларға мин һеҙҙең исемегеҙҙе бирҙем, үҙегеҙҙе шунда ерләнем!

Балаларым! Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе шәфҡәтенән айырмаһын!

Ә унан һуң мин киттем. Һеҙҙең ҡоноғоҙҙо ҡайтарҙым. Эйе, мин бер генә әсир ҙә алманым, гел үлтерҙем.

Ауған дошмандың иңрәүе һуғышсыға рәхәтлек бирә. Шәфҡәт һораған һүҙҙәре күңелен кинәндерә. Улай түгел тип кем әйтер?

[1] *Намлы* — исемле, атлы.

Минең ике ҡолағым нәфрәт менән томаланғайны, ике күҙем дә үс теләге менән ут булғайны. Әсир алманым, гел үлтерҙем. Шуның өсөн дошмандарым мине юлбаҫар тип атаны.

Ай-һай! Минең нисек үс алғанды күрһәгеҙ! Белегеҙ бөтәгеҙ ҙә: яҙғы ташҡында, ҡараңғы бер төндө Тәтегәс менән Димде йөҙөп сығып, Улуҡайҙы үлтерҙек! Ул үҙенең батырҙары менән ут эргәһендә ята ине. Ул заман беҙҙең ҡулдарҙа уларҙы үлтерерлек кенә көс бар ине. Улар беҙгә ҡарағанда биш тапҡырға күберәк ине. Ә беҙ икәү ҙә ҡара төн генә. Һа! Шулай ҙа беҙ уларҙы еңдек!

Бер ваҡыт мин Туғай бейҙе осраттым. Ул йәш жуңғар[1] менән ҡайҙалыр китеп бара ине. Ҡәһәр! Миңә ул, баҙнат итеп, аҡһырғаҡ тамырынан да ыулыраҡ яман һүҙ әйтте. Мин уны йән-фарман ҡыуып еттем дә кәрәген бирҙем. Шунан, — белегеҙ, кешеләрем! — аяғы сатан булғанға Аҡһаҡ тип аталған Тимерҙең — үҙенә үсемде алыуым тураһында хәбәр иттем.

Мин шулай иттем.

Үс алдым. Дошмандарым ҡарағоштан ҡурҡҡан үрғуяндан яманыраҡ ҡурҡа ине минән. Суҡмарымды һелтәмәҫ борон һырт биреп ҡасалар ине. Бүре олоуын ишетеп ҡалтырай башлаған йәш аҡра ҡолон кеүек, улар минең исемемде ишетеү менән ҡалтырап төшәләр ине.

Ха-ха! Улар мине юлбаҫар тинеләр. Ҡурҡаҡтар!

Барс йылында тыуған кешенең яҙмышы яҙғы ел һымаҡ була, уның йылыһы ла, һыуығы ла бар. Шулай. Тик мин һеҙгә әйтәйем: әсе менән татлыны татыған ғына белә. Яҙмышым мине ғүмеремдең эңеренә килтерҙе. Миңә хәҙер бер ни ҙә кәрәкмәй. Минән үтте. Мин тирмәләремдән дә, көтөү-көтөү малымдан да — барыһынан да яҙҙым. Хәҙер мин мөнйөп ташлаған һөйәктәрҙе йыйып йөрөүсе эйәһеҙ эт, өңөн юғалтҡан бурһыҡ кеүекмен.

Хәҙер мин йәйләүҙән йәйләүгә ҡыҙырып, кеше яҡҡан ут янында йылынып йөрөйөм. Миңә ят ҡаҙандан һарыҡтың ҡалаҡ һөйәген генә бирәләр. Мин кеше еләнен кейәм, кеше кейеҙенә йоҡларға ятам.

Минең бер нәмәм дә юҡ!

---

[1] *Жуңғар* — ҡалмыҡ.

Мин — байғош!

Ҡасандыр ҡулға-ҡул тотошоп килгән дуҫтарым ҡайҙа? Улар юҡ. Ҡайҙа батыр Сарым? Ҡайҙа Тәтегәс? Ҡайҙа Һан-Уғлан?!.

Улар китте. Уларҙың күҙҙәре күптән ергә һарҡҡан.

Мин бер үҙем. Мин — иң һуңғы Һартай.

Ләкин белегеҙ: мин һуңғы яу булманым!

Элек мине аҡһаҡал тип тә, бей тип тә йөрөтәләр ине! Эйе. Хәҙер мин ҡарт. Мин үләм. Булһын шулай».

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Тексты иғтибар менән уҡығыҙ һәм уның теленә иғтибар итегеҙ.
2. Әҫәрҙең теле бөгөнгө башҡорт әҙәби теленән нимәһе менән айырыла?
3. Уйлап ҡарағыҙ, әҫәр ни өсөн «Һуңғы Һартай» тип атала?

*Зәйнәб БИИШЕВА*

## БАШҠОРТОСТАН

Элек заман һин бер үкһеҙ бала инең,
Бар байлығың ҡырыҫ, йәнһеҙ дала ине.
Шул далаңда һин, имгәкләп, ауа-түнә,
Тома һуҡыр юлсы булып бара инең.

Хәҙер көслө ир-арыҫлан, баһадир һин.
Алғы сафта бәхет даулап бараһың һин.
Юлың яҡты, көнөң көләс, теләгең саф,
Бөйөк илдең ҡәҙерле бер балаһы һин.

Һәр йылыңда унар йыллыҡ юлды үттең.
Коммунизм таңдарына килеп еттең.
Ленин һыҙған яҡты юлдан тайшанмайса,
Меҫкенлекте һелкеп ташлап, тапап үттең.

Ырыҫлы ер – Башҡортостан, Гөлбостан һин,
Бәхет, шатлыҡ, нур төйәге Гөлостан һин,
Оло ҡояш – Рәсәйҙең күкрәгендә
Йондоҙ булып яныcareful торған Нурстан һин.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Зәйнәб Биишеваның «Башҡортостан» шиғырын тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Шиғырҙың «Элек заман һин бер үкһеҙ бала инең, Бар байлығың — ҡырыҫ, йәнһеҙ дала ине» тигән юлдарын аңлатып ҡарағыҙ.
3. Шиғырҙың өсөнсө строфаһында ниндәй тарихи осор тураһында һөйләнелә?
4. «Рәсәйҙең күкрәгендә Йондоҙ булып янып торған Нурстан һин», тип ғорурлана шағирә. Башҡортостан Рәсәйҙең төп терәге һәм ынйыһы булып тороуын үҙ һүҙҙәрегеҙ менән һөйләгеҙ.

*Назар НӘЖМИ*

## БАШҠОРТОСТАН

Башҡортостан! Татлы балһың кеүек,
Дегетсе бер оҫта кеүекһең —
Кейеменә мазут еҫе һеңгән
Һин, гүйә, бер эшсән егетһең.

Башҡортостан! Ярһыу атһың һымаҡ,
Өйөрҙәрең — утлы өйөрмә.
Ҡымыҙ еҫе, йәйләүҙәрҙең хисе
Йырлап инә йырлы өйөңә.

Башҡортостан! Һин икмәкле тупраҡ,
Йәшел урман, болон, тау дала.
Йәнһеҙгә — йән, йәмһеҙгә йәм биргән
Һин ут һәм һыу, һауа һәм дауа.

Бар булғаның һинең үҙеңдеке —
Ер аҫтың һәм өҫтөң — хазина,
Китаптарың юҡта китап итеп
Тарих яҙғанһың һин ташыңа.

Ниндәй ер һин! Ер алтының түгел,
Күңел алтындарың — мең алтын.
Йырлап тора телең. Йөрәгеңдә

Ерҙәр тетрәтерлек дәрт, ялҡын.
Шул дәртең һәм шул ялҡының күскән
Ереңдәге һәр бер халҡыңа.
Бер йәшәүе мең йәшәүгә тора
Дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ хаҡына.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙы тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Шағир Башҡортостанды ниндәй образдарҙа һүрәтләй?
3. Шиғырҙа Башҡортостандың бөгөнгөһө ҡайһы юлдарҙа һәм нисек бирелә?
4. «Бер йәшәүе мең йәшәүгә тора Дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ хаҡына» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ, үҙ фекерҙәрегеҙҙе әйтегеҙ.
5. Бына һеҙ Зәйнәб Биишеваның һәм Назар Нәжмиҙең Башҡортостанға арналған шиғырҙары менән таныштығыҙ. Уйлап ҡарағыҙ, уларҙа ниндәй уртаҡ мотивтар бар? Ниндәй айырым үҙенсәлектәрҙе күрҙегеҙ?



# Унынсы бүлек

## ҺЫҘҘЫРТ, ҠУРАЙ, БАШҠОРТ МОҢДАРЫН...

### ҠУРАЙ

*(Башҡорт халыҡ йыры)*

Урал ғына тауҙың, ай, башында
Урай-урай үҫкән бер ҡурай,
Шул ҡурайҙы алып бер тартһаң,
Ҡайғы-хәсрәт баҫыла бер талай...

Таҡыя ғына башлы ҡырлы ҡурай,
Моңло ғына итеп уйнайым мин.
Ҡурайҡайым еңел, көйө ауыр,
Еңел көнкәйҙәрҙе уйлайым мин.

Тартсы әле, егет, ҡурайыңды,
Ауыр донъя еңел тойолһон.
Эскенәйем тулы ҡайғы-хәсрәт
Ҡурай моңо менән ҡойолһон.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Ҡурай ҡайҙа үҫә? Һеҙҙең үҫеп ултырған ҡурайҙы күргәнегеҙ бармы, уны башҡа үләндәрҙән айыра алаһығыҙмы? Уны ни өсөн таҡыя башлы тип әйтәләр?
2. Ҡурай үләненең һүрәтен төшөрөгөҙ.
3. «Ҡурайҡайым еңел, көйө ауыр» тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Көйҙөң ауыр булыуы бында нимәгә ишара яһай?

4. Һуңғы ике юлға иғтибар итегеҙ: ҡурай моңо, ысынлап та, ҡайғы-хәсрәтте бөтөрәме икән? Ҡурай моңон тыңлағанда һеҙ үҙегеҙҙе нисек хис итәһегеҙ, шул хаҡта һөйләгеҙ.
5. Ҡурай үләнен табып, үҙегеҙ ҡурай эшләп ҡарағыҙ. Ғата Сөләймәновтың «Ҡурай» тигән китабын файҙаланырға мөмкин.

*Нур* ***ҒӘЛИМОВ***

## ЯУҘАН ҠАЙТҠАН ҠУРАЙ

Бөйөк Ватан һуғышы башланған заман. Ирҙәрҙе, егеттәрҙе фронтҡа оҙаталар. 1941 йылдың ҡышында өс йөҙгә яҡын Баймаҡ егете менән 26 йәшлек Ғәйфулла Сарбаев та Башҡорт атлы дивизияһы составында һуғышҡа китте. Тәбәнәгерәк буйлы, ныҡ кәүҙәле был егет ул саҡта Баймаҡ колхоз-совхоз театрының артисы ине. Егет башҡорт атлылары араһында үҙенең алсаҡ, күңелле булыуы, шат характеры менән тиҙ танылып китте. Уны һуғышсылар ҡурайсы булараҡ та бик ярата торған инеләр.

Кешеләр бер-береһе менән юлда уҡ таныштылар. Ғәйфулла Сарбаев үҙенең көндәлегендә былай тип хәтерләй: «...11 декабрҙә кис Өфөгә килдек. Унан беҙҙе яҡындағы станцияға оҙаттылар. Ҡараңғы төшкәс, вагондарҙан аттарҙы бушаттыҡ. Уларҙы ат һарайҙарына урынлаштырҙыҡ. Унан беҙҙе ҙур клубҡа килтерҙеләр. Бында төрлө райондарҙан килгән инеләр. Мине шул ғәжәпкә ҡалдырҙы: атлылар араһында беҙҙең Баймаҡ егеттәре, нисектер, айырылып торалар ине. Күңелдәре күтәренке, шаяралар, көләләр, һуғыш тип артыҡ иҫтәре китмәгән кеүек. Бына шунда мин үҙебеҙҙең Ирәндек итәгендә үҫкән ҡурайымды алып уйнап ебәрҙем. Бөрйән, Хәйбулла егеттәре ҡушылып китте. Йыр, бейеү башланды. Кешеләрҙең күңеле күтәрелеп киткәндәй булды, улар, һуғышты һәм ҡайғыны оноттандай, йылмайыштылар...»

Бойоғоуҙы белмәй торған был башҡорт егете һуғышсылар араһына бына шулай килеп инә. Инде бына фронт. Йәй мәле. Гитлерсы илбаҫарҙар илебеҙгә ҡара яу булып ябырылған ваҡыт. Тыуған илебеҙ өсөн иң ауыр заман.



Башҡорт атлылары командованиеның заданиеһын уңышлы үтәйҙәр. Һуғыш тынған араларҙа егеттәр тыуған яҡтарын, һөйгән ҡыҙҙарын, йәмле Ағиҙел буйҙарын, күк Ирәндек һәм Урал тауҙарын иҫкә төшөрәләр... Ә Ғәйфулланың Уралдан алып килгән ҡурайы күптән инде ҡайҙалыр юғалды.

Көндәрҙең береһендә беҙҙең зенитсылар башҡорт атлылары өҫтөндә өйрөлгән немец самолеттарына ата башланылар. Шул саҡта бер «мессершмитт» яна башланы һәм, яраланған ҡоҙғон төҫлө, ергә йығылып төштө. Быны ҡарап торған егеттәр ҡысҡырыштылар, шатланыштылар, сөнки улар фронтта бындай хәлде беренсе тапҡыр күрәләр ине. Улар араһында Ғәйфулла ла бар. Фашист самолеты, утлы өйөрмә булып, мороно менән ергә ҡаҙалды, тирә-яҡта ут сатҡылары, шартлаған бомба ярсыҡтары һыҙғырып осто. Егеттәр самолет янына йүгереп килделәр. Летчиктарҙың икеһе лә һәләк булған ине. Шул саҡта Ғәйфулла фашист самолетының селпәрәмә килгән моторын күрҙе. Уның аяҡ аҫтында артыҡ йыуан булмаған еҙ көпшә ята. Эйелеп шуны

ҡулына алды, үҙе лә һиҙмәҫтән ҡысҡырып уҡ ебәрҙе: бына, ҡурай булды ла инде!

Крупп заводтарында ҡойолған еҙ көпшәнән башҡорт егеттәре ҡурай эшләп алдылар. Буш минуттарында ошо ҡурайҙа башҡорт көйҙәрен уйнай торған булдылар. Ғәйфулла яһаған еҙ ҡурай егеттәргә бик оҙаҡ хеҙмәт итте. Һуңынан улар, күк йөҙөндә немец самолетын күреп ҡалһалар: «Ана, ҡурай килә!» — тип көлөшә торған инеләр. Аҙаҡ та әле ергә төшкән бик күп «мессершмитт», «фоккевольф»тарҙың еҙ көпшәләренән ҡурай яһай торған инеләр. Ғәйфулла үҙенең ошо ҡурайы менән Польша һәм Германия ҡалаларында Ирәндектән алып килгән башҡорт көйҙәрен уйнай торған ине. Таныш булмаған сит ил кешеләре был көйҙәрҙе ғәжәпләнеп тыңлайҙар, уны уйнаусы башҡорт егетенә таң ҡалып ҡул сабалар ине.

Башҡорт атлылары фронтта булған шундай бер ваҡиғаны хәтерләйҙәр. 1944 йылдың июль айы. Башҡорттар күрше дивизиялар менән Польшаның Холм исемле ҡалаһына килеп инделәр. Ҡала халҡы совет һуғышсыларын шатланып ҡаршы алды. Ҡала уртаһында кирбестән һалынған биш ҡатлы бер өй кешеләрҙең иғтибарын үҙенә тарта ине. Бында немецтарҙың гестапоһы урынлашҡан булған. Ошо өйгә ҡаршы майҙанға халыҡ йыйылған һәм шунда уҡ башҡорт атлыларының бейеү ансамбле концерт ҡуя башланы. Майҙанға бик күп ҡала халҡы йыйылды. Оркестр уйнап ебәрҙе, поляктар уға ҡушылып йыр башланылар. Был хәл ҡала халҡын майҙанға саҡырҙы. Бына бер ваҡыт оркестр тынды. Әлеге өйҙөң балконына ҡулына еҙ ҡурайын тотҡан Ғәйфулла Сарбаев сығып баҫты. Уның янында Матрай районы егете майор Күҙәшев тора ине. Ғәйфулла, күкрәген киреп, башҡорт халыҡ көйө «Әрме»не уйнап ебәрҙе. Майор уға ҡушылып йыр башланы. Холм ҡалаһы кешеләре башҡорт йырҙарын иҫ киткес тулҡынланыу һәм һоҡланыу менән тыңланылар, ә аҙаҡтан инде бөтөн майҙанды яңғыратып ҡул саптылар, сәләмләп ҡысҡырҙылар.

Был еҙ ҡурай һуғыш яландары буйлап бик ауыр һәм оҙон юл үтте. Бына хәҙер ошо ҡурай Өфөләге Тыуған яҡты өйрәнеү музейында тора.

Нисек килгән был ғәжәйеп ҡурай Башҡортостанға? РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Бәҙәр Йосопова былай тип хәтерләй ине:

— Башҡортостандан бүләктәр тейәп, беҙ фронтҡа киттек. Кавалерия егеттәре менән осраштыҡ. Шунда мин Ғәйфулла менән осраштым. Ул миңә бүләк итеп ошо ҡурайҙы бирҙе...

Ғәйфулла, фронттан ҡайтҡас та әле, оҙаҡ йылдар буйы тамашасыларҙы ҡурай уйнап һоҡландырҙы, дәртле аккордеонист һәм талантлы артист булды...

Ә бына теге яуҙан ҡайтҡан легендар ҡурай әле лә музейҙа тора. Ул һуғышсының, кешенең, артистың яҡты иҫтәлеген һаҡлай, кешеләргә яуҙан ҡайтҡан ғәжәйеп бер тарихты хәтерләтә.

**Һорауҙар һәм эштәр**

Күренекле артист, режиссер Ғәйфулла Сарбаев тураһында тағы ла ниҙәр беләһегеҙ?

***Кәҙим АРАЛБАЙ***

## ЙОМАБАЙ ҠУРАЙЫ

Урал ғына тауҙың көн битендә
Үҫә генә булыр бер ҡурай.
Шул ҡурайҙы ҡырҡып уйнаниһәң,
Моңо Урал тауын бер урай...

Ҡурай тарта егет. Эй һыҙҙыра!..
Ҡайҙан ғына сыға был тауыш?!
Ярһыу хисе, моңһоу наҙы менән
Йөрәктәрҙе һыға был һағыш...

Хас дошмандар күпме тырышҡандар
Ҡурайсының өнөн тығырға,
Фарман булған, тиҙәр, шул үләндең
Үҫеүен дә бермә тыйырға.

Әммә мәғрур Урал, шуны тойоп,
Иткән икән үҙе булышлыҡ:
Ҡурай тағы тупраҡ тишеп сыҡҡан,
Күкрәгендә моңға тулышып.

Быуат-быуат әллә күпме афәт
Быуып алғанда ла алҡымдан,
Иҫән ҡалған Иҫәнбай тоҡомло
Шанлы ҡурайсыһы халҡымдың.

Йөҙ йылдарға, бәлки, берәү тыуыр
Йомабайҙай бөйөк ҡурайсы.
Тағы тыуыр, әгәр еребеҙгә
Булһаҡ имен таңдар ҡурғаусы.

Уны ла бит — ябай башҡорт улын —
Моңло-зарлы халҡы тыуҙырған,
Һәм йәлләмәй зирәк күңеленә
Мөлдөрәмә хис-моң һыйҙырған...

Урал ғына тауҙың көн битендә
Үҫә икән ҡырлы бер ҡурай,
Шул ҡурайҙы ҡырҡып уйнаниһәң,
Моңо донъяларҙы бер урай.

Мәңге йәшәр ҠУРАЙ.
Ул — үлемһеҙ:
Ул башҡорттоң йәшәй аңында,
Ул башҡорттоң йәшәй булмышында,
Ул башҡорттоң йәшәй ҡанында!..

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙы матур итеп тасуири уҡығыҙ.

2. Шағир үҙенең был шиғырын ниндәй күренекле башҡорт ҡурайсыһына арнаған? Уның тураһында белгәндәрегеҙҙе һөйләгеҙ.
3. «Мәңге йәшәр ҡурай.
   Ул — үлемһеҙ:
   Ул башҡорттоң йәшәй аңында,
   Ул башҡорттоң йәшәй булмышында,
   Ул башҡорттоң йәшәй ҡанында!..»
   Шағирҙың ошо һүҙҙәре менән ризаһығыҙмы? Үҙ һүҙҙәрегеҙ менән ошо юлдарҙы иҫбатлап ҡарағыҙ.

* * *

Ҡурайсы ҡурайҙы яһағанда, ғәҙәттә, түбәндәге һамаҡты әйтә:

— Ҡурай!
— Әү.
— Ҡайҙа үҫтең?
— Урманда.
— Кем ҡырҡты?
— Ҡурайсы.
— Ни эшләргә?
— Уйнарға?



# Ун беренсе бүлек

## ӘСӘЙ КҮҢЕЛЕ — ТУЛЫ ҠОЯШ

### АБДУЛХАҠ ИГЕБАЕВ

### 1930



Башҡортостандың халыҡ шағиры Абдулхаҡ Игебаев шиғырҙары республика матбуғатында 1948—1949 йылдарҙа уҡ баҫыла башлай. Шағирҙың 1954 йылда донъя күргән тәүге китабы «Йәшлек йыры» тип атала.

Абдулхаҡ Игебаевтың «Тыуған ер», «Йылмайығыҙ, йондоҙҙар», «Урал тауышы», «Һағына белә икән таштар ҙа», «Беләм ерем-һыуым ҡәҙерен», «Гөлдәр һиберҙәй булам», «Һайланма әҫәрҙәр», «Елеп бара ғүмер йомғағы» һәм башҡа шиғри йыйынтыҡтарын уҡыусылар ихлас ҡабул итте.

Ул Башҡортостан Республикаһының Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы һәм Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты.

Абдулхаҡ Игебаев — Өфөлә, Мәскәүҙә, Ҡазанда башҡорт, рус, татар телдәрендә сыҡҡан утыҙҙан артыҡ китап авторы.

## ӘСӘЙЕМӘ

Тылсымлы ҡош, тылсымлы ҡош,
Серемде мин әйтәйем,
Һайрасы һин өҙҙөрөп бер,
Йыр ярата әсәйем.

Алҡалы гөл, алҡалы гөл,
Йәм биреп үҫ суҡланып.
Иртә йә кис әсәйем гел
Һиңә бағыр, һоҡланып!

Ҡанатлы ел, ҡанатлы ел,
Үҙеңә бер һүҙем бар:
Әсәйемдә — ҡап-ҡара сәс,
Тик һин уға һипмә ҡар.

Ҡояшлы таң, ҡояшлы таң,
Аңласы уй-хисемде:
Нур менән һин донъяға яҙ
Әсә тигән исемде!

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шағир әсәһенә нимәләр теләй?
2. Һеҙ үҙегеҙҙең әсәйегеҙгә нимә теләр инегеҙ?
3. Шағир елгә «Әсәйемдә — ҡап-ҡара сәс, Тик һин уға һипмә ҡар» тип өндәшә. Әсәйҙәрҙең сәсенә салды кемдәр һала, шул хаҡта уйлап ҡарағыҙ әле.

***Йыһат* СОЛТАНОВ**

## ҠӘНӘФЕР СӘСКӘҺЕ

Беҙҙең Фәриҙә 6-сы «А» класында уҡып йөрөй. Ул — ударница, бөтә фәндәрҙән дә «дүртле», «бишле»гә генә өлгөрә. Ә тәртибе һәр саҡта ла өлгөлө.

Уның көн дә үҙе тарап үрә торған, арҡаһына төшөп ятҡан муйылдай ҡара ҡуш толомо, ә тулы Айҙай балҡып торған йөҙөнөң уң бите уртаһында мәк орлоғондай ғына ҡараҡай миңе бар. Көлгәнендә был миң янында уйым соҡортай хасил була, ҡара төртөк со-

ҡортай эсенә аунайым-аунайым тип саҡ ҡала. Ҡыҙҙың оҙон толомдары — әсәһенә, ҡара күмер ҡашы менән янып торған ҡара күҙҙәре атаһына тартым, тиҙәр. Фәриҙә үҙе, көҙгөнән күпме генә текләп ҡараһа ла, быларын айыра алмай, уныңса, ул фәҡәт үҙенә генә оҡшай. Кем белә, бәлки, бер юлы ул атаһына ла, әсәһенә лә оҡшағандыр.

Фәриҙәнең әсәһе Хәтирә апай ҡала больницаһында хирург — эштән һәр саҡ оҙаҡлап, арып ҡайта. Ҡайһы ваҡыт борсоулы була ул — ауырып килгән кешеләрҙең ҡайғыһы менән ҡайғыра. Ә күп ваҡыт йөҙө ҡояштай балҡып, ҡыуанып ҡайтып инә, ишектән үк Фәриҙәһен ҡосаҡлап ала:

— Ҡыҙым, тағы ла бер әҙәмде үлемдән ҡотҡарҙыҡ! Инде ул оҙаҡ йәшәр: тыуған еренең йәшеллеген, сәскәләрен, һайрар ҡоштарын, зәңгәр күген, ал Ҡояшын күреп йәшәр. Ерҙең моңон тыңлап кинәнер. Ә уның шулай йәшәүенә уның ата-әсәһе, бала-сағалары нисек ҡыуаныр!

Фәриҙә лә әсәһен ҡыҫып ҡосаҡлай, уның менән ҡуша сөйөрөлөп-уйнаҡлай:

— Әсәй, быға мин дә ҡыуанам! Бик-бик ҡыуанам!

— Беҙ бәхетле, ҡыҙым, кешеләргә шундай ҡыуаныс килтереүебеҙ менән ифрат бәхетле!

Фәриҙә әсәһенең ҡулындағы сумкаһын, өҫтөнән кейемдәрен ала, йыуынғанында таҙа таҫтамал хәстәрләп көтөп тора. Шунан һуң  аш бүлмәһендә кискелеккә ашарға әҙерләшә. Улар эште улай-былай итеүгә, юғары кластарҙа уҡыған ағаһы Байтал менән апаһы Мәйсәрә лә «тып» итеп ҡала өйгә. Иң аҙаҡтан, өс йәшлек һеңлеләре Ынйыҡайҙы күтәреп, атайҙары Мөбәрәк ҡайтып инә. Ул, һәр саҡтағыса, уйсан, талсыҡҡан — үҙе эшләгән ҙур заводтың конструкторлыҡ бюроһындағы мәшәҡәттәрен өйгә лә йөкмәп ҡайтҡан. Ашап ултырғанында ла ул, ҡапыл ҡәләмен алып, ҡағыҙ салфеткаға ниндәйҙер серле чертеждар һыҙа. Фәриҙә белә: атаһы колхоз баҫыуҙары өсөн ҡеүәтле трактор уйлап сығарған — һаман шуның деталдәрен яҡшыртырға тырыша. Ҡай саҡ улар атаһы менән шул машина тураһында һөйләшәләр, икәүләшеп уйлайҙар.

— Көҙ көнө туңға ер һөргәндә бик һыуыҡ та, туҙанлы ла була, — ти, яңы трактор һүрәтен һыҙып күрһәтеп, Фәриҙәнең атаһы. — Әгәр шул һыуыҡта эшләп йөрөгән тракторсы ағайҙарыңдың, апайҙарыңдың кейгән кейеме трактор майына буялһа, туҙанға ҡатһа, һыуыҡҡа туңһа, беләһеңме, ҡыҙым, нисек ҡыйынға килер ине уларға?..

— Юҡ, атай, улай булмаһын! — ти Фәриҙә, тракторсы апайҙарҙы, ағайҙарҙы йәлләп.

— Дөрөҫ, улай булырға тейеш түгел! — тип ҡыуана атаһы, уның башынан һыйпап. — Беләһеңме, ҡыҙым, мин дә тап шул һинең һымаҡ уҡ уйлайым бит әле. Тракторсы ағайҙарыңдың, апайҙарыңдың да эш кейеме, тап ҡалала такси йөрөткән ҡупшы ағайҙар һәм апайҙарҙыҡы кеүек, таҙа булырға тейеш, тим. Ә быының өсөн, беләһеңме, ни эшләргә кәрәк беҙгә?

— Белмәйем, — ти Фәриҙә, тураһын әйтергә ярата ул.

— Быының өсөн, ҡыҙым, беҙгә бөтә тракторҙы бер еренән дә тамсы ла май һарҡып сыҡмаҫлыҡ итеп, ек ҡалдырмай эшләргә кәрәк. Бәйләнештәрен бер йүнәтеп майлап ебәрһәң, таксиҙыҡы кеүек үк, айҙар буйына етһен. Ә иң һәйбәте — тракторҙы йүнәтеп майлап тороусы айырым кешеләре булһын. Летчиктарҙың самолеттарын механиктар махсус ҡараған кеүек. Бына шунда булыр ине мөғжизә!

— Мөғжизә тип, кеше ҡулынан килмәҫтәйҙе әйтәләр, — тип киҫәтә Фәриҙә.

— Ә был мөғжизә беҙҙең ҡулдарҙан килә. Беләһеңме, беҙ ауылға ниндәй мөғжизә-трактор бүләк итәсәкбеҙ! Быының менән илдәге күпме кешеләрҙе шатландырасаҡбыҙ! Ура! — Фәриҙә атаһының көслө ҡулдарынан сөйөлөүен һиҙмәй ҙә ҡала, улар инде иҙән буйлап икеһе шат әйләнә...

Бөгөн Фәриҙә мәктәптәге һуңғы ҡыңғырау шылтырауын түҙемһеҙләнеп саҡ көтөп алды, өйгә яҙғы күбәләктәй талпынып-елпенеп ҡайтты. Уны йөрәк төбөндәге сәскә һымаҡ йомарланып торған шатлыҡ шулай елкендерҙе — иртәгә оло байрам, әсәйҙәрҙең байрамы! Ҡыш буйы шул көнгә арнап йыйнаған аҡсаһы бар — кискә эштән арып ҡайтасаҡ әсәһен Фәриҙә аҫыл бүләк менән ҡаршыларға ниәтләнгәйне. Бына хәҙер өйгә инеп,

сумкаһын ҡуйып, ҡатыҡ ҡына ҡапҡылап аласаҡ та Үҙәк майҙанға гөлдәр магазинына йүгерәсәк, әсәһенең иң яратҡан сәскәһен — ҡандай ҡыҙыл ҡәнәфер һатып аласаҡ!..

Ләкин өйҙә Фәриҙәне көтөлмәгән тәртипһеҙлек ҡаршылаңы: иҙән һеперелмәгән, келәмдәр ҡағылмаған, аш бүлмәһендә сүп күнәге сығарып түгелмәгән. Был мәшәҡәттәрҙе көн дә, мәктәпкә киткәнсе үк, ағаһы менән апаһы башҡара ине. Бөгөн, моғайын, ниңәлер ҡабаланып, был икәү үҙ вазифаларын онотоп ҡалдырғандар. Ул ғына ла етмәһә, Йофар тигән мыяубикә, өйҙә яңғыҙ үҙе генә булыуынан файҙаланып, бәләкәс Ынйыҡайҙың һөйөклө ҡурсағын иҙәндә аунатҡан — башындағы аҡ ҡалпағын өҙгөләп, сәс толомон туҙҙырған... Бындай бола күрә тороп, нисек өйҙән сығып йүгерәһең?

Бына беҙҙең Фәриҙә, апаһының аҡ алъяпҡысын бәйләп, ашығыс эшкә тотондо. Тәүҙә бәләкәс Ынйыҡайҙың ауыҙҡайы ҡыйшаймаҫ элек ҡурсаҡты ыҫпайлау кәрәк. Аҡ ҡалпаҡты, ҡағыҙҙан ҡырҡып, алтын буяуҙарға мансып, Фәриҙә яңынан яһаны — ҡойоп ҡуйған үҙе булды! Сәсен тарап, үреп, ҡалпағын кейҙереп ултыртҡас, ҡурсаҡ үҙе лә йылмайып уҡ ебәрҙе, Ынйыҡайҙы һағынып көтә башланы.

Фәриҙә ҡабалан сәғәткә ҡарап алды — ваҡыт тигәнең йүгерә лә йүгерә! Магазин ябылмаҫ борон, сәскә алып өлгөрөргә кәрәк! Тик ҡыҙ кеше өйҙө был килеш ташлап сығып та китә алмай — үҙең өйҙә булмағанда ла, өй эсендә тәртип һаҡланырға тейеш. Моғайын, ул иҙәнде һепереп тә, келәмдәрҙе таҙартып та, сүпте түгеп тә өлгөрөр. Ана, туҙан һурҙыртҡыс күҙҙәренә генә тексәйеп ултыра.

Туҙан һурҙыртып йөрөгәнендә, әсәһенең көрән йөн күлдәге менән иш килгән, эсенә театр бинокле һалып йөрөтә торған редикуленә ҡағылды ҡыҙҙың ҡулы. Бер бауы төбөнән ҡупҡан — һүтелеп сығырға ғына тора. Әсәһе уны, күрәһең, йүнәтергә онотоп киткән йәки ҡулы теймәгән. Фәриҙә тиҙ генә энә-еп алып, бөхтә итеп бауҙың йөйҙәрен текте. Ул шундай шәп килеп сыҡты, хатта ҡасандыр таушалған икән тимәҫһең.

Өйҙө тап-таҙа итеп, форточкаһын асып елләтеп алыуға, Үҙәк майҙандағы сәскә магазины ябылыуға тик бер

нисә сәғәт ҡалғайны. Мыяубикә Йофарға һөт һалып биреп, Фәриҙә тышҡа атлыҡты.

Март айының эре ябалаҡ ҡарҙары бурап яуа, өҫкә төшөү менән үк иреп ыуала. Әллә шуғамы, әллә халыҡ эштән сығырға иртәрәк булғанғамы, урамда кеше һирәк. Машиналар ғына өҙлөкһөҙ гөрөлдәп үтеп тора.

Фәриҙә, йөрәге дөп-дөп ҡағып, инде генә майҙанға еттем тигәндә, сеңләп илаған ҡыҙ бала тауышын ишетеп албырғаны. Ауазы килә, үҙе юҡ. Ҡыҙыйҙы ул йәй көндәрендә һыу һата торған, ә хәҙер эшләмәгән киоск артынан тапты. Нәҡ үҙҙәренең Ынйыҡайы тиклем генә. Сүкәйеп ҡарға ултырған, өшөгән. Фәриҙә ҡыҙҙы күтәреп торғоҙҙо, күгәрсен тәпәйеләй күгәргән ҡулдарын өрөп йылытты. Һораша торғас, ҡыҙҙың исеме Әсмәбикә, әсәһенеке — Фатима, ә үҙҙәре «Ленин бабай баҫып торған баҡса янында» йәшәүҙәре асыҡланды. Ҡыҙ трамвайҙан үҙе ырғып төшөп ҡалған, ә әсәһе «аҙашып киткән», имеш... Ленин бабай һәйкәленә тиклем ара байтаҡ булғас, Фәриҙә ҡул күтәреп, такси туҡтатты, һәм ултырып киттеләр. Машинала бәләкәс ҡыҙ йылынды, йоҡомһорай башланы, һәйкәл янына килеп етеп туҡтағас, Фәриҙә счетчикка ҡараны ла илап ебәрә яҙҙы:

— Минең был тиклем аҡсам юҡ...

— Кәрәкмәй, бәләкәйҙәрҙән аҡса алмайым, — тине такси йөрөтөүсе, уны ҡыҙғанып. Шулай ҙа Фәриҙә үҙен еңде, хатта батырайып китте:

— Мин бер кемгә лә бурыслы ҡалырға яратмайым! — тине ул атаһы һымаҡ ғорур һәм счетчик күрһәткәнсә аҡсаһын һанап бирҙе. Әсмәбикәне етәкләп, баҡса буйындағы күп ҡатлы йорттарға ыңғайланы, һәр подъезд алдында туҡтап, күренгән кешеләрҙән: «Был ҡыҙҙы танымайһығыҙмы, ул ҡайҙа тора икән?» — тип һораны. Тик берәү ҙә танымаsucc Әсмәбикәне. Ниңәлер кәйефһеҙләнергә, иларға тотондо ҡыҙый. Фәриҙә ҡалған аҡсаһына бәләкәй генә шоколад һатып алып биргәс, ҡыҙыҡай тынысланды, Фәриҙәнең итәгенә йәбеште. Бер йорт мөйөшөндә «Милицияның балалар бүлмәһе» тигән яҙыу абайлап, шунда барып инделәр. Милиционер апай уларҙан бик ентекләп һорашты, шунан ҡайҙалыр телефондан шылтыратты. Әсмәбикә Фәриҙәнең алдына башын ҡуйып ултырып, йоҡоға талды.

Тиҙҙән бер апай хәле бөтөп йүгереп килеп инде, Әсмәбикәне күреү менән ҡыуанып ҡысҡырып ебәрҙе, ҡосаҡлап үбә башланы. Әсмәбикә лә әсәһен ҡосаҡлап ҡыуанды. Ошо ығы-зығы ҡупҡан арала Фәриҙә сығып китте. Трамвайға ултырып, кеҫәһендә аунаған баҡыр тиндәргә билет алды. Әсәһенә ҡәнәфергә тип йыйған аҡсаһы шуның менән осланды...

Фәриҙәне подъезд төбөндә Байтал ағаһының класташ ҡыҙы Нәсимә көтөп тора ине, ул Фәриҙәгә яҙыу тапшырҙы. Фәриҙә күңелһеҙ генә уҡыны: «Фәриҙә һеңлем, бөгөн мин дә, апайың да һуңлап ҡайтабыҙ мәктәптән. Апайың Сәрби инәйгә ярҙам итергә китә, ә мин етем балалар йортона барам — 8 Март байрамы етә бит! Ынйыҡайҙы балалар баҡсаһынан атайым миңә алып ҡайтырға ҡушҡайны, быны һин үтәрһең инде. Ағайың Байтал». Фәриҙә белә: Сәрби инәй тигән ниндәйҙер әбей бар, алты улы фронтта үлеп ҡалған. Мәйсәрә шул әбейгә һәр саҡ өй эштәрен эшләшә, аптекаға дарыуға саба. Ә Байталдың етем балалар йортонда шефҡа алған малайы бар, малайға ул дәрес аңлата, уны ҡурай тартырға өйрәтә. Әбей ҙә, малай ҙа был икәүҙең килеүен ҡыуанып көтөп ала.

Фәриҙә, өйгә боролмай, тура балалар баҡсаһына йүнәлде. Ынйыҡайҙы санаһына ултыртып алып ҡайтты. Ынйыҡай ҙа ҡурсағын һағынған икән — инеүе менән үк ҡыуанып уйнарға тотондо...

Атай бөгөн эштән иртәрәк ҡайтып инде. Фәриҙәнең әсәһенә ул көтөлмәгән яңылыҡ әҙерләгән — Мәскәүҙән килгән артистарҙың концертына билет алған. Ынйыҡайҙың өйҙәлегенә ул ҡыуанды, әсәй ҡайтыуға сәй әҙерләй башланы. Хәтирә апай ишектән күренеүе менән үк шатлыҡлы ҡысҡырып ебәрҙе:

— Әсәһе, тиҙ бул, театрға барабыҙ!

— Тиҙ бул, тиһең дә бит, — тине әсәй, хәүефләнеп, — тик өйҙө был килеш нисек ташлап китәһең?

— Бәй, өйгә ни булған?

— Әллә күрмәнең дәме? Байтал эшемә шылтыратып ғәфү үтенде: өйҙө йыйыштыра алмай киткәндәр.

— Бәй, өй ялт итеп торасы! — тине атай. Әсәй, ишек төбөндә аяҡ кейемен һалып, төпкә үтте һәм, көтөлмәгән бөхтәлеккә осрап, ҡыуаныстан ике бите алланды.

Йәһәт ҡапҡылап алдылар ҙа йыйынырға керештеләр. Атай аҡ күлдәген кейҙе, матур галстугын бәйләне. Әсәй яратҡан көрән йөн күлдәген һалды иңенә. Икеһе тиң ифрат матурланып, йәшәреп киткәндәй булды. Кейенеп бөткәс кенә әсәй тағы күңелһеҙ уфтанып ҡуйҙы:

— Уф, онотҡанмын бит! Редикулемдең бауын йүнәтмәгәнмен! Күлдәгемә иш килмәгәнде тотоп бараммы инде?

Атаһы кәйефһеҙләнде, сәғәтенә ҡаранды. Шул саҡ Ынйыҡай йүгереп килеп, көрән редикулде һонғайны, ҡыуаныстан атайҙың да, әсәйҙең дә бит остары алланды — редикуль бынамын тигән бит! Театрға улар ҡыуаныс йөкмәп алып киттеләр.

Яңғыҙ үҙҙәре генә ҡалғас, Фәриҙә һеңлеһен уйнатты, ә унан һуң, йыуындырып, йоҡларға һалды. Байтал менән Мәйсәрә лә ҡайттылар, өйҙөң үҙҙәренән башҡа ла матур итеп йыйыштырылыуын күреп, аптырап ҡалдылар, быны Фәриҙә эшләгәнгә ҡыуандылар. Тамаҡтарын туйҙырып, йоҡларға яттылар. Фәриҙә генә һаман төпкө бүлмәлә яңғыҙ ултырҙы, әсәй өсөн бүләк һатып ала алмауын уйлап моңайҙы. Йөҙөн кинәт яңы тойғо балҡытып, рәсем дәфтәрен асып һалды, кескәй бумала, акварель буяуҙарын алды. Әсәйҙәре ҡайтҡансы ул күҙ йоммаҫҡа ҡарар итте.

...Бына Фәриҙә донъялағы иң ҡәҙерле бүләген — ер йөҙөндәге иң ал, иң ҙур ҡәнәфер сәскәһен ҡосаҡлап илтә әсәһенә. Әсәһе талпынып килә, Фәриҙәне ҡәнәфер сәскәһе менән ҡуша ҡосоп ала:

— Гүзәлем, ҡәнәфер сәскәм минең!..

Фәриҙә күҙен аса һәм үҙенең ысынлап та ҡайнар әсә ҡосағында икәнен тойоп аптырап ҡала — ни арала театрҙан ҡайтҡандар?! Ә атаһы сағыу акварель буяу менән ҙур ҡәнәфер сәскәһе төшөрөлгән, «Әсәйгә иң ҙур бүләк» тип яҙылған рәсем дәфтәрен тотоп йылмайып тора. Улар ишекте асып ингән, ә Фәриҙә, шуны ла һиҙмәй, ултырған килеш ойоған. Шуның өсөн дә ҡыҙ күңелен моң баҫа, ул иламһырап һөйләнә:

— Әсәйем, һиңә тере ҡәнәфер һатып ала алманым, әсәйем...

Әсәһе уны, бәхетенән күҙҙәре йәшләнеп, үбә:

— Һин үҙең — тере сәскәм, ҡәнәферем бит минең! Бөгөн күпме кешене ҡыуандырҙың! Ошо һин биргән ҡыуаныстар — әсәй өсөн иң ҙур бүләк ул, ҡыҙым!

Фәриҙә лә моңһоулығын онотоп, бәхетле көлә. Кешеләрҙе ҡыуандырып йәшәһәң, үҙеңә лә ҡыуаныслы икән ул.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Хикәйәне тасуири итеп уҡып сығығыҙ. Хикәйә һеҙгә оҡшанымы? Хикәйә буйынса һорауҙар төҙөгөҙ, шул һорауҙарға яуап биреп ҡарағыҙ.
2. «Беҙ бәхетле, ҡыҙым, кешеләргә шундай ҡыуаныс килтереүебеҙ менән» тигән юлдарҙың мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?
3. Әсәһе Фәриҙәнең өйҙәге ниндәй эшенә шатлана?
4. Фәриҙә әсәһенә байрам хөрмәтенә ниндәй бүләк әҙерләй?
5. Фәриҙәнең бәләкәй Әсмәбикәгә ҡарата мөнәсәбәтенә һеҙ нисек ҡарайһығыҙ? Әгәр ҙә һеҙ шул урында булһағыҙ, ни эшләр инегеҙ?
6. Һеҙ Фәриҙәнең ниндәй сифаттарынан үрнәк алыр инегеҙ?
7. Хикәйә ни өсөн «Ҡәнәфер сәскәһе» тип атала?

***Рәми ҒАРИПОВ***

## ӘСӘМ ҠУЛДАРЫ

Тәүге ҡабат бергә бесән саптыҡ
Һөҙәк кенә тауҙың битендә.
Шул көн иҫеңдәме һинең, әсәй?
Шул көн минең һәр саҡ иҫемдә.

Моңланып бер кәкүк саҡырғанда,
Үҙең янып бирҙең салғымды.
Тыуып ҡына килгән ҡояш нуры
Үҙ салғымда уйнап сағылды.

Һин эргәмдә ҡарап торҙоң, әсәй,
Көлөмһөрәп минең һелтәүгә,
Тик маҡтаған булдың, дәртләндереп,
Йүнле сапмаһам да мин тәүҙә.

Үҙ ҡулдарың менән күрһәттең һин:
«Тарыраҡ ал, — тинең, — алдыңды,
Иплəп кенə өйөрөп сап шулай,
Йөҙөн йәнсеп ҡуйма салғыңдың!..»

Һыуҙай алып китте кескәй салғым,
Сәскәләрҙең ғүмере ҡыйылды.
Ысыҡтарға тамғас мөлдөрәшеп,
Улар илашҡандай тойолдо...

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙы матур итеп тасуири уҡығыҙ.
2. Шиғырҙың тексы буйынса һорауҙар төҙөгөҙ һәм шул һорауҙарға яуап бирергә әҙерләнегеҙ.
3. Шағир үҙенең әсәһен нисек иҫенә төшөрә?
4. Һеҙ әсәйегеҙҙең тәү башлап нимәгәлер өйрәткәнен иҫләйһегеҙме, шул хаҡта һөйләгеҙ.

## БЕР ӘСӘНЕҢ ЗАРЫҠҠАНЫ

*(Башҡорт халыҡ әкиәте)*

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Булған, ти, уларҙың дүрт балаһы. Һәйбәт кенә йәшәп ятҡанда әбей ҙә, бабай ҙа ауырыша башлағандар. Оҙаҡ та ятманы, ти, бабай донъя ҡуйҙы, ти. Әбейе һаман ауырый ҙа ауырый. Түшәктән ҡалҡып тороп ултырыр хәле юҡ, ти. Әсәләре шундай хәлдә булһа ла, дүрт балаһының исмаһам береһе уны ҡарамай, көнө-төнө уйнап тик йөрөй, ти. Ҡарт әсә һыуһап, тамағы кибеп, бер тамсы һыуға зар булып ятҡанда ла, береһе бер килеп хәлен белмәне, һыу бирмәне, ти, дүрт моңһоҙҙоң.

Көн артынан көн үткән. Әбейҙең хәле көндән-көн ауырая барған. Бер көндө ул хәлһеҙ генә тауыш менән балаларын саҡырып алған да:

— Балаҡайҙарым, мин күп ятмам. Донъя үҙегеҙгә ҡалыр... Шуға тиклем һыу килтереп эсереп торһағыҙсы! — тигән, инәлеп.

— Мә, эс! — тип береһе бер сүмес һыу бирҙе лә, әсәһен онотоп, әйләнде лә уйынға тотондо, ти.

Көҙ еткән. Әсә һаман зарығып түшәктә ята. Ҡоштар теҙелешеп йылы яҡтарға китә башлаған. Шундай көндәрҙең береһендә ҡарт әсә күккә ҡарап ятты-ятты ла, ти: «Мин дә ошо ҡоштар кеүек бер хәсрәтһеҙ осалһам ине... Улар осор-осорҙар ҙа күл буйына ялға туҡтарҙар... Шунда, туйғансы емһенеп, һыу эсеп алырҙар... Шунан тағы осоп китерҙәр», — тип уйланды, ти. Шулай ҡоштарға ҡарап зарығып ятһа, ҡолағына шундай тауыштар ишетелгәндәй була:

— Кил, әйҙә беҙҙең менән!

— Ятма зарығып, осайыҡ бергәләшеп!..

Уғаса бының өҫтөнә бер тун килеп төштө, ти. Әсә, ауырыуын онотҡан кешеләй, ҡалҡып тороп шул тунды кейгәйне — ҡошҡа әүерелеп, тәҙрәнән осоп сыҡты ла китте, ти. Донъяларын онотоп уйнап йөрөгән балаларҙың береһе, был хәлде күреп:

— Әсәйебеҙ ҡош булып осто! — тип ҡысҡырып ебәреүгә, ҡалғандары ла иҫтәренә килде, ти.

— Әсәй!

— Әсәкәйем!

— Китмә, ҡалдырма беҙҙе! Мә, һыу, мә, һыу эс туйғансы!.. — тип, ҡайһыһы сүмес, ҡайһыһы күнәк тотоп, әсәләренең артынан йүгерҙе, ти. Әсәләре туҡтаманы, ергә төшмәне, ти. Бары күк йөҙөнән:

— Һуң инде, балаҡайҙарым, бәхил булығыҙ! — тигән моңһоу тауышы ғына ҡайтты, ти, балаларына.

Дүрт малай дүрт урында тәгәрәп йөрөп иланылар, ти. Баштарын ташҡа бәреп, ҡанатып бөттөләр, ти. Тик бик тә һуң булған шул. Шуға күрә әсә ҡәҙерен ваҡытында белеү кәрәк. Аҙаҡ үкенмәҫлек булһын, балалар.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Текст буйынса һорауҙар төҙөгөҙ, шул һорауҙар буйынса һөйләп күрһәтегеҙ.
2. Балалары әсәһенә ниндәй мөнәсәбәт күрһәтә?
3. Әсәләре ҡош булып киткәс, балалары ниндәй хәлдә ҡала?
4. «Шуға күрә әсә ҡәҙерен ваҡытында белеү кәрәк. Аҙаҡ үкенмәҫлек булһын» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?



# Ун икенсе бүлек

## ЯУҘА ЕҢЕП ҠАЙТЫҒЫҘ!

### ШАЙМОРАТОВ ГЕНЕРАЛ

*Ҡадир Даян шиғыры* *Заһир Исмәғилев музыкаһы*

Башҡорттар китте һуғышҡа,
Оҙатып ҡалды күк Урал;
Ат уйнатып алдан бара
Шайморатов генерал.

Совет иле өсөн яуҙа
Кисте һыуҙы, уттарҙы;
Дошмандарға ябырылғанда,
Утлы дауыл ҡуптарҙы.

Шайморатов яу ҡырында
Дошмандарҙы көл иткән;
Утта янмай, һыуҙа батмай,
Һай, батыр ҙа ир икән.

Совет халҡы Тыуған илдән
Ҡыуҙы яуыз дошманды;
Бер туғандай, үтәнеләр
Изге Ватан ҡушҡанды.

Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай
Һинең улдарың, Урал;
Шулар менән дошман ҡырҙы
Шайморатов генерал.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Ҡадир Даяндың «Шайморатов генерал» шиғырын матур, тасуири итеп уҡығыҙ.
2. Генерал Шайморатовтың хәрби батырлығы тураһында нимәләр беләһегеҙ?
3. Һеҙҙең төбәктә йәки ауылда генерал Шайморатов дивизияһында һуғышҡан кешеләр булғанмы икәнен асыҡлағыҙ һәм улар хаҡында мәғлүмәттәр әҙерләгеҙ.
4. Музыка уҡытыусыһы менән бергә «Шайморатов генерал» йырын йырларға әҙерләнегеҙ.

*Әнүәр* ***БИКЧӘНТӘЕВ***

## БӨРКӨТ ҺАУАЛА ҮЛӘ

*(Повестан өҙөк)*

Ҙур шыршы артында Артюхов менән Матросов ята. Башҡа автоматчиктар ҙа дошман күҙенән яҡшы йәшеренгәндәр. Дошман күҙенән дә, уның пуляһынан да...

Саша бер командирға, бер дошман биләгән ауылға ҡарай: фашистар пулеметтарҙан бер туҡтауһыҙ аталар. Артюхов, әленән-әле башын күтәреп, Чернушки ауылына бинокль аша ҡарап ала ла ошо райондың картаһына күк ҡәләм менән ниндәйҙер билдәләр яһай ине.

Матросов был күк ҡәләмдең серен аңлап алды: рота командиры, разведка биргән мәғлүмәттәрҙе дөрөçләп, фашистарҙың пулеметтары йәшеренгән нөктәләрҙе тикшерҙе.

Тап шул саҡта Матросов үҙенең исемен ишетте. Бер ун метр самаһы арттараҡ, ағас артында, сос хат ташыусы баçып тора ине. Ул ишара менән Сашаны үҙенә саҡырып алды.

— Хатмы?

— Юҡ, бына газета! — тине ул.

— Хәҙер газета ҡайғыһымы ни?

Сос хат ташыусы күҙ ҡыçты:

— Һин башта уҡып ҡара, унан юҡты-барҙы һөйләрһең...

Саша, шыуышып килеп, үҙ урынына, Артюхов янына, ятты ла газетаны командирға бирер алдынан үҙе ҡарап алды. Беренсе биттә Верховный баш командующийҙың бойороғо баҫылғайны: «Дошман ғәскәрҙәренәударҙы көсәйтергә, дошманды арымай-талмай һәм ныҡышмалы рәүештә эҙәрләргә, уға оборона сигендә нығынырға ирек бирмәҫкә, көндөҙ ҙә, төнөн дә ял итергә ирек бирмәҫкә, дошмандың коммуникацияларын өҙөргә, дошман ғәскәрҙәрен ҡамап алырға һәм, ҡорал ташлауҙан баш тартһалар, уларҙы юҡ итергә...»

— Ҡорал ташлауҙан баш тартһалар, юҡ итергә... — тип ҡабатланы Саша.

— Һиңә ни булды? — тип һораны ҡапыл Артюхов. — Тик торғанда ғына ни эшләп һөйләнә башланың әле?

Саша газетаны һуҙҙы. Артюхов тиҙ генә күҙ йүгертеп сыҡты ла:

— Соснинға илтеп бир. Һалдаттарға уҡып өлгөрөргә тырышһын, — тине. — Үҙең тиҙерәк борол...

Саша кире ҡайтып өлгөрөүе булды, уға Артюхов биноклде һуҙҙы:

— Бына ошо ике ҡыуаҡ араһынан туп-тура ҡара әле, берәй нәмә күрәһеңме? — тине.

Саша күрһәтелгән яҡҡа биноклдән ҡараны. Оҙаҡ күҙәтеп торғандан һуң ғына бик шикле ҡалҡыулыҡты күрә алды.

— Дзот, буғай, — тине ул.

— Ҡалай оҫта йәшенгәндәр. Әйтәм, разведчиктар күрмәй ҡайтҡандар... Ана теге ҡуш тирәктән бер аҙ уңғараҡ ҡара әле. Унда тағы бер дзот бар, ахырыһы...

— Өсөнсөһөн дә таптым! — тип ҡысҡырҙы Матросов.

— Ҡайҙа? — Артюхов биноклгә ҡулын һуҙҙы.

— Ана тегендә, сәнскеле сымдар тоташҡан ерҙән аҙ ғына һулдараҡ...

Артюхов, өсөнсө дзотты күреп, картаһына яңы билдә ҡуйҙы.

— Бойороҡто тыңла, — тине ул. — Өсөнсө взвод командиры уң яҡтағы дзотты юҡ итһен, икенсе взвод командиры һул яҡтағы дзотты юҡ итһен, ә беренсе взвод командирын минең янға саҡыр. Соснин өс автоматсы алып килһен.

Артюхов һис көтмәгәндә ҡапыл ғына ҡоро һөйләй башлағанлыҡтан, Саша уға ғәжәпләнеп ҡараны. Ләкин был үҙгәреш хаҡында оҙаҡ уйланып торорға ваҡыт юҡ ине. Ординарец, уҡтай осоп, командирҙың бойороғон үтәргә тейеш.

Ул, эйелеп, ҡыуаҡтар араһынан рота ятҡан ергә йүгерҙе. Барлыҡ взвод командирҙарына ла бойороҡто тапшырып ҡайтҡанда, Артюхов янында Соснин менән өс автоматсы ята ине.

Артюхов уларҙан:

— Мин күрһәткән дзотты күрҙегеҙме? — тип һораны.

— Күрҙек...

— Бурысты аңланығыҙмы?

Ротаға яңы ғына килгән һалдат бөтәһе өсөн дә:

— Аңлашыла, — тип яуап ҡайтарҙы.

Башҡалары ла, аңланыҡ тигәндәй, баш ҡағып ҡуйҙылар.

Соснин ябай ғына итеп:

— Уңыш теләйем! — тине.

Автоматсылар ҡыуаҡлыҡҡа имен үттеләр. Улар йәнәшә шыуышып киттеләр. Саша иптәштәренең артынан күҙен дә алмай ҡарап торҙо. Ул бер туҡтауһыҙ борсола, фашистар ғына һиҙеп ҡалмаһа ярар ине, тип хафалана.

Гвардеецтар, лыпын ятып шыуышып, һаман алға баралар. Ҡапыл унда ла, һулда ла көслө шартлау ишетелде. Артюхов бинокль аша һуғыш яланына ҡарап алды ла:

— Икеһе бөттө. Иң ҡурҡыныс дзот ҡына ҡалды, — тине.

Шартлау артынан уҡ дошман пулеметының тыҡылдауы ишетелде. Ботаҡтар араһынан пулялар һыҙғыра башланы. Саша инстинктив рәүештә башын ҡарға йәшерҙе. Ләкин шунда уҡ Артюховтың ыңғырашыуын ишетеп, башын күтәрҙе: «Командир яраландымы әллә?» — тип хафаланды ул. Ләкин Артюхов һаман бинокль аша ҡарай. Саша ул күҙәткән яҡҡа ҡарағайны, саҡ ҡысҡырып ебәрмәне, хатта күҙҙәрен йомдо. Өс батыр тирәһендә ҡар ҡойоно уйнай. Дошман уларҙы күреп ҡалған!

Артюховтың: «Тағы өс автоматсы саҡырырға!» — тигән бойороғонан Саша тегеләрҙең, башта китҡәндәрҙең,

һәләк булғанлығын аңланы. Яңынан өс ҡыйыу егет саҡырылды. Ул төркөм Ғабдрахманов менән Лалетиндан һәм өсөнсө отделениеның оҫта йырсыһы Сәйфуллиндан тора ине. Улар эйелеп Артюхов янына йүгереп килделәр. Рәшит өҙлөкһөҙ йүткерә ине.

— Һиңә ни булды? — тип һораны Саша.

Ғабдрахманов, аҙыраҡ тын алғас:

— Кисә секретта торғанда һалҡын тейгән, буғай... Зарар юҡ, үтер ҙә китер, — тине.

Артюхов, уларға инструкция биреп бөткәс, Рәшиттең өҙлөкһөҙ йүткереүен күреп:

— Был көйө һине ебәрә алмайым, — тине. — Йүткереүеңде ишетеп, шунда уҡ ут асасаҡтар...

— Иптәш өлкән лейтенант... — тип ул ялына башлағайны, ләкин Артюхов уны ҡоро ғына туҡтатты:

— Соснин, башҡа автоматсы менән алмаштырырға!

— Ә һин, Ғабдрахманов, бында ҡал, миңә кәрәк булырһың, — тине Соснин.

Бына тағы өс автоматсы асыҡ яланға сыҡты. Һалдаттар, бер-береһенән ҙур ара ҡалдырып, шыуышып баралар. Саша, иренен ныҡ ҡыҫып, алға киткән иптәштәренең һәр бер хәрәкәтен күҙәтә... Саша, дуҫына әйләнеп ҡарамайынса:

— Рәшит, былар ҙа барып етә алмаҫтармы икән ни? — тип һораны.

— Етергә тейештәр...

Бер нисә минут тынлыҡта үтте.

— Ана, Лалетин алға сыҡты, — тип Саша иркен тын алып ҡуйҙы.

«Лалетин шундай яҡшы боец булыр, тип һис тә уйламағайным. Күп ашарға, күп йоҡларға ярата торғайны, ялҡау күренә ине. Ҡайһы саҡта уның өсөн беҙгә уңайһыҙ була торғайны. Боевой ғаиләлә нисек үҫкән! Үҙен танып булмай...» — тип уйлап алды.

Пулемет тауышы Сашаның уйҙарын бүлде. Урман ситендә тороусыларҙың бер нисәһе бер юлы көрһөнөп ҡуйҙы.

— Һәләк булды ыласындар... — тине Соснин.

— Юҡҡа ғына мине ебәрмәнеләр, мин барып етер инем, һулданыраҡ барыр инем, — тине Рәшит.

Саша был минутта бер ни ҙә ишетмәй ине. Ул Лалетин өсөн ҡайғыра... Юҡ булды, һәләк булды... Кистәрен Маяковский шиғырҙарын ятҡа һөйләй торғайны. Сәйфуллин да һәләк булды. Походтарҙа хәҙер кем йыр башлар инде? Ҡапыл рота командирының ҡырҡыу тауышын ишетте:

— Матросов!

— Мин!

— Тағы өс автоматсы алып кил!

Ләкин Саша урынынан ҡуҙғалманы, осҡон кеүек османы. Ротныйҙың күҙенә туп-тура ҡараны ла ҙур тәүәккәллек менән:

— Иптәш өлкән лейтенант, бер кем дә кәрәкмәй, мин үҙем барам, — тине.

— Ординарец! — тип Артюхов ҡаты асыу менән әйтә башлағайны ла, Саша инәлгән тауыш менән уның һүҙен бүлде:

— Ысын күңелдән һорайым, гвардеец һүҙен бирәм — барып етәсәкмен! — тине лә, Соснинға өмөт менән ҡарап, өҫтәп ҡуйҙы: — Бына минең барып етәсәгемде парторг иптәш тә раҫлар...

Артюхов был ауыр сәғәттә ординарецының намыҫлы һүҙен баһаламай ҡала алманы. «Ысын гвардеец, — тип һоҡланды. — Бындай егет барып етергә тейеш», — тип уйланы һәм тыныс ҡына:

— Рәхмәт! Ышанам, — тине.

Был юлы командирҙың һүҙендә бойороу ноталары ишетелмәне, ләкин бындай ваҡытта бойороҡ көтөп тороуҙың кәрәге бармы ни?

Шатланып киткән Саша иркен тын алды. Ул командирға рәхмәт әйткәндәй ҡараны ла, ҡапыл тороп, әле генә киткән, ләкин барып етә алмаған иптәштәренең ҡар өҫтөндә ҡалдырған эҙҙәренә ҡараны.

Шунан алға ташланды. Ул, ҡыуаҡлыҡты тиҙ генә үтеп, асыҡ яланға барып сыҡты. Ул ҡыҙыу йүгерә, ләкин гел тура бармай, бер уңға, бер һулға ташлана. Бына ул тәүҙә киткән алты автоматсының мәйеттәрен уҙып китте. Ул һаман, бер уңға, бер һулға тайпылып, юлын дауам итте. Пулеметсыға тоҫҡап атырға ирек бирмәй, ахырыһы...

Йығылды...

Урман ситендә, Артюхов ятҡан ерҙә, полк командиры Гаркушаның ҡалын тауышы яңғыраны:

— Кем ул?

— Александр Матросов, иптәш подполковник, үҙе теләп китте, — тине Артюхов. — Обстановка хаҡында һөйләп бирергә рөхсәт итәһегеҙме?

— Кәрәкмәй, үҙем дә күреп торам.

Матросов йығылғандан һуң бер-ике минут ваҡыт үтте.

— Телефонисты минең янға саҡырығыҙ, — тип Гаркуша бойороҡ бирҙе. — Ротаға ярҙам итмәй булмаç, күреп торам... Алыçтан атыусы артиллериянан ут асмай тура килмәç...

Артюхов, тешен ҡыçып:

— Матросов барып етмәй ҡуймаç, — тине һәм шатлыҡлы тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе: — Тере!

— Тере! — тип ҡабатланы Рәшит.

Гаркуша ҡәнәғәт йылмайып ҡуйҙы.

— Матросов дөрөç һуғыша. Дошманды алданы. Автоматтан тиҙерәк ут асһын ине...

Матросов, полк командирының был аҡрын ғына әйткән һүҙен ишеткән кеүек, автоматын күтәреп, ата башланы. Шул уҡ ваҡытта ҡаты шартлау тауышы ишетелде, дзот өçтөндә ҡара төтөн күтәрелде, тупраҡ киçәктәре, бүрәнә ярсыҡтары һауаға осто.

Гаркуша, дәртләнеп китеп:

— Артюхов, ротаны күтәрегеҙ! — тигән бойороҡ бирҙе.

Ротный йәһәт кенә торҙо ла урман яңғыратып ҡысҡырҙы:

— Беренсе рота, алға!

Гвардеецтар ура ҡысҡырып, ҡар өçтөнән тиҙ генә тороп, ҡыуаҡлыҡҡа атылып уҙҙылар. Ҡайһы берәүҙәр асыҡ яланға ла сығып өлгөргәйне инде. Тап шул саҡта дошман пулеметы йәнә ата башланы.

— Ятығыҙ! — тип команда бирҙе Артюхов.

Һалдаттарҙы киçеп барыусы дошман пулеметына ҡаршы үлемгә алып барыу аҡылһыҙлыҡ булыр ине. Быны Гаркуша ла бик асыҡ аңланы. Ул ротаға, окоптар ҡаҙып, ҡар эсенә ҡасып ятырға ҡушты. Подполковник, ротаның үҙе өсөн дә ҡурҡыныс булған ауыр артиллерияларынан Чернушкиға һәм дзотҡа ҡаршы ут

астырыу өсөн телефон трубкаһына ғына тотонғайны, Рәшиттең әсе итеп:

— Матросов торҙо, граната ырғыта башланы! — тип ҡысҡырған тауышы уны туҡтатты.

Гаркуша трубканы телефонисҡа кире бирҙе лә үҙе биноклен дзот менән бермә-бер һуғышҡан яңғыҙ гвардеецҡа төбәне. Ул Матросовтың ниндәй ныҡышмалылыҡ менән дзотҡа яҡынлашып килеүенән уның көрәште аҙағына тиклем еткерәсәген аңланы. Биноклен түбән төшөрөп, ҡалтыранған тауыш менән Артюховҡа бойороҡ бирҙе:

— Атаканы ҡабатларға әҙерләнегеҙ!

Артюхов: «Рәхмәт, ышанам», — тип әйткән секундтан бирле күпме ваҡыт уҙҙы икән? Уныһын Саша иҫәпләп сығара алмай. Хәйер, уның менән булашырға ваҡыт та юҡ...

Матросов, нисек кенә булһа ла, дошман дзотына барып етеп, уны юҡ итергә тигән бер генә фекер менән йәшәне. Ул үҙ ғүмеренең бөтә аңлы өлөшөн бөйөк эш эшләүгә бағышлағайны; иң ауыр боевой заданиены намыҫ менән үтәргә үҙенең колониялағы иптәштәренә, училище начальнигына бөгөнгө йыйылышта вәғәҙә биргәйне бит.

Дзотҡа ҡаршы көрәшеүҙең еңел түгел икәнлеген Саша яҡшы аңлай. Уның менән дзот араһында мең үлем тора. Ләкин иптәштәренең күҙ алдында алға барыу ниндәй бәхет! Бындай ҙур бәхет һәр ваҡытта ла һәм һәр кемгә лә эләкмәй.

Бына ниндәй ул һуғыш майҙаны! Иптәштәре һалған эҙҙәр күптән инде артта ҡалды. Алда Чернушкиға тиклем ҡар диңгеҙе ята. Анау ҡыуаҡтарға тиклем йүгереп барып еткеһе килә.

Саша ул ҡыуаҡтар артында һаҡланырға теләмәй. Юҡ, уның өсөн ул ҡыуаҡлыҡтар тик яҡындағы маҡсат ҡына. Уға тиклем күп булһа ҡырҡ метр барҙыр. Был яуаплы сәғәттә, еңеү өсөн көрәш барғанда, бер генә метрға ла, хатта секундтың бәләкәй генә өлөшөнә лә яңылышырға ярамай...

Фашистар һаҡ торалар. Улар Сашаны күреп ҡалдылар, буғай. Ул, ҡарға йәйелеп ятып, автоматтан ата башланы.

Ҡулын һуҙып, аяҡтарын айыра, — тик үлектәр генә шулай ята торғандыр. Баш өҫтөнән пулялар оса, улар төрлө яҡта — әле унда, әле һулда, әле баш өҫтөндә, әле аяҡ осонда ҡар бураны күтәрҙеләр. Пулемет шундай буран күтәрә алыр, тип ул бер ваҡытта ла уйламағайны.

Аяҡтарын йыйып, башын ҡар эсенә тәрәнерәк йәшергеһе, туптай йомарланғыһы килә, ләкин хәрәкәт итергә ярамай, үҙенән алда китеп һәләк булған иптәштәре кеүек, ҡыбырламай ятырға кәрәк.

Үлем һаман янда ғына йөрөй. Ошондай ут аҫтында дошманға ут менән яуап бирмәй ятыу ҡыйын. Ләкин түҙергә кәрәк, башҡа юл юҡ. Иренеңде сәйнә лә тын ғына ята бир, Сашок... Уға оса торған балаҫ та, үҙе йөрөй торған итек тә кәрәкмәй, ул хатта Т-34 танкыһының ҡалын броняһы хаҡында ла хыялланмай. Тик бер генә минут атмай торһондар ине. Башында ниндәйҙер фекерҙең өҙөктәре генә йөрөй.

«Бөгөн Рәшиттең тыуған көнө...» — шул иҫкә төштө. Ғәжәп кеше ул Рәшит. Өфөнән киткән көндө Иҫке Өфөләге тау башында торғанда: «Бәхил бул, Өфөм!» — тигәйне. Мин уны: «Бәхилләшмә әле, хушлаш ҡына...» — тип төҙәткәйнем. Бөтөнләй хушлашыу менән ваҡытлыса китеп-ҡайтыу араһында айырма ҙур...

...Лидаға тигән хатты ла яҙып бөтөрмәнем. Чернушкиҙа яҙып бөтөрөргә тура килер. Хәҙер Өфөлә нисек торалар икән? Бына минең һуғышыуымды күрһендәр ине. Ерән Митька көнләшеүенән шартлар ине. Ольга Васильевна оҙатҡанда: «Һеҙҙең хаҡта быға тиклем бөтә әсәләрҙең әсәһе — Тыуған ил хәстәрлек күрҙе. Хәҙер инде һеҙ үҙегеҙ уны яҡларға тейешһегеҙ...» — тигәйне. Ул, Сашаны күрһә, ни әйтер ине?

Сит уйҙарҙы ҡыу. Өфөнө онотоп тор. Алда — дошман!

Саша көсөргәнешле рәүештә, тын да алмайынса, һаҡлыҡ менән генә ҡар өҫтөнән күтәрелә лә автоматтан ата башлай.

«Ни шартланы унда? Әллә артиллеристар ата башланыылармы икән?

Улай булһа, орудиелар бер атыу менән сикләнмәҫтәр ине. Тимәк, шартлау минең атыуымдан булған, моғайын, пуля минаға тейгәндер... Фашистар позицияларын миналар менән уратып алырға яраталар. Һеҙгә шулай кәрәк! Әйҙә шартлағыҙ!..»

Саша арттан, рота ятҡан урман ситенән, «ура!» тигән тауыш ишеткәс, шатланып әйләнеп ҡараны. Тимәк, улар ҙа был шартлауҙы ишеткәндәр. Хәҙер уны ҡыуып етерҙәр ҙә, улар бергәләп Чернушкиға һөжүм башларҙар...

Был шатлыҡ бер генә минутҡа һуҙылды. Тағы пулеметтан атырға тотондолар. «Тағы ҡайҙан аталар? Бына һиңә кәрәк булһа! Дзот тағы йәнләнгән дә баһа!»

Әлбиттә, рота атакаһын туҡтатты. Пулеметҡа ҡаршы кереп булмай.

Фашист пулеметсылары хәйләкәр булып сыҡтылар: ротаны урмандан алдап сығарҙылар ҙа ҡырырға тотондолар... Егеттәрҙе үлтерәләр, күпме кеше һәләк була!

«Моғайын, Артюхов менән иптәштәрем мине тиргәйҙәрҙер, — тип уйлап алды Саша, автоматын уң яҡ ҡулынан һул ҡулына күсереп. — Автоматтың хәҙер кәрәге юҡ, дискылар буш. Ни эшләргә? Туҡта, гранаталар бар бит әле!» — тип иҫенә төшөрҙө ул һәм алға табан бик ҡыҙыу шыуыша башланы.

Ара яҡыная. Хәҙер гранатаны ырғытһаң, дзотҡа тиклем еткереп булыр кеүек. Тағы ла аҙ ғына шыуа төш!

Саша терһәгенә таянып күтәрелде лә бер аяғына тубыҡланған килеш бер-бер артлы өс граната ырғытты. Шунда уҡ өс шартлау гөрһөлдәне.

Дзот бер минутҡа тынып ҡалды.

Бер минут уҙғас, дошман пулеметы тағы ата башланы. «Ни эшләргә һуң? Иптәштәрҙе бәләнән ҡотҡарырға кәрәк. Дошман яп-яҡын бит!»

Сашаның башында ҡыйыу һәм тәүәккәл фекер тыуҙы: «Автоматтан ата алмайым, сөнки дискылар буш... Гранаталарҙы ырғытып бөттөм... Ләкин минең ғүмерем бар бит әле. Дзотҡа барып етеп, шул ҡәһәр төшкән амбразураны ҡаплап була ла баһа!..»

Саша ҡапыл һулға ташланды. Хәҙер тар амбразуранан уны күрмәйҙәр. Саша эре аҙымдар менән алға йүгерергә тотондо. Ул дошман уты аҫтынан сыҡты, уға бер кем дә ҡамасаулай алмай. Чернушкиҙағылар атып еткерә алмаҫтар, пулемет өсөн алыҫ...

Был ҡалған юл Сашаға оҙон булып күренде. Дзотҡа барып еткәнсе, бөтөн бер ғүмер үткән кеүек тойолдо. Тағы бер нисә ынтылаһы ҡалды.

Ана амбразура!.. Унан татылдап, ҡыҙарған пулемет көбәге сығып тора. О, ни тиклем яуызлыҡ ул көбәктә! Ул үлем сәсә!.. Егеттәрҙе унан ҡотҡарырға кәрәк. Улар Чернушкиҙы азат итергә һүҙ бирҙеләр бит! Комсомол йыйылышында юҡҡа ғына ант итмәнек...

Саша һығылмалы хәрәкәт яһап аяҡ үрә баҫты ла ҡапыл дзоттың ҡарайып торған амбразураһына ташланды.

«Бына яҡшы булды, тәки килеп еттем!..»

Ун туғыҙ йәшлек комсомолец, гвардия рядовойы Александр Матросовтың һуңғы һүҙҙәре шул булды...

* * *

Ни өсөндөр команда һуңлап бирелгән кеүек булды. Моғайын, Матросовтың амбразураны үҙ кәүҙәһе менән ҡаплауын күҙәтеп торған Рәшит өсөн ул шулай тойолғандыр.

Дуҫының күҙ алдында һәләк булыуын күргән Рәшит, Чернушкиға беренсе булып барып инергә тигән берҙәнбер теләк менән ашҡынып, янып, дәртләнеп, алға йүгерә ине.

Ул үҙен үҙе йыуатырға кереште: бәлки, Саша тик яраланғандыр, бәлки, терелер әле. Уға ярҙам итергә кәрәк. Ул амбразура янында бер үҙе ята бит!

Бына ул ошо ерҙән шыуышып барҙы... Ул ваҡиға бер нисә минут ҡына элек булып уҙҙы. Хәҙер инде... уға ни булды икән?

Рәшит, атылып барып, тубыҡланды ла ҡолағын Сашаның күкрәгенә терәне. Һулышы бармы-юҡмы икән?

— Саша!

Матросовтың күҙҙәре асыҡ, әйтерһең дә, ул ял итергә генә ятҡан. Йүгергән, әлбиттә, бик арыған, бына хәҙер ял итә. Ысындан да ул үлдеме икән ни?

— Сашок!

Унының янына йүгереп килеп еткән Соснин, бәләкәй генә өс мөйөшлө көҙгө биреп:

— Ауыҙы янында тотоп тор, — тине.

— Кәрәкмәй! — тип ярһыны Рәшит.

Ул саҡ ҡына ярҙам итһә, бәлки, дуҫы тороп китер төҫлө тойола ине уға һәм ул, һул ҡулы менән Сашаның ҡултыҡ аҫтынан ҡосаҡлап алып, күтәрергә тырышты. Тик шунда ғына ул Матросов кәүҙәһе аҫтына аҡҡан бик күп ҡан күрҙе.

Николай Соснин көҙгөһөн тиҙ генә кеҫәһенә йәшерҙе лә башынан бүркен һалды:

— Уға хәҙер бер ни менән дә ярҙам итә алмайһың. Тиҙерәк Чернушкиға етеп, Саша өсөн үс алырға кәрәк, — тине.

— Дөрөҫ — үс алайыҡ!

Ғабдрахманов, һикереп тороп, Соснин артынан йүгерҙе.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Чернушки исемле ауыл һеҙгә нимәһе менән таныш? Ул ҡайһы өлкәгә ҡарай?
2. Ротаның һөжүмгә әҙерлеге — дошман дзоттарын табыу һәм уларҙы юҡ итергә тырышыу хаҡында һөйләгеҙ.
3. Ни өсөн Матросов автоматсыларҙы өсөнсө тапҡыр саҡырыуға ҡаршы төшә?
4. Дошман дзотына бер үҙе барырға рөхсәт алғас, унының шатланыуын нисек аңлайһығыҙ?
5. Рота ни өсөн ике тапҡыр атакаһын туҡтатырға мәжбүр була?
6. Саша Матросов ғүмеренең һуңғы минуттарында ниҙәр хаҡында уйлана?
7. Ни өсөн ул дзотты үҙенең кәүҙәһе менән ҡапларға ҡарар итә?

*Тимергәле* **КИЛМӨХӘМӘТОВ**

## ТУРАЙҒЫР

— Бына шулай бер алыш ваҡытында беҙҙең бер төркөм һалдаттар ҡамауға эләкте. Немецтар, пленға алып, беҙҙе ҡайҙалыр алып киттеләр...

Шунан. Килтереп концлагерға яптылар. Ул шулай итеп эшләнгән, фашистар концлагерҙар төҙөү өсөн генә донъяға яратылғандар, тиерһең. Сәпсек тә үтеп керерлек түгел. Ҡарлуғас ояһындай ғына тәҙрәләр. Улары ла сәнскеле тимер сыбыҡ менән ҡоршалған, күршеңә ҡарайһың — арала сәнскеле тимер сыбыҡ; ярты сәғәткә тышҡа алып сығалар — сәнскеле тимер сыбыҡ; тышҡа сыҡҡанда, исмаһам, бер күреп ҡалайым тип, ҡояшҡа ҡарайһың — баш осонда сәнскеле тимер сыбыҡ.

Бындағы бөтә нәмәләр һары: стеналар һары, башлыҡ һары, ҡаталар һары. Оҙағыраҡ йәшәһәң, был һарының йөҙгә лә күсәсәге, һарыға һабышасағың күренеп тора. Был йәһәттән эшкә йөрөгән кешеләрҙең хәле арыуыраҡ. Арыһалар арыйҙар, ә көнө буйы тышта, зәңгәр күк, сағыу ҡояш аҫтында. Тик шуныһы — күп ваҡыт эшкә китеүселәргә ҡарағанда эштән ҡайтыусылар аҙыраҡ була. Ҡаҡ таҡталы байтаҡ һикеләр төнгөлөккә буш ҡала. Уларҙа бөгәсә генә кемдәрҙер төн үткәргәйне. Бөгөн улар юҡтар. Улар урынына яҙыуҙар ғына бар. Ҡалаҡ осо менән соҡоп, алюмин кружка һыры, тырнаҡтар менән сыйып яҙылған яҙыуҙар; өс хәрефтән торған яҙыуҙар; дүрт-биш хәрефтән торған яҙыуҙар: «Иван», «Саша», «Петя», «Андрей»; ғәрәпсә яҙылған яҙыуҙар: «Әхмәт», «Абдулла», «Сәғит», «Рәджәп»; латинса яҙылған яҙыуҙар: «Хәбибулла», «Яхъя», «Ғәбдерәшит»; инде юйыла төшкән яҙыуҙар; ҡарайырға ла өлгөрмәгән яҙыуҙар. Исемдәре яҙылған был кешеләр күптән бындағы һикеләр менән мәңгегә хушлашҡандар. Шулай ҙа ҡаҡ таҡталар, таш стеналар уларҙың исемдәрен һаҡлай. Уларҙың араһында төрлөләре булғандыр. Тик улар бөтәһе лә Кеше булған. Шуға ла төнгөлөккә берәй һике буш ҡала икән, үҙ аяғы менән йөрөй алған һәр тотҡон уның эргәһенә барып, ҡаҡ таҡталағы, таш стеналағы яҙыуҙарҙы барлай. Был яҙыуҙарҙың һәр береһе тереләрҙең

күңелендә аяуһыҙ көрәштә ҡорбан булғандарҙың нәҙере булып урын ала.

Бер көн мине лә эшкә йөрөүселәр рәтенә баҫтырҙылар. Китер алдынан һикеләге исемде һыйпайым. Әйләнеп ҡайта алмаясағым күңелемә килеп тора: ни өсөн тиһәң — ҡыл өҙөрлөк тә хәлем юҡ. Ә эшкә йөрөүселәрҙең һөйләүе буйынса, кем эш урынында йығыла — уға үлем.

Алып сыҡтылар ҙа көпләүле машинаға тултырҙылар. Дүрт мөйөштә дүрт һаҡсы. Ҡайҙа, ниндәй эшкә алып баралар? Минең ҡулдан килерлекме? Шул тиклем белгем килә — һөйләшергә ярамай, хатта ҡыбырларға ла рөхсәт юҡ. Автомашинаның һелкенмәйенсә шыма ғына барыуына, йыш-йыш ҡына туҡтауына, машина-маҙар тауышына ҡарағанда, беҙ ҡала буйлап китеп барабыҙ.

Күпмелер үткәс, беҙ тейәлгән автомашина оҙон итеп ҡысҡыртып туҡтаны. Ишекте асып, төшөргә бойороҡ бирҙеләр. Баҫҡыс юҡ. Тотҡондар автомашинанан ергә һикерәләр. Һаҡсылар ашыҡтыралар. Мин дә ишеккә яҡынаям. Йөрәк жыулай. Бына ишек. Түбәндә иптәштәр тора. Алға ынтылам. Тик ниндәйҙер көс мине кире тартты. Тағы ишеккә иңкәйҙем. Шул саҡ арттан кемдер тибеп ебәрҙе. Мин түбәнгә остом. Күҙҙәремде йомдом. Аяҡ, аяҡ! Түҙерме ул? Ләкин ни эшләптер мин ташҡа түгел, ниндәйҙер йомшаҡ нәмәгә төштөм. Күҙҙәремде астым — иптәштәремдең ҡулында инем мин! Нимә тип кенә лә әйтергә белмәйенсә, уларға ҡараным. Улар, баш ҡаҡтылар ҙа, эйәк остары менән алға ымландылар. Сафҡа теҙҙеләр. Ҡуҙғалдыҡ. Беҙҙең алда бейек ҡойма менән уратып алынған ҙур майҙан ине. Ҡойма башынан өс рәт сәнскеле тимер сыбыҡ йөрөтөлгән. Ҡапҡа башында ат һүрәте тора. Тимер тауышы менән тулған, тимер менән ҡоршалған шундай ҡалала — ат. Ни өсөн ат? Ни өсөн танкы ла, самолет та түгел, ә ат? Моғайын, берәй төрлө хәрби серҙе һаҡлар өсөн юрамал ҡуйылғандыр, тим үҙемә үҙем.

Ҙур ауыр ҡапҡаларҙы асып, беҙҙе эскә үткәрҙеләр. Шунда уҡ үҙемдең яңылышҡанлығымды төшөнөп алдым: был ысынлап та ипподром ине. Уртала йәм-йәшел майҙан. Уның ситенән, түңәрәк яһап, ярыш юлы ҡарайып ята. Юл ситенән тәпәшерәк кенә ҡойма тотолған.

Ҡойма ҡырынан баҫҡыс-баҫҡыс булып ултырғыс күтәрелгән. Ҡаршы яҡтағы ултырғыстар ҡутарылып ташланған.

Ипподром. Үҙебеҙсә әйткәндә — бәйге яланы! Күңелдең ҡайһылыр ҡылы йылйырап ҡуйҙы ла бит, ни эшләйһең. Бәйге яланы булыу менәнме ни-и-и-и. Шулай ҙа ни эшләптер йәшәүгә булған ышаныс арта төштө. Ғүмер буйына ҡанға һеңгән ғәҙәттән килгәндер был, моғайын. Атты бит беҙҙең халыҡ элек-электән йәшәү сығанағы итеп, ауыр юлдарҙа тоғро юлдаш итеп ҡараған. Ир ҡанаты ат булыр, тигән.

Беҙҙе ипподромдың ултырғыстары ҡутарылып ташланған яғына алып киттеләр.

— Эш урының бына ошонда булыр инде, — тине ишетелер-ишетелмәҫлек кенә итеп йәнәш барыусы белорус егете. — Бик күңелһеҙ булмаҫ, тип уйлайым. Хәҙер аттар килеп сығыр.

Был һүҙҙәрҙең үҙебеҙҙең яҙмыштан әсенеп әйтелгәне аңлашылып тора ине. Ысынлап та, беҙ бәйге яланында түгел, таш ҡапсыҡта инек. Алда рәт-рәт булып траншеялар теҙелеп ята. Берәү, икәү, өсәү. «Көрәк тотоп, ер соҡой алырһыңмы?» — Күршем күҙенең ҡырыйы менән генә миңә ҡарай. Әкрен генә өндәшәм: «Ә ни өсөн соҡоталар быларҙы?» Күршем, был соҡорҙарға яңы трибунаның нигеҙе ҡойоласаҡ, тип аңлатты. Уғаса бойороҡ яңғыраны. Исеме сыҡҡан бер кеше соҡор ситендәге пирамиданан көрәк эләктереп ала ла соҡорға һикерә. Миңә лә сират етте. Көрәктең һабын шәйләп алдым: уға ҡара буяу менән свастика төшөрөлгән. Ҡайҙа ҡарама, бер үк нәмә: ҡапҡа башында ла шул, трибуна өҫтөндә елберләгән байраҡта — шул, һаҡсыларҙың еңдәрендә шул уҡ свастика. Әйтерһең, тирә-яҡты үрмәксе ауы уратып алған да, уның һәр бер бүлегендә мең йәшәр үрмәксенең кәкре-бөкрө имәнес һәрмәүестәре тырпайып тора. Ситтән өсөнсө соҡорға эләктем. Мин төшкәндә унда бер кем дә юҡ ине әле. Соҡор минең билдән. Тирә-яҡ күренә, һаҡсы яҡынлашып килә. Килеп еткеләгәнсе бер-ике көрәк булһа ла ташлап ҡалырға ниәтләнеп, таҙа аяғым менән көрәккә баҫтым. Ул ғышлап бәкәләһенә саҡлы ергә сумды. Көрәкте ҡайырып алғас, артҡа янтая бирҙем дә көс менән өҫкә һелтәп ебәрҙем. Көрәкте ҡабат

ергә батырыуым булды, ниндәйҙер ҡаты нәмә, ҡолаҡ төбөнән шыжлап, ялланып арҡа һабаҡ буйына ятты. Арҡамды тотоп, артҡа саңҡайҙым. Баш осонда ауыҙынан төкөрөктәр сәсеүсе фашист һалдаты тора ине. Бер ҡулында ҡоростан эшләнгән пластинка, икенсеһендә автомат. Бер миңә ҡарап, бер ерҙәге бер көрәк тупраҡҡа күрһәтеп, әсе нәҙек тауыш менән сыйылдай. Нимә һөйләгәнен һис аңларлыҡ түгел. Әлдә, әмәлгә таянғандай, нәҡ шул мәлдә беҙҙең бер егет килеп төштө. «Йәшәүҙән туйҙыңмы әллә, — ти теге миңә, — бында тупраҡтың бер бөртөгөн дә ергә ташламайҙар. Тик носилкаға тейәргә». Иҫәнгерәп торам да тирә-яғыма ҡарайым. Ысынлап та, соҡор ситтәрендә лә, ипподромдың башҡа ерҙәрендә лә тупраҡ әҫәре күренмәй. Ҡапыл ҡояш болот аҫтында ҡалып, донъя ҡараңғыланып киткәндәй булды. Соҡор төбөнә сүгәләнем. Миңә, тор, иптәш, носилкалар алып килделәр, тип ҡаты ғына итеп төрттөләр. Беҙҙең тәңгәлгә носилкалар ҡуйылғайны инде. Бөртөгөн дә түкмәҫкә тырышып, тоҫмаллап ҡына ырғытам. Тәүге көрәктәр бик үк тура төшмәне. Носильщиктарҙың береһе миңәрәк килеп: «Бик ҡабаланма. Таҫыл менәнерәк ташла», — тине. Һалмағыраҡ итеп ырғыта башланым. Носилка тулды. Егеттәр ҡуҙғалдылар. Улар урынына икенселәре килде. Йәнә өсөнсөләре. Тын да алып булмай. Баш ҡалҡыттыңмы — һаҡсылар килеп етә һала. Эттән алып эткә һалып һүгәләр, баш өҫтөндә ҡорос пластинкалар шыжлай. Шулай күпме эшләгәнбеҙҙер инде, бер ваҡыт шау-шыу ҡупты. Мин күтәрелеп, тауыш килгән яҡҡа боролдом. Ни күҙем менән күрәйем — ғәжәйеп бер ат атлығып килә былай табан. Соҡорҙар буйлап теремек бер геүләү үтте — кешеләр аттың һылыулығына һоҡландылар шикелле. Алғараҡ һонолдоҡ та телһеҙ ҡалдыҡ. Беҙҙең алдыбыҙҙа һөлөк кеүек ысын ат ине. Нәҙек оҙон кәүҙәле, алғыр аяҡлы, ҡамыш ҡолаҡлы, көмөш яллы туры айғыр. Маңлайында, туп-тулы ай төҫлө, йомро тәңкәһе балҡый. Ул, аяҡтарын уратып-уратып һалып, майҙан урата елдерә. Артынан туҙан туҙғый — нимәлер һөйрәлеп килә шикелле. Был — кеше булып сыҡты. Ул әленән-әле аяҡҡа баҫырға итеп ҡалҡына. Уның һайын туры айғыр, өркөп китеп, алғырыраҡ юрта. Кеше тағы тәгәрәй. Беҙ-

ҙең турыла туры айғыр уны таҡта өйөмөнә шундай иттереп килтереп зыңҡытты — дилбегә өҙөлөп, әллә ҡайҙа осто теге йән эйәһе. Айғыр артынан тиргә батып, баҫтырып килгән һалдаттар был кешене уратып алдылар ҙа ҡотороноп күкрәген тапарға тотондолар. Типкеләнеләр-типкеләнеләр ҙә, тапанылар-тапанылар ҙа тағы йүгерҙеләр.

Бер төркөм һалдат туры айғырға ҡаршы төштө. Айғыр, кәүҙәһен һығылдырып, ялтанып, йәнә беҙгә табан боролдо. Инде был һалдаттар дилбегәләрен тағатып, ике осонан тотҡан көйө, йәйә һымаҡ булып, уға ҡаршы атланылар. Туры айғыр уларға уҡ кеүек атыла. Күҙ асып йомғансы килеп тә етте, дилбегә өҫтөнән осоп үтеп тә китте, тояҡ аҫтарынан тупраҡ ҡына тупарылып ҡалды.

Үҙҙәре генә булдыра алмаҫын аңлаған һалдаттар тотҡондарҙы ла күтәрҙеләр. Беҙ дилбегә, арҡан, еп-йышыуҙарға тотоноп, алдан барабыҙ, арттан, мылтыҡтарын беҙгә тоҫҡап, һалдаттар килә. Мөйөшкә ҡыҫырыҡлана барған һайын, туры айғыр дыуамалыраҡ туҙына. Бына ул, ялдарын торғоҙоп, ҡолаҡтарын шымартып, беҙгә табан атылды. Ләкин кешеләр айырылманы. Туры айғыр, күкрәге менән кешеләрҙе һөҙөп тигәндәй, артҡа боролдо. Мөйөш ҡыҫылғандан-ҡыҫыла барҙы. Туры айғыр ҡоймаға етеп туҡтаны, һауа яңғыратып кешнәгәс, беҙгә әйләнде. Ҡапыл үрәпсеп, арт аяҡтарына баҫты, муйынын көҙөрәйтеп, алға атылды. Ат түгел, өйрөлөп-өйрөлөп ҡойон килә ине беҙҙең өҫкә. Ҡылыс менән саптылармы ни — беҙ икегә айырылдыҡ. Биттәргә ат еле генә бәрелеп ҡалды. Кемдәрҙер аяҡ аҫтына йығылды. Ә терелләрҙе улар өҫтөнән алға ҡыуҙылар. Беҙ ат артынан йүгерәбеҙ. Артта, йөрәк өҙгөс тауыш сығарып, күкрәктәре йәнселгән, бөйөр-бауырҙары иҙелгән, аяҡ-ҡулдары һынған тотҡондар ҡалды. Тағы нисәүебеҙҙең башына етер был көмөш яллы туры айғыр, нисәүебеҙҙең? Юҡ, былай ярамай. Берәй әмәлен табырға кәрәк. Мин ҡулымдағы йомшаҡ сүс арҡандың осон ныҡ итеп үҙемә тарттым. Арҡан бушарҙы, уны атлап барған ыңғайҙа йомарлап, осона элмәк яһаным. Был элмәкте уның муйынына ташлаясаҡмын. Дөһөрләтеп һөйрәтеп йөрөтөр. Аяҡ-ҡулымды ла һындырып бөтөрөр, тик башҡа кешеләрҙе тапай алмаясаҡ, боғалаҡ барыбер уның муйынын һығасаҡ.

Туры айғыр баяғы ҡылығын ҡабатланы. Тапалыуҙан ҡурҡҡан кешеләр был юлы уның тәүге дәжжалланыуынан уҡ юл бирҙе. Ул, ҡойроғон сәнсеп, ялдарын ялбырата-ялбырата кешеләр араһындағы тар ғына араға килеп инде. Ни булһа ла булды — минең тапҡырға килеп тә етте — ырғыттым арҡанды.

Боғалаҡ, дүңгәләк яһап, һауала аҫылыныуы булды, туры айғырҙың алға һонолған нәҙек оҙон башы кереп тә ҡапты. Уңарса үҙем дә йәлп итеп ҡалдым. Ҡыҙыулығы менән даһырлатып алып китте теге мине. Ҡуш ҡуллап арҡан осон уратып тотҡан көйөнсә, бөтә көскә артҡа тартылам. Ә айғыр быны бар тип тә белмәй. Ергә терәлергә тип, аяҡтарымды алға һоноуым булды, осоп барып та төштөм. Айғыр мине һөйрәтеп алып китте. Тырышып-тырмашып торҙом. Ул арала йәнә берәү йәбеште арҡанға. Айғыр әкренәйгәндәй булды ла тағы ырғыны. Шулай ҙа баштағы шикелле үк шашып тартманы арҡанды. Әле тегеләй, әле былай тайпылырға итеп ҡарауы бушҡа була башланы. Тора-бара беҙ өсәү булып киттек. Берәүҙән икәү яҡшы, икәүҙән өсәү яҡшы. Ат йомшарғандан-йомшарҙы. Әммә арҡанды ысҡындырмайым. Ҡул киҫелеп килә. Күҙгә аҡ-ҡара күренмәй, айғырҙың имәнес итеп ғырылдауы ғына ишетелә. Мин уның һайын аяҡтарымды нығыраҡ һөйрәттем. Тамаҡ кипте. Донъя ҡараңғыланды...

Күҙемде асҡанда, айғыр ҙа, һаҡсы һалдаттар ҙа юҡ ине. Беҙҙе ипподром уртаһындағы сиҙәмгә сығарып һалғандар. Тирә-яҡта аяҡ-ҡулдары бәйләнгән, башы-күҙе күгәргән кешеләр. Ҡайһыһы тубыҡланған, ҡайһылары ултырған, ҡайһылары ята. Ҡалҡынып тороп ултырыуым булды, эргәмә шыла-тәгәрәй ике-өс кеше килде. «Туры айғыр байтағыбыҙҙы тәгәрәткән икән», — тим тирә-яҡты ҡарап. Тегеләр: «Һин муйынынан ҡороҡлап туҡтатмаһаң, байтаҡтарҙың башына етә ине әле ул», — тиҙәр.

— Ә бына был теге таҡта өйөмөнә бәрелеп ҡалған кеше, — тинеләр, күршемде күрһәтеп. Әҙәм төҫө ҡалмаған бахырҙа. Ҡара ҡан ҡоҫа. Ҡулдан килгәнсә ярҙам итеп ҡараныҡ. Тик ул төҙәлерҙән уҙғайны. Беҙ унан ошоларҙы ғына белеп ҡала алдыҡ: туры айғыр — төркмән аты. Бөтә донъяға атаҡлы тоҡомдан. Мәскәү эргә-

һендә һуғыш яланынан эләктергәндәр. Исеме — Сокол. Бик яман холоҡло. Фашистар унан ярыш аты әҙерләмәкселәр. Тик, тотонорға үҙҙәре баҙнат итмәйенсә, тотҡондарҙы ҡушҡандар.

Эштән һуң иптәштәрем машинаға ултыртып үҙҙәре менән алып ҡайттылар. Ул төндө серем дә итмәй үткәрҙем мин. О ул төн! Мәңге онота алмам мин ул төндө. Аяҡ-ҡулдары һынған, бауыр-бөйөрҙәре һытылған, күкрәк-ҡарындары тапалған кешеләрҙең йомарланып-йомарланып тартышыуы; хужаларын көтөп өнһөҙ ҡалған рәт-рәт буш һикеләр; уларҙың ҡаҡ таҡталарына тупылдап тамған күҙ йәштәре... Халатымды бөркәнеп, күҙҙәремде йомам. Ләкин береһе лә күҙ алдынан китмәй: һары халатлы тотҡондар йүгерешә, мылтыҡтарын һелтәй-һелтәй һаҡсылар үтә, хатта уларҙың өҙөп-өҙөп әйткән аңлайышһыҙ тауыштары ишетелгән шикелле. Ҡапыл ат сабып килеп сыға. Торғаны әкиәттәге ише ат. Тауҙарҙан туп тояҡтар, даланан һөйкөмлө һын, зәңгәр күктән зәңгәр күҙ алған, маңлайына, төркмән ҡыҙҙарының йомро асыҡ йөҙө төҫлө, йомро тәңкә ҡундырған, тау битләүендәге ҡылғандай көмөш ял үҫтергән төркмән айғыры. Тик шул хәтлем кешенең башына еткәндән һуң ни бысағыма һинең матурлығың?! Шундай яуызлығыңдан һуң һинең бер пуляға торорлоҡ ерең дә юҡ. Йәнемде ҡыйған йән эйәһен зиһенем таралғансы ҡәһәрләп ҡарғайым. Эс бушап ҡалғандай була. Туры айғыр тағы килеп сыға. Күҙҙәремде нығыраҡ йомам. Тик уның һайын һомғол һын асығыраҡ күренә, һығылып торған оҙон нәҙек кәүҙә, шәмдәй төҙ аяҡтар, аҡ бәкәл, тулы ай кеүек аҡ тәңкә. Көмөш тауышы ла ишетелеп киткәндәй итә. Шул саҡ кемдер ҡолаҡҡа ғына шыбырлай башлаған шикелле: «Күрәһеңме, Ғәйзулла, беҙҙең халыҡ ниндәй айғыр үҫтергән. Ат түгел, дөлдөл бит был, дөлдөл, һеҙ, ҡанаты ҡайырылған ҡош кеүек, Тыуған илдән айырылған тотҡондар, бөгөн тыуған ер төҫөн, тыуған ер йәмен күргәндәй булдығыҙ. Туры айғыр бөгөн һеҙгә үҙ иркең, үҙ ғорурлығың өсөн ҡайһылай көрәшергә кәрәклекте күрһәтте. Ә һин ҡарғайһың. Кемгә-кемгә, ә һиңә, башҡорт кешеһенә, тау-таш араһында үҫкән аттарҙың ғәҙәте яҡшы таныш булырға тейеш: иркенлек-

те, киңлекте, тай-тулаҡты ярата бит улар. Бында уларҙың береһе лә юҡ: таш келәт, ҡоймаланған өй урынындай ер, шыжлап торған ҡорос пластинкалар. Ошондай шарттарҙа ул ни эшләргә тейеш?! Кеше һөйәктәре аша булһа ла иркенлеккә, ирекккә атлығыу — берҙән-бер юл. Беҙҙең әрнеүебеҙҙе аңғармай, әрнемәй, тип уйлайһыңмы, туры айғырҙың йөрәге?! Аңлай, әрней, ләкин фашистарҙың ҡанһыҙлығы, ажарлығы уға бөтә кешеләрҙе дошман, ҡан эсеүсе иткән. Таш һарайҙар, һуйыр-таш төҫлө һытыҡ йөҙҙәр уның йөрәген айлап түгел, көнләп ташҡа әйләндерә. Зәңгәр күҙҙәрен нәфрәт уты баҫа. Күрмәйҙәр ул күҙҙәр, белмәй ул бындай йөрәк юлдарын. Ә юлдар бар. Туры айғырға уны тик кешеләр генә күрһәтә ала. Ат ятраткан, ирек һөйгән, ҡыйыу йөрәкле ир-егеттәр менән һинең кеүек, Ғәйзулла дуҫ, ат таҫылын белгән кешеләр генә. Мин быны эшләй алманым. Төркмән булһам да, Сокол менән туған телдә һөйләшһәм дә, эшләй алманым. Күргәнһегеҙҙер инде, мине ҡайһылай иттереп таҡта өйөмөнә килтереп бәргәнен. Көсөм юҡ ине шул минең, туҡмап бәҫемде алғайнылар. Ә Сокол ҡеүәтле ирҙәрҙе генә иш итә».

— Бер-ике көн үткәс, мине комендантҡа саҡырттылар. Беҙҙең комендант, уларҙыҡынса әйтһәк, лагерфюрер, Ганс тигән бер кеше ине. Таҙа кәүҙәле, төҫкә бик матур нәмә. Тулы һары йөҙлө, эре һары сәсле, ҡаштары менән керпектәренә тиклем һары. Руссаны һыу һымаҡ эсә. Тик «л» өнөн, наҙлы бисәләр шикелле, йомшаҡ итеп әйтә. Ул бөхтәлекте ятратыусы булып ҡыланған кеше була торғайны, һаҡал-мыйығы яманыраҡ үҫкән кешене күрҙеме — строй алдына сығарып, Рәсәйҙә генә шулай ен кеүек йөрөйҙәр, рус — Иван, быны быларҙы ҡырырға кәрәк, тип, бирсәткәһе менән сикәләрҙе, эйәк аҫтарын, танау остарын ышҡый. Ә бирсәткәһенең бармаҡ остарынан нәҙек кенә осло ҡорос энәләр сығып тора. Улар шул тиклем әрнетеп сыялар, бөтә тән ҡороша. Ганс көлгән була. Йомшаҡ ҡына итеп һыпырғанға ла түҙмәйһегеҙ, йәнәһе. Ошо рәүешле тотҡондарҙы «тәртипкә килтереү» көн һайын һәм бөтә блоктарҙа ла ҡабатлана. Комендантҡың көн яҙлыҡтырмай эшләгән йәнә бер эше — бүлмә елләтеү ине. Килеп керә лә, оҙон

төҙ танауын сирыштырып, ҡысҡырып ебәрә: серегәндәр, һаҫышып ятаһығыҙ, асырға тәҙрәләрҙе! Форточкалар, ишектәге бәләкәй тәҙрәләр асыла. Юрамал ҡоролған ҡеүәтле вентиляторҙар геүләшергә керешә. Үтәнән-үтә ел өрә башлай. Бүлмәләргә бер яҡтан дымлы һауа эркелә, икенсе яҡтан эстәге йылы һауа ағыла. Таш ҡапсыҡҡа тулған дымлы һауа ҡайҙа барып бәрелергә белмәй өйрөлә. Бүлмә, эт араны һымаҡ, һалҡыная. Ел үҙәккә үтә. Бөтә тән зәңкей, ҡайҙа керер урын табып булмай. Елләтеү сәғәт-сәғәт ярымға һуҙыла. Тотҡондарҙың ҡобаралары осоп, төҫтәре ҡасҡас ҡына, ябыла тишектәр.

Бына шул комендантттың үҙе саҡырткайны инде мине. Тора һалып, халатты алдым. Ҡулдың миҙәте юҡ, һиҙәптәрҙе һис ҡаптырып булмай. Ни өсөн саҡырта? Билдәһеҙ. Әммә тиктәҫкә түгел. Иптәштәрем менән, ятҡан һикем менән, уларҙағы исемдәр менән һаубуллашам.

Төртөп ебәрҙеләр. Ҡапҡаға бәрелдем. Унан ишек, яҡты бүлмә. Тәҙрә төптәрендә көршәк-көршәк гөлдәр. Иҙән-түбә буяулы. Иҙән уртаһында дүрткел өҫтәл. Уның артында — Ганс. Мин, честь биреп, үксәләрҙе шаҡылдатып, докладывать итәм: «Һеҙҙең бойороғоғоҙ буйынса, гер комендант, хәрби тотҡон Ғәйзулла Йәнғәлин килде». Ул ҙур һоро күҙҙәре менән мине баштан-аяҡ һөҙөп алды. Шунан торҙо, йомшаҡ ҡына итеп ҡаршыма килеп баҫты ла, уң итеген, йәлп иттереп, тубыҡ тәңгәленән аяҡ арама тыҡты. Ялтырап торған итек башын тегеләй-былай әйләндергеләп ҡарағас, ҡулын артына ҡуйып, ҡабат өҫтәл артына барып баҫты, өндәште: «Кавалерист?!» Һорау инеме был, үҙенең уйын раҫлау инеме — бағымлап булырлыҡ түгел ине. «Так точно, кавалерист», — тим. «Күренеп тора, — ти комендант, — аяҡ арандан мотоцикл менән үтерлек». Ганс мыҫҡыллап ауыҙын йырҙы. Ҡамыт аяҡлыҡҡа ҡамыт аяҡ инде мин — уныһын танмайым. Тик ҡайһылай ҡылана бит фрицың. Түҙмәнем. «Нимә менән үтерлек булһа ла, кешенеке түгел, үҙемдең аяҡ», — тим тегегә. Комендант миңә урын тәкдим итә. Бында ла кешелекле кеше булып ҡыланыуын ташламай икән, ҡәһәрең. «Түбәндән үргә ҡарауҙан үрҙән түбәнгә ҡарауы уңайлыраҡ», — тип ултырғыстан баш тартам. Теге миңә күҙҙәрен ялты-

ратып бер ҡарап алды ла һорау бирҙе: «Ипподромда атты һин тоттоңмо?» «Так точно, мин тоттом». Ганс ырғып торҙо. Теш араһынан ыҫылданы: «Ә һин шуны беләһеңме, ҡырағай башҡорт, һинең теге нәмәң, — ул ҡулы менән дүңгәләк яһап күрһәтте, — нисек атала әле?» «Так точно, ҡороҡ тип атала». «Һинең ҡороғоң айғырҙың муйынын ни эшләткәнен беләһеңме?» «Юҡ. Белмәйем». «Айғырҙың муйыны ҡырылып бөткән. Быны өсөн һин аҫылырға тейеш», — ул баш бармағы менән ялт иттереп муйынын тартты. Ганс тынды. Бер аҙ уйланғандай итеп торҙо. Шәп-шәп атлап, алдыма уҡ килеп баҫты.

«Ләкин мин ғазраил түгел, — комендант салбарының уң яҡ кеҫәһенән портсигарын сығарып, асҡан көйөнсә миңә һуҙҙы. — Ғүмер бүләк итәм мин һиңә. Тик бер шарт менән: шул айғырҙы өйрәтеп, ярышҡа әҙерләргә. — Ул, ғәҙәтенсә, эйәк осома ҡулын терәне. — Булдыра алырһыңмы?» Мин ҡапыл эйәкте ситкә алдым. «Ярыш ҡасан?» «Бер айҙан. — Ул тишерҙәй булып ҡараны. — Булдырырһыңмы?» Эйәк ҡаҡтым. Ганс боролоп, өҫтәлгә табан китте. Һәр хәрәкәтенән: әкрен генә баҫып атлауынан, ҡулдарының артҡа ҡаушырылыуынан, башын аҙыраҡ артҡа ташлауынан уның үҙ-үҙенән ҡәнәғәт булыуы, үҙенең әле генә башҡарған эшенән ғорурланыуы күренеп тора ине. Өҫтәл артына баҫты, ике ҡуллап өҫтәлгә таянды. «Иртәгә эшкә». Комендант, шәм шикелле, тура ҡатты. «Так точно, иртәгә...»

Иртәгеһенә ипподромға алып киттеләр. Шпорлы итек, күн куртка, галифе салбар, башлыҡ, күн бирсәткә бирҙеләр. Ат һарайы алдына килтереп, иң ситке бүлмәнең ишеген асып ебәрҙеләр. Эстәрәк, әйләндерелгән ҡаҙан төбө төҫлө, йоп-йомро бейек оса күренде — ишеккә артын ҡуйып, теге ат тора ине. Эскә индем. Танауға шундай таныш, шундай яҡын еҫ — тиҙәк һәм бесән еҫе бәрелде. Әйләнеп, ҡаршыһына килеп баҫтым да шпорҙарымды сыңлаттым. Ни күҙем менән күрәйем — әле генә ғыртлатып көйшәнеп торған ат, ҡолаҡтарын ҡарпайтып, баҫҡан ерендә ҡатты ла ҡалды. Шатлығымдан саҡ ҡысҡырып ебәрмәнем. «Малҡай, һин бит кавалерияла булғанһың!» Шпор сыңына тик кавалерия аттары ғына шулай итә. Былай булғас, эш сыға, тигән өмөт

менән, айғыр алдындағы бәләкәй ҡапҡаны асып, эйелеп теҙген осон һәрмәнем. Ҡулдарым йомшаҡ ҡына һалҡын нәмәгә батты, үҙемә үҙем ышанмайынса, ҡулдарымды күҙҙәремә килтерҙем: минең устарымда һурҙырылған һоло тостары баҙрайып ята ине! Ялп итеп сүгәләнем дә, әсә күкрәгенә үрелгән бала һымаҡ, йөҙөм менән улаҡҡа ҡапландым. Тештәрем, тирмән таштары төҫлө, йомшаҡ бөртөктәргә батты. Ныҡ ҡырҡылғайным шул инде. Ҡырҡылмаҫлыҡмы ни: көнөнә йөҙ илле грамм бысҡы вағы ҡатнаштырылған икмәк, бер сеүәтә кәбеҫтә һыуы. Ауылдан киткәндә, сиртһәң, ҡаным сығырлыҡ ине. Пленда булып, ярты йыл үтеүгә, ҡаҡ һөйәккә ҡалдым. Был минутта ошо ҡараңғы урындан да яҡшы урын юҡ ине. Кеше-ҡара күренмәй. Тик туры айғыр ғына минән күҙен дә алмай — аңлай инеме икән әллә минең хәлде, әллә минең күрмәгәндәй булып һоғоноуым ҡыҙыҡ күрендеме икән. Ҡайһылай ғына булмаһын, мин унан тартыныр хәлдә түгел инем. Тик ҡапыл ҡысҡырып ебәрҙеләр. Йәһәт кенә теҙгенде эләктерҙем дә ҡапҡаға ҡуҙғалдым. Ат бышҡырып, артҡа тартылды. Теҙгенгә ике ҡуллап йәбештем. Шулай ҙа көс етерлек түгел. Зыҡ ҡуптарып һөйрәтә теге мине; улаҡҡа, солан стеналарына килтереп бәрә. «Коммен зие биттен», — тип һаҡсыларҙы саҡырҙым. Айғырҙы көскә-көскә станокка килтереп бәйләнек. Бәрелгән-оролған ерҙәремде ҡараштырҙым да кнопкаға баҫтым. Станок әкрен генә әйләнә башланы. Айғыр, дүрт аяғын терәп, атламаҫҡа итеп ҡараһа ла, булдыра алмай. Себен тулап тәҙрә вата аламы ни, станок уны шаҡарып алып бара. Минең бөтә маҡсат — тәүҙә айғырҙың хәлен алыу. Бәлтерәгәндән һуң тәртә араһына екһәң дә, менһәң дә әллә ҡайҙа бара алмаҫ, тип уйлайым. Станокты икенсе тиҙлеккә күсерәм.

Ат атлауҙан юртыуға күсте. Мин уны әленән-әле: «Әйҙә, малҡай, етеҙерәк, етеҙерәк», — тип дәртләндерәм. Исемен әйтергә итеп ҡарайым, «Сокол», тип «о» менән әйтергә тел әйләнмәгән төҫлө. «Сакул», «Сакул»... Колхозда шундай исемле айғыр була торғайны. Былай еңел әйтелә. Ҡырҡ-илле әйләнеш яһағас, станокты кирегә әйләндереү кнопкаһына баҫам. Сакул хәҙер станоктан ситкә сығырға тип сапсынмай, тибеш кенә юрта. Станок өсөнсө тиҙлеккә күсә. Тәүҙәрәк туры айғыр быны

һиҙмәгән дә кеүек еңел бәүелгеләп юртыуында булды. Ләкин өсөнсө тиҙлек өсөнсө тиҙлек инде. Тәртәгә бәйләнгән сылбыр уның башын барған һайын ҡатыраҡ шаҡарҙы. Уға алғараҡ һонолоп, оҙонораҡ аҙымлап юртырға кәрәк булды. Быҙың өсөн аяҡты уратыбыраҡ һалып, йышыраҡ тын алырға кәрәк ине. Уның эсе ҡыҫылды, тарамыштары тартылды, күҙҙәре ҙурайҙы, танау япраҡтары тыржая барҙы, эре ҡыҙғылт йөнө ҡарағусҡылланды. Ҡабырғаһы һуҡты. Ә станок әйләнде лә әйләнде. Ат манма тиргә төштө. Шунан ғына әкренләп тиҙлекте кәметәм. Яйлата-яйлата һыуындырам. Тире шыла ҡатҡас, йәнә тиҙлекте арттырам. Был көндө мин уны станоктан ысҡындырманым — бер ҡыҙҙырып, бер һыуытып, шунда кис еткерҙем. Башҡа станоктар бушап, коляскаға егелгән аттар туғарылып, ипподром тынып ҡалғас, шөрләй-шөрләй генә тәртәләге сылбырға үрелдем. Сылбырҙы ысҡындырҙым, һарайға табан атланым. Үҙем күҙ ҡырыйы менән генә айғырға ҡарайым. Ул, бер-ике баҫты ла, башын түбән эйҙе. Туҡтаным. Туры айғыр танау япраҡтарын сырыштырып, башын бер күтәреп, бер эйеп, ер еҫкәй. Сылбырҙы бушатам. Бына ул ипләп кенә тубыҡланды, артҡы аяҡтарын ипләп һалып ятты. Муйынын һондо, тәнен ҡорошторҙо. Шунан ҡапыл аяҡтарын турайтып, атынып ебәрҙе. Күҙ асып йомғансы, икенсе яҡ ҡабырғаһына тәгәрләне, әйләнде, тағы тәгәрләне, тағы әйләнде. Йәнә ырғып торҙо. Аяҡтарын бушартып баҫты, бөтә тәнен дерелдәтә-дерелдәтә ҡағынды. Муйынын һелккеләп, ялбырата-ялбырата ялдарын ҡаҡҡас, башын юғары күтәреп, сыңғырлатып кешнәп ебәрҙе. Саҡ ҡушылып ҡысҡырып ебәрмәнем — күҙгә ҡыуаныс йәштәре эркелде. Күҙемде һөртә-һөртә, хәҙер сабып китерме икән инде тип ҡараһам, туры айғыр, туп-тура баҫып, башын һелкә-һелкә миңә килә. Атлайым. Сылбыр тартылмай. Мин уны килтереп яптым. Ул да моронон улаҡҡа терәне, мин дә ҡулымды улаҡҡа тыҡтым — икебеҙ ҙә өҙөлөп асыҡҡайныҡ.

Блокка ҡайтҡас, мине тотҡондар һырып алды. Кеҫәләремде һике таҡтаһына әйләндереп ҡаҡтым. Күҙҙәрҙә ут тоҡанды, ирендәр ҡыбырланы — уларҙың алдында ризыҡ тауы — бер-ике шәшке аҫтылай һурҙырылған һоло

ята ине. Уны, алтын бүлешкәндәге шикелле, бөртөкләп бүлештеләр.

Күңелдәре күтәренкерәк күренде кешеләрҙең ул кисте миңә. Үҙемдең дә кәйеф бар ине. Әйтерһең, мин был көндө ипподромда түгел, ә тыуған ауылымда үткәрҙем. Әйтерһең, туры айғырҙы станокка бәйләп йөрөтмәйенсә, молотилкаға егеп, ашлыҡ һуҡтым; әйтерһең, төркмән аты дошман тупрағында түгел, башҡорт тупрағында тәгәрләне; әйтерһең, мин туры айғырҙың сыркырап ипподромда кешнәүен түгел, ә үҙем яһаған тимер ҡыңғырауҙың үҙебеҙҙең Ҡыҙылғы буйҙарын яңғыратып ҡыңғырлауын ишеттем; әйтерһең, мин кешеләргә бөртөкләп һурҙырылған һоло түгел, ҡапсыҡлап-ҡапсыҡлап һарғайып торған бойҙай тараттым. Үҙемде көсләнгәндәйерәк күрҙем, әйтерһең, һис ҡасан асҡа ҡырҡылмайынса ат һолоһон көн һайын алдан ҡалғанса ашағанмын; киң яҡты юлға сыҡҡан кеүекмен; әйтерһең, минең ғүмерем ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер күпер өҫтөндә тормай хәҙер. Ул төндө мин ҡайһылай ятҡанмын, шул көйөнсә йоҡлағанмын.

Алда эштең иң олоһо ҡалды — хәҙер айғырҙы коляскаға егергә кәрәк ине. Көндәрҙән бер көндө алып сыҡтым тегене лә, коляска янына килтерҙем. Түшелдерек кейҙерҙем, елкәлек бәйләнем.

Ипподром гөжләп тора былай: ер соҡойҙар, носилка менән тупрағын алып сығып китәләр ҙә таш тейәп әйләнеп ҡайталар, цемент ҡоялар, ҡайһы берәүҙәр таҡта юна. Ат менән булашыусы ла бер мин генә түгел икән. Өс-дүрт кеше ат егеп сыҡҡан. Уларҙың һәр ҡайһыһы тапҡырында һаҡсы, һәр береһенә билдәле урын бүленгән.

«Былар ҙа тотҡондарҙыр», — тип уйлайым. Сөнки фашист наездниктарына һаҡсы ҡуйылмай, икенсенән, улар бөтә ипподромды бер итеп йөрөй.

Түшелдерек бауҙарын тәртә баштарына эләктерҙем, елкәлекте тарттым, дилбегәне тотоп, коляскаға менеп ултырҙым. Айғыр матур ғына ҡуҙғалып китте. Тәүҙә тәртәләргә бәрелеберәк юртты. Шул рәүешле бер аҙ йөрөгәс, дилбегәне бушата төштөм. Колясканы һурып алдылармы ни — айғыр һуҙылып тороп юртырға керешгте. Биткә ел бәрелде. Тәндәр еңеләйеп китте. Нығыраҡ

ҡыуам. Ни эшләптер айғыр ошонан арттыра алмай. Ни өсөн былай? Һыбай елгәндәгенең яртыһы саҡлы ла юрта алмай ҙа баһа. Туҡтатып, арбаны, сбруйҙарҙы ҡарайым — шыҡ та иткән ер юҡ. Тағы ҡыуам. Булмағас булмай инде, баяғы тиҙлеккә етте лә ары алдыра алмай. Айғырҙың башы күҙгә салынып ҡалды. Ул башын әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа ташлай, күҙҙәре аларған, ялдары тырпайған. Шунда уҡ уйлап алдым: өркә бит был. Тик нимәнән? Оҙаҡламай бөтәһен дә аңланым. Эш былай ине: шәберәк юртҡан һайын айғыр аяҡтарын уратыбыраҡ баҫа. Билдәле бер тиҙлеккә еткәс, аяҡтары күҙенә күренә һәм, ул үҙенең аяғынан үҙе өркә башлай. Был көйөнсә туҡмау түгел, үлтерһәк тә айғырҙың шунан артыҡ юртмаясағы көн кеүек асыҡ. Берәй әмәлен табырға кәрәк ине. Йөрөй торғас, ҡылт итеп иҫкә бер нәмә килеп төштө: күҙелдерек, күҙелдерек! Мин, һыуланған кеҫәһенән бер урарлыҡ ҡоро тәмәке тапҡан кеше төҫлө, шатлығымдан көлөп ебәрҙем. Әлдә сығынсылай, өркә торған аттарға күҙелдерек кейҙерә торған шәп бер йола бар был донъяла. Курткамдың ике яҡ кеҫә ҡапҡасын һүтеп алдым да уларҙы йүгәнгә тимер сыбыҡ менән тегеп, күҙелдерек яһаным. Эш китте хәҙер ходҡа, айғыр туҙанын туҙҙыра, тик мөйөш кенә бәләкәйерәк беҙҙең.

Бер көндө теге комендант килеп төштө минең янға. Тегеләй иткән була, былай иткән була, теге кәрәкмәйме, был кәрәкмәйме, тигән була. Даға һорайым. Шунда уҡ дағалап килтерҙеләр. Коляска тәгәрмәсендә качка бар, тиеүем булды, өр-яңы тәгәрмәстәр кейҙереп тә ҡуйҙылар. Ни өсөн был тиклем йомарт ҡылана — аңламайым. Бар әле, бер әйләнеп кил, ти теге. Ипподромда йөрөргә рөхсәт юҡ бит, тим. Бөгөндән башлап ипподром һеҙҙеке, тип йылмая Ганс. Рөхсәт икән, рөхсәт. Күҙелдерекле йүгәнде кейҙереп, айғырҙы ектем, һуйылдың мөлдөргәһен беләккә кейҙерҙем. Башлыҡты ҡаптырып менеп ултырыуым булды, төтәтеп алып та китте — саҡ дилбегәләрҙе эләктереп өлгөрҙөм. Бер әйләнеш бирәбеҙ, ике әйләнеш. Был ни ғәжәп, әйләнеш һайын ҡыҙа ғына бара бит айғырым. Ярһып-ярһып юрта. Үҙ иркенә ҡуйһаң, осоп китер, тик дилбегәне бушатып бөтөрмәйем, көн бер бөгөн генә түгел. «Гут, гут», — ти Ганс йыл-

майып, мин килеп туҡтағас, шунан ҡапыл үрә ҡатып былай ти: «Иртәнән һуңға ярыш. Ҙур ярыш. Рус аттары менән немец аттары ярышасаҡ. Рустарҙан һин генә түгел. Ана, тегеләр ҙә ҡатнашасаҡ. — Ул ҡулы менән ипподромдың өс урынында ат менән булашыусы кешеләргә күрһәтте. — Һеҙ үҙ аттарығыҙҙың нимәгә булдыҡлы икәнлеген күрһәтергә тейешлеһегеҙ. Ҡунаҡтар араһында юғары хәрби начальниктар ҙа буласаҡ. Әгәр тегеләй-былай ҡыланһағыҙ, улар һеҙҙе аяп тормаясаҡ. Аңлашылдымы?» «Хатта кәрәгенән артыҡ», — тип яуап ҡайтарҙым. Комендант китте. Эйе, уның әйткәндәре кәрәгенән артыҡ аңлашыла ине миңә. Ошо атҡа яҙлыҡҡандан бирле мин бер нәмәне аңлай алмай инем: ни өсөн танкылары, самолеттары, самоходкалары, бронетранспортерҙары менән дан алған фашистар әсиргә эләккән төркмән атына сат йәбештеләр; ни өсөн уны фашистар үҙҙәре түгел, ә беҙҙекеләргә бирә; ни өсөн минән таш ваттырмайынса, ат өйрәттерәләр? Бында ниндәй ҙә булһа бер хәйлә барын һиҙенә инем инде мин һиҙенеүен. Тик асығын аңлап еткерә алмай инем. Бына хәҙер төбөнә тиклем төшөндөм: ярышта еңергә һәм фашистарҙың үҙҙәре генә түгел, хатта аттары ла донъялағы бөтә башҡа илдәрҙең, бигерәк тә Рәсәй аттарынан өҫтөн булыуын күрһәтергә! Тағы ла бер тапҡыр немецтарҙың донъялағы иң шәп, иң юғары раса булыуын иҫбатларға теләйҙәр, күрәһең. Ганстың битенә төкөргөм килде.

Тап шул ваҡыт, ҡойон осортоп, беҙҙең эргәнән немец юртағы үтеп китте. Туры айғыр урынында торған көйө бейей башланы, күтәрелеп уның күҙҙәренә ҡараным. Утлы торонбаш төҫлө баҙлап торған күҙҙәр таҡыр ҡара юл буйлап елеүсе немец атында ине. Улар хатта йомолмайҙар ҙа, тегенең һәр бер хәрәкәтен, һәр бер аҙымын күҙәтә. Көнсөллөк уты тоҡанғайны ул күҙҙәрҙә. Немец юртағы түңәрәкте әйләнеп беҙгә яҡыная башлағас, кешнәй-кешнәй тыпырсынды, кереше тартылған йәйә кеүек бөгәрләнде туры айғыр. Күҙ асып йомғансы коляскаға һикерҙем — бөткән баш бөткән, ни булһа ла булды, әйҙә, турыҡай!

Алып сығып китте, малай, туры айғыр, ултырып ҡына сыҙа. Немец юртағы беҙҙән ун-ун биш аҙым алғараҡ тура килде. Беҙ юлға төшөп, арлы-бирле итке-

ләгәнсе, ул байтаҡ ер китергә өлгөрҙө. Ут һымаҡ шул инде үҙе лә. Туры айғыр ҙа ҡыҙа. Дилбегәне бушата-бушата киләм, боролошто үткәс, бөтөнләй тип әйтерлек ысҡындырҙым. Туры айғыр муйынын алға һондо, кәүҙәһе һуҙылғандан-һуҙылды. Аяҡтарына күҙ эйәрмәй, уратып-уратып һалғаны ғына сағылып ҡала. Бер ваҡыт туры айғырҙың башы немецтың коляскаһына тиңләнде. Йөрәгем бына-бына сығырҙай булып тулай. Артабан ни булыр? «Һайт, туры айғыр», — тип дәртләндереп ебәрәм. Хәҙер улар башма-башлаш бара. «Көрәшергә, бер һүҙһеҙ көрәшергә! Яҙмыш миңә бының өсөн ут кеүек айғыр тотторған», — тип уйлайым. Бара торғас, бер күкрәктәй үтте туры айғыр тегене. Ләкин ҡапыл ат тояғы аҫтында тимер сыңлап киткәндәй булды. Дилбегәне тарттым, һиҙелеп аҡрынайҙыҡ. Фашист юртағы беҙҙе, бәйләгән кеүек, әллә ҡайҙа ҡалдырып китте. Айғырҙы бөтөнләй туҡтаттым, төшһәм, ни күҙем менән күрәйем, алғы бәкәлдәре бер нисә урындан сыйылып киткән малҡайымдың. Ғүмергә унда теймәгәнде ни булды икән, тип артҡы аяҡтарындағы дағаларҙы ҡарайым. Даға — даға инде, Германияла эшләнгән меңәрләгән дағаларҙың береһе: сығып-нитеп торған ере юҡ, имсәктәре былай тупаҡ ҡына. «Һыбай йөрөгәндә лә шундай уҡ дағалар менән дағаланғайны ла баһа, ни өсөн ул саҡта бәрелмәне икән һуң артҡы аяҡтар ал бәкәлдәргә?» — тип аптырайым. Айғырҙы атлатып ҡарай-ҡарай баш вата торғас, миңә шул мәғлүм булды: тәртә тар булғанлыҡтан, айғыр артҡы аяҡтарын кәрәк тиклем уратып һала алмай. Шул сәбәпле улар алғы бәкәлдәргә бәреләләр. Етмәһә, шәберәк юртҡан һайын, нығыраҡ та, йышыраҡ та бәреләләр. Ҡайһылай ҡотолорға инде бынан, белмәйем. Арт дағаларҙы бөтөнләй алып ташлар инең, гелән дағалы йөрөп өйрәнгән нәмә әллә ни эшләр, тиҙлекте кәметәсәк. Бәлки, тәртәне киңәйтеп булалыр. Колясканы ҡараһам, ысынлап та, киңәйтер ход бар, немецтар ул яҡҡа теүәл халыҡ инде ул, алды-артты ҡарап эшләйҙәр. Шарнирҙарҙы ысҡындырып, тәртәләрҙең икеһен дә ике тишеккә ситкә күсерҙем. Түшелдерек тартҡыларын оҙонайтып егеп, юрттырып ҡарайым, ул-был иткән нәмә юҡ.

Тегенең-бының менән булашып тағы бер көн үтте. Иртәгә ярыш. Башта мең төрлө уй. Ниндәй генә бәләләр килтерер инде ул көн? Исмаһам, дүртебеҙҙең беребеҙ уҙып килһә ярар ине. Атты ҡайһылайыраҡ йөрөтөргә кәрәклекте уйлайым. Таҫыл тоторға кәрәк. Уйлай торғас, ошондай ҡарарға килдем: тәүҙә бик ныҡ ҡыумаҫҡа, артта ла ҡалмаҫҡа. Дошман коляскаһына тейә-тейә барырға ла, финишҡа етәрәк, дилбегәне бушатып, атты бөтә көскә ҡыуырға. Быңдай планға ҡаршы башта әллә күпме һорау тыуа: әгәр атыңдың хәле финишҡа тиклем етмәһә; ал бирмәй дилбегә тартып килгәнгә сығанлап ҡуйһа; күҙлеге булыуға ла ҡарамаҫтан, өркөп-нитеп китһә?.. Һорауҙар, икеләнеүҙәр... Тик нисек кенә булмаһын — иртәгә ярыш.

Ул төндө серем дә итә алманым. Күҙҙе йомдоммо — һаташтыра, бөркәнеп ҡарайым — баҫлыҡтырып бара. Таң алдынан тотҡондар ҡайтты. Улар төнө буйы трибуналар, ултырғыстар эшләгән.

Иртәгеһен төш ауышыуға, ипподром шартлар хәлгә етешкәйне инде. Ат ярышына йөрөүсе был тиклем халыҡты Дим буйында үткәрелгән үҙебеҙҙең ярыштарҙан бирле күргән юҡ ине. Трибуналар тулған, энә төртөр урын юҡ. Урынһыҙ ҡалғандары трибуналар менән ярыш юлы ситендәге тәпәш ҡойма тирәһенә шыпланып баҫҡан. Ҡапҡанан инеүселәрҙең осо ла, ҡырыйы ла күренмәй. Күпер өҫтөндәге мүк кеүек, тулҡынланып, бәүелгеләп торған халыҡ бер туҡтауһыҙ геүләй. Ҡойма баштарында, ҡапҡа алдында, трибуналарҙа; иҫәпһеҙ күп ҡулдарҙа ҡара свастика төшөрөлгән флагтар елберләй. Ҡайҙа ҡарама — иғлан. Уларға русса һәм немец телдәрендә былай тип яҙылған: «Иғтибар, иғтибар итегеҙ! Бөгөн ҡала ипподромында фюрер ғәскәрҙәренең һуңғы көндәрҙәге данлы еңеүҙәре хөрмәтенә ҙур ат сабышы үткәрелә. Ярышта киң билдәле немец юртаҡтары һәм рус аттары ҡатнаша. Немец аттарын күренекле немец наездниктары, рустыҡыларҙы рустар үҙҙәре йөрөтә. Ярыш көндөҙгө сәғәт 2-лә башлана. Бөтәгеҙ ҙә немец юртаҡтарының рус аттарын ҡайһылайыраҡ дөмбәҫләгәнен күреп ҡалырға ашығығыҙ!»

Эске күлдәкте йыртып, аттың бәкәлен ураным, түшелдерек, елкәлектәрҙе, арбаны ҡараштырҙым. Ул арала

радионан ярыш тәртибен иғлан иттеләр. Бөтәһе лә көтөлмәгәнсә килеп сыҡты. Ярыш ике этаптан тора. Беренсе этапҡа өсәрләп өс заезд бирелә. Был заездарҙа еңеүсе ат икенсе һуңғы этапҡа сыға.

Тәүге заезда бер рус аты менән ике немец аты сыҡты. Беҙҙеке күк айғыр, тегеләрҙең бер иш — ҡара юртаҡтар. Ниндәйерәк егет икән беҙҙеке, тип ҡарайым да бит, һаҡсылар һарайҙан сығармай. Аттар, юртаҡлап, старт яғына китте. Улар, һабан шырты шикелле, типтигеҙ булып старт һыҙығына барып та етте, ҡыңғырау ҡағып старт та бирелде. Аттар, йомолоп, алға ынтылды. Тәүҙә улар күкрәккә күкрәк барҙы. Боролошҡа ла шул көйөнсө килеп инделәр. Ләкин шунда беҙҙең ат уңға ҡайырылды ла китте. Наездник уны тартҡылап ҡаранымы-юҡмы, күрә алманым. Тәүге ике түңәрәкте немец аттары бергә әйләнделәр. Өсөнсө түңәрәктең яртыһына еткәс, береһе алғараҡ тартыла төштө. Был ара секунд һайын арта барҙы. Теге ат әлһерәне, буғай. Трибуна гөж килде. Алдағы юртаҡ, йомолобораҡ юртып, финиш таҫмаһын атылған уҡ кеүек үтеп китте. Трибуна тынып ҡалды. Икенсе заезды әйттеләр. Беҙҙән ике, тегеләрҙән бер ат ҡатнаша. Беҙҙең аттар матур күренә; оҙон ботло, тороҡ яллы, ҡарсыға түшлеләр. Егеттәр ҙә сымырыға тартҡандар. Мин уларға өмөт бағланым. Старт! Һәм шунда бағлаған өмөтөм селпәрәмә килде: аттар икеһе ике яҡҡа ҡыялап сыҡтылар ҙа киттеләр, һаҡсылар күҙ асып йомғансы егеттәрҙе коляскаларҙан һөйрәп төшөрҙө, ҡулдарын ҡайырып, һарайға алып инеп киттеләр. Ни булды, ни өсөн? Аңғармай ҙа ҡалдым. Ә теге ат ярышмай ғына еңде. Ике еңеүсе — икеһе лә немец. Ниндәй ҡәһәрле көн булды һуң әле был? Мин туры айғырҙың муйынын ҡосаҡлап, башымды ял араһына тығам. Сикәмә уның ҡан тамырҙары бәрелде, танауға әскелтем тир еҫе керҙе, ҡулдарға тәненең эҫеһе йоҡто. Ялға буталған башымды алам. Туры айғыр, боролоп, моронон терәй. Ул саҡ ҡына дерелдәй, алда ҙур эш торғанын һиҙә, ахыры, малҡай, әммә күҙҙәрендә ут. Баҙлап тәгәрәшеп торалар улар. Мин уны тағы бер һөйөп, дилбегәне йыйғас, коляскаға мендем. Куртка һиҙәптәрен ҡаптырҙым, бирсәткә менән башлыҡты кейеп, уң ҡулға мөлдөргәләп шыйыҡ һуйыл

тоттом. «Йә, малҡай, изге сәғәттә». Уйнаҡлатып килеп сыҡтым да елдереп төшөп киттем ярыш юлына. Ҡулдарын болғап, ата улды, инә ҡыҙҙы белмәй ҡысҡырышҡан кешеләр тынып ҡалды. Радио беҙҙең заезды хәбәр итте. Мөйөштән фашистар күренде. Ипподром тағы тауыш диңгеҙенә сумды. Тулҡынланыуым һыпырып ташлағандай булды. Күҙҙәрем осҡонланды, ҡолағым һағайҙы. Туры айғырҙың һәр хәрәкәтен күреп, тын алғанын ишетеп торам. Арттан тояҡ тауыштары яҡынайған һайын, ҡолаҡтары күтәрелде, ял-ҡойроғо торҙо, бот мускулдары тумырылды. Яурын аша ғына ҡараш ташлаһам, күрәм: тегеләр мине уртаға ҡалдырмаҡсы булып, икеһе ике яҡлап сикәләп килә. Ҡапыл һулаҡайға тартып, иң эске юлға ҡайырам. Теге ат, минең коляскаға бәрелә яҙып-бәрелә яҙып, яйланы. Уға, ҡыйын булһа ла, урта юлға төшөргә тура килде. Ә мин эстәге юлды эләктерҙем. Аяҡтарын уратып һалып юртыусы туры айғыр урта юлдан барғанда ике яҡтағы атарбаға аяҡтарын бәреүе бар. Старт һыҙығына яҡынаябыҙ. Хәҙер мин туп-туп килгән аяҡ тауыштарынан башҡа бер нәмә лә ишетмәйем, ошо аттарҙан башҡа бер нәмә лә күрмәйем. Старт урынына еттекме-юҡмы, бер мәл ҡыңғырау яңғырап китте. Аттар, һурып алғандай, юлға тартылдылар. Туры айғыр ҙа, әллә үҙебеҙҙә саҡта ярышҡаны булғандыр инде, әллә күңеле менән һиҙенеп, аҙап-нитеп тормайынса, алға йомолдо. Аттар ҡыҙғандан-ҡыҙҙы. Мөйөштө үттек. Дилбегәне ап-аруҡ ҡаты тотҡанмын, шулай булһа ла тегеләр менән тигеҙ бара минең ат. Бер түңәрәк әйләнәбеҙ, аттар шулай юрта, ике түңәрәк. Был ни ғәжәп, аттарҙың көсө бер самалы, әллә хәйләләшеп киләләрме тегеләр? Артабан да былай барыу минең эсте бошора, дошмандың хәйләһен асырға, нисек тә үҙ алымымды тағырға кәрәк ине. Ҡапыл дилбегәне бушатып ебәрҙем. Туры айғыр күҙ асып йомғансы бер арҡан самаһы ара яһаны. Фашистар, рус атын һуңғы көсөнә ҡыуа башланы, тип уйлап, минең арттан йомолдолар. Хәҙер улар үҙ-ара ярышалар ине. Ҡайһыһы беҙҙең көндәш булыр икән, тип күҙ һалғылап алам. Килә-килә ҡоба ат иптәшен арыу ғына артта ҡалдырҙы. Хәҙер ул беҙҙең арттан төштө. Атты тыйыңҡыраным. Теге елдереп килеп уҙып та китте, артына

төшөп тә алдым. Туры айғырҙың башын уның коляскаһына тейер-теймәҫ кенә тотам. Немец, ялп итеп, әйләнеп ҡараны ла атына һуйыл тартты. Тағы әйләнде. Туры айғыр һаман башын уның коляскаһына тейгеҙә яҙып-тейгеҙә яҙып ҡына юрта. Фашист шул саҡ үҙенең бик ҡаты алданғанлығын аңланы. Мин уға үҙ алымымды таҡҡайным инде. Наездник, беҙҙән айырылырға теләп, атын йән-фарманға ҡыуа, ә мин уға менеп китмәҫ өсөн дилбегәне тарта-тарта киләм. Дошмандың үҙенән көсһөҙ булыуын аңлаған туры айғыр һуңғы түңәрәккә сыҡҡанда тыйып тотҡоһоҙ хәлгә килгәйне. Һулға тартып, иң төпкө юлға төшөрҙөм дә дилбегәне бушата бирҙем. Туры айғыр һә тигәнсе тегене уҙҙы. Хәҙер нисек тә тегене еткермәҫкә кәрәк. Айғырҙың көсө бар. «Әйҙә, малҡай». Дилбегәне бөтөнләй бушаттым. Бөтә буйына һуҙылды, ҡойроғон сөйҙө, муйынын һоноп, башын эйҙе. Айғыр асылғандан-асылды. Башы күренмәй, тик ялдары ғына ялбыр-йолбор килә, уның аяҡтары ҙурыраҡ түңәрәк яһаны. Бара-бара уларға күҙ эйәрмәй башланы. Хәҙер туры айғыр бөтә көсөнә юрта ине. Ҡолаҡ төбөндә ел шыжлай, бағаналар, һаҡсылар йылт итеп кенә ҡала. Йөрәкте нимәлер ҡыҫа, дымлы төйөр тығыла. Аңлап торам: мин бер юлы ике нәмәгә яҡынаям. Береһе — финиш. Төркмән аты менән башҡорт тотҡононоң шашынған фашистар өҫтөнән рухи һәм физик яҡтан еңеү финишы; икенсеһе — үлем. Һәр бер секунд мине ҡотолғоһоҙ рәүештә үлем сәғәтенә яҡынайта. Донъяла йәшәүҙең һуңғы минуттарын ярһыуыраҡ, кешеләрҙе көнләштерерлегерәк итеп үтәһе килә, һәм мин туры айғырҙы шәберәк ҡыуам: «Туры айғыр, тағы саҡ ҡына», — тип һыҙғырып ебәрәм. Ул тиҙлеген кәметмәй, минең уйҙарымды аңлағандай, шәбәйә төшә. Был минутта уның ялдары араһына ҡулдарымды батырып иркәләйһем, ут бөркөп торған күҙҙәренән үбәһем һәм: «Рәхмәт, һөйөклөм, хур итмәнең, Тыуған ил алдында беҙҙең йөрәктәребеҙ керһеҙ», — тип әйткем килде. Ул һаман ярһыу. Ат тояҡтары дөп-дөп килеп, ерҙе емереп бара. Финишҡа яҡынайған һайын байраҡ кеүек ҡабарған көмөш ялдар нығыраҡ елберләне, ҡамыш кеүек осло ҡолаҡтар йышыраҡ ҡайсыланды, тәртә остарындағы

дүңгәләктәр сылтыр-сылтыр килде — финиш таҫмаһын йәшен уты төҫлө киҫеп үтте туры айғыр.

Талпына-талпына финишты үтеп тә киттем, коляс-канан һөйрәп тә төшөрҙөләр мине һаҡсылар. Ә ярты сәғәт үтеүгә беҙҙе сығарып теҙгәйнеләр инде. Ипподром буп-буш. Дүрт совет тотҡоно, әсир алынған дүрт совет аты, ике фашист һалдаты, бер комендант. Аттар торғаҙаҡҡа бәйләнгән, ә беҙ, мөйөш яһап, торғаҙаҡтың һул яғына баҫҡанбыҙ. Беҙ аттарҙы, улар беҙҙе күреп тора, Ганс, ҡулдарын бутай-бутай, тынына быуылып, русса белеүенә ҡарамаҫтан, ни өсөндөр тик немецса һүгенде лә ажарланып команда бирҙе. Бер һаҡсы аттарға табан, икенсеһе беҙҙең ҡаршыға баҫты. Тәүге сират торғаҙаҡтағы иң ситке айғырға бирелде. Айғыр кешнәй-кешнәй артҡы аяҡтарына баҫты ла дарҫ итеп ауҙы. Икенсе сират — иң ситтәге тотҡондоң күкрәген тетте. Ат, кеше; ат, кеше. Минең йөрәккә нимәлер килеп ҡаҙалғандай булып, тыным ҡыҫылды, аяҡ быуындарым йомшарҙы, бер генә секундҡа күҙҙәремде йомдом: балаларымды, әсәйемде, үткән ғүмеремде күҙ алдыма килтерер өсөн; автомат көбәгенә ҡурҡмайынса туп-тура ҡарар өсөн; йәшәү менән хушлашыу ҡыйынлығын дошманға күрһәтмәҫ өсөн. Эргәмдәге тотҡон, ых, тип ергә ауҙы. Хәҙер — туры айғыр, унан — мин. Айғырымды һуңғы тапҡыр күреп ҡалырға тип, күҙҙәремде астым. Ул ҡан еҫенә иҫереп ярһый, бәйҙән ысҡынырға итеп, әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа ташлана. «Тула, туры айғыр, тула, — тим эстән, — ярһыу айғырҙарға үлемдә тулай-тулай ҡаршылау килешә». Фашист һалдаты автоматын ҡулбашына терәне, тоҫҡай башланы. Минең йөрәгемде һурып алғандай булды, «хәҙер, хәҙер, бөтәһе лә хәҙер». Шул саҡ Ганс ҡулын күтәреп, ҡысҡырып ебәрҙе. Айғырға төҙәлгән автомат та, миңә төҙәлгәне лә алынды. «Етәклә атыңды, — тип аҡырҙы комендант, — һине саҡ ҡына торғасыраҡ». Иптәштәремдең баш осонан торғаҙаҡҡа табан атланым. «Хушығыҙ, иптәштәрем! Исемегеҙҙе лә, ҡайһы ауылдан, ҡайһы ҡаланан икәнегеҙҙе лә белмәйем. Ләкин беҙ бергә көрәштек, һеҙ һуңғы һулышығыҙға тиклем көрәшеп, ғорур үлдегеҙ. Тыныс йоҡлағыҙ, дуҫтар!» Эйе, беҙ бергә көрәштек. Тик бер төптән булырға тура килмәне, һәр беребеҙ намыҫыбыҙ ҡушҡан-

са эшләне. Улар көрәштең иң ҡыйыу юлын һайланы — аҫтыртын рәүештә аттарҙы ярыштан сығарып, ғәҙел булмаған алыштан баш тартты. Был иҫ киткес ҙур батырлыҡ ине.

Туры айғыр янына киләм. Кешнәшеп-кешнәшеп тартышҡан айғырҙар тынған. Уларҙың күҙҙәре тоноҡланған, ауыҙ-морондары ҡанға туҙған. Сакул уларға ҡарап сапсый. Теҙгенен сисеп алып, һарайға табан ҡуҙғалам. Теге өсәү арттан ҡарап ҡалды. Үҙем әкрен генә атлайым: «Хәҙер сәкетерҙәр ҙә, туры айғырҙы алып барып һарайға яба алмам инде», — тип уйлайым. Ун аҙым ҡалды, биш аҙым. Бына ишек. Керҙем дә тәгәрәнем һарай иҙәненә. Шулай күпме ятҡанмындыр, берәү арҡаға тибә. Комендант килгән икән. «Атыңа рәхмәт уҡы, — ти теге, — уның арҡаһында һиңә тағы бер йыл ғүмер бирелә. Был ғүмерҙе һин немец халҡына хеҙмәт итеп үткәрәсәкһең».

Шунан башланып китте, китте ярыштар. Әле бер ҡалала, әле икенсеһендә. Бер ҡайҙа ла беҙҙе уҙған ат юҡ.

Ләкин башта бер генә уй: ҡасырға, ҡасырға, бер сәғәт, бер минут тормай ҡасырға. Туры айғыр миңә башын терәй һәм мин тертләп китәм. Ул: «Мин һинең ғүмереңде ҡотҡарып алып ҡалдым, ә һин мине ташлап китергә итәһеңме ни?» — тип өндәшкән шикелле булып китте. Юҡ, уны ташлап китергә хаҡым да юҡ, быны эшләргә көсөм дә етмәй ине минең. Ҡасып ҡотолһам да, дошман өңөндә ҡалған аттың күҙ йәше, рәнйеше төшөр. Мал рәнйеше йыраҡ ебәрәме һуң? Нисек булһа ла, бергә ҡасырға кәрәк, ни күрһәк тә, бергә күрелер. Мин Гансҡа элеккесә, бер нәмә лә белмәгән кеше кеүек күренергә тырыштым. Ярыштарға ихлас әҙерләндем. Көн һайын тиерлек енәйәт эшләйем, хыянат һаҙлығына батам. Бынан ҡотолайым, үҙем генә ҡасайым тиһәм, юлдар бар. Ләкин быға намыҫым етмәй. Артыҡ яҡын ине шул туры айғыр. Гансҡа тоҡлап-тоҡлап аҡса эшләһәм дә, йөҙәр меңләгән немецҡа рухи шатлыҡ килтерһәм дә, түҙҙем. Ҡасырға уңайы килгән мәлде көттөм.

Бер ваҡыт Италияға алып киттеләр. Ганс үҙе лә ҡалманы. Штатскийса кейенгән дүрт һаҡсы алды. Ярыштар араһында беҙҙе бер матур күл буйына ат йөҙҙөрөргә йөрөтәләр. Мин көткән көнөмдөң килеүен аңланым.

Ҡаршы яр һөҙәк. Ат уға еңел менәсәк. Күл һай. Һалдаттар төпкә китеп йыуына. Сығып, ҡоралдарына барып еткеләгәнсе, байтаҡ ер китеп өлгөрөп булыр. Яр башында бер генә һаҡсы ҡала, башҡалары һыуҙа, шуны ғына дөмөктөрөргә кәрәк.

Тәүге ярыш иҫ киткес шәп үтте. Беренсе килдем. Ипподромда мәхшәр ине. Ганстың кәйефе күтәрелде. Әллә кемдәрҙе һыйланы, әллә нәмәләр һөйләнде, үҙе лә ныҡ ҡына төшөрөп алғас, кителен, ҡайышы менән пистолетын һарай ишегенә элеп, «һыу буйына», тип ҡысҡырҙы, һаҡсылар беҙҙе лә ҡыуа башланы. Сығышлай, атты юрамал ишеккә һырылдырып алып киләм. Ул ышҡылып, Ганстың кейемдәрен төшөрҙө. Атты туҡтатып, тегеләрҙе элгән булдым. Сөйҙә кобура ҡалды, ә пистолет минең ҡулда ине инде. Аттың ялын тартҡылаған кеше булып, пистолетты ял аҫтына бәйләнем. Ашыҡтыра-ашыҡтыра алып киттеләр мине һаҡсылар, һаҡсылар тигәс тә, мин генә беләм инде уларҙың һаҡсы икәнен, салбар-костюм, эшләпә, туфли кейгәндәр, матур-матур аттарға атланғандар, бер итальян да уларҙы һаҡсы тимәҫ. Барып та еттеләр, сисенешеп төшөп тә киттеләр тегеләр. Бөтә нәмә мин уйлағанса бара, тик Мюллер ғына эсте бошора. Ни эшләптер ул бер ҙә һыу инергә йөрөмәй, һыу яратмаймы, әллә башҡа берәй сәбәп бармы? Һиҙеп-нитеп ҡалманымы икән, тигән шик төшә. Бөгөн ярышҡа ла сыҡманы. Ҡайһылай ғына булмаһын — ҡасырға. Трусиктан ғына ҡалып, атты етәкләп һыуға төшәм. Сирҡандыра, сумып сығам, һаман дерелдәтә. Нервылыр инде. Атты йыуа башлағас ҡына тынысландым. Тегеләрҙең ғәҙәте шулай: аттарын тәүҙә йөҙҙөрәләр, шунан ғына йыуалар. Мин быны үҙемсә файҙаланырға булдым: улар йөҙҙөргәндә мин йыуам, ә улар йыуғанда мин йөҙҙөрәм. Был миңә ҡасыуҙы еңеләйтәсәк. Ни өсөн тиһәң, мин ат өҫтөндә саҡта улар түбәндә булалар. Берҙән, аттары менән булашып, улар минең теге ярға йөҙөп киткәнемде шәйләмәй ҡаласаҡтар, ә мин һыу уртаһына етеп, һаҡсыны атҡас, иҫтәренә килһәләр ҙә, ҡоралдарына ташланғылағансы берәмләп сүпләп бөтөрәсәкмен.

Тегеләр йөҙҙөрөп әйләнеүгә, атҡа атланып мин төшөп киттем. Атты һыу янына етә башлағанса атлаттым да



туҡтаттым. Үҙем аттың ялын таҙартҡан кеше булып пистолетты сисәм, үҙем ярға ҡарайым, һаҡсы ары-бире йөрөштөрә. Сеү! Ҡапыл күҙемә бер ҡарасҡы салынды — беҙҙең яҡҡа, ҡулдарын болғай-болғай, һыбайлы килә ине. «Мюллер, моғайын, Мюллер», — тип уйлап алдым. Ишеккә эленгән буш кобураны күргәндер ҙә, кешеләрҙе эйәртеп, бында сапҡандыр. Һаҡсы тегеләрҙең тауышын ишетеп ҡалдымы, әллә былай ғынамы — шул яҡҡа боролдо. Миңә шул ғына кәрәк ине — тоҫҡап атып ебәрҙем, һаҡсы ауҙы. Айғырҙы ҡаршы яҡ ярға ҡыуҙым. Ул йөҙә, мин әйләнеп берәм-берәм һыуҙағыларҙы сүпләйем. Туры айғыр бөгөлөп-бөгөлөп йөҙә. Аяғы ярға тейеүе булды, мин уны ҡатыраҡ ҡыуҙым. Шаптыр-шоптор килеп һыуҙан сығып, ярға килеп мендек. Теге яҡҡа ҡарайым — һыуҙан берәү ҙә сыҡмай, ә теге атлылар шул ыңғайҙан һыуға атылдылар. Эргәлә генә урман. Тик ул бик бәләкәй, беҙ туп-тура алыҫҡа, күкһеҙ тауҙарға табан ысҡындыҡ. Пистолетта бөтәһе ике патрон ҡалды. Ҡотҡарһа, тауҙар ғына ҡотҡара ине беҙҙе. Туры айғыр, иркенлекте тойоп, бөтә көсөнә юрта ине инде, артта ат кешнәп ебәрҙе. Шунда уҡ таныным: Мюллер атының тауышы ине был. Ҡарап алам, беҙҙең арттан Мюллер үҙе төшкән. Тимәк, ул һиҙенгән, беҙ һыу ингән саҡта

ҡасып ҡына урмандан һағалап торған, ә тегеһе башҡа фашист булған. Фашист фашист инде — ат өҫтөндә лә, танк эсендә лә, самолетта ла фашист булып ҡала. Мюллер атына бүре кеүек менеп ултырған, автоматын тоҫҡаған, йырткыстарса аҡыра. Мин, алға эйелеп, туры айғырҙың муйынына яттым. Теҙгенде әле уңға, әле һулға тартам, ат боролош яһап юрта. Мюллер атмай. Терелэй алырға уйланымы, әллә ара алыҫыраҡмы. Ә туры айғыр елә лә елә. Тауҙар күренеп яҡынайҙы, әйтерһең, улар ҙа беҙгә табан ҡуҙғалды. Артҡа ҡарап алам. Бөгөн ярышмағанлыҡтан, Мюллерҙың аты хәллерәк ине, икенсенән, бөгөлөш яһап тормайынса, туп-тура юрта. Улар яҡынайғандан-яҡынайҙы. Беҙ ҙә тау итәгенә килеп еткәйнек инде. Бына-бына ҡара урман ҡуйынына барып инәсәкбеҙ. Ләкин шул саҡ тау-таш яңғыратып автоматтан аттылар. Туры айғыр һөрлөктө, мин уның башы аша остом. Күҙҙәремде астым. Мюллер яҡын ғына ҡалған. Пистолетты һурып алып, атып ебәрҙем. «Мә, ҡәбәхәт!» Ҡырҡылған ағас кеүек, һул ҡабырғаға шылып төштө. Өҙәңгегә эләгеп, әллә ҡайҙа тиклем һөйрәлеп барҙы фашистың үлек кәүҙәһе.

Туры айғырға ташландым. Оһ, ҡәһәрле пулялар! Туры айғыр, туры ай...

Йылы кәүҙәһенән башымды күтәрәм дә уның осло моронон ҡулдарыма алам, ирендәренән, күҙҙәренән үбәм. Һалынҡыланғандан-һалынҡыланыусы ирендәр ҡыбырлайҙар, улар нимәлер шыбырлаған шикелле, күҙҙәрҙә элекке ут һүнгән — улар дымланғандар, өңрәйә төшкәндәр. Башынан һыйпап, күҙҙәренән, ирендәренән һуңғы тапҡыр үбеп, хушлашам, тороп, ике аҙым алға атлайым. Туры айғыр, миңә табан килергә итеп, түше менән ерҙе һөрөп шылыша, алғы аяҡтарына баҫырға итте. Ләкин улар күтәрмәй, туры айғыр ыңғырашып аунай. Автомат утынан теткеләнгән артҡы аяҡтары яҡ-яҡҡа тарбайған. Сикәһе буйлап эре-эре көмөш тамсылар тәгәрләй, һул еңем менән йөҙөмдө ҡаплап, уң ҡулыма пистолетымды тотам, һуңғы һүҙҙәремде шыбырлайым:

— Хуш, туры айғыр, хуш, минең тормош юлдашым, хуш, минең ҡанатым. Ғәфү ит мине — ғүмереңде ҡотҡара алманым. Мин һиңә бөтә ғүмерем буйына, һуңғы һулышыма саҡлы бурыслы булып ҡалам. Мин ант

итәм: һине ҡол иткән фашистарҙы ер йөҙөнән һыпырып ташлағансы көрәшергә; башҡорт ерендә һинең ише ҡуш йөрәкле толпарҙар үҫтерергә; ҡулымдан ҡеүәт киткән көнгә тиклем аттар ҡарарға. Хуш, Сакул, бәхил бул!

Сәкеткескә баҫам. Тирә-яҡ яңғырап китте. Ер сайҡалды, күк түңкәрелде. Ҡан-йәш аша туры айғырҙың һынын күргәндәй булдым: ялбырап торған көмөш ял, текә яҫы маңлай уртаһында тулған ай төҫлө аҡ тәңкә, ҡамыш шикелле оҙон үткер ҡолаҡтар, дымланған ҙур күҙҙәр, дерелдәп торған йоҡа ирендәр, гәүһәр төҫлө ап-аҡ тештәр. Улар мәңгегә уйылып ҡалды минең күҙҙәремдә.

Ҡайҙарҙа ғына булманым унан һуң да, ниҙәр генә күрмәнем. Альп тауҙарының бәрхәт йәшеллеге, француз партизандарының зәңгәр күҙҙәре, диңгеҙҙән күтәрелеүсе алһыу ҡояш. Ләкин бер ваҡытта ла туры айғырҙың һомғол һыны күҙ алдымдан киткәне булманы. Тыуған ауылыма ҡайтып, уға оҡшаған күпме толпар үҫтерҙем. Берәһенән-берәһе матурҙар. Килмәгән ерҙәре юҡ. Улар һәр берәһе ниmәһе менәндер алыҫ Италия тупрағында ятып ҡалған туры айғырҙы хәтерләтә. Ҡәҙерле миңә донъялағы һәр бер ат.

Ҡыңғыр-ҡыңғыр-ҡыңғыр, ҡыңғыр-ҡыңғыр-ҡыңғыр...

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Ни өсөн хикәйә «Турайғыр» тип атала?
2. Ғәйзулланың әсирлектә үткән ғазаплы, аяныс тормошон һөйләгеҙ.
3. Әҫәрҙән ниндәй һабаҡ алырға була? «Ир-егет — донъя тотҡаһы, ул һәр заманда ла шулай булған, булып ҡаласаҡ» тигән һүҙҙәр һеҙгә нимә тураһында һөйләй?
4. Фашистарға әсиргә эләккәс, Ғәйзуллаға туры айғыр осрамаһа, яҙмышы ҡайһы яҡҡа китер ине тип уйлайһығыҙ?
5. Хикәйәнең элекке исеме — «Ғүмер ике килмәй». Был һүҙҙәрҙе һеҙ нисек аңлайһығыҙ?
6. Хикәйәнең иң көсөргәнешле нөктәһен билдәләп ҡарағыҙ. Ул ниндәй ваҡиғаларға бәйле?
7. Ғәйзулла ат йыуындырыу тәртибен ни өсөн фашистарҙан айырмалы башҡара?
8. Һалдат антына тоғро ҡала, һеҙ уны нимәлә күрәһегеҙ?



# Ун өсөнсө бүлек

## ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫНДА...

### ГӨЛФИӘ ЮНЫСОВА

### 1948



Гөлфиә Юнысова (Иҙелбаева) Әлшәй районы Һарыш ауылында тыуа.

Студент йылдарында уҡ балалар өсөн «Миңә бары өс кенә» (1969) һәм «Зәңгәр тубым» (1971) тигән ике шиғри йыйынтығы донъя күрә. Ул – балалар һәм өлкәндәр өсөн тәғәйенләнгән 40-ҡа яҡын шиғыр һәм проза китаптары авторы. Гөлфиә Юнысованың шиғырҙары Рәсәйҙең, яҡын һәм алыҫ сит ил халыҡтарының 25 теленә тәржемә ителде.

Гөлфиә Юнысованың бик күп шиғырҙарына көйҙәр яҙылып, популяр йырҙар булып китте. Шағирә ижтимағи-сәйәси, ғаилә-тәрбиә хаҡында яҙған публицистик мәҡәләләре менән йыш ҡына радио-телевидение аша һәм газета-журнал биттәрендә сығыш яһай.

Гөлфиә Юнысова «Почет Билдәһе» ордены кавалеры, Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт һәм М. Аҡмулла исемендәге әҙәби премия лауреаты.

## ТАЛЫ БӨГӨЛӨП ТОРА

Талы бөгөлөп тора,
Дим өҫтө көлөп тора,
Ҡайһы талдарға ҡунырға
Һандуғас белеп тора.

Эйелгән булдың, талҡай,
Бөгөлгән булдың, талҡай.
Ана, балта тотҡан берәү
Һинең яғыңа атлай.

Эйелгәнде сапмайҙар,
Һиңә балта саптылар.
Дим һыуҙары ярҙар тулып,
Күҙ йәш булып аҡтылар.

Ҡыҙғаныуҙан үләндәр
Йығылған талды ҡаплай.
Дим өҫтөндә өйрөлә
Һандуғас урын тапмай.

...Яҙ етте. Ер терелде.
Йәм-йәшелгә күмелде.
Балта сабылған олондан
Йәш бөрөләр күренде.

Зифа булып, ҙур булып,
Тиҙҙән үҫеп етер ул.
Бар тирә-яҡтан, ышанып,
Гел изгелек көтөр ул.

Һығылырһың да, талҡай,
Бөгөлөрһөң дә, талҡай,
Бөҙрәләнеп япраҡтарға
Күмелерһең дә, талҡай.

Һандуғасҡа әйтермен,
Димгә шатлыҡ илтермен.
Тик тал ғүмерле булыр, тип
Нисек вәғәҙә итермен?!

*Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА*

## УМЫРЗАЯ

Тауҙар, урмандар араһындағы бер ауылда тол ҡатын йәшәгән. Уның Таңһылыу исемле берҙән-бер ҡыҙы булған. Күҙ ҡараһындай балаһын һәйбәт ҡараған ҡатын. Кеше араһында кәм булмаҫлыҡ итеп кейендерер өсөн көнө-төнө эшләгән. Иген иккән. Төндәрен йөндән балаҫ һуҡҡан. Дебеттән шәлдәр бәйләгән. Таңһылыуҙы ла әҙләп эшкә өйрәткән.

Ҡыҙ бик ҡырыҫ, тик үҙенең генә һүҙен һүҙ итер булған. Шуға әхирәттәре лә юҡ икән. Төҫкә шәмсыраҡтай бик сибәр, ти, шул. Ул урамдан ғорур атлап үткәндә, ирҙәргә аҡҡош йөҙгән кеүек күренгән. Ауылдың бөтә ир-егеттәре, юҡ эштәрен бар итеп, һылыу йәшәгән өй эргәһенән урағандар. Береһенә генә лә күтәрелеп ҡарамаған Таңһылыу — тиңһенмәгән ул ауыл егеттәрен.

Ҡыҙҙар, егеттәр кистәрен тау ҡыҙырымында уйнағандар, таң беленгәнсе йырлап-бейегәндәр. Унда ла йөрөмәгән ғорур ҡыҙ.

— Балаҡайым, көнө-төнө сигеү сигәһең, башалтайҙар бәйләйһең. Бер сығып әйләнһәң ни була. Йәш-елкенсәк менән күңел асып ҡайтыр инең бит, — тип әйтә, ти, әсәһе.

— Кәрәктәре бар ине! Үҙ-үҙемде кәмһетеп, тиреҫ еҫкәп, туҙан туҙҙырып йөрөй торғаным юҡ шулар менән! — тигән тәкәбберләнеп.

Ҡыҙының бәйләгән, сиккән әйберҙәрен ҡарап, әсәһе баш сайҡап ҡуя: гел генә ынйы, ҡар бөртөктәре менән ирнәүләр[1] булған ул ҡул эштәрен.

Ун етеһе лә тулған Таңһылыуҙың. Яусылар күп көттөрмәгән. Иң тәүҙә кәләшлеккә әйттерергә күрше егет кергән. Ҡыҙ егеткә әйләнеп тә ҡарамаған.

— Балаҡайым, етеш торалар, ата-инәһе яҡшы кешеләр. Егет тырыш, эшсән... Киреләнмә, ҡыҙым. Миңә лә яҡын. Ара-тирә инеп сыҡһаң да, күңелем булыр, — тип өгөт-нәсихәт биреп ҡараған әсәһе.

---

[1] *Ирнәү* — биҙәк.

— Ҡаф тауы артына китеп, ошо ауылды ғүмере күрмәһәм дә үкенмәйем! Тау-тау ынйыы өйһә лә, йылҡылдап торған ебәктән күлдәк, ынйы-мәрйен, аҫыл алҡалар бүләк итһә лә, сыҡмайым уға!

Әсәһенә, уфтаныпп, күршеләрҙән ғәфү үтенеүҙән башҡа ни ҡалһын инде. Тирә-яҡ ауылдарҙан да, ҡыҙҙың ғәжәп матурлығы тураһында күп ишетеп, дәртләнгән егеттәрҙән яусылар килә. Уларҙы ла тиңһенмәгән Таңһылыу.

— Ғүмер баҡый ерҙә соҡонаһым юҡ! Ынйылы ситек, аҡҡош мамығынан ҡалпаҡ, яҫтыҡ-түшәктәр бүләк итһәләр ҙә, сыҡмаясаҡмын! — тип ҡырт киҫкән ул.

— Кемгә генә барырһың икән инде, балаҡайым? — тип илаған әсәһе. — Ерҙә соҡонғандың тамағы туҡ була ул, ҡыҙым. Ниндәй эшсән егеттәрҙе ҡәҙерһеҙ кире ҡаҡтың бит.

— Үҙемә күрә табылыр, — тип кенә ҡуйған сибәрҙәрҙең-сибәре.

Күп ваҡыт та үтмәгән, көмөш ҡыңғырауҙар яңғыратып, ҡапҡа төбөнә өс аҡбуҙат туҡтаған. Ҡунаҡты ҡаршыларға әсәһенән алда Таңһылыу үҙе атлығып ҡапҡа янына сыҡҡан.

— Һине алырға килдем, һылыуым! Ҡаф тауы артына мәңгелек ынйылар иленә елербеҙ...

— Мин әҙер! — тип ҡыҙ егет килтергән ынйылы итектәр, сөм ҡара күҙҙәренә килешеп торған ынйылы күлдәк, ап-аҡ мәрйендәр, алҡалар, беләҙектәр кейеп алған да, мамыҡ юрғандарға уранып, санаға менеп тә ултырған.

— Аһ, балаҡайым, күҙ нурым! Китәһең дәме ни?.. Һағындырыр бит әле тыуған яҡ! Күрше-күләндәрҙе лә күрмәй, фатиха ла алмай...

— Кәрәктәре бар ине! — тигән тәкәббер ҡыҙ.

Сапсынып торған аттар ҡуҙғалып та киткән. Әсәһе ҡапҡанан сығып барған санаға дебет шәл генә ырғытып өлгөргән.

Иҫ китмәле булған, ти, Ҡаф тауы артындағы ил. Бөтә нәмә ап-аҡ ынйы менән ҡапланған: ынйы тауҙар, ынйылы ағастар, ынйылы үлән...

— Аллаға шөкөр, бысраҡ ерҙән, тиреҫ еҫенән ҡотолдом, — тип шатланған Таңһылыу.

Көн артынан көн, йыл артынан йыл үткән... Ошо ап-аҡ ынйы ҡарҙар илендә күңеле өшөй башлаған сибәрҙең. Әсәһенең йылы ҡулдары бәйләгән дебет шәл менән генә әҙерәк имшенгән. Һағынған шул Тыуған илен, ауылын, әсәһен, йәшел үләндәрҙе, тиңһеҙ ҡырҙарҙы, һомғол талдарҙы, зәңгәр йылғаларҙы.

— Уф-ф, бер генә ҡайтып ер, тиреҫ еҫен еҫкәһәң ине, — тип илаулаған ул иренә.

— Күңелең нимә теләй — бөтәһе лә бар. Тағы ни етмәй? — тип төҫһөҙ күк күҙҙәре менән бик һалҡын ҡараған һөйгәне.

— Бер айға ғына ҡайтарһаң ине мине, — тип ялбарған матурҡай.

— Юҡ, булмай! Бер ай күп. Тик шулай ҙа мин һине бер аҙға ебәрә алам. Ап-аҡ ҡарҙар өбәтеүләнгәс[1], ҡайтып әйләнерһең. Ҡар иреп бөтөп, йылыға тарта башлау менән мотлаҡ кире килерһең!

Яҙ ҡайтҡан ауылына Таңһылыу. Ҡасандыр ул йәшәгән йорт юҡ икән. Әсәһе лә күптән донъя ҡуйған... Уны күргән-белгән ауылдаштары ла ҡалмаған...

Таңһылыуҙың күңеле бик кителгән. Ул тау битләүенә менеп, үкһеп-үкһеп илаған. Үҙен йыуатырға килгән кешеләргә тормошон бәйнә-бәйнә һөйләп биргән.

— Ғүмеркәйҙәрең зая ғына үтә икән, балам, сит ерҙәрҙә! — тип бер ҡарт ҡына әбей, йәлләп, башынан һыйпауы булған, сәскәгә әйләнгән дә ҡуйған йәш, сибәр ҡатын. Умырзая тип атағандар уны. Иңдәренә әсәһе бүләк иткән дебет шәлен һалып, һәр яҙ һайын бик әҙгә генә ҡайта ул тыуған яҡтарындағы тау битләүҙәренә.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Хикәйәлә нимә тураһында һүҙ бара?
2. Таңһылыуҙың иҫ киткес матур ҡыҙ булып үҫеүе хаҡында һөйләгеҙ.
3. Таңһылыуҙың үҙенең тыуған яғы, уның кешеләре хаҡында әйткән һүҙҙәре менән килешәһегеҙме? Килешмәһәгеҙ, үҙ фекерегеҙҙе дәлилләгеҙ.
4. Таңһылыуҙың яҙмышы беҙгә нимә хаҡында һөйләй?

---

[1] *Өбәтеү* — әҙ генә иретеп йомшартыу.

5. Умырзая ни өсөн бик ҡыҫҡа ғүмерле сәскә булып сыҡҡан, шуны аңлатығыҙ.
6. *Дебет шәл, шәмсыраҡтай, башалтайҙар, ирнәүләр, өбәтеүләнгәс* һүҙҙәренең мәғәнәһен аңлатығыҙ, ошо һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр төҙөгөҙ.

*Абдулхаҡ* ***ИГЕБАЕВ***

## СЫЙЫРСЫҒЫМ

Һаумы, һаумы, ҡошсоғом,
Йырсы дуҫ, сыйырсығым!
Йә, һөйлә, нисек ҡайттың?
Талманымы ҡанатың?

Һин йонсорһоң, тип, юлда,
Борсолоп бөттөм бында.
Юҡһынғанға, аҫыл ҡош,
Һине хәтерләнем йыш!
Әле ҡыш көнө, хатта
Тамсы таммаған саҡта,
Ҡулға алып таҡта, сөй,
Һиңә яһап ҡуйҙым өй!
Рәхим итеп кер йортҡа,
Хәүефләнмә, ҡурҡма!
Рәхәт йәшә оянда,
Иркен матур донъяңда!
Тыңланы ла ҡош мине,
Кинәнеп былай тине:
— Күҙ киткәйнем көньяҡҡа,
Хәҙер ҡайттым был яҡҡа!
Һағындырҙы Инйәрем,
Тыуып үҫкән ерҙәрем!

Рәхмәт, дуҫҡайым, һиңә,
Хәстәрлегең ҙур миңә!
Эшеңде гел ҙурлармын,
Һәр саҡ маҡтап йырлармын!
Һөйләрмен бар ҡоштарға —
Дуҫтарға, таныштарға!

Көлләһә лә белһендәр,
Һине уңған тиһендәр!
Хәҙер ҡанат елпетеп,
Йөрәккәйен елкетеп,
Көн дә һайрай ҡошсоғом,
Ҡәҙерле сыйырсығым!
Маҡтай ул Тыуған илде,
Болондо, нәфис гөлдө,
Сылтырап аҡҡан һыуҙарҙы!
Шундай саф, нәфис моңо,
Тыңлап туймайһың уны!

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Сыйырсыҡ йылы яҡтарҙан ҡайһы айҙа ҡайта?
2. Уларға ояларҙы ҡасан әҙерләп ҡуйырға кәрәк?

## РӘШИТ НАЗАРОВ

## 1944—2007



Рәшит Назаровтың шиғырҙары, нәҫерҙәре, хикәйәләре республика матбуғатында 1962 йылдан башлап баҫыла килде. 1964 йылда уның «Таңды ҡаршылау», 1970 йылда «Ҡояш юлы буйлап», ә 1991 йылда «Йөрәгемде һеҙгә илтәм», 1994 йылда «Йәшен» тигән шиғыр китаптары донъя күрҙе... Ул Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.

## ОФОҠТАҒЫ ҠОЯШ

Йәйге ҡояш яңы ғына әле
Ҡалҡып килә ине ул саҡта...
Беҙ йүгерҙек күмәк, беҙ йүгерҙек
Тау башында ятҡан ҡояшҡа.

Кем иң элек уға барып етә,
Кем — нур-ялын һыйпай иң элек!
Бер-беребеҙҙе уҙып, сыр-сыу килеп,
Беҙ ҡояшҡа табан йүгерҙек.
Эй йүгерҙек!.. Йылға, тауҙар аша —
Малайҙарҙың сыбар төркөмө...
Бына-быwhat етер кеүек инек,
Тик ул... күккә ырғып өлгөрҙө!
Баҫып торҙоҡ оҙаҡ, ҡолас йәйеп,
Һоҡланышып, тирләп, әлһерәп...
Кемдер шунда: «Тотор инек, — тине, —
Эй йүгерһәк, — тине, — шәберәк...»
Йәйге ҡояш яңы ғына әле
Ҡалҡып килә ине ул саҡта.
...Ялан аяҡ малай, эй, ул малай,
Ул — йыраҡта хәҙер, йыраҡта...
Тик, таң атты иһә, сығам тышҡа,
Тауҙар алда, тауҙар — ҡырласлы.
Бала сағым әле һаман шунда
Эҙләп йөрөй һымаҡ ҡояшты.
Һәм ҡапыл ул серле таң эсенән,
Ал шаршауҙы һирпеп ебәреп,
Йүгереп сығыр төҫлө, көлә-көлә,
Ялан аяҡ — ҡояш күтәреп!

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Шиғырҙың тәүге ике юлына иғтибар итегеҙ. Улар ни өсөн ике тапҡыр ҡабатлана? Был юлдарға ниндәй мәғәнә һалынған?
2. Малайҙарҙың ҡояш артынан ҡыуыуын һүрәтләп, шағир был күренешкә лә кинәйә һалған. Ниндәй тип уйлайһығыҙ?
3. Ошо яуаптан сығып, аҙаҡҡы юлдарҙың ни аңлатҡанын әйтеп бирегеҙ.
4. Шиғырҙан тағы ла кинәйәле һүҙҙәр эҙләгеҙ.

*Сәлмән ЯҠУПОВ*

## ҠАРАБАШ ТУРҒАЙ

Бәләкәй санамды һөйрәп, тубыҡтан көрт ярып, һарай яғына атлай ғына башлағайным, арҡама нимәлер «тып» итеп килеп тейҙе. Хихылдап көлгән тауышты ишетеп, күршеләр яғына күҙ һалһам — ҡойма аръяғында ауыҙын йырып Абдулла баҫып тора.

— Йә, ҡурҡыттыммы, әй, үҙеңде? Тейһә лә ныҡ ҡына тейә шул үҙе! — Уның ҡулында ағастан эшләнгән мылтыҡ хасил булды. Юҡ, ябай ғына уйынсыҡ мылтыҡҡа оҡшамаған ул. Көбәгенең осона ҡаҙаҡтар ҡағып, резина тағылып ҡуйылған. Рогаткалы мылтыҡ. — Туптура сәпкә ата! — ти ул, маҡтанып. — Үҙем эшләнем, әй! — Ул кеҫәһенән йыуан алюмин тоҙаҡтан бөгөп эшләнгән «пуля»һын алып мылтығын ҡорҙо ла, яҡынтирәлә сәп эҙләп күҙ йүгертеп сыҡҡас, һарай башындағы һайғауҙа ултырған ҡарабаш турғайға төҙәп атып ебәрҙе. Пуляһы тейеүен теймәне турғайға, һайғауҙың үҙенә «шаҡ» итеп ҡалды. — Эх, дөрөҫ төҙәмәнем! — тип әсенеп ҡуйҙы ул, ҡурҡышынан ҡото алынып ҡапыл һауаға күтәрелеп осоп китеүсе ҡарабаш турғай артынан ҡарап. — Мә, атып ҡарайһыңмы?

Санамды ташлап, көрт ярып, уның янына атланым. Ул миңә кеҫәһенән «пуля» сығарып бирҙе. Нисек ҡорорға икәнлекте өйрәткәс, алма ағасына күрһәтеп:

— Ана, күрәһеңме, өс ҡарабаш ултыра. Хәҙер шуларҙың береһе һинеке буласаҡ, — тине. Мин, уйлап та тормай, шуларҙың береһенә атып ебәрҙем. Ләкин теймәне. Турғайҙар пырхылдашып осоп китте.

— Ә-әй, бешмәгән!.. — Абдулла асыулы ҡарап ҡуйҙы. — Берәү генә булһа, ни әйтерһең, ә улар бит — өсәү!.. — Ул тағы ла пуля тотторҙо.

— Ҡара уны, быныһын да елгә осора күрмә! Шуның өсөн яфаланып эшләп ултырҙыммы ни уларҙы!

Мин тағы ла мылтыҡты ҡороп алдым. Ҡороп алдым да, тирә-яҡта ҡарабаштарҙы эҙләп күҙ һирпеп сыҡтым. Үкенескә ҡаршы, бер генә турғай ҙа күренмәй. Алан-йолан ҡаранып, Абдулла ла миңә сәп эҙләште. Тап ошо ваҡытта әсәйем ихатаға ҡош-корттар өсөн ҡоштабаҡ

менән ем сығарып ултыртты. Бер минут эсендә ҡош-ҡорттар менән әле генә беҙ юғалтып торған ҡарабаш турғайҙар ҙа төркөм-төркөм булып осоп килеп етте. Әсәйемдең өйгә инеп китеүе булды, ситтәрәк йөрөгән турғайҙарға алмаш-тилмәш тоҫҡап ата ла башланыҡ. Емгә алданып беҙгә иғтибар ҙа итмәгән турғайҙар пуля килеп тейеү менән ырғып, сырылдашып, ситкә осоп китәләр...

— Берәү булды!

— Ә минеке — өсәү!

— Хәҙер минеке лә өсәү буласаҡ!..

Эргәбеҙгә Самат ағайымдың килеп баҫыуына ла иғтибар итмәгәнбеҙ. Ул Абдулланың ҡулындағы мылтыҡты алды ла:

— Шәп эшләнгән!.. М-да... Кем яһаны инде быны? — тип һораны.

— Мин! — тине шунда уҡ Абдулла, маҡтанып. — Үҙем эшләнем, әй!

— Йәл, бик йәл, егеттәр! Шундай матур, шәп мылтыҡ, ә... — Ул ҡойма ярығына шаҡарып, көбәгеn һындырып алды, — һындырып ташларға тура килә!

Маҡтаулы эш түгел был, егеттәр. Түгел! Мәктәптә һеҙҙе нимәгә өйрәтәләр?.. Мин һеҙҙең урында булһам, былай зыян килтереп йөрөгәнсе, уларға матур итеп тағараҡ яһап ҡуйыр инем. Ә һеҙ... — Беҙ ғәйепле баштарыбыҙҙы эйеп, унан күҙҙәребеҙҙе йәшерергә тырышабыҙ. — Улар өсөн, егеттәр, хәҙер иң ауыр осор. Бына үҙегеҙ улар хәлендә булһағыҙ, нишләр инегеҙ? Аслыҡ, һыуыҡ... Өҫтәүенә, ике йүләр рогатканан ата! Ә бит ул турғайҙар ҡара яҙҙан ҡара көҙгәсә кешеләр өсөн тик файҙалы эш башҡарып килә... — Абдулла әлеге осрашыуҙың күңелһеҙ бөтөүен һиҙеп, һыпыртмаҡсы булғайны ла, Самат ағайым уның еңенән эләктереп алды. — Ҡайҙа ҡасаһың? Эш боҙорға беләһегеҙ, ә яуап бирергә булғанда... М-да... Яҡшы түгел! Бына хәҙер мин һеҙгә бер ғибрәтле ваҡиға һөйләп бирәм. Үҙем тураһында... — тине ул етди генә. Беҙҙең ҡараштар, үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, уға төбәлде. — Бигерәк тә күңелһеҙ хәл... Әле һаман да күңелде һыҙлатып тора. Ул саҡта миңә лә һеҙҙең шикелле ун бер, ун ике йәштәр самаһы ине... — Ул ҡойма ситенә ултырып, ҡош-ҡорттар араһында һаман

да әрһеҙләшеп ем сүпләүсе турғайҙарға бер аҙ ҡарап торҙо. Ә беҙ түҙемһеҙләнеп уның һөйләүен көттөк. — Ләкин мин һеҙҙең шикелле юҡтан ҡыҙыҡ өсөн генә бына былай мылтыҡтар яһап, рогаткалар эшләп уларға атып йөрөмәнем. Ә киреһенсә... Бер ваҡыт, ошондай уҡ ҡаты бурандан һуң, тышта уйнарға тип урамға сыҡтым. Ул саҡта беҙҙең солан бындай заманса түгел, ә ҡәҙимге ҡабыҡтан ине. Әсәй буй етмәҫлек мөйөшкә, бер иҫке яулыҡҡа төрөп, туңмай киҫәге аҫып ҡуйғайны. Ошо ҡарабаш турғайҙар ярыҡ-йороҡтарҙан солан эсенә инеп, шул туңмайҙы суҡыштыра ине... Быға ҡәҙәр ҙә күргеләштерә торғайным... Шул көндө, минең ҡапыл ишек асып килеп сығыуымдан ҡоттары алынған ҡарабаш турғайҙар, нисек етте, шулай мөйөштән мөйөшкә бәрелә-һуғыла, сыр-сыу килешә башланы. Йәһәтерәк солан ишеген асырға ашыҡтым. Улар тышҡа атылды. Ләкин береһе, ярыҡтан ҡасып сығырға тырышҡаны, ҡабыҡ ярығына бер аяғын ҡыҫтырған да, йөрәк өҙгөс тауыш сығарып, көслө ҡанаттары менән ҡабыҡты ҡаҡҡылап тыпырсына башланы. Тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Нисегерәк кенә ярҙам итергә лә белмәй, юғалып ҡалдым! Эх!.. Ә ул һаман тыпырсына, һаман да сырылдай, нисек кенә булһа ла осоп китергә тырыша... Аҙаҡ килеп, тышҡа атылып сыҡтым да, ишек алдында ултырған бәләкәй санамды күтәреп, стенаға һөйәп ҡуйҙым. Үрмәләй башланым. Мин үрмәләгән һайын сана ҡарға бата, өҫтәүенә, аяғым тайып бара... Ниһайәт, сананың башына баҫтым, үрелеп ҡарайым — буй етеңкерәмәй. Ә ҡарабаш уның һайын көслөрәк тыпырсына, уның һайын көслөрәк сырылдай... Эх, йүләр, ҡурҡышынан аяҡһыҙ ғына тороп ҡала бит был!.. Юҡ, ярҙам итергә теләгәнде аңламай шул ҡошсоҡ!.. Ныҡыша торғас, мин уның тыпырсынып торған кескәй кәүҙәһен ҡулыма эләктереп алдым. Алыуын алдым да, ә ярыҡтан аяғын һис кенә лә ысҡындыра алмайым шул. Әллә ни күп тә кәрәкмәй... Саҡ-саҡ ҡына... Әгәр санам ҡарға батмаған булһа... Бер аяғым менән икенсе аяғымдағы быйма башына баҫып үрелеп ҡарарға булдым. Хәҙер, хәҙер... Саҡ ҡына түҙ!.. Ләкин... инде ынтылыуым, үрелеүем булды, ҡапыл быймам тайып китте лә, ҡулыма ҡарабашты эләктергән килеш остом да төштөм...

Йөрәк «жы-ыу» итеп ҡалды!.. Ах, нимә эшләнем, нимә эшләнем мин!.. Ҡулымдағы йәнһеҙ ҡарабашҡа ҡарап, ҡысҡырып илап ебәрҙем. Оҙаҡ иланым мин, оҙаҡ. Бисара турғайҙы йәлләүҙән генә түгел, ә үҙемдең ғәмһеҙлегемә, йөрәкһеҙлегемә лә әсенеп иланым... Бына шулай, егеттәр! Бала саҡ күптән артта ҡалды, ләкин ана шул ваҡиға турғайҙарҙы күргән һайын йөрәк әрнетеп һәр саҡ хәтергә төшә. Һис кенә лә күҙ алдымдан китмәй...

Ағайым төшкө аштан һуң эшенә барырға тип сыҡҡас, болдор алдында аптырап туҡтап ҡалды. Ихатала ҡатырға ҡағыҙҙан эшләнгән тағараҡтарҙа ҡарабаш турғайҙар күңелле сырҡылдашып байрам итәләр ине. Бер аҙ ҡарап торҙо ла, беҙҙең яҡҡа боролоп, йылмайып ҡуйҙы.

— Бына бит, нисек күңелле хәҙер уларға!.. Ә шулай ҙа шәп егеттәр һеҙ, малайҙар!

Беҙгә лә күңелле булып китте.



# Ун дүртенсе бүлек

## ТУҒАНДАШ ХАЛЫҠТАР ӘҘӘБИӘТЕ

*Ғабдулла* ***ТУҠАЙ***

### ШҮРӘЛЕ

I

Тап Ҡазан артында барҙыр бер ауыл — «Ҡырлай», тиҙәр,
Йырлағанда, көй өсөн, «тауыҡтары йырлай», тиҙәр.
Гәрсә унда тыумаһам да, мин бер аҙ торған инем;
Ерҙе аҙ-маҙ тырмалап, сәскән инем, урған инем.
Ул ауылдың, һис онотмайым, һәр яғы урман ине;
Ул болон, йәшел үләндәр хәтфәнән юрған ине.
Ҙурмы, тиһәң, ҙур түгелдер, был ауыл бик кескенә;
Халҡының эскән һыуы бик кескенә, инеш кенә.
Унда бик һалҡын һәм бик эҫе түгел, урта һауа;
Ел дә ваҡытында иҫеп, ямғыр ҙа ваҡытында яуа.
Урманында ҡып-ҡыҙыл ҡурай еләк тә ер еләк;
Күҙ асып йомғансы, һис шикһеҙ, йыйырһың бер силәк.
Бик хозур![1] Рәт-рәт тора, ғәскәр кеүек, шыршы, нарат;
Төптәрендә ятҡаным бар, хәл йыйып, күккә ҡарап.
Йүкә, ҡайындар төбөндә ҡуҙғалаҡтар, бәшмәктәр
Берлә[2] бергә үҫә аллы-гөллө гөлдәр, ғәнжәләр[3].
Аҡ, ҡыҙыл, ал, һап-һары, зәңгәр, йәшелдән сәскәләр;
Һәр тарафҡа тәмле еҫтәр сәскеләй был сәскәләр.

---

[1] *Хозур* — күңелле.
[2] *Берлә* — менән.
[3] *Ғәнжәләр* — япраҡтары асылып бөтмәгән гөл-сәскәләр.

Үпкеләйҙәр сәскәләрҙе төрлө төҫлө күбәләктәр,
Килеп киткән булып, тағы ла шунда сүгәләп.
Бер ваҡыт, сут-сут итеп, һайрай Хоҙайҙың ҡоштары,
Китә йәндәрҙе киҫеп, ярып садаи хушлары[1].
Бында бульварҙар, клуб һәм танцевальня, цирк та шул,
Бында оркестр, театрҙар ҙа шул, концерт та шул...

## II

Йәй көнөн яҙҙым бер аҙ — яҙмайым әле ҡыш, көҙҙәрен,
Алһыу йөҙлө, ҡара ҡашлы, ҡара күҙле ҡыҙҙарын.
Был ауылдың мин йыйын, майҙан һәм һабантуйҙарын
Яҙмайым, ҡурҡып, алыҫтарға китер, тип, уйҙарым!..
Туҡта, мин юлдан аҙашҡанмын икән бит, күр әле,
Әллә ник иҫтән дә сыҡҡан, һүҙ башым бит —
«Шүрәле». Аҙ ғына сабыр ит әле, ҡәриэм[2]! Хәҙер яҙам;
Уйлаһам ауылымды, аҡылымдан да мин хәҙер яҙам.

## III

Билдәле, был ҡап-ҡара урманда һәр йыртҡыс та бар,
Юҡ түгел айыу, бүре, төлкө — йыһан ҡоротҡос та бар.
Һәм дә бар бында ҡуян, ирлән, тейен, йомран, мышы,
Осрата аусы булып урманда күп йөрөгән кеше.
Бик ҡуйы булғанға, бында ен-пәрейҙәр бар, тиҙәр,
Төрлө албаҫты, убырҙар, шүрәлеләр бар, тиҙәр.
Һис ғәжәп юҡ. Булһа булыр, бик ҡалын, бик күп бит ул.
Күктә ни булмаҫ, тиһең, осһоҙ-ҡырыйһыҙ күк бит ул!

## IV

Шул турала аҙ ғына, биш-алты һүҙ һөйләйем әле,
Ғәҙәтемсә аҙ ғына йырлайым әле, көйләйем әле.
Бик матур бер айлы кистә был ауылдан бер егет
Киткән урманға утынға, яңғыҙы бер ат егеп.

---

[1] *Садаи хушлары* — матур тауыштары.
[2] *Ҡәриэм* — уҡыусым.

Тиҙ барып еткән егет, эшкә тотонған барғас уҡ,
Киҫә башлаған утынды балта менән «туҡ» та «туҡ»!
Йәйге төндөң ғәҙәтенсә, төн бер аҙ һалҡын икән;
Барса ҡош-ҡорт йоҡлаған булғанға, урман тын икән.
Шундай тын, яҡшы һауала беҙҙең утынсы иһә,
Алды-артты, уңды-һулды белмәйенсә, утын киҫә.
Балтаһы ҡулда, егет эштән бер аҙ туҡтап тора;
Туҡта, сеү! Йәмһеҙ тауышлы әллә нимә ҡысҡыра,
Һиҫкәнеп, беҙҙең егет ҡатып ҡала аяҡ үрә,
Аңламаҫтан ҡаршыһында әллә ниндәй «ят» күрә.
Нимә был? Ҡасҡынмы, енме? Йә өрәкме, нимә был?
Ҡот осорлоҡ, бик килешһеҙ, әллә ниндәй нәмә был!
Мороно кәп-кәкре бөгөлгәндер, тамам ҡармаҡ кеүек,
Төҙ түгел ҡулдар, аяҡтар ҙа, ботаҡ-тармаҡ кеүек.
Йылтырай, ялт-йолт киләләр эскә батҡан күҙҙәре;
Ҡот осор, күрһәң әгәр, төндә түгел — көндөҙҙәре.
Яп-ялanғас, нәп-нәҙек, ләкин кеше төҫлө үҙе;
Урта бармаҡ буйлығы бар маңлайында мөгөҙө.
Кәкре түгелдер, бының бармаҡтары — бик төҙ-төҙөн,
Тик килешһеҙ: һәр бере лә ярты аршындан оҙон.
Бик оҙаҡ торғас ҡарашып, күҙҙе күҙгә нығ терәп,
Өндәшә батыр утынсы: «Һиңә минән ни кәрәк?»
— Бер ҙә шикләнмә, егет, һин, мин ҡараҡ-уғры түгел;
Юл да баҫмайым, шулай ҙа мин бик үк тоғро түгел.
Ғәҙәтем: яңғыҙ кешеләрҙе ҡытыҡлап үлтерәм;
Мин әле, күргәс һине, шатлығымдан үкерәм.
Тик ҡытыҡларға яралғандыр минең бармаҡтарым,
Булғылайҙыр, көлдөрөп, әҙәм үлтергән саҡтарым.
Кил әле, һин дә бер аҙ бармаҡтарыңды һелкет, эй,
Йәш егет! Килсе, икәү уйнайыҡ бер аҙ кети-кети.
— Яҡшы, яҡшы, һүҙ ҙә юҡтыр, мин ҡарышмай уйнайым.
Тик һине шартыма күнмәҫһең, тип мин уйлайым.
— Нимә шартың, һөйлә, эй бисара әҙәмгенәм!
Тик тиҙ үк уйнайыҡсы, зинһар, нимә ҡушһаң да, күнәм.
— Һөйләйем шартымды һиңә, тыңлап тор, ана
Шунда бар бит бик оҙон һәм бик йыуан бер бүрәнә.
Мин дә көс-ярҙам бирермен, әйҙә, иптәш, ҡуҙғалайыҡ;
Шул ағасты бергә-бергә ошбу арбаға һалайыҡ.
Бүрәнәнең бер осонда бар асылған ярығы,
Шул еренән нығ ҡына һин тот, эй, урман һарығы!

Был кәңәшкә шүрәле лә күнде, килмәйенсә кире
Китте ҡушҡан ергә, атлап аҙымын эре-эре.
Ҡуйҙы илтеп ауыҙын асҡан бүрәнәгә бармағын, —
Ҡәриәм, күрҙеңме инде йәш егеттең ҡармағын?
Һуҡҡылайҙыр балта менән ҡыҫтырылған сөйгә был,
Хәйләһен аҡрын-аҡрын килтерәлер көйгә был.
Шүрәле тыҡҡан ҡулын, һелкенмәйҙер, ҡуҙғалмайҙыр;
Белмәй инсан[1] хәйләһен, һис балтаға күҙ һалмайҙыр,
Һуҡҡылай торғас, ахырҙа сөй сығып, бушап китеп,
Шүрәленең бармағы ҡалды, ҡыҫылды шап итеп.
Һиҙҙе эште шүрәле лә, ҡысҡыра ла баҡыра;
Һыҙлана һәм ярҙамына шүрәләләр саҡыра.
Хәҙер инде шүрәле беҙҙең егеткә ялына,
Тәүбә итә эштәренән, изгелеккә һалына:
— Һин бер аҙ ҡыҙған мине, ҡотҡарсы, эй, әҙәмгенәм;
Бынан ары үҙеңә, улыңа, нәҫелеңә теймәм.
Башҡаларҙан да тейҙертмәм, ул минең дуҫым, тиеп,
Уға урманда йөрөргә мин үҙем ҡуштым, тиеп.
Бик ауырта ҡулдарым, дуҫым, ебәр, зинһар, ебәр;
Шүрәлене рәнйетеүҙән нимә бар һиңә, ни бар?
Тибрәнә лә йолҡона, бисара, аҡылынан шаша,
Шул арала йәш егет өйгә китергә маташа.
Ат башынан тотҡан ул, был шүрәлене белмәй ҙә.
Ул быны фөрьяттарын[2] асла[3] ҡолаҡҡа элмәй ҙә.
— Эй егет, һис юҡ икәндер мәрхәмәт[4] хисең һинең,
Әйтсе, зинһар, мәрхәмәтһеҙ! Кем һин? Исемең кем һинең?
Иртәгә килгәнсе дуҫтар, тәндә йәнем торһа әгәр,
«Шул фәлән атлы[5] кеше ҡыҫты», — тиермен, һораһалар.
— Әйтһәм әйтәйем, һин белеп ҡал! Ысын атым
«Былтыр» минең,
Был егет абзаң булыр ул, бик белеп тор һин, энем!
Шүрәле фөрьят итәлер, ауҙан ысҡынмаҡ була;
Һәм дә, ысҡынғас, егеткә бер-бер эш ҡылмаҡ була.
Ҡысҡыра: «Ҡыҫты, харап итте яуыз «Былтыр» мине;
Аһ, үләм бит, был бәләнән кем килеп йолҡор мине?»

---

[1] *Инсан* — кеше.
[2] *Фөрьят* — аһ-зар.
[3] *Асла* — бөтөнләй.
[4] *Мәрхәмәт* — ҡыҙғаныу, яҡшылыҡ эшләү.
[5] *Ат* — исем.

Иртәгеһен шүрәлеләр был фәҡирҙе тиргәйҙәр:
«Һин йүләрһең, һин ҡоторған, һин тилергәнһең», — тиҙәр.
Әйтәләр: «Ҡысҡырма һин, тиҙ яҡшылыҡ берлән тыйыл!
Эй алйот, ҡыҫҡанға былтыр, ҡысҡыралармы быйыл!»

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. «Шүрәле» әҫәренең беренсе бүлеге буйынса Ҡырлай ауылының тәбиғәтен тасуирлап бирегеҙ.
2. Шүрәленең ҡиәфәтен автор нисек тасуирлай?
3. Шүрәле ни өсөн еңелә?
4. Егеттең ҡыйыулығы һәм зирәклегениҙә күренә?
5. Шиғырҙың беренсе бүлеген ятлағыҙ.
6. Ятланған бүлектән һүҙҙәрҙе ҡулланып, тыуған ауылығыҙ йәки ҡалағыҙ тураһында инша яҙығыҙ.

## ХАЛЫҠ ИЖАДЫ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ

Телдән ижад ителеп, быуындан быуынға телдән еткерелә килгәнлектән, халыҡ ижады әҫәрҙәрен башта кем уйлап сығарыуы билдәле булмай. Авторы билдәле булмағанға, телдән таралғанға күрә, бер үк халыҡ ижады әҫәрен төрлө кеше төрлөсә башҡара ала. Ә бына әҙәби әҫәрҙәр телдән йәки яҙма рәүештә айырым кеше тарафынан ижад ителә. Шуға ла уларҙың авторы билдәле була, текстарын башҡа кешеләр үҙгәртә алмай.

Яҙыусылар үҙҙәренең ижадтарында халыҡ әҫәрҙәрен дә файҙаланыусан. Мәжит Ғафури, Рәшит Ниғмәти, Зәйнәб Биишева, Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Ж̌әлил Кейекбаев кеүек күренекле яҙыусыларҙың байтаҡ әҫәрҙәре шулай ижад ителгән.

Халыҡ араһында фантастик зат — шүрәле тураһында әкиәттәр, легендалар күп таралған. Шуларҙан кешенең яуыз уйлы шүрәлене төп башына ултыртыуын хикәйәләүсе әҫәр киң билдәле. Ул, асылда, хәйләкәрҙәр тураһындағы тормош-көнкүреш әкиәттәре төркөмөнә ҡарай. Туғандаш татар халҡының бөйөк шағиры Ғабдулла Туҡай үҙенең «Шүрәле» тигән әҫәрендә шул әкиәтте ижади файҙаланған. Бындай әҫәрҙәрҙе ә ҙ ә б и  ә к и ә т т ә р тип йөрөтәләр.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Халыҡ ижады әҫәрҙәренән әҙәби әҫәрҙәр ни яғы менән айырыла?
2. Ниндәй экиәттәрҙе әҙәби экиәттәр тип йөрөтәләр? Үҙегеҙ уҡыған әҙәби экиәттәрҙе хәтерегеҙгә төшөрөгөҙ.

*Виталий БИАНКИ*

## ҠОТОРҒАН ТЕЙЕН

Беҙ улым менән икәүләп урманға бәшмәккә барырға сыҡтыҡ. Ат юлынан боролоп һуҡмаҡҡа ғына төшкәйнек — урман яғынан беҙгә ҡаршы Клеопарда исемле эт килә. Шундай уҫал эт — бүре кеүек.

Улым инде алда бара ине. Ул артҡа, миңә табан йүгермәксе булғайны ла, мин уға:

— Тик йүгерә генә күрмә! Нисек барһаң, шулай бара бир, — тип ҡысҡырып өлгөрҙөм.

Аҙымымды ҡыҙыулата төшөп, мин улымды ҡыуып еттем дә ҡулынан етәкләп алдым. Беҙҙең ҡулда мылтыҡ та, таяҡ та юҡ: тик буш кәрзиндәр генә тотҡанбыҙ. Эттән һаҡланырлыҡ бер нәмәбеҙ ҙә юҡ.

Ә Клеопарда килеп етергә бер нисә аҙым ғына ҡалды. Һуҡмаҡ тар ғына, ике яҡ сите лә бысраҡ. Шулай булғас, хәҙер йә беҙ уға юл бирергә тейешбеҙ, йә ул беҙгә.

Мин улымдың ҡулын ныҡ ҡыҫып, мөмкин тиклем күтәренке күңелле булырға тырышып:

— Һис бер ҡурҡыуһыҙ, икеләнеүһеҙ — алға! — тинем.

Клеопарда туҡтаны ла тауыш-тынһыҙ ғына тешен ыржайтты. Хәл иткес минут етте.

Мин тағы ла нығыраҡ баҫып алға атланым — бер аҙым баҫтым, ике, өс...

Уҫал йәнлек ҡапыл ситкә ырғыны ла, тәрән батҡаҡҡа бата-бата, беҙҙе урап үтте.

Мин улымдың ҡулын ысҡындырҙым.

— Күрҙеңме? Ә һин ҡасырға итәһең.

— Ай, ҡурҡыныс!

— Ҡасһаң, бигерәк тә ҡурҡыныс...

Шул ваҡыт беҙ урманға барып еттек һәм был мажара тураһында оноттоҡ.

Кисә көнө буйы ҡойоп ямғыр яуҙы. Бәшмәк күп ине. Беҙ тәүҙә төрлөһөн — ҡыҙылдарын да, майлыларын да, ҡайын бәшмәктәрен дә йыйҙыҡ. Урман эсенәрәк ингәс, ҡарағай, шыршы аҫтарында аҡ бәшмәктәр китте. Беҙ инде унда бүтән бәшмәктәргә ҡарамай ҙа башланыҡ.

Ҡояш урман өҫтөнә яңы ғына күтәрелеп, кисә яуған ямғырҙы киптереп өлгөрмәгәйне әле. Урман эсе тотош балҡый, төрлө төҫтәге йондоҙҙар йымылдай, һәр бер япраҡ, һәр бер үлән, һәр бер мүк ялтырай, тамсы күҙҙәре менән йылмая. Бөтә ҡыуаҡлыҡтар, шыршылар үрмәксе ауы менән сырмап алынған: үрмәксе ауҙары ваҡ ҡына һыу мәрйендәре менән биҙәлгән. Күлдәктәребеҙ, салбарҙарыбыҙ әллә ҡасан уҡ лыс һыу булып бөтһә лә, беҙ ергә тубыҡланабыҙ ҙа, еүеш мүкте ҡул менән аҡтарып, уның аҫтынан йыуан тәпәйҙәренең башы ҡарайып торған сусҡа кеүек һимеҙ бәшмәктәрҙе алабыҙ.

Шул тиклем мауыҡҡанбыҙ, урман эсенә, төпкә инеүебеҙҙе лә, бер бәләкәй генә аҡлан ситенә сығыуыбыҙҙы ла һиҙмәй ҡалдыҡ.

Улым ҡапыл:

— Туҡта! — тип бышылданы ла минең ҡулдан тотоп алды. — Ҡара әле: бер бәләкәй генә тейен!

Ысындан да, аҡландың теге яҡ ситендә нәҙек кенә ҡойроҡло бер йәш кенә тейен ҡарағайҙың бер ботағынан икенсеһенә һикергеләй.

Ул ботаҡтан ботаҡҡа һикерә-һикерә төшөп килә. Бер аҙ күҙҙән юғалып торҙо ла ҡапыл ер өҫтөнән ҡайын ағасы янына сабып барыуы күренде. Аҡландың теге яҡ ситенән былайыраҡ бер ҡыуаҡлыҡ бар, ҡыуаҡлыҡтан да былайыраҡ яңғыҙ ҡайын тора. Шул ҡайын эргәһендә, бер нәмәгә лә ышыҡланмайынса, ап-аҡ оҙон һабаҡлы, бәләкәй генә башлы бәшмәк үҫеп сыҡҡан.

— Ә, — тип бышылданым мин һәм, тейенде ҡурҡытмаҫ өсөн, улымды үҙебеҙҙең эргәлә генә үҫеп ултырған йәш шыршы ағастары ышығына тарттым. — Беләһеңме, тейендең, моғайын, анау бәшмәкте тәмләп ҡарағыһы килгәндер, ә ергә төшөргә ҡурҡыныс: берәйһе күрер ҙә эләктереп тә алыр.

— Эйе шул, — тине улым да. — Күрәһең, бик асыҡ-ҡандыр.

Арт һанын ҡыҙыҡ һикерәнләтә-һикерәнләтә, тейен бәшмәккә яҡынлашып та килә инде.

Аҡлан ситенән ҡайынға ҡәҙәр минең аҙым менән ун биш, ә тейен һикереүе менән иҫәпләгәндә — илленән дә кәм булмаҫ.

Бына тейендең ҡайын янына килеп етеүе булды, бәшмәкте бер тешләргә лә өлгөрмәне, ҡапыл үлән араһынан төлкө килеп сыҡмаһынмы! Килеп сыҡты ла тейенгә ташланды. Беҙ ах итеп ҡалдыҡ.

Ләкин тейен ҡурҡынысты ваҡытында һиҙеп ҡалды: боролдо ла бер-ике һикереүҙә ҡайынға менеп тә китте.

Ул олон буйлап һә тигәнсе юғарыға үрмәләне лә ағастың иң осона боҫоп ултырҙы. Ҡурҡыуҙан йомғаҡ кеүек йомарланды. Төлкө еҫкәнеп ҡалды.

Улым усын шапылдатып һуғырға иткәйне лә, мин уны тыйып ҡалдым.

— Сабыр ит. Быных менән генә бөтмәҫ әле. Төлкө ҡарт, тәжрибәле күренә. Был эште ул былай ғына ҡалдырмаҫ, — тип бышылданым.

Тейен унан ҡасып ағас башына ялт итеп менеп киткәс, төлкө бер аҙ туҡтап торҙо ла шунан, бер ҙә иҫе китмәгәнгә һалышып, боролдо ла ҡайын янынан ситкә — урман эсенә табан йүнәлде. Әйтерһең дә, тейен уны бер ҡасан да ҡыҙыҡтырмаған, әйтерһең дә, ул тейенде торорға ташланмаған, тик былай ғына үтеп барған.

Ә үҙенең күҙҙәре йылтырап тора, ауыҙы ҡолағына еткән. Шунда инде миңә, ул берәй хәйлә ҡоралыр, тигән уй килде.

Ҡараһаҡ, ысынлап та, төлкө урман ситенә барып етмәне, ә ҡайын менән урман сите араһындағы ҡыуаҡ-ҡа инде лә китте. Күҙҙән дә юғалды.

— Ҡара, ниндәй хәйләкәр! — тип бышылдай улым. — Боҫоп ҡына һағалап ултырырға керҙе. Тейен хәҙер урманына нисек кенә ҡайта алыр икән? Уға ошо ҡыуаҡ эргәһенән үтеп китергә кәрәк бит.

— Бына эш тә шунда шул, — тип бышылданым. — Төлкө тешенән ҡотола алмаҫ инде ул... Тик... Сеү!.. Ҡара, ул ниҙер уйлап тапты.

Ҡайын ботағындағы япраҡтар араһында саҡ-саҡ күренеп торған ерән йомғаҡ ҡыбырланы. Муйынын һуҙып, башын тирә-яҡҡа борғолап, оҙаҡ ҡаранды. Күрәһең, ағас башынан ҡарағанда, төлкө күренмәйҙер: ботаҡтан ботаҡҡа һикереп, ул әкрен генә, һаҡланып ҡына төшә башланы. Һикерә лә тирә-яғына ҡаранып ала. Һикерә лә, муйынын һуҙып, түбәнгә ҡарай.

— Их аҡылһыҙ, аҡылһыҙ! — тип бышылдай улым. — Хәҙер ергә һикереп төшә бит инде. Әйҙә, төлкөнө тиҙ генә ҡыуып ебәрә һалайыҡ.

— Туҡта, туҡта! — тинем мин. — Ҡарап ҡарайыҡ әле, ни менән бөтөр икән.

Төлкөнөң тейен аулауын мин үҙ күҙем менән тәүләп күрҙем.

Әкрен генә төшөп килә торғас, тейен ҡайындың яртыһына уҡ килеп етте лә шундағы бер ботаҡта ҡатып ҡалды. Кинәт шундай яман итеп ҡалтырана, ҡысҡыра башланы.

— Күрҙе, күрҙе! — ти улым.

Шикләнерлек урын юҡ: төлкөнөң торба кеүек ҡыҙғылт һары ҡойроғононоң осо ҡыуаҡ араһынан килеп сыҡҡан да, тейен уны күреп ҡалған.

«Их, төлкө, төлкө! — тип уйланым мин. — Иртәрәк шапырындың шул! Бына ул тейен инде ысҡына алмаç, тип уйлап, ҡойроғоңдо болғаның да үҙеңдең һағалап торғанлығыңды белдерҙең».

Төлкөнөң ҡойроҡ осо шунда уҡ тағы ҡыуаҡ эсенә кереп юғалды.

Ләкин тейен бер ҙә генә тыныслана алманы. Ул яуыз төлкөнө үҙенең тейен телендәге әллә ниндәй һүҙҙәр менән шундай асы, нык ҡысҡырып әрләне, асыуланыуынан үҙе тотош ҡалтыранды.

Төлкө ҡойроғо юғалғас, тейен тынып ҡалды. Шунан ҡапыл, нимәнәндер бик нык ҡурҡып, ағас олоно буйлап винт кеүек борғолана-борғолана юғарыға менеп китте. Төлкө үҙе ултырған ҡыуаҡ артынан хәҙер һикерер ҙә, ағастың ярты бейеклегенә етеп, тотоп алыр тип уйлағандыр, ахыры.

— Эш оҙаҡҡа һуҙыла, — тип бышылдайым мин улыма. — Шулай булһа ла, түҙергә кәрәк: күрәһең, төлкө

кискә ҡәҙәр һағалап ултырырға булды. Ә тейен ас бит инде. Ҡайын башында оҙаҡ түҙеп ултыра алмаҫ: унда уға тубырсыҡ та, сәтләүек тә юҡ. Барыбер төшөргә тура киләсәк.

Бер нисә минут ваҡыт үтте. Төлкө лә, тейен дә үҙҙәренең боҫоп ултырғанлыҡтарын һиҙҙермәй тора бирҙеләр.

— Әйҙә, төлкөнө ҡыуып ебәрәйек тә бәшмәк йыйырға китәйек, — тип улым еңемдән тарта башлағайны инде.

Шул ваҡыт тейен боҫҡан еренән килеп сыҡты ла ҡайындың юғарыраҡ торған нәҙек кенә ботағына һикерҙе. Был ҡайындың иң оҙон ботағы.

Тейен ошо ботаҡ осона сабып килде лә, уны ныҡ тирбәлдереп, алға һикерҙе.

— Ҡоторған тейен! — тип бышылданы улым. — Ул...

Тейен туп-тура төлкөнөң асылған ауыҙына ғына барып эләгә инде, тип әйтергә уйлағайны улым.

Дүрт тәпәйен тарбайтып, нәҙек ҡойроғон һуҙып, түбәнгә нисек осоп төшөүен күрһәгеҙ ине! Туп-тура төлкө баҫып торған ҡыуаҡҡа, төлкөнөң өҫтөнә төшөп килә.

Ҡыуаҡ өҫтөнә төшөп тә етмәне, төлкө...

Юғарыға атылып, тейенде осоп килешләй үк эләктереп алғандыр, тиһегеҙме?

Юҡ шул, төлкө ҡыуаҡ араһынан күҙенә аҡ-ҡара күренмәй атылып сыҡты ла ҡыуаҡтар, төпсөктәр аша йән-фарман сабып китте.

Улымдың ҡолаҡ төбөмдә генә ҡысҡырып көлөп ебәреүе саҡ ҡолағымды ярманы.

Ә тейен ҡыуаҡлыҡҡа төшөүҙән имгәнмәне: ботаҡтар уны йомшаҡ ҡына бәүелдерҙеләр ҙә уның еңел кәүҙәһен юғарыға һикертеп ебәрҙеләр, шунан тағы бәүелдереп, йомшаҡ итеп ергә төшөрҙөләр. Тейен һикерә-һикерә барҙы ла ҡарағай башына менеп китте. Ҡарағайҙан уҫаҡҡа, уҫаҡтан тағы ла ниндәйҙер ағасҡа һикерҙе лә, урман эсенә инеп күҙҙән юғалды.

Минең улым күҙенән йәше сыҡҡансы көлдө. Бөтә урман да уның менән бергә шарҡылдап көлгән тиерһең — япраҡтарҙа, үләндәрҙә, ҡыуаҡтарҙа ямғыр тамсылары улымдың күҙенән сыҡҡан йәш кеүек йылтырап күренә.

— Ҡоторған! — тип ҡабатлай улым көлөү һәм күҙ йәше аралаш. — Бына ҡоторған тейен... Төлкөнө нисе-

герәк ҡурҡытты! Ә төлкө унан нисегерәк шылды!.. Ҡойроғон ҡыҫып алған да! Бына ҡоторған тейен.

Көлөп арыгас, мин унан:

— Йә, мин һиңә Клеопарданан ни өсөн ҡасмаҫҡа ҡушҡанды хәҙер аңланыңмы? — тип һораным.

— Беләм инде, беләм:

Бик аңлашыла миңә:
Ҡаушап ҡалмаһа, һуғышта
Берәү өсәүҙе еңә.

Белмәйем инде, был шиғырҙы ҡайҙан алғандыр. Бик күп шиғыр белә ул, туптан атҡан кеүек, ҡапыл шартлатып һөйләй ҙә бирә.

Ул көндө беҙ урмандан бик күңелле йөрөп ҡайттыҡ.

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Һеҙҙеңсә, тейен ҡоторғанмы, юҡмы?
2. Уның был батырлығын нисек аңлатырһығыҙ?

*Ибраһим* ***ЙОСОПОВ***

## ҠАРА БҮРЕК ХАҠЫНДА ҺҮҘ

Минең халҡым юлы — ауыр, оло, —
Печенегтән тамыр ул алған...
Ҡартатайым ҡара кеше булған,
Ҡара бүркен бер ҙә һалмаған.
Атаһы бит, яуҙа ауған саҡта,
Васыят әйткән уға ошондай:
«Шыр яланғас ҡал, тик ҡара бүркең
Һалма, тигән, бер саҡ башыңдан».
Ғалимдар ҙа раҫлай: был васыятты
Ҡалдырғандар ата-бабалар.
Шул замандан ҡара бүрек кейеп
Үҫә килгән беҙҙә балалар.
Ҡара дала кеүек күҙ ҡарашы;
Күрмәгәне уның ҡалмаған...
Тик бер хан, бер дошман ҡаршыһында

Ҡара бүркен ул һис һалмаған.
Ауыр, оҙон юлдар уҙғанда, ул
Күп нәмәһен киткән ҡалдырып,
Әммә башы менән бергә генә
Мөмкин булған бүркен һалдырып.

**печенег** — боронғо төрки халҡы

**Һорауҙар һәм эштәр**

1. Ибраһим Йосопов — ҡарағалпаҡ шағиры. Ир-аттарҙың башынан бүркен һалмау йолаһы төрки һәм Кавказ халыҡтары араһында киң таралған. Был хаҡта ишеткәнегеҙ бармы? Бындай йола нимә аңлата, тип уйлайһығыҙ?
2. Шиғырҙың аҙаҡҡы дүрт юлына иғтибар итегеҙ, уның нимә аңлатҡанын төшөнөргә тырышығыҙ.

## ӘҘӘБИ ТЕРМИНДАРҘЫҢ ҠЫҪҠАСАҺҮҘЛЕГЕ

**Автобиография** — авторҙың үҙ тормошон сағылдырған яҙма. Автобиографик әҫәр — автор тормошондағы билдәле бер ваҡыттағы хәл-ваҡиғаларҙы художестволы сағылдырыу.

**Аллегория** — ситләтеп әйтеү. Әҙәби әҫәрҙә тормош күренештәрен бүтән төрлө образдар, саралар ярҙамында биреү.

**Анализ** — әҙәбиәттә әҫәрҙе тикшереү, уның идеяһын, образдар системаһын, төҙөлөшөн, һүрәтләү сараларын, эстетик йөкмәткеһен асыу.

**Аннотация** — китаптың, ҡулъяҙманың, мәҡәләнең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен биреү.

**Антитеза** — һүҙҙәрҙе, образдарҙы, картиналарҙы, күренештәрҙе төшөнсәләрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу.

**Архаизм** — иҫкергән һүҙ йәки һүҙбәйләнеш.

**Баллада** — нигеҙендә героик ваҡиғалар ятҡан романтик рухлы сюжетлы әҫәр.

**Мәҫәл** — шиғыр йәки сәсмә телмәр менән яҙылған ҡыҫҡа күләмле фәһемле әҫәр. Уның эсендә аллегория — ситләтеп әйтеү бар. Мәҫәлдәрҙә күп осраҡта хайуандар, үҫемлектәр, әйберҙәр сығыш яһай, уларҙа кешеләргә хас сифаттарҙы һәм мөнәсәбәттәрҙе танып була.

**Персонаж** — әҙәби әҫәрҙең геройы, әҙәби герой.

**Гипербола** — һүрәтләнгән предметтың сифаттарын саманан тыш арттырып күрһәтеү. Күберәк халыҡ ижадында һәм сатирик жанрҙарҙа ҡулланыла.

**Гротеск** — кешене йә тормош күренештәрен шаштырып, фантастикаға хас ҡабартып күрһәтеү.

**Диалог** — ике кешенең һөйләшеүе. Драматургияла геройҙарҙың характер-һыҙаттарын асыу өсөн айырыуса уңайлы.

**Жанр** — әҙәби төрҙәрҙең вағыраҡ бүленеше. Мәҫәлән, төрҙәр — эпик, лирик, драматик, лиро-эпик һ. б.

**Башланыш (экспозиция)** — сюжет элементтарының береһе. Әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙың иң башы, хәрәкәт итеү ерлеге.

**Идея** — художестволы әҫәрҙең төп фекере.

**Инверсия** — һөйләмдәге һүҙҙәрҙең ғәҙәттәге тәртибен алыштырып ҡуйыу. Мәҫәлән: *Мин дуҫымды күрҙем; Күрҙем мин дуҫымды.*

**Интерпретация** — әҙәби әҫәр йөкмәткеһен, мәғәнәһен асыу, аңлатыу.

**Интонация** — телмәрҙең тасуир сараларының береһе. Тауыштың билдәле бер үҙенсәлекле яңғырашта биреле-үен аңлата.

**Ирония** — тыштан ыңғай фекер әйтеп йә маҡтап, аҫтыртын көлөү.

**Композиция** — әҫәрҙең төҙөлөшө.

**Ҡанатлы һүҙ** — киң ҡулланыла торған үткер, мәғәнәле һүҙҙәр, образлы әйтемдәр.

**Йәнләндереү** — кешегә, йән эйәләренә хас һыҙаттарҙы йәнһеҙ предметтарға һәм күренештәргә күсереү.

**Һүрәтләү** — билдәле бер картинаны һүрәтләү (геройҙың портреты, пейзаж, бүлмәнең эсе һ. б.)

**Пейзаж** — художестволы әҫәрҙә тәбиғәт картинаһы.

**Повесть** — әҙәбиәттә эпик төрҙөң бер жанры. Повеста хәл-ваҡиғалар, беренсе пландағы геройҙар хикәйәгә ҡарағанда күберәк, романдағынан әҙерәк була.

**Портрет** — әҫәрҙә геройҙың тышҡы ҡиәфәтен һүрәтләү.

**Мәҡәл** — халыҡ ижадының тапҡыр фекергә, образлы һүҙгә ҡоролған ҡыҫҡа күләмле жанры.

**Поэма** — әҙәбиәттә лиро-эпик төрҙөң бер жанры, унда ғәҙәттә хәл-ваҡиғалар һәм лирик геройҙың уй-кисерештәре бергә тигеҙ үрелеп килә.

**Проза** — сәсмә телдә яҙылған әҙәби әҫәр.

**Псевдоним** — авторҙың әҙәби ҡушаматы.

**Сиселеш** — әҫәрҙә сюжеттың бер элементы, хәрәкәттәр үҫешенең тамамланышын биреүсе өлөшө.

**Хикәйә** — әҙәбиәттә эпик төрҙөң бәләкәй жанры. Уның үҙәгендә бер мөһим ваҡиға, беренсе пландағы бер герой бирелә.

**Кульминация** — сюжеттың бер өлөшө, әҫәрҙәге хәл-ваҡиғаларҙың иң юғары, көсөргәнешле мәле.

**Легенда** — халыҡ ижадының бер жанры, уйҙырма һәм ысынбарлыҡ нигеҙендә ижад ителгән әҫәр.

**Әҙәбиәт белгесе** — әҙәбиәттең, әҙәби әҫәрҙең закон-лылыҡтарын, яҙыусы ижадын өйрәнеүсе белгес.

**Әҙәбиәт ғилеме** — әҙәби әҫәр, әҙәбиәт тарихы законлылыҡтарын һәм әҙәбиәт теорияһын өйрәнеү.

**Метафора** — һүрәтләү сараһы, берәй предметтың билдәһен икенсе предмет аша биреү. Мәҫәлән: *ҡуян йөрәк*.

**Монолог** — художестволы әҫәрҙә бер кешенең телмәре.

**Неологизмдар** — тормош һәм көнкүрештәр менән бәйле рәүештә тыуған яңы һүҙҙәр.

**Ода** — ниндәй ҙә булһа тарихи ваҡиғаға йәки шәхескә арналған тантаналы шиғыр.

**Рецензия** — әҙәби тәнҡиттең бер жанры, художестволы әҫәргә баһалама. Унда автор, китаптың темаһы, төп йөкмәткеһе тураһында мәғлүмәттәр бирелә, геройҙарҙың ҡылыҡтарына, хәрәкәттәренә, телмәрҙәренә баҫым яһала.

**Ритм** — билдәле бер ваҡыт эсендә бер үк күренештәрҙең, хәрәкәттең, тауыштарҙың ҡабатланыуы. Әҙәбиәттә — шиғыр төҙөлөшөнөң бер элементы. (Мәҫәлән, шиғыр юлдарында баҫымдарҙың, баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙең тигеҙ ҡабатланыуы.)

**Риторика** — ораторлыҡ сәнғәте хаҡындағы фән.

**Рифма** — шиғыр юлдарында оҡшаш яңғырашлы һүҙҙәрҙең ҡабатланып килеүе.

**Әкиәт** — халыҡ ижады жанры. Уйҙырмаға ҡоролған сюжетлы сәсмә әҫәр. Ул дүрт төрлө була: тылсымлы, тормош-көнкүреш, батырҙар һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәр.

**Сағыштырыу** — һүрәтләү сараһы: күренеште икенсе төрлө оҡшаш сифаттары аша биреү.

**Шиғыр** — теҙмә телмәр менән яҙылған бәләкәй күләмле әҫәр, күбеһенсә авторҙың уй-хистәренә, кисерештәренә, фекерҙәренә ҡоролған.

**Строфа** — бер бөтөн фекерҙе тәшкил иткән шиғыр юлдары. Строфала ритм-рифмалар билдәле бер тәртиптә килә.

**Сюжет** — художестволы әҫәрҙең нигеҙенә һалынған ваҡиғалар, уй-кисерештәр хәрәкәте.

**Тема** — әҫәрҙә һүрәтләнгән тормош күренештәренең бирелеше, ваҡиғалар теҙмәһе.

**Трагедия** — әҙәбиәттә драма төрөнөң бер жанры; унда әҫәр геройы йәмғиәттең еңә алмаҫлыҡ законлы-

лыҡтарына ҡаршы сыға, хәл-ваҡиғалар ғәҙәттә уның үлеме менән тамамлана.

**Халыҡ ижады (фольклор)** — телдән ижад ителеп, телдән таралған, халыҡтың уй-ҡараштарын сағылдырған авторы билдәһеҙ һүҙ сәнғәте. Иң киң таралған жанрҙары: эпос, ҡобайыр, әкиәт, легенда, риүәйәт, йыр, бәйет, таҡмаҡ, йомаҡ, әйтем һ. б.

**Фантастик әҫәр** — художестволы әҙәбиәттең автор тарафынан уйлап сығарыуға, уйҙырмаға ҡоролған бер төрө.

**Цитата** — яҙмала ниндәйҙер текстың өҙөгөн йәки кемдеңдер һүҙен һүҙмә-һүҙ биреү.

**Эпиграф** — автор тарафынан әҫәр алдынан уның төп мәғәнәһен сағылдырған ҡыҫҡа текст.

**Эпитет** — предметтың образлы билдәләмәһе, художестволы аныҡлаусы. Мәҫәлән: *алтын ҡул, аҡ күңел*.

**Юмор** — әҫәрҙә һүрәтләү сараһы, күңелле һәм ыңғай ҡарашлы көлөү.



*Р. М. Нурмөхәмәтов.* Генерал Т. Т. Күсимов портреты



*Ә. Ш. Кашаев.* Көз



*Ф. А. Кащеев.* Бабай. 1965



*Х. С. Фазылов.* Халыҡ уҡытыусыһы (Мөғәллим)



*И. И. Ғаянов, Ф. А. Исмәғилев.* «Император Александр I фарманы менән башҡорттарҙы Ватан һуғышына саҡырыу» картинаһынан репродукция. 2004

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы . . . . . 3
**Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина.** Башҡортостан флагы . . . . . . . 3

**Беренсе бүлек**
**Алтын һуҡмаҡ**

**Сафуан Әлибаев.** Мәктәп юлы . . . . . . . . . . . . . . . . 5
**Ярулла Вәлиев.** Беренсе көн . . . . . . . . . . . . . . . . . 6
**Яҡуп Ҡолмой.** Мәктәп . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 9
**Ризаитдин Фәхретдин.** Мәктәп («*Нәсихәттәр» китабынан*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 10

**Икенсе бүлек**
**Уйҙың күрке – тел,**
**телдең күрке – һүҙ**

**Зәйнәб Биишева** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . 12
Башҡорт теле . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 12
**Ҡәҙим Аралбай.** Башҡорт Ҡоролтайына . . . . . . . . . 13
**Рауил Бикбаев.** Халҡыма хат (*Поэманан өҙөк*) . . . . . 14

**Өсөнсө бүлек**
**Ил ҡеүәте – икмәктә**

**Гөлфиә Юнысова.** Ер улына . . . . . . . . . . . . . . . . 17
**Динис Бүләков.** Ҡара икмәк . . . . . . . . . . . . . . . . 18
*Хикәйәләү тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . . . . 24
**Фәниә Чанышева.** Икмәк еҫе . . . . . . . . . . . . . . . . 25
**Әнүр Вахитов** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . . . . . 27
Өс бөртөк бойҙай . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 27
*Хикәйә тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 31

**Дүртенсе бүлек**

**Халыҡ һүҙен ташлама**

Урал батыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 35
*Батырҙар тураһында әкиәттәр* . . . . . . . . . . . . 50
Ҡариҙел . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 53
*Легенда тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . . . 55
*Бәйеттәр* . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 56
Герман һуғышы бәйеттәре . . . . . . . . . . . . . . 58
Дон далаларында . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 61
*Таҡмаҡтар тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . 65
Егеттәр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 66

**Бишенсе бүлек**

**Уҡытыусы! Ошо исемдән дә юғарыраҡ ниндәй исем бар?!**

**Кәтибә Кинйәбулатова** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . 70
Уҡытыусым! . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 70
**Лира Яҡшыбаева.** Уҡытыусы — ул белем биреүсе лә, икенсе әсәй ҙә... . . . . . . . . . . . . . . . 71
**Рауил Шаммас.** Уҡытыусыға . . . . . . . . . . . . . 79
**Фәрит Иҫәнғолов.** Уҡытыусы Ғүмәров . . . . . . . . . 80

**Алтынсы бүлек**

**Беҙҙең боронғо әҙәбиәтебеҙ**

Яҙма ҡомартҡыларыбыҙ . . . . . . . . . . . . . . . 90
**Ҡол Ғәли.** Йософтоң матурлығы . . . . . . . . . . . 92
Табын ҡәбиләһенең Ҡара Табын ырыуы шәжәрәһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 94
*Шәжәрә тураһында* . . . . . . . . . . . . . . . . . 96
**Сәйф Сараи.** Парсалар («Төрки Гөлстаны» әҫәренән) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 97

**Етенсе бүлек**

**Ата-олатайҙарҙың да төйәге**

**Тимер Йосопов.** Ай Уралым, Уралым . . . . . . . . . . 101
**Нәжиб Иҙелбай.** Салауат ташы . . . . . . . . . . . . 102

**Жәлил Кейекбаев.** Урал тураһында
ҡобайыр . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 112

**Һигеҙенсе бүлек**
**Батырҙарҙы яуҙа күп күрҙек,**
**Салауаттай батыр юҡ икән...**

**Салауат Юлаев.** «Ағиҙелкәй аға ҡая аралап...» . . . 115
Йырҙарҙан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 116
Юлай менән Салауат (*Эпостан өҙөк*) . . . . . . . . . . 116
**Мирас Иҙелбаев.** Төш (*«Юлай улы*
*Салауат» китабынан*) . . . . . . . . . . . . . . . . 118
*Образ тураһында төшөнсә* . . . . . . . . . . . . . . 133
**Рәми Ғарипов.** Салауат батыр . . . . . . . . . . . . 134

**Туғыҙынсы бүлек**
**Башҡортостан – Гөлбостан...**

**Шәйехзада Бабич** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . . 136
Башҡортостан . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 137
**Ялыҡ Бурнаҡ улы** (*«Һуңғы Һартай»*
*әҫәренән өҙөк*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 138
**Зәйнәб Биишева.** Башҡортостан . . . . . . . . . . . . 140
**Назар Нәжми.** Башҡортостан . . . . . . . . . . . . . 141

**Унынсы бүлек**
**Һыҙҙырт, ҡурай, башҡорт моңдарын...**

Ҡурай (*Башҡорт халыҡ йыры*) . . . . . . . . . . . . . 143
**Нур Ғәлимов.** Яуҙан ҡайтҡан ҡурай . . . . . . . . . . 144
**Ҡәҙим Аралбай.** Йомабай ҡурайы . . . . . . . . . . . 147

**Ун беренсе бүлек**
**Әсәй күңеле – тулы ҡояш**

**Абдулхаҡ Игебаев** (*белешмә*) . . . . . . . . . . . . 150
Әсәйемә . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 151
**Йыһат Солтанов.** Ҡәнәфер сәскәһе . . . . . . . . . . 151
**Рәми Ғарипов.** Әсәм ҡулдары . . . . . . . . . . . . . 158
Бер әсәнең зарыҡҡаны (*Башҡорт*
*халыҡ әкиәте*) . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 159

**Учебное пособие для 6 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения**

*(на башкирском языке)*

*Уҡыу баҫмаһы*


**Юлмөхәмәтов** Миндибай Бәхтиәр улы
**Иҙелбаев** Мирас Хәмзә улы
**Сөләймәнов** Әхмәт Мөхәмәтвәли улы
**Ҡазыева** Зөһрә Иҙелмән ҡыҙы


**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы**


Баҫырға ҡул ҡуйылды 05.10.2017. Форматы 60×90 1/16. Мәктәп гарнитураһы.
Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 15,0+0,37 форз.
Шартлы буяу отт. 61,98. Иҫәп-нәшер таб. 10,21+0,45 форз. Тиражы 3530 дана.
Заказ 1.0192.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001,Өфө, Октябрь проспекты, 2.

# Башҡортостандың ете мөғжизәһе



Ҡурай

Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын.

*(Шәйехзада Бабич)*



Башҡорт балы



«Красноусол» шифаханаһы

Ә ниндәй шифалы дымдар
Бөркөлә шишмәләрҙән!
Бер ләззәттән мәхрүм йәшәй
Был һыуҙы эсмәгәндәр.

*(Мостай Кәрим)*



Бал ҡортоноң күстәнәсе —
Ҡабып ебәр татлы бал,
Тәндәреңә сихәт булыр,
Күңелеңә булыр ял.

*(Гөлфиә Юнысова)*

**Форзацта Н. Ғәлиев, Ю. Кәримов фотолары файҙаланылды**